# Ағиҙел

**Өфө,**
**март**
**2012**

**3(1067)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Артур СУРИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Хәзиева *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 5.02. 2012. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 667 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0034.12.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г. Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2012 (3,1067)**

## БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Тәнзилә Дәүләтбирҙина.** Иң матур мәлем…
Ш и ғ ы р ҙ а р. ............................................................................5
**Нәжибә Әминева.** Теләп торам. Ш и ғ ы р ҙ а р. .....................12
**Мәрйәм Күсмәева.** Мәскәү йүкәләре. Ш и ғ ы р ҙ а р. ............18
**Фәниә Ғәбиҙуллина.** Һуңлаған осрашыу. Ш и ғ ы р ҙ а р. .......22

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Раят Вәлиев.** Күләгәле утрау. М а ж а р а л ы п о в е с т ь. ........28
**Таңһылыу Ғәйнуллина.** Ҡартымды юғалтҡас…
Х и к ә й ә. ..................................................................................126

ШИШМӘЛӘР

**Рамаҙан Ҡолмөхәмәтов.** Атай йорто. Ш и ғ ы р ҙ а р. ...........134
**Зәлифә Кашапова.** Ҡояш төҫлө балҡый күңелем.
Ш и ғ ы р ҙ а р. .........................................................................137

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Гөлфирә Гәрәева.** Бөгөнгө повесть. .....................................140

*1812 йылғы Ватан һуғышына – 200 йыл*

**Сабит Фазлыев.** Бонапарт ишеткән оран. Х и к ә й ә т. ........153

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Суфиян Поварисов.** Әҫәрҙәрендә – Хоҙай хозуры…
*(Ғәлимйән Ибраһимовтың тыуыуына 125 йыл).* ....................164
**Әхмәт Мәхмүтов.** Яуҙарҙа сыныҡҡан әҙип.
*(Нәжиб Иҙелбайҙың тыуыуына 100 йыл).* .............................170

*Башҡортостан автономияһы иғлан ителеүгә – 93 йыл*

**Әлим Зарипов.** Һағыҙаҡтар ояһы. .........................................171

БАШҠОРТ ЙЫЛЪЯҘМАҺЫ

**Марат Ғафаров.** Әйләләр тарихына бер ҡараш. ....................176

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Кәбир Аҡбаш.** Һатылалар. Ш и ғ ы р ҙ а р. ............................182
**Әхтәм Абушахманов.** Атай һабаҡтары.
Ю м о р е с к а л а р. ..............................................................185

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Т. Давлетбердина**, **Н. Аминева, М. Кусмаева,**
**Ф. Габидуллина.** *Стихи.*

ПРОЗА

**Р. Валиев**. Остров в тени. *Приключенческая повесть.*
**Т. Гайнуллина.** Когда не стало моего старика. *Рассказ.*

РОДНИКИ

**Р. Кульмухаметов, З. Кашапова.** *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Г. Гареева.** Современная повесть.

*200 лет — Отечественной войне 1812 года*

**С. Фазлыев.** Клич, услышанный Бонапартом.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**С. Поварисов.** Талант от Бога
*(125 лет со дня рождения Г. Ибрагимова).*
**А. Махмутов.** Закаленный в боях
*(100 лет со дня рождения Н. Идельбая).*

*93 года со дня провозглашения Башкирской автономии*

**А. Зарипов.** Осиное гнездо.

БАШКИРСКАЯ ЛЕТОПИСЬ

**М. Гафаров.** Родословная айлинцев.

САТИРА И ЮМОР

**Кабир Акбаш.** Продажные. *Стихи.*
**А. Абушахманов.** Назидания отца. *Юморески.*

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Тәнзилә
ДӘҮЛӘТБИРҘИНА

# ИҢ МАТУР МӘЛЕМ...

## *Урман янғанда*

*Урман яна. Сытырайған ағас*
*Крематорийҙарҙа ыңғыраша.*
*Ҡасан ғына болот ҡулын болғар*
*Азатлыҡҡа илтер ямғыр аша?*

*Урман яна. Меҫкен хайуан, ана,*
*Ары бәрелеп, бире һуғылып илай.*
*(Әллә ниңә һуғыш яландарын*
*Күрһәткәндәй, бәлә тулы был ай.)*

*Ут ҡапмаһын, тиеп ауылдарға*
*МЧС-тар ең һыҙғанып саба.*
*Ә кешеләр*
*Хоҙай Тәғәләнән*
*Маңлайына ни яҙғанын таба:*

*Кемдер ҡала көл-күмерҙә аунап,*
*Кемдәрҙелер ут-ялҡындар аяй.*
*Был тиклем дә яман афәттәрҙән*
*Ҡотҡарырмы туң-һалҡындар? Ай-һай...*

---

*Тәнзилә Дәүләтбирҙина (1964) Бөрйән районы Тимер ауылынан. БДУ-ны тамамлағас, республика матбуғат баҫмаларында, «Китап» нәшриәтендә эшләй. Әле — Башҡортостан Урман хужалығы министрлығында белгес.*

*Урман яна. Их, шул хазинаны*
*Йәшереп тә булһа һандыҡтарға!*
*Ҡырылған ҡош, йәнлек, хайуандарҙы*
*Иҫәпләрлек әле һан юҡ таһа!*

*Тереләйгә ҡурылып, төтөн һулап,*
*Һәләк була күпме йән эйәһе?*
*Муйылы йәл,*
*күҙе мөлдөрәгән,*
*Йәл йәш баландары,*
*йәл сейәһе...*

*Йәлләп кенә, бәлә һалып ҡына*
*Урмандарға килмәй һис еңеллек.*
*Беҙ тарҡаубыҙ. Беҙ ялҡаубыҙ,*
*шуға*
*Яуыз ут-дошмандан беҙ еңелдек!*

*Урмандарҙы әгәр туған күрһәк,*
*Көтмәһәк беҙ ярҙамдарҙы күктән;*
*Тәбиғәтте әсә кеүек һөйһәк,*
*Тығылыр ине өнө*
*уттың күптән!*

**2010 йыл, йәй**

## *Башҡортҡа*

*Тупраҡ — беҙҙең анабыҙ.*
*...Тупраҡ китһә — һау бул, донъя,*
*Йотолмаҡтыр самабыҙ.*

Ш.Бабич

*Башҡортостан — оло йоҙроҡ.*
*Башҡорт — эскерһеҙ бала.*
*Ҡытыҡҡа бирешеп, йоҙроҡ*
*Яҙылһа — ерһеҙ ҡала!*
*Йоҙроҡтағы ҡеүәтле көс,*
*Йоҙроҡтағы бар зиннәт,*
*Йоҙроҡтағы берҙәм милләт,*
*Йоҙроҡтағы бар һиммәт —*
*Һәммәһе лә китер һинән,*
*“Мә!” — тиеп яҙһаң ҡулың,*
*Мәңге ҡәһәрләр үҙеңде*
*Еренән яҙған улың!*

## Медицина

*Нык көсәйҙе*
*Медицина:*
*Алыштырмаҫ*
*Ағза юҡ.*
*Фәҡир генә*
*Бөйөр, бауыр*
*Алып тормаҫ —*
*Аҡса юҡ.*

*Байға бөтә*
*Нәмә лә бар:*
*Йөрәк, үпкә,*
*Күҙ йә теш.*
*Сирленең*
*Ғүмерен һаҡлай*
*Яһалма ағза,*
*Йәтеш.*

*Ҡул-аяҡҡа*
*Протезы бар.*
*Керпек, сәс бар —*
*Яһалма.*
*Ҡартлыҡ*
*Үҙенекен итә —*
*Күпме биҙән,*
*Яһанма.*

*Улай тимә!*
*Хирургия*
*Ҡарттарҙы ла*
*Йәшәртә.*
*Рәхмәт*
*Медицинабыҙға —*
*Матурайта,*
*Йәшәтә!*

*Кире йәбешә*
*Сатнаған,*
*Ҡыйрап бөткән*
*Ҡабырға.*
*...Әммә кеше*

*Алла түгел —*
*Ныҡышһа ла*
*Мәңге белмәй*
*Йүнһеҙ холоҡто*
*Төҙәтергә,*
*Юҡ намыҫты*
*Табырға.*

*Медицина*
*Тапҡанда ла*
*Ҡаты сирҙәргә*
*Дауа,*
*Нәфсе, хыянат,*
*Ялғандан*
*Батыр*
*Ирҙәр ҙә*
*Ауа.*

## Ашъяулыҡ

Рәсәй картаһына ҡарап

*Борон-борон Башҡортостан*
*Ашъяулыҡтай киң булған.*
*Хужа башҡорт рәхәтләнеп*
*Уны гиҙгән иң-буйға.*

*Ашъяулыҡ һуғылған затлы*
*Алтын-көмөшлө ептән.*
*Уның өҫтөндәге ризыҡ*
*Артығы менән еткән.*

*Мул ризыҡлы ашъяулыҡҡа*
*Кемдең күҙе ҡыҙмаһын?*
*Башҡорт шуға гел татыған*
*Илбаҫарҙар ыҙаһын.*

*Ризығын тәләфләй торғас*
*Ҡомһоҙҙарҙың яуҙары,*
*Бер мәл бөтөнләйгә ҡуйған*
*Ашъяулыҡты ауҙарып.*

*Унан, ҡотороп, кем етте*
*Уны йыртҡан, тураған.*

*Берәҫ маңҡа һөрткән,*
*Берәү*
*Сылғау итеп ураған.*

*Башҡортҡа өлөш биргәндә*
*Яман ҡулдар эш иткән.*
*...Шунан Башҡортостан ҡалған*
*Ямау булып тишеккә!*

## Интернет

*Интернет*
*Филде лә*
*Итер бет.*
*Интернет –*
*Илбаҫар*
*Интервент.*

*Тереләй*
*Һуя ул,*
*Теләһә.*
*Ауына*
*Аңһыҙҙар*
*Эләгә.*

*Интернет –*
*Иблистең*
*Ҡоралы.*
*Шуға ау,*
*Селтәрҙән*
*Торалыр.*

## Тәфтиләү

*Йөрәгемә ҡан һауҙыра,*
*Күҙҙәремде дымландыра.*
*Алдарымда үткәндәрҙең*
*Ваҡиғаһын һынландыра.*

*Тән семерҙәп китә хатта.*
*Сытырҙатып ҡыҫам теште.*
*Халыҡ кынам ғүмер баҡый*
*Күпме янды, күпме бешеү?*

*“Тәфтиләү” ҙә тигән йырҙы*
*Тыңлап буламы ни тыныс?*
*Шул дәһшәтле йыр тотторған*
*Аҫыл егеттәргә ҡылыс.*

*Шул бөйөк йыр, тетрәндереп,*
*Нәфрәт уты тоҡандырған.*
*Дошмандарын тар-мар итеп,*
*Батырҙарым үс ҡандырған.*

*Барыһы ла борон булған.*
*Барыһы ла булған элек.*
*Ниңә һаман был йыр үтә*
*Күрпегемә йәштәр элеп?*

*Сөнки:*
*Ҡыр-урманым ҡырылып ята,*
*Болон-аҡлан — кәҫ-иләүҙә;*
*Бөгөн беҙҙең аңды үртәй*
*Үрсей барған тәфтиләүҙәр!*

## Ғашиҡ булһаң

*Ҡарашынан тән сымырҙап китһен.*
*Ер бәүелһен, кәйелеп, ҡаушауҙан.*
*Уның ғына тауышын ишетеп булһын*
*Ҡолаҡ тондорорлоҡ шау-шыуҙа.*

*Ҡараңғыланһын да күҙ алдарың,*
*Бер күреүҙән йөрәк “жыу” итһен.*
*Йылы һүҙен йәнең дауа итһен,*
*Яман һүҙен уның ыу итһен.*

*Барған ерҙә уға оҡшаш һынды,*
*Йөҙҙө күреп ҡапыл тертләп кит!*
*Бүтәндәрҙе күрмәй, уның ғына*
*Күҙҙәренә бағып, текләп кит.*

*Ғашиҡ булһаң! Үлеп ғашиҡ булһаң!*
*Их, шул хәлдәр*
*Ниңә ҡайтмайҙар?*
*Тормош ҡамсылары арҡа яра,*
*Хискә сумып китһәң,*
*һайт-һайлап.*

***

*Йәнемдең килә*
*Иҙрәп, ойоғоһо.*
*Күптән онотолған*
*Бәхет тойғоһо.*

*Күңел болоҡһоп,*
*Шешенеп бөткән.*
*Йөрәк*
*аңларлыҡ*
*Кешене көткән.*

*Иң матур мәлем*
*Ҡалған бит артта.*
*Бәләкәй йөк тә*
*Гел артҡа тарта.*

*Йән тыныслығы*
*Иш итмәй ине.*
*Хәүеф-хәсрәттәр*
*Һис китмәй ине.*

*Ҡанатлы йөрәк*
*Талпына бөгөн –*
*Һин бүлеп алғас*
*Донъяның йөгөн!*

## *Көсөргәнеү*

*Ҡулдан шыуып китеп бара донъя –*
*Саҡ-саҡ тотоп торам, ысҡындырмай.*
*Төшөп китһә,*
*ниҙәр булыр икән?*
*Күтерменме*
*танһыҡ һис ҡандырмай?*

*Шыймалаҡ был донъя. Быуын тотмай.*
*Гел көсәнеп, көсөргәнеү яман.*
*Тик Хоҙайға ғына ялбарамын,*
*Көтөп көн дә*
*көс биргәнен һаман...*



**Нәжибә
ӘМИНЕВА**

## *Теләп торам*

*Эй, һала ла кеше хәҙер өйҙө —
Мин шаҡ ҡатып торам.
Ниндәй ауыр плиталар бында,
Ниндәй көслө кран!*

*Түгел инде был өй тәп-тәбәнәк
Беҙҙең өйҙәр саҡлы.
Буласаҡ ул инде ике ҡатлы
Йәки өсәр ҡатлы.*

*...Һалған саҡта заманына күрә
Ярай ине өйөм.
Хәҙер иһә меҫкен — ҡалтырана:
Емерелмәһен, тием.*

*Өйөм нимә, үҙем дерелдәйем —
Замандағы көстән.
Шул заманға айныҡлыҡ һәм аҡыл
Теләп торам эстән.*

---

*Нәжибә Әминева (1945) Кушнаренко районы Әхмәт ауылынан. БДУ-ның филология факультетын тамамлай, мәктәптә укыта. Бер нисә шиғри йыйынтык авторы.*

## Яңыртырға кәрәк

*Балаларым ҡайтҡан, ейәндәрем —*
*Бөтәбеҙ ҙә өйҙә.*
*Был бергәлек, бындай бәхет бер шул,*
*Бер шул әллә ниҙә!*
*...Бөтәбеҙ ҙә бергә генә йәшәп*
*Булмай икән нигә?..*

*Таралырға ине Ер шарына*
*Бер нөктәнән үрсеп...*
*Ә кем белә Ер шарына халыҡ*
*Таралғанын нисек...*
*Ҡан ҡәрҙәшлек онотолған, бәлки,*
*МеҢ йылдарҙы кисеп?..*

*Яңыртырға туғанлыҡты бөгөн,*
*Бәлки, бик-бик кәрәк?..*
*...Балаларым, ейәндәрем ҡайтһа,*
*Әллә нишләй йөрәк.*
*Һирәк булһын, әммә был хәләттә*
*Ҡалһын әле был йән.*
*Ҡәрҙәштәрем бар, тип, бик алыҫта,*
*Нишләй икән улар, тип, ситЯкта,*
*Бар Ҡешелек, эйе, һинең хаҡта*
*Һыҡрап ҡуйһын выждан!*

## Онотола алған өсөн

*Аһ, йәшәүҙең ығы-зығыһын бит*
*Уҙмаҫ борон аңлайым: уҙған эш...*
*Аҡыл менән шулай уйлағанда,*
*Бар хәсрәттән табыла йыуаныс...*
*Ҡайғыларың энә осо була*
*МеҢ хәсрәтле был сикһеҙлектә...*
*Ошо аҡыл ҡайғы килгән саҡта*
*Иҫтән сыға икән нилектән?..*

*Кеше, кеше!..*
*Уйлап хәсрәтләнмәй,*
*Һалҡын аҡыл менән көймәй шул,*
*Һалҡын аҡыл менән нәфрәтләнмәй,*
*Һалҡын аҡыл менән һөймәй шул!*

*Онотолоп, янып ташлана шул*
*Тормош тигән ярһыу диңгеҙгә.*

*Нәфрәтләнә, янып һөйә кеше —*
*Һөйөүҙәрен һанай тиңһеҙгә.*

*Ғорурлана янып.*
*Донъя ебен*
*Үҙ ҡулында, гүйә, ул тота...*
*Кеше, кеше!*
*Ҡыҫҡа ғүмерендә*
*Фанилығын, ярай, онота.*

*Йәшәү мәшәҡәтен уҙмаҫ борон,*
*Аңлап, «Уҙған эш бит...» — тиһәм дә,*
*Бындай аҡыл минең дә бит тормай,*
*Минең дә гел тормай иҫемдә.*

*Һөйөүҙәрҙә, көйөү-яныуҙарҙа*
*Онотолдом икән мин нисә!..*
*Онотола алған өсөн генә*
*Йәшәп ятам ерҙә кешесә...*

***

*Үҙ-үҙемдән, тирә-яҡтан,*
*Эй, был риза булмауым.*
*Эй, донъялар камил саҡта —*
*Киләсәктә тыумауым!..*

*Киләсәктә донъялар гел*
*Былай ғына бармаҫ бит —*
*Кешелектең өмөтө бер*
*Аҡланмайса ҡалмаҫ бит!*

*Өндәшеү юҡ бер-береңә*
*Рәнйетмәйем тип, һаҡланып.*
*Һәм саф, оло йәнең бөтә*
*Тапланып гел, ваҡланып.*

*Ҡаршы торабыҙ донъяның*
*Ялған-ямандарына.*
*Яманлыҡтың үҙебеҙҙең*
*Йәндә яралғанына...*

*Әле шулай...*
*Киләсәктә*
*Былар булыр үткән эш.*

*Аһ, шул камил киләсәктә*
*Йәшәй алмам — үкенес!*

*Әлегә көрәш-алыштан*
*Арыйбыҙ, өшәнәбеҙ —*
*Камил, ҙур киләсәк өсөн*
*Юл булып түшәләбеҙ...*

*Эйе, бәхет, камиллыҡ тип*
*Һала кеше бар көсөн.*
*Тик, Киләсәк камил булһас,*
*Көрәшер ул ни өсөн?!..*

*Ә көрәшһеҙ-бәрелешһеҙ*
*Тормош юҡ ул,*
*Юҡ дауам.*
*Уф, иң шәбе —*
*Яҡшы-яман*
*Тулы үҙемдең заман!*

## Үлән һәм мин

*И, яҙғы йәм-йәшел үлән,*
*Гел күккә үреләһең.*
*Теҙҙәрҙе күмгәс, йөҙҙәрҙе*
*Күмерлек күренәһең.*

*Теҙҙе күмһә лә, йөҙҙө үк*
*Алмай шул инде күмә —*
*Сабылмаһа, ергә ята,*
*Хаҡ яҙмышына күнә...*

*Әкрен генә ергә табан*
*Бөгөлгәндән бөгөлә.*
*Үлән ҡыяғы...*
*Уның да*
*Ғүмеркәйе бер генә.*

*Һуң үләндең нимәһенән*
*Айырылам, ниенән? —*
*Ғүмерем кисе...*
*Еремә*
*Эйелгәндән-эйеләм...*

## *Барыбер*

*«Аҡыллы юл ҡуя белер...»*
*Әсәйемдең шул һүҙе*
*Күңелдән һис тә китмәне,*
*Ҡалды тәрбиә эҙе.*

*Ғүмер буйына әсәйҙең*
*Шул тәрбиәһен тойоп,*
*«Еңәм» тип ташланғандарға*
*Йәшәнем гел юл ҡуйып.*

*Юл ҡуйҙым — күңел кителде.*
*Яндым: «Еңелеп ҡалдым...»*
*Егелеп-еңелеп шулай*
*Нисектер йәшәй алдым?..*

*Йәшәй алдым...*
*Тик ҡартайҙым.*
*(Бәлки, иртәрәктер ҙә.)*
*Көслө, уҫал булып, еңеп,*
*Йәшәргә кәрәктер ҙә...*

*Әммә уҫалдарға ла бик*
*Өҫтәлмәй, буғай, ғүмер —*
*Уҫалдар ҙа минең һымаҡ*
*Ҡартаялар барыбер...*

## *Нишләр инем?*

*Ап-аҡ ҡарҙың, бөтөрөлөп,*
*Матур ергә төшөүе!*
*Әйлән-бәйлән өйөрөлөп,*
*Бергә-бергә төшөүе.*

*Оҙон юлдар үтә улар*
*Болоттан ергә ҡәҙәр.*
*Абау, шунда ҡар бөртөгө*
*Бер үҙе булһа әгәр?*

*Ҡар яуа, тиелмәҫ ине.*
*Юҡ, ул күренмәҫ ине.*
*Һоҡландырып донъя аҡҡа*
*Былай күмелмәҫ ине.*

*...Эй кешеләр, һеҙ ҙә миңә*
*Кәрәк икән ни ҡәҙәр!*
*Абау, мин бер үҙем булһам,*
*Һеҙ булмаһағыҙ әгәр?!..*

## Нисек яҙайым?

*Яҙғандарым кешенеке*
*Төҫлө түгел...*
*Нигә икән?*
*Әһә, моң юҡ шиғырымда:*
*«Ауылымды һағынам...» тигән.*

*Башҡаларҙа, эй, күп ул моң,*
*Сөнки һирәк ҡайта улар –*
*Ауылдан ҡалаға күсеп,*
*Яфа сигеп ята улар.*

*Бер һағыныу етмәгәнгә*
*Шиғырҙарыма*
*Ауыр ҙа,*
*Тик һағынырһыңмы уны,*
*Йәшәгәс шунда, ауылда?!*
*Башҡалар кеүек, миңә лә*
*Күсергә мәллә ҡалаға?!.*

*Нисек кенә тормошомда*
*Шундай бороло́ш яһайым?*
*...Ауылҡайым!*
*Нисек һиңә*
*Һағыныу йырын яҙайым?!*



**Мәрйәм**
**КҮСМӘЕВА**

## *Мәскәү йүкәләре*

*Мәскәүҙә лә йүкә сәскә атҡан —*
*Кремлдең үҙе янында.*
*Ғәжәп кеүек, хатта артыҡ ситен*
*Күреү быны июль таңында.*

*Эйе, ысын.*
*Әммә хуш еҫтәре*
*Һиҙелмәй ҙә ҡала эсендә.*
*Сәскәләрен үҙем наҙлап үттем*
*Өндәремдә, әллә төшөмдә.*

*Тик барыбер Мәскәү йүкәләре*
*Яһалмараҡ төҫлө тойолдо.*
*Бал ҡорттары һарылып бал йыймаӊы,*
*Хуш еҫ һипмәй, сәскә ҡойолдо.*

*Иҫкә төштө тыуған еремдәге*
*Йүкәләрҙең сәскә атҡаны.*
*Атайымдың йәп-йәш бал айыртып,*
*Оло тәпән менән ҡайтҡаны.*

*Үҙ ереңдең ябай ағасы ла*
*Әсәң кеүек ғәзиз сит ерҙә.*
*Хуш еҫтәрең, йүкә, тоймаһам да,*
*Дауыл уяттың һин күңелдә.*

---

*Мәрйәм Күсмәева (1952) Мәләүез районы Ерек ауылынан. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы. Мәләүездә йәшәй.*

## *Ай тулғанда*

*Тулған айҙар инде ашҡындырмай,*
*Ысҡындырмай хистәр тышауын.*
*Күндәм генә юшай Аҡбуҙ атым,*
*Һулыштары ғына йышайған.*

*Шашынмай ул, артыҡ ашҡынмай ҙа,*
*Ауыҙлыҡтар һалған дәртенә.*
*Тик ай нуры тамһа йөрәгенә,*
*Тотоп булырмы икән кәртәлә...*

*Һағыш инһә алыҫ-алыҫтарҙан,*
*Цунамиҙай ҡапыл ҡалҡынып,*
*Аһ, туҡтатып булырмы икән әле*
*Бер ысҡынған хистәр тулҡынын?!*

*Ҡалырмы һуң Аҡбуҙ кәртәләрҙә,*
*Әллә ысҡынырмы далаға?*
*Тыныс тора ине.*
*Күҙҙәренә*
*Бер тултырып Ай бит ҡараған.*

## *Йөрәктең уртаһында*

*Бөгөн һалдат оҙаталар.*
*Ҡайҙа китерҙәр икән?*
*Илдең ҡайһы нөктәһендә*
*Хеҙмәт итерҙәр икән?*

*Янырҙармы, туңырҙармы,*
*Ел-ямғырҙар ҡағырмы?*
*Хеҙмәттә үткән көндәре*
*Талғын һыуҙай ағырмы?*

*Илде һаҡлау—ир бурысы,*
*Яу сапҡан ата-бабам.*
*Тик әйләнеп кире ҡайтһын*
*Йортона ғәзиз балаң.*

*Ҡайнар нөктәләр булмаһын*
*Илемдең картаһында.*
*Әрмегә киткән егеттәр —*
*Йөрәктең уртаһында.*

## *Ябай икән*

*Алты йәштә ҡояш миңә*
*Бары алтын түп ине.*
*Көнө буйы туптар тибеп,*
*Арып ҡайтылыр ине.*

*Алтмышта туптар типмәйем,*
*Уйҙарымды таъатам.*
*Ҡояшым тиҙ байымаһын –*
*Теләктәр теләп ятам.*
*Иртәгә алтын нурҙарын*
*Яҙһын таъы күрергә.*
*Һәр балаһын бер тиң күргән*
*Ҡояш-Әсә тиергә.*
*Тигеҙ йылыта еремде,*
*Барыһына һибә нурын.*
*Тик ярап булмай кешегә –*
*Етмәйме әллә урын.*
*Ғүмерҙәр үткәс, аңлайһың:*
*Бәхет – бик ябай икән –*
*Ҡыуанып ҡояш ҡаршылау,*
*Кисен – оҙатыу икән.*

## Оҙон юлда

*Оҙон юлдан киләм яйлап ҡына,*
*Бөләңгерт шул бигерәк ҡояшы.*
*Ышаныслы дуҫтар табылырмы–*
*Юлда һынай кеше юлдашын.*

*Оҙон юлдан киләм шөбһәләнеп:*
*Уңырмынмы, әллә туңырмын?*
*Буш вәъәҙәләргә мин күп алдандым,*
*Бәхет ҡошо инде ҡунырмы?*

*Юлдарыма һис тә үпкәләр юҡ,*
*Таптым күпме дуҫтар, таныштар.*
*Хызыр Ильяс ҡай саҡ осораны,*
*Булмаһа ла артыҡ табыштар.*

*Уртаһымы әле юлдарымдың,*
*Аҙағына инде етәмме?*
*Иң мөһиме – дөрөҫ йәшәнемме,*
*Намыҫ менән ъүмер итәмме!*

## Ҡырлы ҡурай

*Ябай ъына үлән – ҡырлы ҡурай,*
*Был мондарҙы ҡайҙан алаһың?*
*Тарих төпкөлөндә айҡап-сайҡап,*
*Һаъыш уттарына һалаһың.*

*Халҡым күңеле – төпһөҙ һандыҡ кеүек,*
*Хазиналар – һанап бөткөһөҙ.*
*Илем тарихы ла ҡатлам-катлам –*
*Ҡара урман йырып үткеһеҙ.*

*Шаңдау килеп йылдар төпкөлөнән,*
*Семтеп-семтеп ала йөрәкте.*
*Йәшә данлап, маҡтап Тыуған илде,*
*Бындай моңдар ерҙә һирәктер.*

## Йәй ғүмере ҡыҫҡа

*Йәй ғүмеркәйҙәре бигерәк ҡыҫҡа,*
*Еләк йыйып алдым бер усҡа.*
*Наҙҙарына һис тә туймай ҡалдым,*
*Алып булмаҫ микән бурысҡа?*

*Тәндәремде наҙлай йылылығы,*
*Йәндәремә сихәт — матурлыҡ.*
*Йәйҙәремдә — шундай тартыу көсө,*
*Теге донъяларҙан ҡайтырлыҡ.*

*Күҙҙәремдең торам тупһаһында,*
*Тырышығыҙ мине аңларға.*
*Йәйҙәрҙә бит оҙаҡ ҡалып булмай,*
*Күҙ тоташа йомшаҡ ҡарҙарға.*

*Кисеүҙәр бар әле киселмәгән,*
*Өлгөрмәнем барыһын аңларға.*
*Ана, яңы ғына ҡурпы ҡалҡҡан, —*
*Йәш балалай шунда аунарға...*

## Иртә әле

*Йәп-йәш кенә ҡалыр кеүек инек,*
*Ярһыу аттай янып йәшәлде.*
*Инде беҙ йөрөгән һуҡмаҡтарға*
*Күҙ һары келәмен түшәне.*

*Гел ярһыма әле, тыныс ҡына*
*Йомшаҡ келәмдәрҙән атла, ти.*
*Аҡбуҙатың бикләп һарайҙарға,*
*Йыуаш ҡына атҡа атлан, ти.*

*Булмышым бит — тыныс йәшәү түгел,*
*Барыһына кәрәк өлгөрөү.*
*Саҡыралар мине яңы юлдар,*
*Тауҙар көтә алда күгелйем.*

*Йомшаҡ, хәтфә һуҡмаҡ һайламайым,*
*Юлдарым да ауыр, кәртәле.*
*Ҡосағына инәм дауылдарҙың —*
*Тынысланырға, тим, иртә әле.*



**Фәниә**
**ҒӘБИЂУЛЛИНА**

## *Һуңлаған осрашыу*

*Әллә юлың,*
*Әллә төшөп уйың,*
*Ишегемде ҡаҡтың...*
*Әллә ҡайҙан —*
*Айҙан булды, буғай —*
*Йортҡа үтте яҡты...*

*Һин тойманың,*
*Ә, бәлки, тыйманың:*
*Тамды ике йәшең.*
*Үттай телде*
*Улар боҙ күңелде,*
*Әйтерһең дә, — йәшен.*

*Их, ул йәшен*
*(Белмәй беҙҙең йәште)*
*Ник күҙҙәргә ҡалған?!*
*«Килде һөйөү*
*Ҡартлыҡта ла» тиеү —*
*Күрәләтә ялған.*

*Фәниә Ғәбиҙуллина (1957) Дүртөйлә районының Наҙытамаҡ ауылында тыуған. Әсән урта мәктәбен тамамлағас, Ҡазан дәүләт университетында белем ала. Оҙаҡ йылдар инде «Ҡыҙыл таң» гәзите редакцияһында эшләй. Яҙыусылар союзы ағзаһы, БР-ҙың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре.*

*Йəйге ҡылдаҡ*
*Көҙөн булһаң кеймəк,*
*Килешерме икəн?*
*Һинең йəшең —*
*Ул аҙашҡан йəшен:*
*Көтмə ямғыр, иркəм.*
*Йəйҙəр инде үткəн...*

## Һағыш түгелгəндер

*Көйəнтəлəп һыуҙар ташығанда*
*Һыуым түгел, һағыш түгелгəндер.*
*Ҡəсə-ҡəсə ҡалған эҙҙəремдə*
*Илаҡ талдар ғына үҫə хəҙер.*

*Йəнгə сихəт биргəн шишмəкəйҙəн*
*Һыу алырға килеүсе юҡ ниңə?*
*Һыуҡайҙары əселəнгəн, тиҙəр.*
*Илаҡ талдар һағышынан микəн?*

## Ҡар йылыһы

*Асыҡ ялан. Əсе елдəр —*
*Əйтерһең, һөңгө яуы.*
*Бер ышыҡ юҡ. Бөтə өмөт —*
*Ҡаршылағы ҡар тауы.*

*Асыҡ ялан. Тик нисек һуң*
*Ҡасып булһын һалҡындан!*
*Биткə бəрə ҡарын буран,*
*Сыбыртҡылай артымдан.*

*Тəнем түгел, бəғер туңды*
*Буранда ҡойонғанда.*
*Ҡар тауы ла йылы икəн*
*Ышанып һыйынғанда.*

## Əсəй һымаҡ

*Тыуған яҡҡа һəр саҡ юлым*
*Ҡискə ҡала.*
*Ə шулай ҙа мине ҡояш*
*Ҡаршы ала.*

*Сере шунда: минең ауыл*
*Көнбайышта.*

*Шуға һәр саҡ ҡарап ҡайтам*
*Ҙур ҡояшҡа.*

*Тәүҙә миңә юл күрһәтә*
*Ул йыраҡтан.*
*Ә бер аҙҙан урын ала*
*Ул ҡыйыҡтан.*

*Әсәйемдәй тойола ул:*
*Нурлы йөҙө.*
*Ҡапҡа асып кергәнгәсә*
*Көтә беҙҙе.*

*Ә унан һуң кинәт кенә*
*Ул юҡ була:*
*Таң алдынан төшкә кергән*
*Әсәй һымаҡ.*

## Сәскә атабыҙ

*«Тормош матур!» —*
*Быны һеңдерҙеләр*
*Аңға, йәнгә инде нисә йылдыр.*
*Сәскә атты илем,*
*Йәйге баҡса кеүек,*
*Тик килмәне көҙө — уңыш йыйыр.*

*Гөлдәр матур,*
*Сәскә араһында*
*Хуш еҫтәргә кемдәр алданмаҫ.*
*Тик хуш еҫтәр менән*
*(Быны кем дә белә)*
*Тамаҡ туймаҫ, хатта ялғанмаҫ.*

*Йәмле йәйҙәр...*
*Ҡунаҡ арты ҡунаҡ.*
*Әйҙә, беҙҙе йомарт тиһендәр!*
*Бейеп кенә йөрөнөк,*
*Гөлдәр өҙөп бирҙек*
*Һәм иҫерҙек улар еҫенән.*

*Етте көҙҙәр...*
*Мул булаһы ине*
*Сәскә атҡан илдең көҙҙәре.*

*Тик таждарын гөлдөң,*
*Беҙ белмәнек кемдең*
*Ваҡытынан алда өҙәрен.*

*Сәскә аттыҡ...*
*Донъя матур ине.*
*Күп илдәрҙең булдыҡ маяғы.*
*Баҡсабыҙҙа ғына*
*Сәскә урынында*
*Тороп ҡалды шайтан таяғы...*

## Юкка ғына

*Сабый тыуҙы. Сәстәренән*
*Еҫе килә бала саҡтың.*
*Күҙендәге зәңгәрлектә —*
*Зәңгәр күге тыуған яҡтың.*

*Йәш өҫтәлгән һайын ниңә*
*Бала саҡка ҡайта күңел?*
*Юғиһә бит иҫтәлектәр*
*Һағынып һөйләрлек түгел...*

*Көлтә-көлтә һалам яҡкан*
*Саҡтарым инһә төшөмә,*
*Йәйге эҫе селләлә лә*
*Һыуыҡтан йәнем күшегә.*

*Төштә һаман атай йорто...*
*Юҡка ғына һағындыра.*
*Хәтирәләр юрғанымды*
*Башымдан уҡ ябындыра.*

*Сабый тыуҙы. Һағыныуҙың*
*Ташҡындарын мин быуалмам.*
*Ауыл ҡыҙы булып ҡалам,*
*Ҡаланыҡы мин булалмам.*

## Әйттем дә

*Тәҙрәмдән турғай инде.*
*Ҡыуманым, ҡурҡытманым.*
*Алдарына һибеп ҡуйҙым*
*Гөлемеш орлоҡтарын.*

*Суплап туйғас ем-ризығын,*
*Томшоғон һөрткөләне.*
*Онотманы төҙәнергә:*
*Йөн-тунын төрткөләне.*

*Йылы йүгергәс тәненә,*
*Бүлмәне иңләп осто.*
*Тик етмәне киңлек уға:*
*Тәҙрә яҡтыһын ҡосто.*

*Артынан гөл ауып ҡалды...*
*«Рәхмәтеңме был ашҡа?!*
*Файҙаңдан зыяның артыҡ,*
*Күренеп йөрөмә башҡа».*

*Әйттем дә телем тешләнем:*
*Туйғас ни, китәр, китәр.*
*Әҙәмгә хас ул ҡомһоҙлоҡ, —*
*Ҡасан башына етәр...*

## Ҡояш ҡарҙа усаҡ яҡҡан

*Ҡышҡа индек, һауа һалҡын.*
*Йөҙә ҡарлы болоттар.*
*Алтын күлдәген алышты*
*Ҡыр-болондар толопҡа.*

*Ер-Әсәне йылытам тип,*
*Яҡыная ҡояш беҙгә.*
*Тик йылыһы йәнгә үтмәй,*
*Ҡаҙалһа ла нуры йөҙгә.*

*Уның һайын ҡояш түбән*
*Төшә бара, төшә бара.*
*Усты терәп йылытырлыҡ*
*Ҡына ҡала беҙҙең ара.*

*Ни ҡыҙғаныс: ҡояшҡайҙың*
*Көсө етмәй һалҡындарға.*
*Аптырауҙан, ут туп булып,*
*Томорола шунда ҡарға.*

*Ҡояш, ана, усаҡ яҡҡан:*
*Ялҡындары күккә оса.*
*Оҙаҡ бармай был күренеш, —*
*Тау артына ҡояш боҫа.*

## *Беләһең микән?*

*Күктә янған йондоҙҙарҙан*
*Һайлап алдыҡ беҙ берҙе,*
*Айлы төндә икәүләшеп*
*Систек тик уға серҙе.*

*Һоҡланды шунда бар Йыһан*
*Беҙҙең матур дуҫлыҡҡа.*
*Йондоҙ беҙгә юл күрһәтте*
*Упҡынға юлыҡмаҫҡа.*

*Һаман яна яҡты йондоҙ —*
*Никтер һалҡын нурҙары,*
*Беҙҙең йондоҙҙоң йылыһын*
*Кемдәр, бәғрем, урланы.*

*Йондоҙ нурына ҡойоноп*
*Йөрөгән саҡтар бар ине.*
*Беҙ үҙебеҙ генә түгел,*
*Хистәр, йәндәр пар ине.*

*Яңғыҙ йондоҙға ҡарайым:*
*Ҡыҫыла йөрәккенәм.*
*Мин дә яңғыҙ, ул да яңғыҙ —*
*Беләһең микән, иркәм?!*

**Әҫәрҙәре журналда донъя күргән авторҙарға**
**гонорар түләү өсөн түбәндәге мәғлүмәттәр кәрәк:**

– тулы фамилияһы, исеме, атаһының исеме;
– почта индексы һәм тулы адресы;
– паспорт серияһы, номеры, кем тарафынан һәм ҡасан бирелгән;
– тыуған йылы, айы һәм көнө;
– социаль номеры;
– Дәүләт пенсия фондының страховка таныҡлығы номеры.

*Әгәр ошо мәғлүмәттәр күрһәтелмәһә, авторҙарға гонорар түләнмәй.*



Раят
ВӘЛИЕВ

# КҮЛӘГӘЛЕ УТРАУ

## Мажаралы повесть

### 1

Бөгөн дүшәмбе. Тик минең өсөн ул сираттағы эш көнө генә, сөнки күптәр баҙна буйы көтөп алған йәкшәмбе, ғәҙәттә, минең өсөн ял түгел. Кисә лә оҙон көн участковый Ғәлләмов менән урландыҡ кеҫә телефонын эҙләнек.

Егет менән ҡыҙ бергә йөрөгәндәр, эскәндәр, йоҡлағандар. Иртәнсәк, ҡыҙ уяныуға, егеткәй ҙә юҡ, телефондан да елдәр иҫкән. Егеткәй башта ғәйебен танды, әлбиттә, алманым, ти, һөйгәнем үҙе юғалтҡандыр, тип ныҡышты. «Һөйгәнем» тиергә теле лә тотлоҡмай үҙенең. Күп кенә хәҙерге заман йәштәре мөхәббәтте, тик түшәктән ғибәрәт, тип аңлай бит. Ятаҡтағы бүлмәһенә керепп, матрас эсенән табып алдыҡ телефонды. Ҡайһылай «ныҡ йәшергән», хәстрүш. Артымдан шылтыратып, маҙама теймәһен өсөн, ҡайтырға сыҡҡанда үҙем менән алғайным, тип аңлатырға маташты үҙенең ғәйебен һуңынан. Әммә беҙ шул уҡ матрас эсенән тағы алты телефон таптыҡ.

«Һөйгән» ҡыҙҙары бигерәк күп икән дә баһа унын, һәр ҡайһыһы шылтырата башлаһа, теңкәң ҡороуы ла ғәжәп түгел, шуға ла, унын уйынса, ҡотолоуҙын берҙән-бер ысулы булып ҡыҙҙарҙы телефондарынан мәхрүм итеү генә ҡалалыр. Шашҡан бур, ҡыҫҡаһы. Әле, ана, коридорҙағы эскәмйәлә теге ҡыҙ менән ҡосаҡлашып-үбешеп ултыралар. «Мөхәббәт» бит, ә саф мөхәббәт, ҡайһы бер татлы тел шағирҙар әйтеүенсә, имеш, бар гонаһты ла ғәфү итә. Минеңсә иһә, тап киреһенсә. Ай-һай, егеткәй, урлаған телефондарыңды бер эшкә беркетеп, сүп өҫтөнә сүмәлә өйөлһә, «һөйгәндәр»еңде бүтәндәргә ҡалдырып, ике-өс йылға төрмәгә оҙатылыуың да ихтимал.

Арыным. Ике йылға яҡын ял күргәнем юҡ. Сираттағы отпускыға бөгөн ғариза яҙғайным, шеф тағы ҡаршы төштө. Эшләргә кеше етмәй, һуңғараҡ китерһең, ти. Ҡара көҙ еткәсме ни?

---

*Раят Вәлиев (1965) Белорет педагогия училищеһында уҡый, армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, БДУ-ның тарих факультетын тамамлай һәм оҙаҡ йылдар эске эштәр органдарында хеҙмәт итә. Әүәл «Ленинсы», «Урал», «Башҡортостан пионеры» гәзиттәрендә, «Шоңҡар», «Өлкәр», «Ағиҙел» журналдарында хикәйәләре баҫылғаны бар. Повесть — отставкалағы милиция майорының тәүге күләмле әҫәре.*

һөйрәгән атҡа йөктө лә өйөп тейәйҙәр шул.

Өҫтәлдә ятҡан ғаризамды, йыртҡыслап, сүп-сар кәрзиненә бырғаттым.

Иртә әле, эш көнө яңы башланып тора. Шуға ҡарамаҫтан, ҡояшҡа ҡыҙырға өлгөргән йылы һауа, кабинеттың асыҡ тәҙрәһенән кереп, битемә бәрелә. Ҡаршы стеналағы йыртыҡ обой осо, бер туҡтауһыҙ елпелдәп, елгә шытырҙай. Төҙөлөш кәрәк-ярағы һатып алып, эш бүлмәгеҙҙе рәткә килтерегеҙ, тип бәйләнде үткәндә шеф. Бына ғәжәп, ниңә уларҙы үҙемдең барлы-юҡлы аҡсама һатып алырға, етмәһә, төҙөкләндереүҙе лә үҙ ҡулдарым менән эшләргә тейешмен һуң әле? Былар, бүлек етәксеһе булараҡ, һинең мәшәҡәтең, полковник әфәнде, бүлек ҡаҙнаһынан аҡса бүл, эшселәр ялла... Ә минең быға аҡсам да, ваҡытым да юҡ, булһа ла, бирмәйәсәкмен, хет бөгөндән өҫкә ауһын бинағыҙ.

Бөгөнгә тәғәйенләнгән мәшәҡәттәрҙе барлау уйы менән, өҫтәлемә үҙемдең ҡарамаҡтағы эштәрҙе сығарып һалдым. Быныһы – урланған ҡиммәтле кеҫә телефонын эҙләү эше... Эх, шул телефондар, ҡайһы хыялый баш уйлап тапҡан һуң һеҙҙе? Быныһы – йәш бала юғалыуы тураһында. Ата-әсәһе йүнле әҙәмдәрҙән түгел, баланы үҙҙәре һатып ебәргәндәрҙер, тигән шик бар... Быныһында, хужаһына ҡорал терәп, машинаһын тартып алғандар, һиҙеүемсә, был эш ошо көндәрҙә асыласаҡ... Ә быныһы күпер аҫтында табылған ҡыҙ мәйете тураһында, судмедэксперт әйтеүенсә, уны тәүҙә быуып, һуңынан һыуға ташлағандар. Кисә алған хәбәр хаҡ булһа, бының да осо сығырға тора, бөгөн шуны йүнләргә кәрәк... Быныһы – шиғәлселәр эше, уныһы ҡараңғы әле... Тағы бер урландыҡ телефон... Быныһы...

– Сәләм...

Эш бүлмәһенең асыҡ ишегенә һөйәлеп, тәмәке төтәткән әҙәми заттың йөҙһынында үҙен бүтәндәрҙән бер ҡарауҙан айырырлыҡ тамға-билдә булмаһа ла, мин уны айһыҙ төндә урамда туңҡайып ятҡан сағында ла, һис шикһеҙ, таныясаҡмын. Геннадий Самуилович Шприц. Минең өсөн – Генка Шприц. Исеме есеменә тап килеп тора уның. Юҡ, ул табип түгел. Генка Шприц аҡ күлдәк, аҡ салбар кейеп алған, аяҡтарында ла затлы аҡ туфлиҙар, башында киң тирәсле аҡ кәпәс. Туйға йыйынғанмы ни... Әйткәндәй, хибесханала булғанға ҡәҙәре лә ул һәр саҡ шулай фырт ҡына кейенеп-яһанып йөрөр ине.

Мин, өндәшмәй генә, өҫтәлемдәге ҡағыҙ-киәмәтте йыйнап, сейфҡа йәшерҙем. Ғәмһеҙ генә ҡыланһам да, тегене күҙ уңымдан сығарманым, сөнки был әҙәм аҡтығынан бер ҡасан да яҡшылыҡ көтөп булмай. Ҡыҙыҡ, әүәл милицияға үҙен һөйрәкләп килтереү ҙә ауыр булған был әҙәм, хәҙер килеп, ни хәжәтенән үҙ аяҡтары менән йөрөй икән бында?

– Бына, төрмәнән сыҡтым да бындағы таныштарымдың хәл-әхүәлен белергә килдем, – Генканың тауышы тыныс, ә күҙҙәре ҡаштарына тиклем төшөрөп кейгән кәпәс тирәсе аҫтына йәшенгән. – Ни тиһәң дә, һинең менән байтаҡ ҡына гәпләшеп ултырған, ҡушарлап йөрөгән бар.

Уның тейешен ултырып, иреккә сыҡҡанын белә инем инде. Генканың төрмәнән ҡайтыуы эшемдәге ҡырҡ мәшәҡәткә тағы ла бер оло бәлә булып өҫтәлеүе асыҡ, шуға ла уның «ҡойроғона» күҙ-ҡолаҡ та элеп өлгөргәйнем. Үтә лә яһил, әшәке әҙәм ул.

– Ҡулдарыңа бығау элеп, һинең менән ҡушарлап йөрөргә һәр саҡ шатмын, – тинем, тегене ҡарашым менән быраулап.

– Юҡ инде, майор, – Генка Шприц төпкә уҙып, ишек янындағы ултырғысҡа аяҡ сәнсеп ултырҙы ла кәпәсе аҫтындағы ҡоромдай ҡара күҙҙәрен миңә

тексәйтте. – Мине төрмәгә тығырға башҡаса өмөт тә итмә. Сөнки тормош матур, ирек ҡәҙерле, тик йәшәй белергә генә кәрәк. Башта үҙеңде ҡайғырт, – ул, кинәйәләп, миңә бармаҡ төрттө. – Урыҫ рулеткаһын алмашлап уйнайҙар, хәҙер һинең сират…

– Янап, ҡурҡытырға уйламайһыңдыр ҙа?

– Юҡ, мент. Һиңә янау – бүрегә йоҙроҡ күрһәтеү менән бер. Киҫәтеүем генә. Тағы ла юлымды ҡыйһаң – башыңа етәсәкмен. Элеккенең дә ҡонон ҡайтармағанмын әле, үҙең беләһең.

Генка Шприц баҙлап янған тәмәкеһен йылан башы һүрәтләнгән алтын йөҙөгөнә баҫып һүндерҙе лә мөйөштә торған сүп-сар кәрзиненә төшөрҙө. Күрсәле, бында килеп, күрәләтә янап ултыра түгелме?

– Әлегә ҡәҙәре был тарафтарҙы ун саҡрымдан урап уҙа инең. Ә бөгөн үҙең килгәнһең. Төрмәлә шыбырҙашырға өйрәттеләрме әллә? Әйҙә, әшнәләрең тураһында берәй хәбәр-хәтерең булһа, ҙур иғтибар менән, ҡыҙыҡһынып тыңлайым һине,– тип тегене күрәләтә мыҫҡылларға булдым, үҙ сиратымда. – Үткәндә мин һиңә бик йәтеш тел аҫҡысы тапҡайным, иҫеңдәме? Бәлки, шунан бирле ауыҙыңа ҡабат йоҙаҡ элгәнең дә юҡтыр?

Әммә Генка Шприцтың керпеге лә һелкенмәне. Билдәле, төрмә уны оторо сыныҡтырған. Беҙҙең илдәге төрмәләрҙең енәйәтселәр әҙерләүсе юғары белем йорттары булыуын кем белмәй. Шуға ла алдағы көндәрҙә был бәдбәхеттән күҙ яҙҙырмаҫҡа, уның һәр аҙымын һанап, ҡылыр эшен алдан белеп тороу фарыз. Хәлдән килгәнсә, әлбиттә. Ҡара йылан һымаҡ бит ул, ҡойроғона баҫһаң, һажлап, сағырға итә. Әүәле баҫтырыҡлап, хибесханаға иткәнсе, артынан аҙ йөрөтмәне. Ә ул ҡылған, уның ҡатышлығында ҡылынған күпме енәйәттәр һаман асылмайынса ҡалды. Уны төрмәгә олаҡтырғас, ҡалала тынысыраҡ булып ҡалғандай ине. Хатта, Зариф Зәкиевич, әүәлге бүлек етәксеһе, хөкөм ҡарары менән Генканы биш йылға рәшәткә артына тығырға форсат иткәс, мине кабинетына саҡырып, ҡимммәтле хәмер менән һыйлағайны.

Шул әҙәм бына тағы irектә.

Генка бер килкем диҡҡәт менән эш бүлмәмде күҙләп ултырҙы.

– Биш йыл ғүмер уҙып та киткән, – тине ул шунан һуң, тағы тәмәке ҡабыҙып. – Ә бында бер ни ҙә үҙгәрмәгән. Шул уҡ обойҙар, хан заманынан ҡалған өҫтәл, яҙыу машинкаһы, хатта ултырғыс та шул уҡ – күтем менән тоям! Бына ҡайҙа ул дәүләттең ташландыҡ сүп-сар өйөмө! Ә һин, майор, шундағы күсә… Хатта төрмәлә, мин булғанда ғына, ике тапҡыр төҙөкләндереү эштәре уҙғарҙылар. Унда хәҙер тотҡондарҙы бала һымаҡ итеп ҡарайҙар, кеше хоҡуғы тип, прокурор үҙе яҡлап тора…

– Оҡшағас, ултыра бирәһең аны…

– Үҙең дә һаман ятаҡта тораһың икән. Әҙәмсә торлағың да, ғаиләң дә юҡ, кеҫәң дә таҡыр – эс бошорлоҡ былдай тормоштан аҫылынып үлерлек бит! Ә мин, бына, ireккә сыҡтым да өр-яңынан кейендем, яңы машина һатып алдым, рестарандарҙан сыҡмайым… Нишләп ултыраһыңдыр бында, майор әфәнде?! – Генка «майор» тигәнде «йырлап» әйтте. – Дәүләт, закон, имеш… – Ул теш араһынан ғына сертләтеп төкөрөп ҡуйҙы. – Яратмай һине дәүләтең, мент, үгәй балаһы һымаҡ күрә. Сөнки дәүләт үҙе – ата ҡараҡ! Тыңла әле, майор, кил миңә эшкә, ярты йылдан фатирлы, машиналы булырһың, ысынлап әйтәм! Беҙ һинең менән ҡаланы ошонда быуып тотасаҡбыҙ! – Генка һәлмәк йоҙроғон һелкетеп алды. – Һинең кеүек ышаныслы иптәш етмәй миңә, янымда йыйын алйот та маймыл…

Генканың был хәбәренән мәрәкә табып, көлөп алдым.

– Беренсе көндә үк бер-беребеҙҙең башына етәсәкбеҙ!

– Уныһы ла дөрөҫ, – тәмәке төтөнө аша Генканың ҡарашын тотоп булмай. – Юҡ, ҡыҙғаныска ҡаршы, матур, иркен тормош һинең кеүектәр өсөн түгел, майор.

– Типкеләп сығарғанды көтәһеңме?

Генка кинәт кенә урынынан торҙо ла, салбар кеҫәһенән алты пистолет яһауы сығарып, өҫтәлемә һалды.

– Һайла, мент, – тип ыҫылданы ул, боҙҙай һалҡын ҡарашы менән миңә текләп. – Ҡайһыһы яһаулы – шул һинеке.

Мин ашыҡмай ғына, берәмләп, яһауҙарҙы тикшерҙем. Алтыһы ла буш, йәҙрәләре урынында булһа ла, дарыһы, шартлатҡыстары юҡ. Кеҫәһендә ысын патрон йөрөтөргә Генка Шприц иҫәр түгел. Ә былары йәһәтенән, хәҙер килеп уға бәйләнеүҙән ни фәтеүә, урамда таптым да милицияға килтерҙем, тиәсәк.

– Маңҡа малайҙар кеүек, аяҡ аҫтында ятҡан сүп-сарҙы кеҫәңә йыйып йөрөгәнеңде белмәй инем, – мин, Генкаға ҡарап, мыҫҡыллы ғына көләмһерәнем. – Әллә хибесханала, ысынлап та, мейеңде сереткәндәр инде?

Асыуынан Генканың йөҙө күгәреп, ауыҙ сите бер туҡтаһыҙ тартыша, һын-килбәте, ҡорбаны өҫтөнә ырғырға торған йыртҡысты хәтерләтә. Эйе, төрмәлә уҙғарған биш йыл эсендә миңә булған ҡон-ҡоһоро уғата ла бүртеп, бар ғәмен биләгән, ахыры. Шулай булмаһа, бында килеп, ҡоторған эттәй күрәләтә тештәрен ыржайтып ултырмаҫ ине…

Ҡуйынымдан пистолетымды сығарып, Генка алдына, өҫтәлгә, һалдым.

– Мә, ал да ат, ҡулыңдан килһә! Ниңә оҙаҡҡа һуҙырға, ти, һуңлап ҡуйыуың да ихтимал бит? Юғиһә, тораһың бында, үсексән һарыҡ тәкәһе һымаҡ, күҙҙәреңде алартып!

Генка, утҡа бешкәндәй, ҡулдарын тиҙ генә артына йәшерҙе лә, ҡапыл тынысланып, урынына кире ултырҙы. Уның был ҡылығынан ҡыҙыҡ табып, көлмәй булдыра алманым.

– Төрмәлә уйланырға ваҡыт күп, – тине, тәрән итеп тәмәкеһен һурғас. – Мин, һинең ишеләй, сабата олтаны түгелмен, үҙ йүнемде үҙем күреп йәшәргә күнеккәнмен. Шуға ла төрмәлә уҙған һәр көн минең өсөн – ҙур юғалтыу. Мин иректе яратам, ә һин... мине, законһыҙ ысул ҡулланып, төрмәгә яптың.

Был мәғәнәһеҙ һүҙ бутҡаһы мине тамам ялҡытә башланы.

– Шприц, иҫән-имен сағыңда күҙемдән юғал! – тип аяғыма баҫтым. – Һин мине беләһең!

Шул саҡ ишектә хеҙмәттәшем Урал күренде. Ул ишек янында ултырған Генка Шприцҡа текләп ҡараны ла һүҙһеҙ генә ҡаршылағы өҫтәл артына барып ултырҙы. Генка Шприц кәпәсе аҫтынан Уралға һөҙөп ҡарап алды, йәш милиционерҙың һын-килбәтен хәтеренә һалып ҡуйырға тырышыуы ине уның. Мин өҫтәлдә ятҡан ҡоралымды алып, ҡуйыныма кире тыҡтым. Генка Шприц урынынан ҡуҙғалды.

– Осрашырбыҙ әле, майор, – тине ул, миңә кинәйәле ҡараш ташлап. – Әйткәндәй, кисә Олег янына кереп сыҡтым.

Мин шунда, башыма күҫәк менән һуҡҡандай, бер мәлгә шаңҡып ҡалдым. Нисек инде? Бәдбәхет Генканың Олег янына барып йөрөргә ни хаҡы бар?

– Торт, араҡы илттем, – тип өҫтәне Генка, көләмһерәп. – Тик ул эсмәй, имеш, бауыры сирле, ахыры. Фатиры буйлап ғәрип арбаһында күсеп йөрөй.

Шул урында, үҙем дә һиҙмәҫтән, өҫтәл артынан һеләүһендәй ырғыным да, тегене иҙәнгә аунатып, оятһыҙ йөҙөн йоҙроҡтарым менән төйгөләргә керештем.

– Бына һиңә торт… Бына һиңә араҡы… Бына һиңә ғәрип арбаһы!

Генка, ҡулдары менән йөҙөн ҡаплап, өн сығармай, минең аҫта йыландай борғоланды, әммә ҡайтарып һуғырға маташманы. Кемдер мине, арттан тотоп, ситкә өҫтөрәтә башланы, эргәлә дөбөр-дөбөр йүгерештеләр, ҡысҡырыштылар…

Ҡалтыранған ҡулдарым менән Олегтың телефон һандарын йыям, ҡулымдағы тәмәке төтөнө күҙҙәремде әсетә. Телефон һуҙып-һуҙып геүләй ҙә өҙөлә. Тағы шылтыратам. Ниһайәт, теге оста низер шыртланы.

– Алло, – Олегтың тауышы, ер аҫтынан сыҡҡандай, тоноҡ ишетелә. Шунда ғына йөрәгемә йылы кереп, тирә-яғымдағы әйберҙәрҙе сырамыта башлағандай булдым. Бүлмәгә иптәштәрем инеп тулған, баҫыр урын да юҡ.

– Был мин, – тыным иркенләне шунда. – Шприц килдеме ни кисә?

Олег бер аҙ өндәшмәй торҙо, телефондан ниндәйҙер аңлайышһыҙ өндәр ишетелде, әллә көлдө дуҫым, әллә һыҡтап ҡуйҙы.

– Борсолма, – тип яуапланы Олег. – Мин уны тупһанан аша уҙғарманым.

– Ярай, кисләтеп яныңа кереп сығырмын.

Бер аҙҙан бүлек етәксеһе полковник Владимир Иванович Козлов, кабинетына саҡырып, мине орошоп алды. Кемдер ҡолағына шыбырҙап та өлгөргән, имеш: Генка Шприц прокурорға барһа, эштәрең хөрт, тисе. Генка Шприцты белмәй ул. Кәрәк тапһа, Генка Шприц – үҙе прокурор!

Эш урыныма ҡайтышлай, коридорҙа «һөйгәне» менән һаман сырҡылдашып ултырған телефон бурын, яғаһынан алып, бүлмәгә кереттем. Сарбайлап, ғауға ҡубарған оҙон ботло, башмаҡ күҙле «бумала»һын, өгөт-нәсихәтләргә теләмәйенсә, ҡулынан алып, дежур бүлеккә илттем.

– Ошо әйберҙәрҙең һиңә нисек килеп эләккәндәрен тикшереп, яҙа башлаһаҡ, бөгөндән биккә алынып, ятағыңа ике-өс йылдан һуң ғына кире ҡайтырыңды аңлайһыңмы?

Ринатҡа – асыҡ күлдәк иҙеүенән түшендәге үрмәкселәй ҙур миңе күренеп торған егеттең исеме шулай ине – өҫтәлдә теҙелеп ятҡан кеҫә телефондарына ымланым. Һүҙҙәремдең айышына төшөнгәс, әлегә ҡәҙәре күҙ-ҡаштарын уйнатып, көр генә ҡыланған һомғол буйлы, сибәр йөҙлө егеткәйҙең ҡарашы һүнде, һын-ҡиәфәте лә күҙгә күренеп шиңде.

– Бынан сыҡҡан аҡ кейемле әҙәмде беләһеңме? – Дауам иттем, Ринаттан күҙҙәремде алмай.

– Беләм. Кафе хужаһы…

– Һөнәрең менән ашнаҡсы булыуың миңә билдәле. Шул кафеға эшкә урынлаш.

– Барғайным да, алманы…

– Ныҡыш, урын бушағанды көт. Ҡыҫҡаһы, һин шул әҙәмдең һәр аҙымын, һәр һүҙен миңә еткереп торорға тейешһең. Төрмә бәҙрәфен таҙартҡың килмәһә. Аңланыңмы мине?

**2**

Кис еткәс, ярты күкте биләгән ҡояш, ниһайәт, офоҡҡа сүгеп, көн битендә ултырған йорттарҙың асыҡ тәҙрәләренә баҡты. Ергә ҡолап төшкән зәңгәр күк ярсығылай булып, күҙ күреме еткәнсе йәйрәгән күлдә бөҙрә болоттар «йөҙә».

Һөҙәк кенә күл ярын йәшел сирәм ҡаплаған, яр буйындағы бейек тирәктәрҙең япраҡтары, ҡыл элеп ҡуйырлыҡ тымыҡ һауанан ниндәйҙер ипкен табып, һаҡ ҡына елберҙәшә. Урам юлында аяҡ аҫтынан саң бырхып оса, һыу ситен ҡаҙөйрәктәр көтөүе баҫҡан, эҫегә тилмереп, ышыҡҡа боҫҡан алабайҙар, иренеп, үткенселәр артынан өнһөҙ генә ҡарап ҡала.

Быйылғы йәй эҫеһе менән бар тереклектең тәҡәтен ҡорота, ярты айҙан ашыу инде ергә тамсы ла ямғыр күҙе төшкәне юҡ. Бүрәнәләре ҡарайып иҫкергән, тәбәнәк кенә йорт алдындағы баҡсала үҫкән аллы-гөллө сәскәләр, ҡояштың ҡайнар һулышынан нисек йәшенергә белмәгәндәй, түтәлдәргә йығылып, шиңеп үк баралар. Шуға ла Әминә, эштән ҡайтышлай, ихатаға ла кереп тормай, урамдағы ҡоҙоҡтан ташып, сәскәләргә һыу һибә башланы. Ауырыуҙан үлем сигенә еткән әсәһенең йәнтәслим йөрөп ултыртҡан рауза сәскәләре генә эҫегә бирешмәй, улар, гүйә, аҡ таждарын ҙур асып, күҙгә текләй, телдәре булһа, ләпелдәк балалар кеүек, һүҙҙәре бөтмәҫтәй.

– Иҫән генә тораһыңмы, Әминә ҡыҙым?

Әминә башын күтәреп, тауыш килгән яҡҡа ҡараны. Баҡса рәшәткәһе алдында торған Зөбәйлә әбей гөлләмәле яулыҡ ябынған, эҫе булыуға ҡарамаҫтан, өҫтөндә йылы кейем, ҡарт һөйәктәргә ҡайҙа ла һыуыҡ инде. Арыраҡ, ауыр ҡапсыҡ күтәреп, зәңгәр күлдәге тиргә мансылған ейәне Рәжәп тора.

Әминә баҡсанан сығып, Зөбәйлә әбейҙе ҡосаҡлап алды.

– Һаумы, һаумы, әбекәйем,– тине ул, ихлас ҡыуанып. – Йөрөп тә ҡайттыңмы ни? Ниңә шулай иртә әйләндең, йәй үтмәгән бит әле?

Ҡартлығы етеп тә тилберлеген юғалтмаған Зөбәйлә әбей йәй башында уҡ, аяҡтан ҡалмаҫ борон балаларымды күреп әйләнәйем тип, сәфәргә ҡуҙғалғайны.

– Кеше өҫтөндә ятыуы ауыр, ҡыҙым, – тине әбекәй, йәшле күҙҙәренә яулыҡ сите менән тейеп. – Әсәй, өләсәй, тип өлтөрәп торһалар ҙа, үҙ өйөңә етмәй инде… Аллаға шөкөр, үҙ-үҙемде ҡарарлыҡ хәлем бар әле. Бәләкәй генә өйөм дә, ҡарауһыҙ ҡалып, етемһерәп торалыр, тинем…

– Өйөңдө йыйыштырып, таҙартып ҡуйғанмын. Әйҙә, оҙатайым үҙеңде, сәй ҡуяйым, юғиһә, яңғыҙ ҡайтып төшкәс, буш өйҙә эсең бошор.

– Рәхмәт яуғыры, – тип арҡаһынан һөйҙө уны әбей, урам буйлап үҙенең йорто яғына юлланғас. – Бәхетле генә булһаң ине, ҡыҙым. Һәйбәт кенә егеткә юлығып, тормош ҡорғаныңды күрһәм, иншалла… Бынауы ейәнем, күҫәктәй булһа ла, аҡылға бер төрлөрәк шул, – Зөбәйлә ҡарсыҡ арттан эйәргән Рәжәпкә ишараланы. Уның Рәжәбе, ысынлап та, күптән ир ҡорона етһә лә, килбәтҡылығы малайҙарҙай килешһеҙ, һөйләшеүенең дә рәте юҡ.

Зөбәйлә әбейҙе оҙатып, өйөнә кире ҡайтҡан Әминәне һуңғы айҙарҙа ғәҙәти хәлгә әйләнгән ҡолаҡ сыңлатҡыс тынлыҡ ҡаршы алды. Ошо һалҡын бушлыҡ, гүйә, йәш ҡыҙҙың да күңеленә һеңгән, шуғалырмы ул йыш ҡына, тәне зымбырҙап, тик торғандан өшөгәнен тоя хатта. Шуға ла Әминә, нимәнәндер ҡурҡҡандай, ашығып, өйҙөң күлгә ҡараған тәҙрәләрен асып ebәрҙе. Тәҙрәләрҙән өй эсенә йылы ипкен бәреп керҙе, күл буйындағы шау-шыу ишетелде, Әминәнең дә йөрәге йылынып, эске ҡалтыраныуы баҫылды.

...Бөгөн йәйге каникулдар башланды. Ул медицина институтының өсөнсө курсын тамамланы. Курсташтары һуңғы имтихан үтеү менән, һауыттан түгелгән борсаҡтай ырғанлай-һикерә, күҙ асып йомғансы тирә-яҡҡа таралышып бөттө. Кемдер ауылға, ата-әсәһе янына, кемдер самолет-поезға ултырып, алыҫ яҡтарға йүнәлде. Әминәнең генә барыр ере лә, йүне лә юҡ. Нәфисә

әхирәтенең ныҡыша-ыҙғыша ауылға саҡырыуына уҡтала биреп тә ҡуйғайны, тик ҡырҡ бәлә менән тапҡан эшен юғалтырға теләмәй, кире уйларға мәжбүр булды. Дауаханала шәфҡәт туташы булып йөрөй ул. Шулай ҙа ике айға һуҙылған йәйге ялда, барыбер еңелерәк булыр, исмаһам, йоҡоһо туйыр, сөнки, бығa ҡәҙәре, көнө уҡыуҙа уҙһа, төнө дауаханала үтер ине.

Өйҙәге һалҡын тынлыҡты ҡыуырға теләп, телевизорҙы ҡабыҙҙы ла өҫтәлдә өйөлөп ятҡан уҡыу әсбаптарына тотондо. Өс йыл эсендә байтаҡ ҡына ҡағыҙ-ҡиәмәт, китаптар йыйылған, шуларҙы ташлап булмай бит, хәжәттәре сыҡҡансы, аяҡ аҫтынан алып, ҡайҙалыр йыйыу кәрәк. Ҡыҙ, өй эсен әйләнеп, төрлө урынды ҡарап алды. Ҡолас киңлеге иҙән таҡталарына тәҙрәләрҙән офоҡҡа ултырған киске ҡояш яҡтыһы төшкән. Өй эсендә таҙалыҡ, бөхтәлек, нимәгә тейһәң дә, күп йылдар буйы һаҡлап, күнеккән тәртиптең рәте китер һымаҡ. Иҫке диванда йөнтәҫ бесәй ирәйеп йоҡлай, юҡ-барға бәйләнеп, бүлмәнән-бүлмәгә осоп йөрөгән йәшел тутыйғош бесәй өҫтөнә ҡунып, ниңәлер шымып ҡалған.

Әминә бүлмәләге кейем шкафын асып ҡараны ла, шунда элеүле торған кейемдәрҙе күргәс, йөҙө күләгәләнеп, ишекте кире япты һәм соланға сыҡты. Шунан, устары менән йөҙөн ҡаплап, күҙ алдындағы ниндәйҙер күңелһеҙ күренештән арынырға теләгәндәй, бер аҙ торғас, соланды ҡарап әйләнде, ишек элмәген ысҡындырып, синлеккә керҙе. Шунда уның күҙҙәренә рәтләп урынлаштырылған төрлө йәшник, һауыт-һаба артына йәшенгәндәй булып, төпкө мөйөштә торған иҫке ағас һандыҡ салынды. Әллә ҡасанғы йәшел буяуы уңып, төҫөн юғалтҡан һандыҡтың мөйөштәре йыһазлы еҙ ҡалпаҡтар менән нығытылған, йоҙаҡ элмәктәре лә һары еҙҙән семәрләп эшләнгән. Әүәле, ҡыш көндәрендә, «хан заманы»нда яһалып, кемдәндер тороп ҡалған был һандыҡта һыуыҡҡыҫҡа һыймаған ит-майҙы тоталар ине. Әле һандыҡ буш, уның аҫҡыс-йоҙағы ла күптән юғалған инде. Әминә, табышына ҡыуанып, сәпәкәй иткәндәй ҡыланды ла һандыҡтың ҡапҡасын асты. Һандыҡ эсенән бөркөлгән тынсыу һауаға сөскөрөп тә алды. Шунан биҙрәләп йылы һыу килтерҙе һәм һандыҡтың эсен-тышын ышҡып йыуырға тотондо. Һандыҡ төбөн һөрткәндә, сепрәккә нимәлер эләкте. Ҡыҙҙың ҡатыраҡ тартыуына һандыҡ таҡтаһы, урынынан айырылып, бармағын ауырттырҙы. Һандыҡ төбөндәге таҡталар ике ҡатлы булған икән. Ҡубып сыҡҡан таҡта аҫтында һарғайып бөткән ҡағыҙ күренде. Ҡулдан бөгөп эшләнгән ҡағыҙ конверт тышында бер ниндәй ҙә яҙыуһыҙыу күренмәй. Асып ҡарауға, эсенән ят хәрефтәр менән яҙылған хат һәм иҫке фотоһүрәт килеп сыҡты. Һарғайып, тоноҡланған фотоһүрәттә ике ир аҡ кәмәлә йәнәш баҫып тора, ирҙәрҙең береһе, ҡупшы ҡара мыйыҡлыһы, батша заманындағы хәрби кейемдә, билендә ҡылысы ла бар. Икенсеһе – йыуантыҡ, тәбәнәк буйлы, шырт һаҡаллы, унынының башында ҡара кәпәс, өҫтөндә ҡара оҙон бишмәт. Уларҙан ары һыуҙан ҡалҡҡан бейек ҡаяташтың шыма таштары ағара.

Ҡыҙ, ниндәйҙер өмөтөнән алданғандай, ауыр уфтанды ла, хат менән фотоһүрәтте ситкәрәк һалып, эшен дауам итте…

Китап-дәфтәрҙәрен һандыҡҡа кире һалғас, ҡулына ниндәй эш тоторға белмәгән Әминә, болоҡһоп, асыҡ тәҙрә алдына барып ултырҙы. Түбәндә, һауалағы аҡ болоттарҙы сағылдырған көҙгөләй күл өҫтөндә, күмәк кәмәләр йөҙә, берәүҙәр һыуға сума, икенселәре балыҡ ҡармаҡлап аҙаплана. Арылағы ҡомло яр буйы ярым шәрә ял итеүселәр менән тулған, йәйге селлә күптәрҙе ҡаланан

һыу буйына ҡыуалай. Офоҡҡа ҡунған ялбыр ҡояш, һары нурҙары менән күл өҫтөнә күҙ сағылдырғыс утлы «баҫма» һалған, «баҫма» был яҡ ярҙа башлана ла күл уртаһындағы утрауға барып тоташа. Һауала болоттар, күк даръяһы буйлап уҙған көндәлек сәйәхәттәрен тамамлаған аҡ караптар кеүек, бер урында туҡтап ҡалған.

Шундай хозур күренештән кәйефе күтәрелгән Әминәнең, матур кейенеп, ҡайҙалыр барғыһы килде. Шул тойғоһона бирелгән ҡыҙ, урынынан тороп, мөйөштәге ҙур көҙгө алдына барып баҫты. Көҙгөнән уға һомғол буйлы, яурындарына тулҡынланып төшкән ҡара сәсле, аҡ йөҙлө ҡыҙ баҡты. Ҡыҙҙың күҙҙәре генә, көҙгө күлдәй, һалҡын һәм һүрән... Әминә, көҙгө алдында ятҡан тарағын алғас, тағы туҡтап ҡалды. Кис еткәс, яңғыҙы ҡайҙа барырға йыйына һуң ул? Әхирәттәре янында юҡ, башына бәлә эҙләгән хыялый ҡыҙ һымаҡ, яңғыҙы сыҡһынмы ни киске ҡалаға? Оҙатып йөрөрлөк таныш егете лә юҡ бит, исмаһам, егеттәр әллә ниңә ҡарамайҙар уға, башҡа ҡыҙҙар һымаҡ, шаярашаша белмәгәс ни... Бигерәк йомоҡҡа әйләнде үҙе лә. Уның матур йөҙ-һынына әүрәп яҡынлаған егеттәр, шул һалҡынлыҡты тойоп, китеп баралар бит. Нисек кенә итеп арынырға һуң был йәнде өшөткән һыуыҡтан? Ҡасан уның күҙҙәренә яҡты нур ҡайтыр, күңеленә – йәм, тормошона тәм керер?

Шул уйҙарынан күңеле һүрелгән Әминә тағы тәҙрә алдына барып ултырҙы. Тәҙрә янындағы өҫтәлдә торған һары тирәсле фотоһүрәтте ҡулына алды. Ҡара бишмәт, ҡарҙай аҡ күлдәгенә зәңгәр галстук таҡҡан атаһы башын ҡырын тотоп, матур итеп йылмайған да алдында баҫып торған Азат улының яурынына ҡулдарын һалған. Ете йәшлек ҡустыһы Азат, ниндәйҙер мөғжизә күргәндәй, күҙҙәрен шар асып, уҡтай төҙ ҡатып тора. Әсәһенең мөләйем күҙҙәре дымлы ялтырай... Әминәнең өҫтөндә ҡыҫҡа итәкле зәңгәрһыу елбәҙәк күлдәк, ул, ҡыйынһынғандай, сәстәре матур итеп үрелгән башын түбән тотоп, ҡырынырак боролоп баҫҡан...

Әминә урта мәктәпте тамамлаған йәҙҙә төшкән фотоһүрәт был.

Ҡыҙҙың күҙҙәренә йыйылған йәш тамсылары, ташып, сикәләре буйлап аҡты, ул, башын тәҙрә тупһаһында ятҡан ҡулдарына һалып, шым ғына һыҡтап ебәрҙе. Диванда йоҡлап ятҡан бесәй өҫтөндә шымып ултырған йәшел тутыйғош, кинәт һиҫкәнеп, осоп килде лә Әминәнең ҡулдарына ҡунды, хужаһының йәшле йөҙөнә йә бер, йә икенсе күҙе менән төбәлеп сырҡылданы, шунан суҡышы менән ҡыҙҙың ирендәренән өҙөп-өҙөп «үбергә» кереште. Кескәй ҡошсоҡтоң мәрәкә ҡыланышынан күңеле яҡтырғандай булған ҡыҙ, тутыйғошто усына алып, йөҙөнә яҡынайтты.

– Әлдә һин бар әле, мине йыуатырға, – тине ул, ҡошҡа ирендәре менән ҡағылып. – Һинән башҡа, мине бер кем дә үбеп йыуатмай...

Ул да булмай, дивандағы йөнтәҫ аҡ бесәй, уянып, кирелеп-һуҙылды һәм, йәһәт кенә ҡуҙғалып, хужабикәһенең алдына менеп ҡунаҡланы. Тутыйғош бесәйҙең башына осоп ҡунды ла, һин ялҡауға ғына доңъя түңәрәк, тип орошҡандай, сырҡ-сырҡ итеп ҡолаҡтарын суҡырға кереште.

Күл артына байыған ҡояштың ҡыҙыл нурҙары бар офоҡто ялмап, алтынға мансыны, һыу өҫтөндәге нурлы баҫма, һарғайып, киңәйҙе. Алыҫтағы бөҙрә утрау, һыуҙан күтәрелгән ҙәңгәр быу артында ҡалып, тоноҡланды, уның бейек ҡаяһы, монар аша, даръялар буйлап билдәһеҙ сәйәхәткә йүнәлгән боронғо караптың елпенеп торған аҡ елкәнен хәтерләтә.

Өҫтәлдә ятҡан табылдыҡ фотоһүрәт менән хаттан киске эңер төшкән өй эсенә тоноҡ ҡына нур ағылғандай.

### 3

Өҫтәл, ултырғыс, телефон, ҡәләм, ҡағыҙ… Ошо әйберҙәр, хужаһынан ҡалмаған тоғро эт һымаҡ, гүйә, артынан ҡалмай, эйәреп йөрөй уға. Мыйыҡһыҙ йәшлегендәге токарь станогының ғына эйәргеһе килмәне, ҡулдары «кәкре» булғанғалыр. Ә былары хужалары менән бергә комсомол кабинеттарын да, партия ултырыштарын да үтте, хеҙмәт күтәрмәләре буйлап үрләне, хужалары абруйланған һайын, уларҙың да һимммәте артты: өҫтәл киңәйҙе, ултырғыс йомшарҙы, телефон, ҡәләм, ҡағыҙҙар уғата зауыҡланды. Әле килеп, уның яландай киң, оҙон өҫтәлендә был кабинетҡа керергә насип иткән ғидайларҙың йәмшек йөҙҙәре һыуҙағылай сағыла. Ҡәләме лә алтынға мансылды, телефоны ялтыраны, яҙыр ҡағыҙында абруйлы мисәт хасил булды, ҡара күн креслоһына килгәндә инде, ул хужаһыныҡынан башҡа артты белмәй. Утын ағасынан юнып эшләнгән, салыш тояҡлы беренсе ултырғысы ҡайҙа булған… Хәҙер инде бейек түшәмле кабинет хужаһының артында дәүләт әләме менән дәүләт гербы урынлашҡан, шунда – ил башының рәсеме. Иҙәндәге ялтыр паркетҡа ҡыҙыл балаҫ йәйелгән, уға баҫҡандар ғәмәлдә үҙҙәрен боҙға төшкән быҙауҙай тоялар. Бында яңғыраған һүҙҙәр ҡаты һәм ҡәтғи була, уларҙың шауҡымы бер аҙҙан бүтән ойошмаларҙа, урамда, өйҙәрҙә һәм айырым кешеләрҙең тормошонда сағылыу таба. Дөрөҫөн генә әйткәндә, тап шуларҙан ләззәт кисерә лә инде ҡала хакимиәте башлығы Василий Петрович. Әйткәндәй, бының ғәйебе бармы ни? Хакимиәт башлығы булараҡ, талапсанлыҡты һәм тоғролоҡто иң алға ҡуйырға күнеккән ул. Уның ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙәр киҫекмәҫтән бүтәндәрҙең хәрәкәт-хәстәренә әйләнергә һәм көтөлгән һөҙөмтәләр килтерергә тейеш.

Хакимиәт башлығы алтын тирәсле күҙлеген өҫтәлгә һалды ла, салбар кеҫәһенән сығарған аҡ ҡулъяулығы менән битен ҡаплап, танауы аша ҡаты һемгереп ҡуҙы. Көндәр эҫе торғанға, яман тирләтә, ә асыҡ тәҙрәләр аша кергән үткенсе һауа, тирҙе ҡатырып, тымау тейҙерә. Үткәндә эшкә ҡулъяулыҡһыҙ килгәйне. Мышҡылдап, сөскөрөп аҙапланды, эш араһында, кеше юҡта, бер-ике тапҡыр ҡаҡырып та алғайны паркет иҙәнгә. Иртәгәһен йыйыштырыусы Зоя, тағы бер күрһәм, маңҡаңды үҙеңдән ялатам, тип янаны. Зоя – уны йәш сағында малайлыҡтан сығарып, ир иткән ҡатын. Күрсәле, шул замандан алып күпме ғүмер уҙһа ла, кисә генә булған һымаҡ. Мөмкин булһа, шунда ҡалған йылға буйындағы аҡ ҡырсынлы ярға, биш минутҡа ғына, кире ҡайтып, аҫтында ятҡан һыуһылыуҙай матур ҡыҙҙың татлы ыңғырашыуын тағы ла ишетер өсөн бер ни ҡыҙғанмаҫ ине. Әле лә шул саҡтарҙан килгән ниндәйҙер шауҡым бар. Шуғалырмы ул Зояның әйткәнен ҡолағына ла элмәне, киреһенсә, уйнап ҡына, тегене тулатып, өҫтәленә йығырға ҡырсынғайны, еүеш иҙән сепрәге менән «ала» яҙҙы.

Хакимиәт башлығы урынынан торҙо ла асыҡ тәҙрә алдына килеп баҫты. Иртә әле, хеҙмәткәрҙәрҙең эш урындарына ултырыша башлаған мәлдәре. Хакимиәт бинаһы алдындағы майҙанға бер-бер артлы машиналар килеп туҡтай. Машиналарҙан сыҡҡан ир-аттың күбеһе, эш бүлмәләренә ашыҡмайынса, күтәрмә янындағы майҙансыҡта тәмәке көйрәтә, гәпләшә. Текә баҫып үткән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, билдәле, кабинеттарына кергәс, иң тәүҙә көҙгө алдына баҫып, күҙ-ҡаш төҙәтергә керешә, гүйә, эшкә түгел – матурлыҡ күргәҙмәһенә килгәндәр. Ғөмүмән, эштәге тәртип мәсьәләһенә иғтибарҙы йүнәлтеү зарур, юғиһә, ҡайһы бер әрәмтамаҡтар тиҙҙән ҡайҙа эшләгәндәрен дә онота башлар. Күпме тылҡыһаң да, һаман бер балыҡ башы. Ҡайҙа кермә, шунда әшнәлек тә

туғанлыҡ, туйға йыйылған ҡоҙа-ҡоҙасалар ултырышы тиерһең ҡала хакимиәтен. Атаһы ҡайҙа – улы шунда, әсәһе ҡайҙа – ҡыҙы шунда. Һуңғы ваҡыттарҙа мәртәбәле телдәрҙән төшмәгән «коррупция» атамалы афәттең бер сағылышы был. Дөрөҫөн әйткәндә, ышанып эш тапшырырлыҡ әҙәм дә ҡалмаған, шәт. Ул, хакимиәт башлығы булараҡ, эште бутап, ҡулды сырмаусы ошо бәлә менән хәленән килгәнсә көрәшеп тора. Әммә ҡул аҫтындағы хеҙмәткәрҙәрҙең үҙ иҫәп-хисабы, улар балаларын, туғандарын «йылы» урынға урынлаштырыуҙы ҙур сауапҡа һанай, шул сәбәптән килеп тыуған дәүләт күләмендәге көрсөктә үҙ ғәйебен күрмәй. Әшнәлек, туғанлыҡ, ғәҙәттә, яуапһыҙлыҡ тыуҙыра, хаталарға юлыҡтыра, законды боҙоуға килтерә. Үткәндә, бер ойошманы етәкләгән ҡатынҡай уның алдында, һыуҙай йәш түгеп, зарланып ултырҙы. Төрлө яҡтан ҡыҫып, ҡул аҫтыма еңел-елпе холоҡло ҡыҙ-егеттәрҙе ҡуйып бөттөләр ҙә, хәҙер килеп, эшләрлек кешем дә ҡалманы, ти. Хатта, шул эшкә ашмағандарҙы урындарынан ҡыуалай ҙа алмайым бит, тиҙ үк юғарынан яҡлаусы табалар ҙа, ҡуйған талаптарымды бар тип тә белмәй, өҫтәп, йөҙөмә ҡарап көләләр, вазифамдан бушаттырыу менән янайҙар, ти. Зат-туғанлыҡ япон самурайҙарында ла булған, тик улар ғәйеплеләрҙе, балам был, тип йәлләп тормаған, тотҡан урынында башын ҡырҡҡан. Беҙҙең ғәмәлдә ундай ҡаты саралар мөмкин түгел, әлбиттә. Шуға ла хакимиәт башлығы әмәлдарҙары араһындағы әшнәлекте йә туғанлыҡты белеп ҡалһа, уларға ҡарата булған талабын ҡырҡа арттырырға, өҫтәмә эш биреп, күҙ алдынан ебәрмәҫкә тырыша. Ләкин тиҙҙән шуға төшөндө Василий Петрович: баҡһаң, хакимиәттә был сәйәсәттән ситтә ҡалдырырлыҡ бер кеше лә юҡ, имеш.

Ул беләгендәге сәғәтенә күҙ һирпте. Ун биш минут туғыҙынсы. Әммә хакимиәт башлығы бүлмәһенең тәҙрәләре алдында тәмәке көйрәтеүсе хеҙмәткәрҙәрҙең һаны кәмемәй. Сергеев, ағалы-энеле Хәмитдиновтар, Яҡшыбаев, Бергман, Азарян, Полищук… Хәтере шәп әле уның. Киләһе премияларын яртылаш ҡырҡтырырға кәрәк. Һеҙ улай икән – мин былай.

Шул саҡ бина алдына өр-яңы ҡара «Бентли» килеп туҡтаны, унан иркен ҡара салбар, елбәҙәк һоро күлдәк кейгән Зиннур Таипович Камалов – ҡаланың юл һәм транспорт хужалығы етәксеһе сыҡты. Күрсәле, шайтан үҙе ботон һындырырҙай насар ҡала юлдарынан шундай затлы машинала ғына елдерә! Шашты Камалов, ныҡ шашты һуңғы осорҙа. Элегерәк, ошо вазифаһына тәғәйенләнгән саҡта, Камалов үҙенең тырышлығы, эшмәкәрлеге менән оҡшай ине хакимиәт башлығына. Янымда шундай кешеләр күберәк булһа, ҡайғы белмәҫ инем, тип уйлай торғайны. Тик Камалов та, күрәһең, замананың һаҫыҡ һаҙлыҡтарын урап үтә алманы, тиҙ үк мин-минлеге үҫте, исем-шәрифен сығарҙы, үҙен әшнәләр, ҡуштандар менән уратып, һуңғы арала үҙәккә лә юлын таҡырайтты – терәк-таяныс эҙләүелер. Унан, ошо кабинетты һалдырып алырға уҡтала, тиҙәр. Дәрәжәһе менән файҙаланып, байыны Камалов, ҡалала ресторанды, тиҫтәләгән магазины бар. Юҡтан бер ни ҙә бар булмай, үҙе етәкләгән ойошманың кеҫәһен ҡапшайҙыр ул. Ғәжәп хәл: ҡалала тауар етештереү юҡ тиерлек, әммә, ҡайҙа ҡарама, сауҙа итәләр. Магазиндар, ларектар, киоскылар, супермаркеттар, баҙарҙар, бутиктар, ресторан-барҙар, ял йорттары, мунса-сауналар… Ҡаланың һәр мөйөшөндә, тишегендә тиерлек алыш-һатыш бара. Тауары тауармы әле, иҙән сепрәгенә лә ярамаған ҡытай кейем-һалымы ла башҡа сит илдәрҙән керетелгән арзанлы ваҡ-төйәк. Сөнки арыу тауарға халыҡтың аҡсаһы юҡ. Ҡаланы эшһеҙлек, бөлгөнлөк баҫты. Әүәле көнө-төнө геүләп торған завод-фабрикаларҙы, гүйә, дошман туптары утҡа тотҡанмы ни,

уларҙы тергеҙер өсөн баш етмәҫ һандағы аҡса кәрәк. Үҙгәртеп ҡороу башланғандан һуң күпме йылдар уҙҙы, ләкин шул арала ҡалала бер фабрика ла төҙөлмәне, киреһенсә, булғандары ҡыйралып бөттө. Уның ҡарауы, һәр кабинетта – евроремонт. Ситкә аҡҡан нефть, газ, урман һәм башҡа сеймал килемен ҡулланып, ошо фабрика-заводтарҙы яңы технологиялар нигеҙендә тергеҙеп булмаймы ни? Тик бының өсөн эшмәкәр, отҡор, ғәҙел кешеләр кәрәк шул. Буйраҡ һыуҙа ғына балыҡ тоторға күнеккән үҙебеҙҙең «елле эшҡыуарҙар» мөлкәттәрен сит ил банкыларында тотоуҙы яҡшы күрә. Урландыҡ аҡсаларын ил иҡтисадына һалырға шөрләй улар: беренсенән, эшләй белмәйҙәр, икенсенән, мөлкәттәренән ҡолаҡ ҡағыуҙары ла бар – илдә бурҙарҙың яңы быуыны үҫеп еткән инде. Сик ҡуйылырмы икән берәй саҡ уларҙың шиғәленә? Ул ҡараҡтарҙан күргән зыян ҡорал тотоп, илде тапаған дошмандарҙың талауынан ҡайтыш түгелдер. Өйөңдә иҫәр булһа, дошманыңдың күңеле үҫәр, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Боронғо заманда ҡайһы бер батшалар, илен баҫҡан дошмандарға ҡаршы сара итеп, «яндырылған ер» ысулын ҡулланғандар, йәғни сигенгән саҡта, арттарында эсер һыу, ашар аш, ятырлыҡ ер ҡалдырмай, үҙ ерен ҡыйратыр булғандар. Бөгөнгө хәлдәр шуға оҡшап бара түгелме? Әй, нәфселәре ҡыҙып, был яҡҡа йүнәлгән сит ил капиталистары, беҙҙең илдәге әлеге мәхшәрҙе күрәләр ҙә, ытырғанып, кире боролалар – улар өсөн яраҡлы шарттар тыуҙырылмаған бында, йәнәһе. Дөрөҫө шул инде. Дәүләттең шәхси эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә йүнәлтелгән сәйәсәте лә эшҡыуарҙарҙың ваҡ-төйәк сауҙа асыуына ғына ҡайтып ҡала, тауар етештереүсе эшҡыуарлыҡҡа кешеләрҙең хәле етмәй. Дәүләт ситкә сеймал һатыуҙан килгән төшөмдөң күпмелер өлөшөн эш хаҡтары, пенсиялар, бүтән түләүҙәр рәүешендә халыҡҡа тарата, халыҡ шул аҡсаға магазиндарҙан сит ил әйберҙәре һатып ала, эшҡыуарҙар шул төшөмгә тағы ла сит илдән тауар керетә. Иҡтисадмы инде шул? Ҡайҙа ҡарама – торғонлоҡ, көрсөк…Тауар етештереүҙе яйлау күп аҡса талап итә, уның мәшәҡәте лә сикһеҙ, килеме лә тиҙ булмай. Шуға ҡарамаҫтан, ул – иҡтисад нигеҙе. Етештереүен юғалтҡан ил – иҡтисадын юғалта, хәлһеҙләнә, баш әйеп, теләнселәй башлай, уны, ауната һуғып, таларға, тапарға ғына ҡала. Шуға бара түгелме? Юҡ, сит илдәрҙән яҡшылыҡ көтөргә ярамай, улар яраланып ҡанһыраған айыуҙың йығылғанын көткән бүре өйөрө һымаҡ. Тағы ла егерметыҙ йыл әлегеләй дауам итһә… Си ля ви!

Василий Петрович, ауыр уйҙарынан арынырға теләгәндәй, салланған шырт сәстәрен усы менән һыпырҙы ла, аҡ күлдәгенең өҫкө төймәһен ысҡындырып, галстугын бушатты. Ғөмүмән, бер уны ғына шундай уйҙар борсоймы ни? Бар сәбәп – ил биләмәләренең сикһеҙ ҙурлығында. Ул халыҡты, иҡтисадты тарҡау итә. Шул тарҡаулыҡтан тыуа ла инде торғонлоҡ. Шуға ла торғонлоҡ Рәсәйҙең тәбиғи хәлелер, бәлки, кем тарихты төплө белә, шуны аңларға тейеш.

Ул өҫтәле артына ултырып, танауына ҡыйыш эленгән күҙлеге аша ҡағыҙҙарын барланы, башҡарырға тейеш эштәрен аныҡланы. Һуңынан, үрелеп, телефонды алды.

– Алло, – тинеләр теге оста ҡаты ғына. Күрәһең, ҡаланың милиция бүлеге етәксеһе полковник Козлов таң менән кемгәлер аҡырып-екереп тә өлгөргән.

– Мин был, – алдында ятҡан белешмәнән күҙҙәрен алмаған Василий Петрович исем-шәрифен әйтеүҙе кәрәк тапманы, тауышынан таныйҙар уны.

Козлов ҡапылдан бер мәлгә шымып ҡалды. Хакимиәт башлығының таң тишегенән шылтыратыуы яҡшылыҡ вәғәҙә итмәй.

– Тыңлайым һеҙҙе, Василий Петрович, һаумыһығыҙ, – тине ул, ниһайәт.

– Ҡалала хәлдәр нисек?

– Ҡәҙимгесә. Уҙған тәүлектә ғәҙәттән тыш ауыр енәйәттәр теркәлмәне, көндәгесә ваҡ-төйәк кенә, Василий Петрович.

Ҡәҙимгесә ваҡ-төйәк, имеш. Әлбиттә, туҡтауһыҙ ҡабатланып торған ғаилә шау-шыуҙары, эреле-ваҡлы бурлыҡтар, урамда тәртип боҙоуҙар, эскелек – милиция өсөн ғәҙәти күренеш инде. Милиция, яҡшы иҙән сепрәге һымаҡ, ул йәмғиәттең әшәкелектәрен һөртөп алып ҡына тора, шуға ла күптәр, үҙҙәре дусар булмайынса, шул бысраҡты күрмәйҙәр ҙә, белмәйҙәр ҙә.

– Көндәр эҫе тора, бар халыҡ күл буйында. Унда эскелек, тәртип боҙоуҙар күп. Шул хәлде күҙ уңынан ысҡындырма.

– Аңлайым, Василий Петрович. Күлдә тәүлек әйләнәһендә ике милиция төркөмө эшләй, хәлде сәғәт һайын хәбәр итеп торалар.

– Тағы ла, – хакимиәт башлығы ҡәләмен алып, алдындағы ҡағыҙ битенә ниҙер яҙа башланы. – Һинең урыныңда булһам, Камаловтың кеҫәһен ҡапшап ҡарар инем. Зиннур Таипович Камаловты, ҡаланың юл һәм транспорт хужалығы етәксеһен, беләһеңдер бит? Ҡаланың ватыҡ юлдарын бөтөнләй күрмәй башланы, елдереп кенә уҙа ла китә, йөрөгән машинаһы ла беҙҙең арбаларҙан түгел, торғаны бер хазина! Үҙе етәкләгән хужалыҡтың ҡаҙнаһына ҡулын тығалыр, тим. Нисек уйлайһың?

Полковник Козлов күпмелер ваҡыт өн-тын сығарманы, ишеткәнен мейеһенә һеңдерергә маташыуы булды, ахыры. Милиция етәксеһе ауһар түгел, хакимиәт башлығының был хәбәренең Камаловты ҡалалағы мәртәбәле кешеләр рәтенән һыҙып ташлау менән бер икәнде аңлай, әлбиттә.

– Баш өҫтө, Василий Петрович, – тине Козлов, ниһайәттән, гүйә, бирелгән һорауға яуап бирергә кәрәк икәнде иҫенә алып. – Һеҙҙең доғалар барҙа, беҙгә бер ни ҡурҡыныс түгел. Тик шуны асыҡлауығыҙҙы һорайым: ҡурҡытып ҡына сикләнергәме, әллә ысынлап батырырғамы?

– Батырырға, – тине хакимиәт башлығы, баҫым менән. – Кәрәгенсә, төпсөп, тикшереп, законлы рәүештә хәл ҡылыу зарур. Эш барышында Камалов хаҡында тапҡан-белгәнегеҙҙе, рәхим итеп, миңә еткереп торорғоҙ.

Василий Петрович телефонды ҡуйҙы ла, башын креслоһының бейек арҡаһына һалып, күҙҙәрен йомдо. Уның был креслола тағы ла бер нисә йыл ултырырға иҫәбе бар әле. Әйткәндәй, был урын өсөн уның менән низағлашырға Камаловтың кикереге лә сыҡмаған. Унан «былайыраҡтар»ы ла етәрлек… Тик түтәлгә төшөп тамыр ебәрергә маташҡан билсәнде ваҡытында өҙөп ташлау фарыз. Коррупцияға ҡаршы көрәш һөҙөмтәләрен дә күрһәтеү кәрәк бит. Камалов уның шул йәһәттәге мәрәйе буласаҡ. Бер аҙға ғына булһа ла халыҡтың да бүрткән ҡон-ҡоһоро ҡанып торор. Си ля ви, тиҙәр французлар. Тормош шулай, йәғни…

## 4

Кисләтеп магазиндан бер ярты араҡы алдым да Олег янына керҙем. Көн буйы, тын алғыһыҙ эҫелә урам тапап, подъездарға менә-төшә тәкәтем ҡороғайны. Күлдәк-ыштаным ҡатҡан тиргә ҡайышланып, тәнемде сейләндерә башланы хатта. Олегтың фатирында ҡойоноп сығырмын, исмаһам, юғиһә, мин йәшәгән ятаҡтағы утыҙ бүлмәгә һыуыҡ һыулы бер кран ғына бар, ванна йә душ тигән нәмәләр унда йәшәгәндәрҙең зауыҡлы хыялы ғына.

Олег ғәҙәттәге биш ҡатлы йорттоң икенсе ҡатындағы бер бүлмәле фатирҙа тора. Әүәле ул шул уҡ йорттоң бишенсе ҡатында, ата-әсәһенән ҡалған ике

бүлмәле фатирҙа, тора ине. Имгәнеп, аяҡтан ҡалғас, урамға сығып йөрөргә биҙ тип, фатирын алмашырға мәжбүр булды. Үҙ һүҙле, һынсыл күҙле дуҫым нисек булһа ла үҙ яйын үҙе күрергә тырыша, ярҙамға мохтаж булып, бәләһен һалып ултырғаны юҡ. Шуға ла бергәләшеп подъезд һикәлтәләренә, ғәрип арбаһы тәгәрмәстәренә яраҡлы итеп, юлаҡтар һалып бирҙек.

Ишеген биктә тотмай Олег. Генка Шприц шуға ла ҡаршылыҡһыҙ керә алғандыр инде уның фатирына.

Кереү менән, дуҫымдың кәйеф-хәлен белергә тырышып, уның күҙҙәренә текләнем. Бер аҙ йонсоу күренә, бөгөн урамға сыҡмағандыр, ахыры.

– Генка Шприцтың «күстәнәстәре»н сүплеккә сығарып ташланым, – тине ул, һүрән генә йылмайып. – Урамдан керергә лә өлгөрмәнем, бомждар араһында шулар өсөн ыҙғыш ҡупты.

Олег тығынлыҡты яратмай, фатирында бәрелеп-һуғылырлыҡ артыҡ әйбер ҙә, йыһаз да юҡ. Иллә-мәгәр компьютерҙа «соҡсонорға» оҫтарып алған ул. Шуға ла, беҙ, эш барышында үҙебеҙ аңлап етмәгән сетерекле һорауҙарға яуап эҙләп йыш ҡына Олегҡа мөрәжәғәт итергә мәжбүрбеҙ. Милицияның эш асылы хәбәрҙарлыҡтан тора бит. Хәбәр-хәтерҙе, беренсенән, таба, туплай белергә кәрәк, икенсенән, шуларҙың сүбен ебенән айырып, төплө һығымтаға килә белеү мотлаҡ. Шул ваҡытта, башыңда майың етеңкерәмәһә, яҙа юлға төшөп, «аҙашып» китеүе еп-еңел. Шуға ла алған хәбәрҙе баштан уҡ төрлө яҡлап тикшереү зарур. Әммә һәр кемдең үҙ ҡылығы бит. Бәғзеләр, хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрен баштан уҡ ауларға һанап, барын-юғын бутап, күҙ ҙә йоммай фәстерә башлай. Һуңынан, теленән тотолғас, үҙҙәре бахыр хәленә ҡалып, кәмһенәләр ҙә йомолалар – баҡһаң, уның үҙенән башҡа ахмаҡтар юҡ икән дә баһа бында, баштан уҡ үтә күреп, мыйыҡ аҫтынан ғына көлөп ултырғандар, имеш… Әлбиттә, күптәр шул хәлде күтәрә алмай, милицияға, кеҫә эсенән генә, йоҙроҡтарын төйнәп сығалар ҙа һуңынан, кенә тотоп, ярҙам итеүҙән баш тарталар, хатта хәлдәренән килгәндә аҫтыртын ғына аяҡ салалар, милиция тураһында ҡолаҡҡа яҡмаған ғәйбәт тараталар.

Бынан биш йыл элгәре, Олег туҡмалып имгәнгәнгә тиклем, бергә эшләй инек. Беҙҙең ҡарамаҡҡа беркетелгән ҡала биләмәләре йәнәш ине, шуға ла беҙ шунда ҡылынған төрлө енәйәттәрҙе бергә юллатырға күнектек. Иптәшләшеп, бергә йөрөүгә етмәй инде, эш барышында ҡайҙа ғына барып юлыҡмайһың да ниндәй генә сетерекле хәлгә тарымайһың… Хатта, таныш-белешең дә йыйын әтрәгәләм бит, араларында бер йүнле әҙәм булһа икән. Дөрөҫөн генә әйткәндә, эшебеҙ ҡатышмағас, һимматле инсандарҙы белгән дә, улар менән аралашҡан да юҡ, шуға ла, бәлки, улар ҙа беҙҙәнситләшә, хатта бер аҙ ерәнә лә торғандыр. Хәүеф тыуһа – артыңа йәшенәләр, хәүеф уҙһа – арҡаңа төкөрәләр, ҡыҫҡаһы… Бик тә сос, үткер хеҙмәткәр ине Олег. Үҙе ҡарамағындағы биләмәләрҙә йәшәгән күпселек әҙәмдәрҙең исем-шәрифен иҫләр ине, ә инде шунда көн иткән йә килеп-китеп йөрөгән бурҙарҙың тын алышын, енәйәтсел һөнәр-аҙабын, ғөрөф-ғәҙәтен усында күргәндәй итеп белде. Шуғалырмы, ҡайһы берҙә, үҙе ҡарамағындағы биләмәлә ҡылынған енәйәттәрҙе эш бүлмәһенән дә сыҡмай асып, уғрыны фашлай торғайны ул. Енәйәт тураһындағы хәбәр теркәлгәс, ул бер ҡасан да урынынан ырғып тороп, урамға йүгермәне, киреһенсә, зәңгәр күҙҙәрен тәмәке төтөнө артына йәшереп, өҫтәле артында бер ни тиклем шымып ултыра ла бер-бер артлы телефондан шылтырата башлай, кемдәрҙер менән ашыҡмай ғына төпсөнөп һөйләшә, шул саҡта эргәһендә тапанған иптәштәрен күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә. Һуңынан телефонды

һалып, күпмелер ваҡыт тәмәкеһен бырлата биргәс, «шуның ғына буғы был, башҡа бер кемдеке лә түгел» тигән һығымтаһын әйтеп ишеттерә. Күп осраҡта уның фаразы хаҡҡа сыға ине, енәйәт урынына барып, кәрәкле ҡағыҙҙарҙы яҙырға, ғәйеплене табып, тоторға ғына ҡала.

Шулай һәүетемсә генә эшләп йөрөгәндә, ҡалала Геннадий Самуилович Шприц исемле эшҡыуар хасил булды. Юҡ, килмешәктәрҙән түгел ине ул, ошо ҡалала тыуып үҫкән егет. Һөнәре менән ашнаҡсы. Быға ҡәҙәре хоҡуҡ боҙоп тотолғаны, хибесхана ҡылынғаны булмаған. Ләкин, әүәлге үҙгәртеп ҡороуҙар, тора-бара, халыҡ мөлкәтен талауға ҡалғас, ил талап та ир булыу мөмкинлектәре хаҡындағы күп миҫалдар был егеткәйҙең күңелендә быға ҡәҙәре боҫоп ятҡан йыланды уятҡандыр. Ҡайһы бер халыҡтар алтынға табыныуҙы, изге дуҫлыҡты тәңкәгә һатыуҙы диндәрендә лә сағылдырған бит. Геннадий Самуилович Шприц та, ялтыр башлы, күсәктәй егеттәрҙе янына йыйып, шиғәл юлынан китте бер заман. Төрмә ихатаһына ҡат-ҡат кереп тапарға күнеккән әҙәм аҡтыҡтарына хужа булырға уҫаллығы ла, мәкере лә еткән кеше тиҙ арала үҙе ише ҡараҡтар араһында үҫеп, ныҡынырға ла өлгөрҙө. Әлбиттә, беҙ уның ҡылыҡтарынан ҡыҙыҡ табып, ҡул ҡаушарып тик ятманыҡ. Бер нисә тапҡыр, йылғыр кеҫәртке һымаҡ, баҫҡан ерҙән ҡойроғон өҙөп, ҡотолоп ҡалды ул. Генка Шприц бер ҡасан да үҙ ҡулы менән яҙыҡ эш эшләмәне, сөнки уйлағанын тормошҡа ашырыр әҙәми заттарҙы йүнәлтерлек ихтыяры ла, аҡылы ла етәрлек уның. Олег ҡарамағындағы биләмәлә кафе-бар асты ул бер ваҡыт. Тиҙҙән беҙҙең ҡолаҡҡа Генканың наркотиктар менән «шаярыуы» хаҡында хәбәр керҙе. Беҙ уның артынан төштөк. Наркотиктар менән һатыу итеүҙе дәлилләү иң мәшәҡәтле, алама эштер. Шуға ҡарамаҫтан, Олег, күпмелер ваҡыт үтеүгә, Генка Шприцтың «ҡойроғона баҫып», енәйәтсел кәсебенең инепсығыр юлын асты. Теге аңғармаҫ борон өҫтөнә ау ташларға йәтеш мәлде көтөргә генә ҡалды. Тап шул саҡта Олег ғәйеп булды. Бар бүлек менән ҡаланы тетеп эҙләнеүҙәребеҙгә ике тәүлек тигәндә, машиналар бер туҡтауһыҙ геүләп торған юл уртаһындағы канализация ҡоҙоғонан сыҡҡан сәйер ауаз мине туҡтатты. Төн ине. Кемдәрҙер тарафынан йыртҡыстарса ҡыйналған Олегты шул ҡоҙоҡ төбөнән таптыҡ. Иҫен юйған дуҫым усында төймә... Төймәгә аса телле йылан башы төшөрөлгән. Шул мәлдән алып минең өсөн ғәҙәттәге тәүлекте бүлгән көн һәм төн тигән төшөнсәләр юҡҡа сыҡты. Элгәре былдай төймәләрҙе, Генка Шприцтың кафеһен һаҡлаған армайҙарҙың ҡыҙыл бишмәттәрендә шәйләгәйнем. Дүртәүһен дә өҫтөрәкләп милицияға килтерҙек тә, дөмбәҫләй-бәргеләй, «яра» башланыҡ. Тик тегеләрҙең өсәүһен тел менән генә арбап теҙләндерермен тимә, төрмәне бер нисә ҡат үтеп сыҡҡан хәшәрәттәр улар. Беҙҙең эш түгел, ул көндә беҙ ҡаланан ситтә, күл буйында, яттыҡ, тип ғәйептәрен тандылар, күҙгә ҡарап. Өҫтәүенә, үҙҙәрен аҡлау йәһәтенән, өс ҡыҙға күрһәттеләр, йәнәһе, күл буйында бергә булғандар. Ҡыҙҙар ҙа, тегеләрҙең һүҙҙәрен раҫлап, шыйғалаҡ шамбылай ҡыланды. Тик ундай лаҡап менән генә минең күҙҙәрҙе буяуы ауыр. Иллә-мәгәр шул ҡыҙҙар арҡаһында һемәйҙеләр ҙә инде үҙҙәре. Сөнки ҡыҙҙарҙың күрәләтә алдашыуҙарын бер ҡарауҙа һиҙеп ҡалдым мин. Оҫта итеп алдашыр өсөн аҡыллы баш кәрәк бит, ә быларҙың ни аҡылы, ашап-эсергә ялтыр арттарын биреп тапҡан уйнаштар бит улар, әлеге шул Генка Шприцтың барында сыуалалар. Юҫыҡ-юлымдың дөрөҫлөгөнә инанып, ҡыҙҙарҙы ҡыҫымға алғайным да, фәтеүә булманы, ҡыҙыйҙар, баштарын баҫып, ауыҙҙарынан һүҙ сығармай йомолдолар. Белгәнебеҙҙе әйттек, йәнәһе. Билдәле, ялған аңлатма биреүҙәрен талап итеп, уларға

тәүҙә кәрәгенсә түләгәндәр ҙә, артынан өҫтәп, ыштандарын еүешләгәнсе ҡурҡытҡандар. Шулай итеп, барған юлым һаҙға сыҡты тигәндә, Генка Шприцтың дүртенсе армайына күҙем эләкте. Тәү ҡарауға көр генә күренеп, иптәштәре һымаҡ үҙен алама ғына тоторға тырышҡан егеткәйҙең әлегә ҡәҙәре хоҡуҡи даирәләрҙә яманаты ла сыҡмаған, милиция менән «һөҙөшкәне» лә булмаған. Ҡыҙыл бишмәтенең төймәләре теүәл, тик иң аҫтағыһы ғына башҡаларға ҡарағанда яҡтыраҡ йылтырағандай. Шуға йәбештем. Әлбиттә, ул да башта иптәштәре менән бергә «өйрәнгән йыр»ын һуҙҙы. Аяҡ өҫтө йөрөп, йоҡоһоҙ уҙғарған төндәрҙән башым тубалдай булғайны. Ғәҙәттәгесә кисләтеп ҡайтырға сығыр алдына, һаҡ аҫтына алынған егеткәй янына ғүмерҙәре төрмәлә уҙып, миһырбанлыҡтарын тамам юғалтҡан ике әҙәм аҡтығын керетеп бикләнем. Уның ҡарауы, таң атыуға теге меҫкенкәйҙең был донъяға булған ҡарашы бик ныҡ үҙгәреп, ярайһы уҡ ыңғай йүнәлеш алғанлығы асыҡланды. Күргәнбелгәнен йәшерен-батырынһыҙ ғына һөйләп бирһә, хөкөмгә ҡәҙәре ирektә ҡалдырыласағын, хөкөм аҙағында ла, беҙҙең ярҙам менән, шартлы ғына язаға тарттырыласағын әйткәс, егетебеҙҙең теле тамам асылып китте, ул бик төплө аңлатмалар бирә башланы. Олегты туҡмарға Генка Шприц ҡушҡан уларға. Наркотиктар менән һатыу итеүен белеп эҙенә төшкән Олеггтан башҡа сара менән ҡотола алмаҫын белгән ул. Әлеге ваҡытта Генка Шприцтың кафеһында бер тоҡсай героин йәшереүле ята, тик урыны билдәһеҙ, сөнки кафеның йәшенмәк тишек-тошоғо бихисап.

Дуҫымды ҡыйнаған ҡәбәхәттәрҙе табырға икмәк тотоп ант иткәйнем инде. Ығы-зығылы көндәр йоҡоһоҙ төндәр менән бергә ҡушылып, аң-тойғоларымды һоро эҙергә мансыһалар ҙа, зиһенем, ни ғилләнәндер, уғата үткер ине, мин тирә-яҡтағы һәр өндө ишетәм, һәр хәрәкәтте күрәм, ҡайһы саҡта үҙемде лә ситтән генә шәйләп ҡалғандай булам хатта. Милицияның көндәлек эшен кәрәкле юлға йүнәлтеп, уның ысул-әмәлдәрен сикләп торған ҡәҙимге хоҡуҡи саралар ҙа, әхлаҡи ҡанундар ҙа минең өсөн кәртә түгел ине инде. Иң мөһиме – Генка Шприцты табып, рәшәткә артына тығырға йә башына етергә, ә унда инде эшемдән ҡыуһалар ҙа, ултыртһалар ҙа ризамын. Ә Генка, артынан килгән аусынан ҡасҡан бүреләй, боҫорға маташты. Юҡ, ул милициянан ҡурҡып ҡасмай ине, сөнки, үҙен тотоп килтергән хәлдә лә, уны енәйәт ҡылыуҙа ғәйепләргә дәлилдәр етмәгәнгә күрә, күп тигәндә өс сәғәттән һуң кире сығарып ебәрәсәктәрен белә. Ул минән шөрләй ине. Ике тәүлек буйы эҙәрләнем тегене. Танышының ҡала ситендәге баҡса йортонда йәшенеп ятҡан мәлендә барып баҫтым. Электрошокер менән шаңҡыттым да ултырғысҡа ҡуша сүс еп менән сырматтым. Генканың иҫ алғанын көтөп ултырғанда үҙемдең күҙҙәрем йомолоп, серемгә киткәнмен хатта, йонсоуым еңгәндер инде. Уянып китһәм, эңер төшкән, иҙәндә бәйҙән арынырға маташып, ауыҙына сепрәк тығылған Генка Шприц, өкөләй күҙҙәрен алартып, мыш-мыш тулап ята. Генка менән тел сарлап, бушҡа һүҙ сарыфлауҙың мәғәнәһеҙлеген аңлағайным инде. Уның оятһыҙ күҙҙәренә ҡарап, дуҫыңды мин туҡматтым шул, тип ғәфү һорағанын көтөргә аҡылдан яҙмағанмын әле. Әлеге мәлдә шундай аңлатма биргән хәлдә лә, һуңынан, хөкөм барышында, мине милицияла ҡыйнап, юҡ ғәйебемде танырға мәжбүр иттеләр, тиәсәк. Шуны алдан күреп, уға ҡарата әҙерләгән әмәлем күп һүҙ талап итмәй ине. Башта үҙем менән килтергән табылдыҡ алтатарҙың дүрт яһауын алып, өҫтәлгә һалдым да бишенсеһен Генка Шприцтың аяҡ аҫтына төбәп аттым – уйнай был, тип уйламаһын. Һуңынан, алтатарҙа ҡалған алтынсы яһауҙы тегеңә күрһәттем.

– Хәҙер һин, минең алда, урыҫ рулеткаһы уйнаясаҡһың, – тинем вайымһыҙ ғына. – Уйындың ҡағиҙәләре бик ябай. Мин һиңә һорау ҡуям – һин яуаплайһың. Яуапҡа ун биш секунд ваҡыт бирелә. Яуаптан баш тартҡан йәки алдашҡан хәлдә, мин ошо алтатар барабанын арҡандан тәгәрәтәм дә, көбәген башыңа терәп, тәтегә баҫам. Аңланыңмы? Уйынды башлайбыҙ. Иғтибар менән тыңла: бер тоҡсай героин кафеңдың ниндәй еренә йәшерелгән? – Беләгемдәге сәғәтемде сисеп, Генканың алдына, өҫтәлгә, һалдым да тегенең ауыҙындағы сепрәкте тартып алдым. – Ваҡыт китте…

Генка Шприц, ауға эләккән суртандай, ыржайған тешле ауыҙын аса-яба ултырғандан һуң:

– Хаҡың юҡ! – тип ҡарлыҡҡан тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе лә, тыпырсынып, ултырғысы менән иҙәнгә ҡоланы. – Законды боҙорға хаҡың юҡ, мент! Һин тик закон буйынса эш итергә тейешһең! Әлеге мәлдә һин минең хоҡуҡтарымды боҙаһың! Яуапҡа тарттырасаҡмын үҙеңде, башыңды төрмәлә серетәсәкмен!

Ашыҡмай ғына тегене кире торғоҙоп ултырттым.

– Беренсенән, әлеге мәлдә һиңә үҙ башыңды ҡайғыртыу фарыз, – тип алтатарға ымланым да өҫтәлдә ятҡан сәғәткә күҙ һирптем. – Икенсенән, ҡағиҙәләр буйынса, яуап бирер өсөн тәғәйенләнгән ваҡыт уҙҙы…

Алтатарҙың барабанын, алда әйтелгәнсә, Генка Шприцтың арҡа һыртынан тәгәрәтеп, көбәген һул сикәһенә терәнем дә (Генка һулаҡай бит) тәтегә баҫтым. Тәҙрәләр аша эсенә ҡыҙыл эңер төшкән өй, гүйә, алтатарҙың уҫал шыҡылдауына һиҫкәнеп ҡуйҙы. Генка Шприцтың йөҙө ҡағыҙҙай ағарҙы, маңлайына тир бәреп сыҡты, ул аҡайған күҙҙәрен миңә төбәп, бәйе менән тағы тартҡылашып алды.

– Әшәке мент… – тип быулыҡты ул,– иҫеңә кил, нишләйһең һин?! Мине үлтерһәң, ҡалған ғүмерең төрмәлә уҙасаҡ…

– Яңылышаһың. Бында беҙҙән башҡа кеше юҡ. Мейең сәсрәгәс, ошо алтатарҙы ҡулыңа йомдорам да, вәссәләм. Ҡылған енәйәттәренән намыҫы уянып, үҙ башына үҙе еткән, бахыр, тиерҙәр. Һорауҙы ҡабатлайым: бер тоҡсай героинды ҡайҙа йәшерҙең?

Ҡыҫҡаһы, алтатарҙың көбәген Генканың сикәһенә терәп, тәтеһенә дүрт мәртәбә баҫылды. Улай ҙа ғүмере бөтмәгән, имеш, йыландың. Алтатар икенсе тапҡыр сикәһе янында шыҡылдағас, Генка аҫтын һыуланы. Өсөнсөнән һуң ул, ауыҙынан күбектәр сығарып, иҫен юйҙы, өҫтөнә һыуыҡ һыу түгеп, уятырға тура килде. Шуғалырмы, ул дүртенсе һынауҙы һиҙмәй ҙә ҡалды шикелле, иҫерек кешеләй аңшайып ултыра бирҙе. Әммә алтатар көбәген сикәһенә бишенсе ҡабат терәгәс, Генка Шприц, аҡылдан яҙғандай, үкереп илап ебәрҙе лә, ҡаҡырығына сәсәп, ҡалтыранып, тотлоға-быулыға, йәшенмәк героин ятҡан урынды һүрәтләп бирҙе. Ул шунан һуң аҡтарып ҡоҫоп, салбарын буяны, шайығы йәбешкән ауыҙ-моронон һөртөргә лә онотоп, кинәт кенә шиңде, уның еүеш күҙҙәре төпкә батып, ҡарашында һүҙ менән аңлатып биргеһеҙ шомлоҡ хасил булды. Шул мәлдә уның ҡиәфәте мал аяғы аҫтына ҡалып, иҙә тапалған үлән ҡыяғын хәтерләтә ине. Уға ҡарап, үҙемде, гүйә, кемделер үлтергән кеүек итеп тойҙом. Тик янда мәйет кенә юҡ.

Кеҫә телефонымдан шылтыратып, иптәштәремде Генканың барына ебәрҙем. Күпмелер ваҡыт уҙғас, наркотиктарҙың табылыуы хаҡында хәбәр килде.

Мин Генканы шулай итеп биш йылға төрмә рәшәткәһе артына тыҡтым. Ләкин хөкөм барышында уны наркотиктар һаҡлағаны өсөн генә язаға

тарттырҙылар. Тәфтишселәр Генка Шприцтың Олегты ҡыйнауҙа булған ғәйебен дәлилләй алманы, сөнки хөкөмгә тиклем иректә ҡалдырылған теге сибәр егеткәй тикшереү барышында биргән аңлатмаларын хөкөм ултырышында ныҒыта алманы. Ул, ни ғилләменәндер, күлдә батып үлгәйне. Һыу кергәндә балыҡсылар ҡуйған ауға сырмалған, тинеләр…

Йыуынып сыҡҡандан һуң араҡы йомдорғас, тәнем йомшарып, күңелем иреп китте. Ҡаршымда ултырған Олег, һары мыйығы аҫтынан көлөмһөрәп, мине күҙәтә. Эңер төшөп, көндөҙгө эҫе баҫылғас, асыҡ тәҙрә аша аҡҡан һалҡынса ипкен тәнемде, ҡыҙҙар ҡулы һымаҡ, наҙлап иркәләй.

Олег ишек башына беркетелгән турник янына барҙы ла, кинәт кенә ҡуҙғалып, ҡулдарында тартылды һәм аяғөҫтө баҫты. Мин, уға ҡарап, ҡапҡан икмәгемде лә йоторға оноттом. Олег ҡулдарын ебәрҙе лә аяғөҫтө ҡатып ҡалды. Фатирҙа тынлыҡ урынлашты. Стеналағы сәғәт вайымһыҙ текелдәй, күҙҙәрен шар асҡан Олег, һыҙланыуҙан йөҙөн йыртып, ишек араһында баҫып тора, мин, урынымдан ҡуҙғалырға ҡурҡып, өкө һымаҡ таҫырайып ултырам.

Ултырғысты дөбөр-шатыр аунатып, тәү тапҡыр тәпәй баҫҡан бала һымаҡ, аҡрын ғына йығылып барған Олег янына һикерҙем дә, уны яурынынан ҡосоп, коляскаһына ултырттым.

– Биш йыл буйы үтәгән күнекмәләремдең һөҙөмтәһе был, – тине Олег, һыҙланыуы аша йылмайырға тырышып. – Тағы биш йылдан, бәлки, беренсе аҙым да яһармын…

– Олег, дуҫҡайым… – Ҡапҡаным тамағыма төйөлөп, сәсәй башланым.– һин… Һин шундай маладис… былай булғас, тиҙҙән атлап китәсәкһең, мин әйтте тиерһең!

– Ауыҙыңа бал да май,– тип көлдө дуҫым йәш аша. – Бар хыялым, ынтылышым шунда минең, – тип өҫтәне ул, уфтанып. – Тәҙрә аша ҡарап ултырғанда атлап барған кешеләргә көнләшәм. Осорға түгел, беләһеңме, әҙәмсә генә атларға хыялланам. Үҙ аяғыңда йөрөүҙең оло бәхет икәнлеген минең ише ғәриптәр генә беләләр.

Олегтың, аяғына баҫырға тырышып, алһыҙ-ялһыҙ төрлө күнекмәләр менән шөғөлләнгәнен белә инем дә, әммә, әлегә ҡәҙәре, быны өмөтһөҙгә һанап, уңыштар көтмәй инем. Шуға ла был мажара мине көтөлмәгән мөғжизәләй таң ҡалдырып, күңелемде үҫтерҙе. Кисерештәремә хужа була алмай, дуҫымды ҡосаҡлап уҡ алдым.

– Дуҫҡайым, ышан миңә, күп тә үтмәҫ, беҙ, бер-беребеҙҙе уҙышып, ҡыҙҙар баҫтырырбыҙ әле!

– Ҡыҙҙар тигәндән, ниңә үҙең һаман өйләнмәйһең?

– Әллә тағы? Кәләште дөйөм ятаҡҡа алып ҡайтайыммы ни? Әйткәндәй, кәләш тиеп ҡәҙерләрлек ҡыҙ ҙа юҡ бит әле…

– Һайланаһыңдыр…

– Һайларлығы булһа – бер хәл. Үтә сибәрҙәренең аҡылы ла һай, тәртибе лә түбән. Аҡылы булғандары баштан уҡ кеҫәне һәрмәй башлай. Йәмһеҙҙәргә күңел ятмай…Өйләнергә форсат юҡ, ҡыҫҡаһы, – тип үҙем дә һиҙмәҫтән уфтандым да стаканға араҡы ҡойҙом.

– Ә һин уртансыларҙан һайла, – тине Олег етди генә. – Ундайҙар тормош көтөргә лә мас була.

– Кәләш һайлағанда уртансылар булмайҙыр шул…

Мин иҫерҙем. Олег, өҫтәл артында яңғыҙымды ҡалдырып, компьютерына китте. Айыҡ кешегә иҫерек менән бергә ултырыуҙан ни йәм? Шул саҡта, ни

ғилләә менәндер, араҡы томаны баҫҡан хәтеремдә зәңгәр күлдәк кейгән сауҡалай һынлы ҡыҙ хасил булды. Ҡарҙай йөҙөндә күлдәй ҙур, еүеш күҙҙәр… Ҡайҙа күрҙем һуң әле шул күҙҙәрҙе? Эшең төрлө кешеләр менән осрашыу, күрешеү, һөйләшеүҙән ғибәрәт булғас, күптәрҙең йөҙ-һыны ғына хәтерҙә уйылып ҡала ла, уларҙың исем-шәрифтәре, күрешеү сәбәптәре онотола. Урамдан уҙғанда үҙем танымаған кешеләр йыш ҡына мине сәләмләп уҙалар, ҡайһылары ҡул биреп күрешеп, һөйләшеп торалар хатта. Йөҙгә сырамытып, һәүетемсә генә гәпләшеп торған булһам да, исем-есемдәрен хәтерләй алмай аҙап ҡалғаным бар. Әле лә шул ғилләә инде… Күл буйында булды, ахыры, иҫкереп, бүрәнәләре ҡарайған йортта… Шул саҡ, хәтерем томандары таралғандай булып, күҙ алдымдан быйылғы май айындағы хәлдәр ағыла башланы. Берәүҙең ғәйеп булған малын эҙләп, ҡала ситендәге йорттарҙы ҡыҙыра инем. Сираттағы иҫке генә йорттоң ҡапҡаһын шаҡыуға, хужалар сыҡманы. Ҡапҡа бикһеҙ ине, шуға ла, үҙ белдегем менән, ихатаға үттем, ишекте шаҡып та яуап алмағас, өйгә керҙем. Тышта балҡып торған яҙғы көн, тик был өйҙә һалҡын эңер хөкөм һөрә. Бүлмәләге диванда мәйет ята, уның янында, ултырғыста йәш кенә ҡыҙ, таш һындай, ҡатып ултыра. Иҙәндә йөрөгән ялбыр аҡ бесәй менән ситлегендә шымып ҡалған йәшел тутыйҡошто иҫәпкә алмағанда, өйҙә башҡа бер кем дә юҡ. Минең өндәшеүгә теге ҡыҙ йәш тулы күҙҙәрен тултырып ҡараны ла, кире боролоп, шымып ултыра бирҙе. Бахырҡайҙың ҡайғыһынан шаңҡып ултырғанын аңлап ҡалдым, ниһайәт. Шул хәлдәге кешене нисек ташлап китәһең инде. Ярайһы уҡ ҡаты ҡыланып, һушына ҡайтара башланым ҡыҙыйҙы. Яурынынан тотоп һелктем, битенә стакандан һалҡын һыу һиптем, еңел генә сәпәләп тә алдым хатта. Беҙҙең эш әҙәм баштарынан йөрөгән бәләҡазаны тикшереүҙән ғибәрәт булғас, тора-бара күңелдәр ҡатып, кисерештәр тупаҫлана. Күптәр, ҡайғы өҫтөндә йөрөп тә, үҙҙәрен бер ни булмағандай вайымһыҙ тотҡан хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәренең ҡылығын кәмендә әҙәпһеҙлеккә һанай. Бәлки, шулайҙыр ҙа, тик әҙәплек һаҡлаған милиционерҙың, ғәҙәттә, эше бармай… Нисек кенә булмаһын, әммә теге ҡыҙыйҙың ҡараңғыланған аң-зиһененә бер аҙ яҡты төшөрөүгә ирештем. Һуңынан күршеләге әбейбабайҙарҙы әйләнеп сыҡтым, табипты саҡырып алдым, мәйеттең туған-тыумасаһын асыҡлап, уларға хәбәр иттем, мулланы алып килдем… Ярты көнөм шунда уҙҙы. Аҡрынлап йыназаға кешеләр йыйыла башлағас ҡына, ярҙам кәрәк булһа тип, ҡыҙға телефонымды яҙып бирҙем дә ҡайтырға йүнәлдем. Ул, ниңәлер, артымдан урамға сығып, өнһөҙ генә ҡарап ҡалды.

Шул хәлдәрҙе хәтерләүҙән күңелем болоҡһоп, йөрәгемде аңлайышһыҙ һағыш баҫты. Ятаҡҡа ҡайтыуҙы хәжәт тапмай, Олегта ҡунырға ҡалдым.

## 5

Болоттай ялбыр олоно менән ярты күкте ҡаплаған йыуан йүкә ышығына таңғы сафлыҡ йәшенгән. Япраҡтар араһында бал ҡорттары геүләй, зәңгәр һауала осҡан ҡарлуғастарҙың етеҙ ҡанаттарында ҡояш нурҙары уйнай. Ялбыр йүкәләр аҫтынан борғоланған тар ғына таш һуҡмаҡ бынан йөҙ аҙымдағы аҡ йортҡа илтә.

Әммә йүкә төбөндәге эскәмйәлә ултырған Камалов Зиннур Таиповичтың күңелендә был йәйге хозурлыҡҡа урын юҡ ине. Шулай инде, бәләгә тарыған әҙәм балаһының күҙҙәре, ботаҡ тишегеләй, нурһыҙ була. Ҡырҡ етеһен уҙған ирҙең былай ҙа ҡаҡса йөҙөндәге һырҙары тәрәнәйеп, тура танауы уғата осланған һымаҡ, ауыҙ ситтәре һалынып аҫҡа төшкән, ас яңаҡтары күге сыҡҡансы

ҡырылған, йәшлек заңын оноторға теләмәй, һаман тулҡынланып торған сәстәре лә, ҡырауға ҡалып, һирәгәйгән. Камаловтың өҫтөндә еңел аҡ салбар менән аҡ күлдәк – мейе ҡайнатҡыс был эҫелә, ошоға алмаш итеп, әсәнән тыума ғына йөрөргә ҡалалыр.

Камалов үҙен нисек кенә иркен тоторға тырышһа ла, үҙенә төбәлгән өс пар күҙҙе тәне менән тойоп ултыра. Ҡара салбар, аҡ күлдәк кейгән, ҡултыҡ аҫтарына ҡорал таҡҡан әзмәүерҙәй ике арсый, уның һәр хәрәкәтен һанағандай, күҙәтеп тора. Камаловтың бында ултырыуына сәғәттән ашыу инде, шуға ла ул, ваҡыт уҙа барған һайын, ситлеккә осоп кергән ҡошсоҡтай итеп тоя үҙен. Эйе, ул бында үҙ теләге менән килергә мәжбүр булды. Сәйер яңғырай: үҙ теләге менән килергә мәжбүр… Әммә, төптәнерәк уйлағанда, былай тип әйтеү хата булыр. Сөнки ысын теләк ул ирек тигәнде аңлата, ә уның бында килеүе ирекһеҙҙән бит.

Тоткан эшенә тоғро булып, торған ерендә торлаҡ ҡороусы эшмәкәр, ышаныслы әҙәмдәр рәтенән Камалов. Әйтергә кәрәк, ундай кешеләр һәр заманда ла иҫәпле генә булалар, күп осраҡтарҙа улар дан-шөһрәт ҡаҙанмай ғына ғүмер итеп, исемдәре тарих төпкөлөндә юғала, ә улар атҡарған эштәрҙе алап ауыҙлы берәүҙәр үҙҙәренеке итеп күрһәтәләр ҙә исем-шәрифле булалар. Беҙ белгән тарихтың ҡайһы бер үҙенсәлектәренә ишара был. Тап шул сифаттары Камаловты байтаҡ ҡына ваҡыт түбән вазифаларҙа йөрөттө лә инде. Эшкә сос кеше ҡайҙа ла кәрәк, сөнки уны иң сетерекле, бүтән йүнһеҙҙәр тарафынан тамам бөлдөрөлгән урындарға ышанып ҡуйырға мөмкин. Юғары урында үҙендә булмаған аҡылды һатып ултырырға кем дә ярай, ә тормошто, хужалыҡты тоторға һәләтлеләр ерҙә йөрөргә тейеш. Тәбиғи тәғлимәт шулай булғас, Камалов та, башын баҫып, үҙенә тапшырылған эштәрҙе еренә еткереп үтәп килде, шуға ла уны бер хужаһыҙлыҡ һаҙлығынан икенсеһенә ташлар булдылар. Алһыҙ-ялһыҙ эшләп, Камалов ҡулы менән, ниһайәт, рәткә һалынған урынға йылтыр күҙле яңы етәксе тәғәйенләп, уны икенсе хужалыҡты күтәрергә йүнәлтер инеләр. Ауыл балаһы булараҡ, хәйлә сәсеп икмәк үҫмәгәнде белгәнгәме, уның ышанған-тотонғаны тик намыҫлы эш булды. Ләкин эрелеваҡлы бурҙар хөкөм һөргән илдә намыҫ һаҡлау ҙа, эш атҡарыу ҙа еңелдән түгел. Сөнки һәүетемсә генә башҡарылырға тейеш көндәлек мәшәҡәттәр, көтмәгәндә, күрсөккә төртөлөп туҡтай, ә күрсөк артында – яһиллыҡ, урлыҡ, ришүәт… Бысранманы түгел Камалов, бүтән сара тапмағанда, эшен үтәү йәһәтенән, бысранды ла. Шуға ла һәр ваҡыт алдын-артын ҡарап, баҫҡан аҙымын шутлап йөрөргә өйрәнде ул. Күрмәне түгел, күрҙе уның эшмәкәрлеген ҡала хужалары, йыш ҡына маҡтап телгә алыр, ҡулын ҡыҫыр булдылар, тик күҙҙәренә ҡарап, «ҡойроҡ болғап» тормағас, Камаловты артабан күтәреү тураһындағы уй баштарына килмәне. Зиннур Таиповичтың юл һәм транспорт хужалығы етәксеһе итеп тәғәйенләнеүенең дә берҙән-бер сәбәбе бөтмәҫтөкәнмәҫ күрсөктән ғибәрәт ине. Ҡалала исем-шәрифе сыҡҡан йә әшнәлеге еткән инсандар араһында әүәлге хужалары тарафынан таланып, ҡыйратылған был ойошманы етәкләргә теләүселәр табылманы. Шунда кемдер Камаловты иҫкә алды. Беҙҙең аранан булмаһа ла, күтәрәйек тә шуны, ырғытайыҡ «һаҙлыҡ»ҡа, батһа ла, сыҡһа ла – үҙ ҡулында, тинеләр. Батманы Камалов, эт булды, бет булды, иллә-мәгәр, бер йыл тигәндә, хужалығын күтәреп, аяҡҡа баҫтырҙы. Был хәл, әлбиттә, хакимиәт һәм ҡалалағы башҡа ойошмалар, йәмғиәт алдындағы уның һиммәтен күтәрҙе. Тап шул саҡта ғүмере буйы хәкимиәт иҙәнен тапап башы ялтыраған, оло йәшкә етеп арты менән

ултырғысына йәбешкәндәй урынында ныҡлы ултырған бер ағай, шым ғына, үҙенең малайын Зиннур Таипович урынына «ҡоҙалай» башланы. Әлеге лә баяғы, ашнаҡсының эше ашауҙан тормай, әҙер ашҡа бүтәндәр хужа. Мәртәбәле яҡлаусыһы булмаған Камаловты урынынан йолҡоп, ситкә бырғатыу ҡыйын түгел ине, әлбиттә. Ҡалала бөлгән хужалыҡтар бөткәнме ни, уларҙы ла терелтергә кеше кәрәк. Ҡала кимәленә үҫеп, үҙе ишеләр араһында ярайһы уҡ йышылырға өлгөргән Зиннур Таипович елдең ҡайҙан иҫкәнен тиҙ үк һиҙеп ҡалды. Һиҙеп ҡалды ла йүгерек малай йәшенән сығып, ҡырҡ бишен ҡыуалағанын иҫләне, кемдеңдер низағы арҡаһында алтын сәғәттәй теүәл эшләгән хужалығын ҡалдырып, сираттағы уғрылыҡ ҡорбаны булған сит хужалыҡтың ҡамытын кейгеһе килмәне. Арығайны ул, нишләйһең, һәр сабырлыҡтың сиге бар бит. Әммә аҡ менән ҡараны бутарға өйрәнмәгән кешегә хакимиәт кимәлендәге аҫтыртын мәкер-хәйләгә ҡаршы тороу мөмкин түгел ине. Килеп тыуған бәләнән ҡала хакимиәтенән дә юғарыраҡ торған даирәләр генә ҡотҡара ала ине. Ә унда Камаловтың исем-атын ишеткән бер генә кеше булһа икән… Үҙенең ғәйебе инде. Хужаларға ярамһаҡлана, кәрәктең артын һөртә белмәй бит. Шунһыҙ әлеге яһил донъяла йәшәүе ауыр. Үҙен күле ҡороған балыҡтай һиҙеп, тамам өмөтһөҙләнгән сағында милицияла эшләгән танышы килде уға. Һомғол буйлы, мөләйем йөҙлө кешене бер ҡасан да милиция кейемендә күргәне юҡ ине Камаловтың. Ул, ниңәлер, хоҡуҡ һаҡлаусыларҙы үҙһенмәй, унда эшләгәндәрҙе бүтән тормоштан килгән ят шәхестәр һымаҡ итеп күрә ине. Әйткәндәй, бер ул ғынамы ни? Әммә Таһир менән тиҙ үк аралашып, уртаҡ тел тапты ул. Һирәк-һаяҡ осрашып, зәм-зәм шешәһен бушатҡандан һуң, күңеле көрәйеп ҡала. Әйтерһең дә, бала сағына ҡайтып, яҡын дуҫы менән яр башында балыҡ ҡармаҡлаған. Таһир, баҡһаң, Камаловтың хәлен белеп йөрөгән икән. Улай ғына ла түгел, Камалов үҙе тирәһендәге сыуалыштарҙың остоғон ғына белгән, имеш. Мәҫәлән, Камалов вазифаһының аҡсалата хаҡы ҡайһы бер инсандар араһында күптән килешелгән дә инде, баҙарҙағы кеүек, хаҡын биреп, «тауар»ҙы алырға ғына ҡалған. Камаловҡа килгәндә инде, ул күптән инде юҡ иҫәбендә, уның үҙе түгел – урыны ҡәҙерле. Ҡыҫҡаһы, Таһирҙың уҫал шаянлыҡ менән һөйләгәндәренә ышанғыһы килмәй, хайран ҡалып ултырҙы Камалов. Ул, әлбиттә, былдай хәлдәрҙең тегендә-бында булып торғанын белә, ҡараҡтар хужа булған илдә йәшәгәс ни. Әммә Камалов быға ҡәҙәре бер ҡасан да үҙен хужаһының ниәтен белмәйенсә аҙбарҙа моңһоҙ ғына көйшәп торған һарыҡ тәкәһеләй итеп тойғаны юҡ ине. Ә хужаһы, баҡһаң, бысағын ҡайрап, усаҡҡа ҡаҙан да элгән икән…

– Борсолма, ярҙам итербеҙ, – тип мут ҡына күҙ ҡыҫты Таһир айырылышҡанда. – Ҡарап, тыңлап ултыр, кәмиттәр күрә белгәнгә сәхнәлә генә түгел, тормошта ла етәрлек.

Бер аҙнанан хакимиәттәге теге ағаҡай, йәһәт кенә ҡуҙғалып, хаҡлы ялға китте, Зиннур Таипович янында яланып йөрөгән төлкө күҙле малайы ла ҡайҙалыр олаҡты. Шунан бирле Камаловтың ян-яғында һиллек хасил булып, уның урынына уҡталыусылар табылманы. Ул, көтмәгәндә генә бик еңел хәл ителгән ауыр мәсьәләнең асылына төшөргә тигән уй менән, Таһирҙы мунсаға саҡырып, ҡиммәтле шараптар менән дә һыйлап ҡараны. Әммә тегеһе, күпте белгән – ауырымай үлгән, тиеүҙән уҙманы, хакимиәт башлығы булғас, үҙең дә аңларһың, тип шаяртты.

Ул саҡтарҙа ҡала хакимиәтен биләргә ниәтләнеү генә түгел, ундай хыялы

ла юҡ ине Камаловтың. Үҙенең аҫтына һыу үтмәгәс тә бик шәп. Ләкин, юғарыла һөйләнгән хәлдәрҙән һуң, ул, ғәҙәтенсә төплө һығымталарға килде. Яңғыҙ батыр яу ҡайтармай, тине ул, халыҡтың борондан килгән әйтемен иҫенә алып. Тоғролоҡ, эшмәкәрлек, ярҙамсыллыҡ тигән ыңғай сифаттарҙың мәртәбәһе әлеге уғрылыҡҡа һәм яһиллыҡҡа бирелгән заманда ла төшмәй, әлбиттә, киреһенсә, уларҙың ҡәҙере арта ғына бара. Әммә улар, диңгеҙҙәге яңғыҙ утрау һымаҡ, бөләгә тарығандарҙы осраҡлы рәүештә генә ҡотҡара, ә күптәр йыш ҡына, шул утрауҙарға юлыға алмай, әрәм була. Тимәк, билдәһеҙ юҫыҡҡа йүнәлгәндә, йөҙөп барған карабыңдың ныҡлы булыуы зарур. Шулай тине лә Камалов, уҡытыусылыҡта йөрөгән ҡатыны Нажияны эшенән алып, эшҡыуарлыҡҡа «екте». «Екте» тиеүҙән дә, ҡағыҙ-киәмәтте ҡатыны исеменә төҙөнө инде, килеп тыуған яңы мәшәҡәттәрҙе күберәк үҙе атҡарҙы. Һиммәтле кешегә банктарҙан бурысҡа аҡса алыу ҙа ауыр булманы. «Йәтеш» кенә итеп үҙе етәкләгән хужалыҡтың кеҫәһенә төшөргә лә ерәнмәне ул. Бөтәһе лә шулай иткәндә, ҡул ҡаушарып ултырырға Алланың ҡашҡа тәкәһе түгел дә ул? Алғанын, һуңлатып булһа ла, кире ҡайтарып торҙо, тик хужалыҡтағы килем-сығымдың рәте-сираты буталмай ҡалманы, әлбиттә, иҫәп-хисапты алдап булмай бит. Бөгөнгө көндә килемле генә ете магазины, ике рестораны бар уның. Әшнәлекте яйлауға, хәжәтле кешеләрҙе майлауға аҡса сығып ҡына тора. Етеп килгән улы менән ҡыҙына ла көндән-көн күберәк кәрәк. Тәүҙәрәк, ят, биҙалы эшҡыуарлыҡҡа сослоғо етмәй, мыжып бер булған Нажияһы ла, аҡсаның тәмен белеп алғас, шымды, тора-бара сауҙаға ла ярайһы уҡ оҫтарып алды. Шулай һәүетемсә генә донъя көтөп ятҡанда, Зиннур Таипович ғәжәп бер сырхауға тарыны. Ҡапылдан аяҡ быуындары һыҙлай башланы уның. Тик ултырғанда, ятҡанда сире уны һис тә борсомай, һыҙлауы баҫылып, онотола хатта. Әммә, урынынан тороп китһә, аяғына тутыҡ сөй ҡаҙалғандай була. Бер аяғындағы һыҙлау баҫылып тора ла, күп тә булмай, икенсеһенә күсә. Әрһеҙ заттан булған Камалов тәүҙә, үҙ шифаһы үҙендә, үтер әле, тип, һыҙланыуҙы баҫа торған дарыуҙар йотоп, йөрөй бирҙе. Тик бер аҙҙан кабинетында йөрөгәндә лә «аяҡ сала» башлаған касафатынан йөҙәп, табиптарға барғайны, сиренең «подагра» тигән атамаһын белеп ҡайтты. Сиреңдән арынырға теләһәң, иттән, майҙан, шашлыҡтан, шараптан, һыранан, шоколадтан,– ҡыҫҡаһы, Зиннур Таипович быға ҡәҙәре шуларһыҙ өҫтәлен дә күҙ алдына килтерә алмаған һый-сафанан баш тартырға тейеш икән. Батшалар сире, тиҙәр, имеш, шул сирҙе. Тамаҡтан алғансы – тамуҡҡа һал, тигәндәр бит боронғолар. Шуға ла, ас батша булғансы, туҡ башмаҡ булыуың артыҡтыр, тип эсе бошто Камаловтың. Башмаҡ та, батша ла түгел бит әле үҙе, ни сәбәптән килеп йәбешкәндер уға был ауырыу…

Былтырғы йәйҙә тамам теңкәһенә тейгән шул сырхауы уны шифаханаға йүнәлтте. Билдәләнгән дауаларҙы алғас, көн уҙғара алмай аҙапланды тәүҙәрәк. Ауырыуҙар менән ялҡауҙар урыны икән ул шифахана тигәндәре. Ғәрипләнеүгә етеп, эшлектән сыҡҡан сырхауҙар менән бер рәттән, айғырҙай ҙур ир-ат менән бейәләй көр бисәләр дауалана. Бығаса ят ҡатын-ҡыҙҙар менән сыуалыуҙан йәм тапмаған Камаловтың да, тик ятыуҙандыр инде, ярым шәрә түш-боттарын ағартып янынан уҙған сибәрҙәргә ғәйрәте ташып йөҙәтер булды. Ярай әле, янына Нажияһы килеп йөрөнө, хатта иренең «айғырлығы»на таң ҡалып, үҙен йәш кәләштәй тоя ине ҡатыны, ҡара уны, бәпесләтәһең бит ҡартайған көнөмдә, тип иркәләп кенә орошор булды. Шунда, шифаханала, Зиннур Таипович оло йәштәге бер әҙәм менән танышып алды. Танышты, тигәндән, һуңғы көнгәсә теге ҡарттың исем-шәрифен дә белмәне ул. Тәбәнәк буйлы, итсән

йөҙлө йыуантыҡ ҡарт та Камаловты һорауҙар менән борсоманы, тәү баштан уҡ, күптәнге танышын осратҡандай, йылы күмәстәй ҡулын биреп күреште. Ҡарттың йомро башындағы шырт, ҡыҫҡа сәстәре ҡышҡы бәҫтәй ап-аҡ, һул ҡолағы төбөндә ҡара үрмәкселәй ҙур миңе бар, салланған ҡуйы ҡаштары аҫтындағы шешмәк күҙҙәре ҡыҫыҡ, тупаҫ ҡасау менән юнып эшләнгәндәй тойолған ауыҙ-моронон ҡуйы, бөхтә генә һаҡал-мыйыҡ баҫҡан. Шахмат уйнарға бик тә маһир булып сыҡты ул. Уйнағанда хас сысҡан уйнатҡан бесәйҙәй ҡылана, килтереп ҡыҫа ла ҡоршауын бушата бирә, шунан инде уйынын рәткә һалып, һөжүмгә ҡуҙғалған дәғүәсеһен тағы бороп ала... Тора-бара, теге ҡарттың уйынына төшөнөп алғас, Камалов та бер нисә тапҡыр оторға ирешә уны, ләкин шул саҡтағы уйындары һәр саҡ оҙаҡ һәм ҡатмарлы булыр ине, түҙемең менән зиһенең генә етһен. Ғәҙәттә, ныҡышып уйнағандарҙың теңкәләрен яндарына йыйылған тыңғыһыҙ көйәрмәндәр ҡорота торған. Тик Камалов менән теге ҡарттың уйыны икәүҙән-икәү генә уҙыр булды, сөнки теге ҡартты оҙатып йөрөгән алыптай дүрт арсый бүтәндәрҙе уларға яҡын ебәрмәй, һағалап торор ине.

Сираттағы бер көндә, ҡәҙимге шифахана баҡсаһында үҫкән йөҙйәшәр имән аҫтында осрашты улар. Камалов уйынды таҡтаға теҙеп тә ҡуйғайны инде, тик теге ҡарт, рыя ғына ҡул иҙәп, был юлы уйындан баш тартты.

– Һөйләшеп алыу фарыз, – тине ул, ҡыҫыҡ күҙҙәрен Камаловҡа төбәп. Елкәһе менән артында торған арсыйҙың тынын тойған Камалов шымып ҡалыуҙы яйлыраҡ күрҙе.

– Һеҙҙең ҡалағыҙ миндә ҙур ҡыҙыҡһыныу уята, – тип дауам итте ҡарт ашыҡмай ғына. – Шуға ла ҡала хакимиәтенә үҙемдең кешене ҡуйырға йыйынам. Уның эшмәкәр, тоғро һәм аҡыллы булыуы – мотлаҡ шарт.

Камалов, ундай кешене был заманда ҡайҙан табырһың икән, тип көлөргә ауыҙын асҡан ерҙән, ҡарттың кисәткес ҡарашын күреп, туҡтап ҡалды.

– Ҡыҫҡаһы, йәрәбәм һиңә төштө.

«Исемһеҙ» ҡарт шулай тине лә, аҡһыл йөн баҫҡан ҡулдарын йомро ҡорһағы өҫтөнә ҡаушарып, ауыр ҡарашын Камаловҡа төбәп, бер аҙға шымып ултырҙы. Үҙен йылан арбағандай итеп тойған Камалов, ҡороған аңҡауын шайыға менән сылатырға маташып, тамшанып алды.

– Эсе бошоуҙан ни ҡылырға белмәй йөрөгән алйыу пенсионерҙың хәбәре миңә ҡыҙыҡ түгел, – тине ул, ниһайәт, әңгәмәсеһенә уҫал тексәйеп. – Әкиәтегеҙҙе маңҡа ейәндәрегеҙгә һөйләрһегеҙ. Минеңсә, һеҙ ағас шахматтарҙы ысын тормош менән бутай башлағанһығыҙ. Исем-есемегеҙҙе белмәйем дә, белгем дә килмәй, хушығыҙ, – тип торорға ҡуҙғалғайны, яурынына ятҡан арсыйҙың ауыр ҡулынан кире ултыра төштө. Ҡарт, уның әсе һүҙҙәрен ҡолағына ла элмәй, вайымһыҙ ҡалды, башын ҡырын һалып, бейек имән япраҡтары араһында сутылдаған билдәһеҙ ҡошсоҡто тыңлап ултыра бирҙе. Бәлки, сәғәттәр, көндәр үтер, әммә ул әлеге ирәүән ҡиәфәтенән сыҡмайынса, ошо урындан китә алмаясағын аңланы шунда Камалов.

Бер аҙҙан теге ҡарт ҡаршыһында ултырған Камаловты шәйләп ҡалғандай булды ла турайып ултырҙы.

– Искәндәр бабайың булам, ишеткәнең барҙыр,– тине ул ябай ғына итеп. – Әйткәндәй, минең менән әлегеләй ҡара-ҡаршы ултырып гәпләшеү бик һирәктәргә генә насип итә. Шуны аңлаһаң – күпте аңларһың.

Бар илгә яманаты сыҡҡан ата ҡараҡтың исеме йәш балаларға ғына билдәһеҙҙер. Шуны аңлап ҡалған Зиннур Таипович үҙен үрмәксе ауына эләккән

меҫкен себендәй итеп тойҙо. Ул, ишеткән-күргәненә ышанырға теләмәйенсә, үҙе лә аңғармаҫтан, тағы тороп китергә итте, ләкин арсыйҙың ҡаты ҡулынан урынына ҡайтырға мәжбүр булды. Искәндәр ҡарт уның был ҡылығын һүҙһеҙ генә күҙәтеп ултырғандан һуң, кәйефе ҡырылғандай, ҡаты итеп тамаҡ ҡырҙы ла, уң ҡулын өҫтәлгә һалып, ҡырға бороолдо.

– Һин ошо көндән алып минең ҡарамаҡтаһың, – тине ул, Камаловҡа ҡарамай ғына. – Әлегә һиңә бер төрлө лә йомошом юҡ. Әүәлгесә йәшә, эшлә. Берҙән-бер шартым шул: законды боҙоп, яманатыңды сығарма. – Искәндәр ҡарт йыуан бармаҡтары менән өҫтәлде төйөп алды. – Хәжәтең еткәс, үҙем табырмын.

– Һеҙҙең тәҡдимегеҙҙән баш тартырға буламы? – тип һораны шунда Камалов.

Искәндәр ҡарт уға ҡырын ғына ҡарап, көләмһөрәгәндәй итте шунда.

– Тәҡдим тиеп ҡабул иткәс, әлбиттә, – тине ул. –Тормоштоң иң төбөнә ҡолап, күсә хәленә ҡалғың килһә…

Тәүге мәлдә Камалов, ысынлап та, әүәлгесә йәшәүендә булды, ошо һөйләшеүҙең шауҡымы итеп ҡабул итерлек хәлдәрҙе янында тойманы. Ә бер аҙҙан, көтмәгәндә, ҡала гәзитенең табаҡ-табаҡ биттәрендә уға арналған мәҙхиә баҫылып сыҡты, хатта үҙе тураһындағы был баҫманы уҡығас, маҡтауға, ҙурлауға күнекмәгән Зиннур Таипович, таныш-белеше алдында уңайһыҙланып, үҙен йәпһеҙ тойоп йөрөнө. Хакимиәт башлығы Василий Петрович, гәзит мөхәррире менән Камалов яғына шикле генә ҡараш ташлаһа ла, тәүге мәлгә шымды. Шулай ҙа, һуңғараҡ, рәтен табып, мөхәррир булып йөрөгән йәш кенә ҡатынҡайҙы, рөхсәтһеҙ тел сарлағаны өсөн, орошоп та алған, тинеләр. Тегеһе, гәзит биттәрен тултырырлыҡ бүтән материал юҡ ине шул, тип ҡотолған. Ул да булманы, Зиннур Таиповичты, хакимиәт башлығы менән ҡушарлап, үҙәккә саҡыртып алдылар ҙа алдынғылыр рәтенә ҡуйып ҙурланылар, өлкә башлығы үҙе, Камаловтың ҡулын ҡыҫып, бер аҙ гәпләшеп тә торҙо хатта. Йәмғиәткә зәңгәр экрандар аша ғына ҡарап, борсаҡ сәсеп ултырырға ла бер мәл форсат сыҡты уға. Аҡрынлап, үҙәктәге юғары кабинеттарға илткән һуҡмаҡтары ла таҡырайҙы уның, шул йәһәттән эшендә әлегә ҡәҙәре көрсөкләнеп торған ҡайһы бер сетерекле мәсьәләләрҙе лә хәл итеүгә ирешә ул. Ошо хәлдәрҙең һөҙөмтәһе булып, уның ҡалалағы абруйы үҫте, төрлө эш менән хакимиәт коридорҙарын тапағанда, шунда йөрөгән башҡалар, ситкә баҫып, уға юл бирер булды. Камалов, урмандағы таҡыр, әммә билдәһеҙ һуҡмаҡ кеүек, үҙен ҡайҙалыр йүнәлткән был хәлдәрҙең артында ниндәйҙер сәйерлек тойһа ла, әллә ни борсолманы, улай ғына ла түгел, бер мәлдә мөғжизәгә оҡшаған ошо үҙгәрештәрҙе тик үҙенең маһирлығына бәйләп йөрөнө хатта. Әлеге лә баяғы ауылса ябайлығынан, эскерһеҙлегенән инде… Теге ваҡыттан бирле, күңеле төбөндә ҡара шәүләләй боҫоп ятҡан Искәндәр ҡарттың һыны хәтеренән юйылып ҡына барғанда, көтмәгәндә, үҙенең хаятлығын тағы пәйҙә итте теге ҡарт. Ике ай элгәре, май көнөндә, эш мәшәҡәттәре менән үҙәккә юл тотҡайны Камалов. Юлдың урман аша уҙған тын ғына бер тәңгәлендә уларҙы ҙур ҡара машина ҡыуып уҙҙы ла, алдан ҡыҫтап, туҡтарға мәжбүр итте. Машинанан сыҡҡан әзмәүерҙәй ике ир Зиннур Таиповичты юлдан алып, шау сәскәле муйыллыҡта селтерәп кенә ағып ятҡан шишмә буйына илтте. Шунда уның алдында өҫтөнә елбәҙәк аҡ кофта, иркен зәңгәр салбар кейгән һылыуҡай пәйҙә булды. Иҫ китерлек гүзәл ҡыҙҙың шауҡымынан әле генә, үләмме-ҡаламмы, тип торған Камаловтың бот араһы йылынып, ғәйрәте уянды, гүйә, һандуғастар һайрап,

гөл-сәскәгә күмелгән яҙғы болонда һағынып көткән һөйгән йәрен осратҡан… Ә теге ҡыҙ, сауҡалай буйын һығылдырып, ярым асыҡ иҙеүе аҫтындағы һөттәй аҡ, текә түштәрен Камаловҡа терәп үк баҫты ла, ҡыйылып торған оҙон керпектәрен күбәләктәй елпетеп, ҙур йәшел күҙҙәре менән йоторҙай булып уға төбәлде, һәм, бишмәтенең иң аҫтағы төймәһен нәфис бармаҡтарына алып, һушты алырҙай шаян хәрәкәт менән борғолай башланы.

– Искәндәр бабай һеҙгә сәләм әйтә, – тип серле шыбырҙаны ул, яҙғы елдәй саф һулышы менән Камаловтың йөҙөн иркәләп. – Ул һеҙҙең менән бик ҡәнәғәт, артабан да шулай дауам итергә ҡуша…

Ҡыҙҙың наҙлы бармаҡтары Камаловтың усына ниҙер һалды.

Ҡыҙ шунан һуң бешкән еләктәй ирендәре менән Камаловтың йөҙө алдындағы һауаны үпте лә, боролоп, ағастар араһына кереп юғалды, уның алыҫта селтерәп көлөүе шишмә тауышына ҡушылды.

Зиннур Таиповичтың шишмәлә бит-ҡулын йыуып, юлға сығыуына, теге машинанан елдәр иҫкәйне.

– Кемдәр ул?

Ҡурҡышынан ҡобараһы осоп машинала ултырған шоферының шул һорауы, ниңәлер, Камаловтың асыуына тейҙе. Ул машиналағы урынына йәпләп ултыра алмай аҙапланды, гүйә, бишмәтенең төймәһенән һаман кемдер тартҡылай, салбар төбөндәге теге нәфселе нәмәстә, яратҡан тәтәйенән мәхрүм ителгән тыңлауһыҙ бала һымаҡ, тынысланырға теләмәй, һаман маҙаһыҙлай… Шундай гүзәл заттарҙы донъяға яратҡан да Хоҙай Тәғәлә, уйнаш итмә, сит ҡатынға һонолма, тигән. Меҫкен ир-аттан шулай мыҫҡыллап көлөүеме икән ни?

– Мәскәй әбей, ендәре менән, – тип екерҙе ул шоферына, ниһайәт, уңайлап ултырғас. – Ыштаныңды бысратһаң, бар, шишмәгә төшөп йыуынып кил.

Усындағы ҡағыҙға телефон һандары менән исем яҙылғайны: Сати…

…Был хәл ике ай элгәре, май айында, булды. Теге гүзәл ҡыҙ Камаловты битараф ҡалдырманы, әлбиттә, тәбиғәт тарафынан әҙәми затҡа бирелгән үҙ тамырыңды дауам итергә ынтылыу, йәғни үрсеү ҡомары, унда ла бар бит. Ләкин ул, әлеге телефондың үҙ-ара мөнәсәбәттәр өсөн тәғәйенләнмәгәнлеген белеп, шылтыратманы. Икенсенән, Сати янына танкка ултырып яҡынайыу ҙа шикле, ҡыҙҙың ымлауынан ғына эргәһендәге армайҙары танкың менән бергә нәфсеңде лә бер юлы он-талҡан итерҙәр. Хакимәт башлығы Василий Петрович үҙенә милицияны «һөсләткәс» тә – ә бының тап шулай булыуына Камалов бер минут та шикләнмәне – телефонды күтәрергә ашыҡманы, сөнки тәүҙәрәк, минең бәләм кемгә хәжәт, тигән уйҙа булды. Бер аҙҙан ғына, янындағы мәшхәрҙең асылына тәрәнерәк төшөнгәс, әлеге шымып ултырыуынан хәлдәрҙең артабан сетерекләнәсәген аңлап ҡалды. Сөнки Искәндәр «бабай» уға үҙенең алдағы көндәрен бағлаған, хатта шул йүнәлештә байтаҡ ҡына эштәр ҙә атҡарған. Тимәк, Камаловҡа уны хәбәрләү мотлаҡ, юғиһә «бабай» ғәфү итмәҫ.

Әйткәндәй, Искәндәр ҡарт күңелендә ярлыҡау тойғоһо булыуға өмөт аҙ…

Йүкә олоно буйлап ҡырмыҫҡалар йүгерешә. Осоҡ болот та күренмәгән зәңгәр күк, сағыу ҡояш нурҙарынан «уңып», төҫөн юғалтҡан япмалай, ағарып, баш күтәреп ҡарарға ла бирмәй, эҫеһе менән баҫа. Шул саҡ ярандарҙың береһе, телефондан һөйләшеп, ҡағыҙға ниҙер яҙҙы ла Камаловҡа тотторҙо.

– Ошонда күрһәтелгән ергә барығыҙ.

Зиннур Таиповичты йылға ярындағы сәйханала ла байтаҡ көттөрҙөләр, хатта ул, яңылышып бүтән урынға килдем, ахыры, тип, сәйхана хужаһынан

һорашып та бөттө. Көтөгөҙ, тине теге. Шунда ул сәйханала яңғыҙ түгеллеген аңланы, баҡһаң, бында ла күҙ-ҡолаҡ аҫтында ултыра, имеш. Көн эҫеһенән еңел күлдәк-салбары ла ауырайҙы, еүешләнеп, арҡаһына йәбешкән күлдәге аҫтында, арҡаһы буйлап, тир тамсылары йүгерә…

Сәйханасы, үҙе артынан эйәрергә ҡушып, сәйхана артына уҙҙы ла уны кескәй генә тәҙрәле, еләҫ, бөхтә бүлмәгә илтте. Йомшаҡ диванда өҫтөнә елбәҙәк күлдәк кейгән ҡыҙ бот сәнсеп ултыра, ҡыҫҡа итәктәре аҫтынан һөттәй ағарып күренгән матур боттары, ҡарашты үҙҙәренә тартып, иғтибарҙы тарҡата.

Сати Камаловҡа, ултырырға тәҡдим итеп, өҫтәл артындағы ултырғысҡа ҡул иҙәне.

– Иҫәнләшергә өйрәтмәгәндәр, ахыры, һеҙҙе? – тине ҡыҙ, ғәжәпләнгәндәй.

– Дөрөҫөн әйткәндә, һеҙҙең менән ошо урында хушлашырға шат булыр инем.

– Ниңә улай? – Сатиҙың матур ҡаштары нәҙәкәтле генә бейеп ҡуйҙы.

– Сөнки мин үҙ бәләмде үҙем хәл итергә күнеккәнмен. Ә, хәҙер килеп, һеҙҙең хөкөмдө көтөргә тура килә. Беләһегеҙ, мин һеҙгә үҙ теләгем менән килмәнем.

– Бер кем дә ҡоллоҡҡа үҙе теләп килмәй. Әйткәндәй, һеҙ бик нык тирләгәнһегеҙ.

Сати танауын йәтеш кенә йыйырып, йөҙөклө нәфис бармаҡтарын бите алдында елпетеп алды.

– Ҡолдар тирсән булалар. Дөрөҫөн әйткәндә, мин Искәндәр «бабай»ҙың үҙе менән һөйләшермен тип көткән инем.

Сати турайып ултырҙы ла, матур боттарын йәшереп, итәген тартҡыланы. Быға тиклем арттарына мажара эҙләп йөрөгән буш ҡыуыҡ ҡыҙҙарҙы хәтерләткән йөҙө, һүрелеп, кинәт кенә ҡырыҫланды, күҙҙәрен ҡаплаған томан таралып, уларҙа зәһәр саҡҡылар хасил булды.

– Һеҙең хәлегеҙ, шылтыратмаһағыҙ ҙа, беҙгә билдәле инде, – тине ул ҡоро ғына. – Искәндәр бабай бик асыуланды һеҙгә. Иҫегеҙҙәме, ул һеҙҙе законды боҙоуҙан киҫәткәйне?

– Закондар уның киҫәтеүенә тиклем үк боҙолғайны инде…

– Беләбеҙ. Шуға ла бабай һеҙҙән баш тартмай әле. Һеҙ мине аңлайһығыҙҙыр?

– Аңламай буламмы? Бабай тарафынан ҡыр тибелгәндәрҙең баштары иҫән ҡалыуы икеле. Һис юғында, сүп-сар өйөмөндәге күсә хәленә төшәләр.

Сати урынынан торҙо ла, нескә күтәрмәле туфлиҙарында тыҡылдап, ашыҡмай ғына бүлмәне әйләнеп сыҡты. Уның матурлығынан телдән ҡалған Камалов, һылыуҙы, үҙе лә һиҙмәҫтән, күҙҙәре менән сисендерә башлаған еренән, кинәт һиҫкәнеп, иҫенә ҡайтты һәм, бошоноп, тәҙрәгә боролдо.

– Һеҙ миңә битараф түгелһегеҙ һымаҡ, – тине нәҙәкәтлеге менән бүлмәне тултырған Сати, Камаловҡа өҫтән аҫҡа ҡарап.

– Матурлыҡ – дәһшәтле көс, – тине Камалов, бөйөк яҙыусының һүҙҙәрен әле генә аңлағандай. – Искәндәр бабайҙың икмәген бушҡа ашамайһығыҙҙыр.

– Искәндәр бабайҙың икмәген бер кем дә бушҡа ашамай. Әлбиттә, был ҡағиҙәнән һеҙ ҙә ситтә түгел, – тип Сати диванға кире ултырҙы һәм, башындағы уйын күҙҙәре менән күсерергә теләгәндәй, Камаловҡа текләне. – Хәҙер инде иғтибар менән тыңлағыҙ. Бабайҙың һеҙгә шарты бар. Ҡалағыҙ янындағы күлдә урынлашҡан утрау ҡыҙыҡһындыра уны. Һеҙ шул утрауҙы үҙегеҙгә алырға тейешһегеҙ.

Камалов Сатиға ҡарап ҡатты.

– Бетемде биреп алайыммы ни ул утрауҙы? – тине ул, ғәжәпләнеүенән тотлоғоп.

– Телегеҙ бысраҡ. – Сати, йөҙөн йыйырып, устары менән ҡолағын ҡаплағандай булды. – Ҡатын-ҡыҙ менән һөйләшкәнегеҙҙе онотаһығыҙ. Ҡыҫҡаһы: ошо шартты үтәһәгеҙ, һеҙҙең бөгөнгө барлыҡ бәләләрегеҙ ҙә, хакимиәт башлығына дәғүәгеҙ ҙә уңышлы хәл ителәсәк.

Асыуынан башына ҡан бәргән Камалов, айыуҙай ҡуҙғалып, аяғына баҫты һәм өҫтәлгә таянды.

– Зинһар, онотоғоҙ мине. Утрауығыҙ ҙа, хакимиәтегеҙ ҙә кәрәкмәй! Быға ҡәҙәре үҙ алдыма йәшәгәнде, артабан да, нисек булһа ла, йәшәрмен әле!

Ишектә аҡ күлдәкле арсыйҙың бәһлеүәндәй һыны пәйҙә булды

Камаловтың ажарланыуын күҙәткән Сати керпеген дә һелкетмәне. Уның йәшел күҙҙәренә, төпһөҙ ятыуға сумғандай, сумып юғалырға мөмкин…

– Шикләнәм, – тине ул, тура ҡарап. – Артҡа сигер әмәлегеҙ юҡ инде, аңлағыҙ шуны. Һеҙҙе күтәрер өсөн күпмелер аҡса түгелгән. Ә беҙ аҡсаны бушҡа сарыф итергә яратмайбыҙ. Теге утрауҙы шуның әжере тип һанағыҙ. Тағы ла һорауҙарығыҙ бармы?

Сати урынынан торҙо ла, стеналағы көҙгө алдында һомғол кәүҙәһен borғолап, өҫ-башын рәтләй башланы.

– Ятып ҡалғансы атып ҡал, тигәндәр боронғолар. Был мәҡәл, минеңсә, тап һеҙҙең хаҡта әйтелгән, Зиннур Таипович…

Сати, көҙгөнән боролоп, күҙ сағылдырғыс мөләйемлек менән Камаловҡа йылмайҙы.

Ен алғыры нәмәҫтә, тиһәң, тап-таман булыр, ендән башҡа кем ауыҙлыҡлап менер тиһең шундай бейәне, тигән уй тыуҙы Камаловтың башында. Ысынлап та, иғтибар итһәң, үтә һылыу ҡатындарҙың ирҙәре албаҫты һымаҡ була бит.

– Һеҙ кейәүҙәме?

–Тәҡдим ҡылырға булдығыҙмы?

– Юҡ. Һылыу ҡатын-ҡыҙҙар уртаҡ була, улар, йәр биҙәктәре кеүек, ҡулдан-ҡулға күсә.

Сатиҙың йөҙөнә күләгә төштө, ул, ниҙер әйтергә теләгәндәй, матур ирендәрен асып, ынйылай тештәрен балҡытты ла, ниңәлер тотлоғоп, ишектән тышҡа атланы.

## 6

Хакимиәт башлығының ҡоҙғондай ҡара машинаһы, кинәт кенә тиҙлеген кәметеп, юл ситенә сыҡты ла, бер яҡҡа янтайып, туҡтап ҡалды. Башындағы ниндәйҙер ауыр уйҙарынан йөҙө ҡарайып килгән Василий Петрович шоферына боролдо.

– Ни булды?

Тегеһе өндәшмәй генә машинанан сыҡты. Бер аҙҙан уның ете ҡатлы итеп һүгенгәне ишетелде.

Василий Петрович машинанан сыҡты ла, оҙаҡ килеүҙән ҡатҡан бил-быуындарын яҙырға теләп, кирелә-һуҙыла башланы. Даланы тураға ярып үткән юлдың тау-урмандар араһына кереп, борғолана-юрғалана башлаған һил генә тәңгәлендә туҡтағайны улар. Юлдың ике яғында ла үтеп сыҡҡыһыҙ ҡуйы ерек, тал, муйыл ағастарынан торған әрәмәлек, һаҙамыт ерҙе араһына кергән кешене

баш аша ҡапларлыҡ бейек үлән баҫҡан. Әйләнәлә урманлы, ҡырлас тауҙар күтәрелә, баш өҫтөндәге июль ҡояшы, күптән төш ауыуға ҡарамаҫтан, күк көмбәҙенә йәбешкәндәй, һаман бер урында эленеп тора.

Күрше райондың биләмәләре ине был.

Василий Петрович машинаның һытылған тәгәрмәсенә типте лә ниңәлер һаман аңшайып торған шоферына әйләнеп ҡараны.

– Нимәгә иҫең китте? Алмаш тәгәрмәсте бороп ҡуй ҙа – киттек! Шуны ла әйтеп, күрһәтеп тороу кәрәк, – тип асыу менән беләгенә уттай ҡаҙалған күгәүенде һуғып төшөрҙө.

Тик шоферы, утыҙ йәштәр тирәһендәге йыуантыҡ ир, теше һыҙлағандай йөҙөн һытып, машина янында тапаныуында булды.

– Юрка, кемгә әйтәм!? – Өҫтөнә ябырылған болоттай себен-серәкәй менән алышып сәбәләнгән хакимиәт башлығы, түҙеме бөтөп, шоферына ҡабат екерҙе. Тегеһе шунда, тормоштан ваз кискәндәй, йөҙөнә битарафлыҡ сығарып, ҡулдарын кеҫәһенә тыҡты ла ситкә бороолдо.

– Юҡ, – тине ул, теш араһынан сертләтеп кенә төкөрөп.

– Нимә юҡ?

– Алмаш тәгәрмәс юҡ.

Василий Петрович, тәү күргәндәй ғәжәпләнеп, шоферына тексәйҙе.

– Ҡайҙа булған һуң ул? Һатып эсмәгәнһеңдер ҙә?

Һауалағы ялбыр болоттан яуап эҙләгәндәй, күккә баҡҡан Юрка башы әйләнеүҙән сайҡалып ҡуйҙы.

– Өсөнсө көн тишелгәйне, – тип алдашты ул, күҙҙәрен йәшереп. –Төҙәтеп өлгөрмәнем, гаражда ҡалды.

Дөрөҫөндә иһә хакимиәт башлығын йөрөткән машинаның алмаш тәгәрмәсен ул кисә, ваҡытлыса ғына, танышына биреп торғайны. Бушҡа түгел инде. Танышының тап шундай машинаһы бар, ул туйҙы йөрөтөргә ялланған да, тик тәгәрмәсе иҙелгән, ҡапылдан һатып алырға ҡиммәт, ти. Ҡиммәт булмай ни, был машина тәгәрмәсенең хаҡы Юрканың өс эш хаҡына тиң бит.

Шоферына ҡарап, яр башына ырғытылған алабуғалай, ауыҙын аса-яба ҡабарынған Василий Петрович, был урындан ҡайҙа китергә белмәгәндәй, әйләнә-борғолана тапанғандан һуң, кинәт кенә ҡуҙғалып, Юрканы етәкләне лә, һөйрәкләп тигәндәй, машинаны уратып йөрөй башланы.

– Күрәһеңме, Юрка? – тине ул, асыуынан ҡарлығып. – Ошо мөғжизәне немецтар эшләгән. Икенсе донъя һуғышында урыҫтар, инглиздәр, американдар, французлар һәм башҡалар тарафынан арма-торма килтереп ҡыйратылған немецтар! Эйе, ул ҡиммәт тора. Беҙҙең ише ғидайҙар өсөн бик ҡиммәт! Уның ҡарауы, ул матур, көслө, ундағы бар нәмә лә кешегә уңайлы итеп эшләнгән. Был машина эсендә йәшәргә була! – тип Василий Петрович машинаның ишектәрен бер-бер артлы асып, Юрканың арҡаһынан этә-төртә, күрһәтә башланы. – Ваҡытында майын алмаштырып, яғыулыҡ ҡойоп, тәрбиәләп торһаң – ул мәңге йөрөйәсәк! Ә һин ни эшләйһең? Хәҙер килеп, һинең йүнһеҙлегең арҡаһында шундай шәп машина юл уртаһында ҡуҙғалып китә алмай тора. Тьфү! – Василий Петрович шоферының ҡулын ебәреп, ласҡылдата асфальтҡа төкөрҙө, гүйә, бөгөнгө уңышһыҙ уҙған көндөң бар бысрағынан күңелен арындырғыһы килде. – Ҡара ян-яғыңа, Юрка, – хакимиәт башлығы, ҡулдарын йәйеп, урынында әйләнде. – Джунгли бит, ағас араһынан маймыл килеп сыҡһа ла, ғәжәпләнерлек түгел. Ниндәй әмәл менән беҙгә был урындан ҡуҙғалып, ҡайтып китергә һуң? Минеңсә, кеҫә телефоны ла эшләмәй бында, – тип телефонын сығарып ҡараны. – Әлбиттә, тотмай…

– Үткенсе машинаны туҡтатам, хәҙер…

Юрка машинаның уттарын ҡабыҙҙы ла юлға сығып баҫты. Юл тын ине, һирәкләп кенә үтеп торған машиналар, туҡтау түгел, ниңәлер, кирһенсә, тиҙлектәрен арттырып, уҙып китә торҙолар. Василий Петрович шоферының аҙабына, ситлектәге маймылды күҙәткәндәй, бер аҙ ҡарап торҙо ла:

– Аҙапланма бушҡа, – тип екерҙе. – Туҡтарға шөрләйҙәр, сөнки былдай машинала беҙ генә түгел – бандиттар ҙа йөрөй. Торғаны бер ауһар икәнһең дә баһа, Юрка, – тип битәрләне ул шоферын. – Мине, ҡала башлығын, осраҡлы машинаға ултыртып ебәрергә булдыңмы ни? Һин йүнһеҙҙе эшеңдән ҡыуһам, ике балаңдың тамағын нисек туйҙырырһың? Һинең балаларың хаҡында ниңә мин уйларға тейеш?! Бар, атла юл буйлап, – Василий Петрович килгән яҡҡа ҡул иҙәне. – Бынан биш саҡрымда бер ауыл ҡалды, шунда еткәс, ярҙам һорап шылтырат. Телефоныңды ҡарап бар, бәлки, берәй тәңгәлдә тоташыр.

Василий Петрович, тамам теңкәһенә тейгән күгәүен-себендән ҡасып, ҡояштан мунсалай ҡыҙған машинаға инеп бикләнде лә һыуытҡысты ебәрҙе. Шунда ул аяҡ-быуындарының таралып төшөрҙәй булып хәлһеҙләнеүен тойҙо, йөҙөнә һалҡын тир бәреп сыҡты, сикә тамырҙары һулҡылдап, күҙҙәрендә ҡыҙыл таптар пәйҙә булды. Аңын юйыр сиктә, һул ҡулы менән һәрмәнеп, янындағы һыулы шешәне тапты шулай ҙа. Кипкән ауыҙ-тамағын рәхәт сылатҡан һалҡын һыу ауыҙ ситтәренән ағып, күлдәген сылатты. Василий Петрович ауыр ыңғырашып һулыш алды ла, башын артҡа һалып, тынып ҡалды. Бер аҙҙан һыуытҡыстың еләҫ ипкененән маңлайындағы тире кибеп, ҡата башлағанын тойҙо һәм, ҡараштары яҡтырып, машина быялаһы аша зәңгәр күкте шәйләне. Берәй саҡ мин дә шулай ярҙамһыҙ-ҡарауһыҙ ғына аяҡ һуҙырмын, ахыры, тигән уй килде башына. Алтмышына аяҡ баҫһа ла, әлегеләй тик ултырған еренән һушын юйғаны юҡ ине әле. Көн эҫеһенән инде. Әйткәндәй, көнмө икән ул, бөгөнгө күңелһеҙ хәлдәрҙән балҡып торған ҡояш та һүрелгәндәй булды бит.

Шул саҡ шартлап машина ишеге асылды. Василий Петрович, һиҫкәнеп, күҙҙәрен асты. Асыҡ ишектән уға ҡарағусҡыл йөҙлө, ҡаҡса ғына ҡатын ҡарап тора.

– Ағаҡай, хәлегеҙ нисек?

Василий Петрович, уянырға иткәндәй, усы менән йөҙөн һыпырҙы.

– Йоҡлап киткәнмесе, – тигән булды ул, ниңәлер уңайһыҙланып. – Рәхмәт, һеңлем, хәлем һәйбәт, бына, машинам боҙолдо ла, ярҙам көтөп ултырам. Си ля ви!

Ҡатынҡай, бер мәл генә диҡҡәтләп ҡарап торғандан һуң, мөләйем йылмайҙы ла ҡырҡ урындан йәмшәйеп, төҫө уңып бөткән иҫке машинаға ултырып китеп барҙы.

– Ин-вес-ти-ция, – тине үҙ алдына Василий Петрович, үҙе лә һиҙмәҫтән. Әйтерһең дә, әллә ҡасандан бирле бар ғәмен биләгән мәшәҡәтенең теш һындырырлыҡ атамаһын төкөрөп ташларға теләне шулай. Үҙгәртеп ҡороу һылтауы менән барын-юғын талап, ситкә ташып бөттөк тә, хәҙер килеп, йыйын ят-йораттан аҡса теләнселәйбеҙ… Тапманы түгел, тапты Василий Петрович ҡала иҡтисадына аҡса һалырға теләүселәрҙе. Яйын тура килтереп, исеме бар донъяға билдәле булған ҙур сит ил фирмаһынан вәкилдәр алып ҡайтҡайны ул ҡалаға бынан биш ай элек. Ул саҡтағы бәлә-мәшәҡәтте, кәмһенеү-хурланыуҙы һөйләп тә килештерерлек түгел… Сит ил белгестәре, үҙҙәренә тәҡдим ителгән ике заводты ҡараған саҡта, урта быуаттар музейында йөрөгәндәй

булдылар бит. Ундағы хәлдәрҙең торошо бер ҡарауҙан кире боролоп китерлек ине. Эш шуға бара ла ине инде. Сит ил эшҡыуарҙарының килем-сығымға танауы сос, беҙ генә ул, йөнтәфи маймыл кеүек, аҫтыбыҙҙа ятҡан алтынды тоймайбыҙ, тойһаҡ та, тотмайбыҙ. Нисек кенә булмаһын, бер ай самаһы ваҡыт уҙып, шул хәтлем тырышлыҡ һалып та сираттағы һемәйеүгә күнергә дусарлығын тоя башлаған Василий Петровичҡа шылтыраттылар ҙа тегеләр, тәҡдименең ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыуы тураһында хәбәр иттеләр. Тикшереп, үҙҙәренсә иҫәп-хисап һалып ултырғандарҙыр, күрәһең. Иҡтисадты күтәреүгә йүнәлтелгән хөкүмәт сәйәсәтенең төп нөхсәһе инвестиция йәлеп итеүҙән ғибәрәт бит. Ә сит ил бизнесмендарының аҡсаһын йәлеп итеү – үҙе бер дан. Тимәк, һин өҫтәлең артында салбар төбөн ышҡып бушҡа ултырмайһың, тырышлыҡ һалып, үҙ ҡулың аҫтындағы ҡалала иҡтисад, сауҙа өсөн ыңғай шарттар тыуҙырғанһың, тәртип булдырғанһың. Ул аҡса менән эштең рәтен, тәртибен белгән сит ил белгестәре киләсәк, улар туҡтаһыҙ үҙгәртеп ҡороуҙарҙан алйып, киләсәккә ышанысын өҙгән үҙебеҙҙең халыҡты эшкә, тәртипкә өйрәтәсәк. Рәсәйҙә ғүмер баҡый шулай булған. Әүәлге уңышһыҙлыҡтарынан арып, үҙен хәйерселәй тоя башлаған хакимиәт башлығының офоҡтары шунда киңәйеп, арҡаһына, гүйә, пар ҡанат үҫте. Киләсәгенә лә ышанысы артты уның, сөнки был эшенең юғарыла ла ҙур баһа аласағы билдәле. Тимәк, уның хакимиәт башындағы көндәре лә бөтмәгән әле, Алла бирһә, урынында тағы ҡалыр, улай ғына ла түгел, юғарыраҡ үрләргә лә форсат сығыр, бәлки.

Шулай һәүетемсә генә һөйләшеп-килешеп, эш башларға ла күп ҡалмағайны. Өс айҙан теге заводтарға яңы ҡорамалдар килтереп, яйларға тейештәр. Әммә һуңғы ваҡытта ниндәйҙер аңлайышһыҙ хәлдәр тыуа башланы. Заводтарҙа әлегә ҡәҙәре ыңғай ғына барған әҙерлек эштәре, ниңәлер, кинәт кенә «абынды», һуңынан бөтөнләйгә туҡтап ҡалды. Теге фирманың белгестәре лә, бер көндө йыйылышып, эштәрен ташланылар ҙа ҡайтып киттеләр. Хафаға ҡалған Василий Петрович, телефонға «ултырып», фирма вәкәләтлегенә шылтыратырға кереште.

– Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, башлаған эштәрҙе туҡтатып торорға мәжбүр булдыҡ, – тип яуапланы уның һорауына фирма вәкиле. – Сөнки һуңғы ваҡытта алдан күрелмәгән сәйер хәлдәр килеп тыуҙы. Шуға күрә эштәрҙе дауам итеү өсөн тейешле шарттарҙы тапмайбыҙ.

– Һеҙ ниндәй сәйер хәлдәр тураһында һөйләйһегеҙ? – тип ғәжәпләнде Василий Петрович. – Ҡуйылған шарттар беҙҙең яҡтан энәһенән-ебенә хәтлем үтәлеп килә бит?

– Уныһы шулай ҙа, – вәкил бер аҙға тынып торҙо. – Ғәфү итегеҙ, – тине ул һуңында, – мин үҙемдән өҫтөн булған мәғлүмәттәрҙе һеҙгә хәбәр итә алмайым.

Бәйләнеш шунда өҙөлдө, ә Василий Петрович, телефонға күрәғара текләп, ишеткәненән ниндәй ҙә булһа һығымтаға килә алмай, ултыра бирҙе.

Ошо буталсыҡ хәлдең осона сығырға, тигән уй менән ул бөгөн үҙәккә барҙы.

– Һеҙҙең битарафлыҡ, башбаштаҡлыҡ һөҙөмтәһе был, – тине идара етәксеһе, Василий Петровичҡа һыйыр ялағандай һирәк кенә һары ҡаштары аҫтындағы йомро күҙҙәре менән өҫтәл аша һөҙөп ҡарап. – Ҡулға килгән малды ла тота алмайһығыҙ. Әйткәндәй, һеҙҙең ҡалалағы бәлә-ҡаза, тәртипһеҙлек, йүнһеҙлектәр, хатта уның, – шул урында идара етәксеһе бармағын түшәмгә төбәне, – теңкәһен ҡоротоп бөттө инде. Насар эшләйһегеҙ, Василий

Петрович, йәғни, бөтөнләй эшләмәйһегеҙ, тиергә лә була. Ҡаланы ҡарамайһығыҙ, халыҡ мәнфәғәтен йүнләмәйһегеҙ. Ярамай улай, ҡартайып, арынығыҙ, ахыры. Аңлайым, мин дә бит һеҙҙән күпкә йәш түгелмен, – идара етәксеһе өҫтәл артынан тороп, шаңҡып ултырған Василий Петровичҡа арты менән боролдо ла, тәҙрәгә ҡарап, бер аҙ тын торҙо. – Яҡшы йөк атының да сиге бар, Василий Петрович, – тип дауам итте ул, тауышын бер аҙ йомшартып. – Артыбыҙҙан йәштәр баҫтырыҡлай. Киләсәк йәштәр ҡулында. Ә хәҙер, – тип беләгендәге затлы сәғәтенә ҡараны идара етәксеһе,– ваҡытым тар, Василий Петрович, эш күтә.

Башына күҫәк төшкәндәй тойған Василий Петрович, ишек янына еткәс, кабинет хужаһының тауышынан тертләп, абына яҙҙы.

– Шуны әйтергә онотҡанмын, – тине кабинет хужаһы, уны ишек төбөндә ҡыуып еткәс. – Ҡалағыҙ янындағы күлдә һәләк матур утрау бар икән, – ул Василий Петровичтың күҙҙәренә текләне. – Шул утрауҙы, берүк, ҡулығыҙҙын ысҡындырмағыҙ. Сөнки, – ул мәғәнәле генә итеп ҡарашын өҫкә һирпте, – уның менән бик тә мәртәбәле инсандар ҡыҙыҡһына, ишетәһегеҙме?

Урамға сыҡҡан Василий Петрович, әлеге хәлдән һушын йыя алмай, байтаҡ ҡына ваҡыт зиһене таралып йөрөнө. Был ни булды әле? Нисек инде, ул эшләмәй була? Сит ил инвесторҙарын ул тапмай, кем тапҡан һуң? Етмәһә, бынауы хәстрүш идара етәксеһенең ҡала хакимиәте башлығын битәрләргә, уға киҫәтеү яһарға ни хаҡы бар? Тик хөкүмәт башлығы ғына, уны алдына баҫтырып, ороша ала! Бына ғәжәп, ниңә шул маңҡаға барешеп ултырҙым һуң әле? Кәңәш итергә, тип кенә кергәйнем шул, унан шундай оятһыҙлыҡ көтмәгәйнем, шуға албырғап ҡалдым…

Идараға кире барып, тегене һүгеп ташларға ҡыҙып та киткәйне Василий Петрович бер мәлдә, әммә, ресторанда хәмер йомдорғас, тынысланып, уйынан кире ҡайтты.

Осрашыр әле, донъя – ҡуласа…

Тап шунда хөкүмәттә юғары вазифа биләгән күптәнге танышы Вәкилевты осратты ул. Вәкилев, Василий Петровичтың зарын тыңлап бөткәс, мәғәнәле генә көләмһерәп ҡуйҙы.

– Ул хәлде мин һинән дә яҡшыраҡ беләм, – тине ул, Василий Петровичҡа ҡыҙғаныслы ҡараш ташлап. – Ҡыҫҡаһы, дуҫҡайым, һине урыныңдан йолҡоп алып, тарих сүплегенә бырғатырға йыйыналар. Яман хәбәрем өсөн кисерә күр, әммә тап шулай.

Баҡһаң, баяғы идара етәксеһе Василий Петровичтың урынына... әлеге ваҡытта ҡайҙалыр сит ил вәкәләтлегендә эшләп йөрөгән кейәүен ҡуйырға йыйына икән. Был мәсьәлә юғарыла ла хәл ителгән тиерлек, Василий Петровичҡа ҡарышып, сәбәләнеүҙән, имеш, фәтеүә булмаясаҡ. Василий Петрович табып, ҡалаға йәлеп иткән сит ил инвестицияларын да, яһалма рәүештә төрлө ҡаршылыҡтар ҡуйып, туҡтатҡандар. Сөнки ул инвестициялар, сираттағы ҡала башлығы ағзалығын ҡарағанда, Василий Петрович мәрәйенә китәсәк, ул саҡта инде уны вазифаһынан бушатыу ҙа еңел булмаясаҡ. Ә, хәҙер килеп, уны шул инвестицияларҙы юғалтыуҙа ғәйепләргә була. Һуңынан, кейәүен хакимиәт башына ҡуйғас, Василий Петровичтың сит ил фирмаһы менән төҙөгән килешеүҙәрен яңы исемдән тергеҙеп, яңы хакимиәт башлығы үҙенә дан-шөһрәт ҡаҙанасаҡ, ҡайныһының сабатаһы ла түргәрәк эленәсәк…

– Борондан килгән «умарта тәғлимәте» был, – тип көлдө Вәкилев. – Бал ҡорто, йәнтәслим йөрөп, йәй буйы бал йыя, ә ҡортсо кәрәҙҙәрҙең тулғанын көтөп кенә тора ла, умартаны асып, балды ала…

«Бынағайыш,– тип уйланы эстән генә Василий Петрович, тәне эҫеле-һыуыҡлы булып. – Теге хәстрүштең унын менән шундай әрһеҙ һөйләшеүенең сәбәбе асыҡланды».

– Ошо турала үҙе менән һөйләшһәм, ни сығыр? – Василий Петрович, башын ҡағып, юғарыға ымланы.

– Иркеңдә, – тине Вәкилев рыя ғына. – Тик тегеләргә ҡаршы дәлилдәрең бармы? Икенсенән, тегенең кейәүе, эше буйынса, сит ил менән бәйләнештә тора, ә был инде, аҙмы-күпме, халыҡ-ара сәйәсәт тигән һүҙ. Ә һиңә ул даирәләргә ҡыҫылырға тырышыу айға һонолоу менән бер… Өсөнсөнән, иҫке кадрҙарҙан арыныуға йүнәлтелгән сәйәсәт тик һинең турала ғына түгел.

…Тамағына ҡаҡырығы ҡатып, танауы ҡыҫыған Василий Петрович ҡаты бышҡырып алды ла, һыуыҡтысын һүндереп, машинанан сыҡты. Йөҙөнә асфальттың ҡайнар ипкене бәрелде, ҙур тиҙлектә үтеп киткән машинаның еле тиргә ҡатҡан күлдәгенең иҙеүен тартҡыланы. Алда ваҡыт етәрлек әле, тип ауыр уйҙарын сикләне Василий Петрович, күҙҙәре алдында осоп маҙаһыҙлаған себенде ҡулы менән ҡыуырға маташып. Һуҡыр – күрермен, һаңрау – ишетермен, тигән. Һис юғында, үҙемдең артымда шундай көл-торонбаш ҡалдырырмын, төтөнөнә сәсәп иларһығыҙ…

Утрау, тигәндән, теге фирманың хужаһы ла, ниңәлер, бик ҡыҙыҡһына ине унын менән. Ҡалаға аҡсаһын һалып, иҡтисадты тергеҙһә, үҙенә ҡуртымға бирергә лә булыр ине ул утрауҙы, йәлме ни ҡарауһыҙ ятҡан ус аяһындай таш өйөмө…

Василий Петрович сәғәтенә күҙ һалды. Юрканың йүнһеҙлеге юлды өҙмәһә, ҡалаға етеп тә барырҙар ине. Танауына әсе төтөн еҫе кергәндәй булды шунда. Алда, юлдың уңға боролоп, күҙ яҙҙырған тәңгәлендә, һауа зәңгәрләнеп торған һымаҡ. Янғын сыҡмағайы, көндәр ямаҡай эҫе бит, бар донъя кибеп, саңланып бөткән.

Машинаны ҡабыҙҙы ла Василий Петрович, юл ситләп, аҡрын ғына шул яҡҡа йүнәлде. Машина компьютеры, ни ҡылыуың был, тәгәрмәс иҙелгән бит, тигәндәй, бер туҡтауһыҙ сыпылдап, маҙаһыҙлай башланы.

Боролош артында, урман араһынан сығып, оҙон үлән баҫҡан арба юлы ҡушылған ерҙә, әрһеҙ генә кейенгән урта йәштәрҙәге ир менән ҡатын, йәмшәйеп бөткән мангалға ут ҡабыҙып, төтөн сығарғандар, имеш. Юл ситендәге ерек әрәмәһе араһынан текә ярлы инеш аға, инеш аръяғында ҡыңғырау сыңлай. Мангал янына балта менән генә арлы-бирле юнып әтмәләнгән өҫтәл ҡуйылған, эргәһендәге ике түмәргә таҡта ҡағылған – эскәмйә ишаратылыр быныһы. Ҙур еҙ табаҡта – ебетелгән ит. Ҡайҙа ҡарама – сүп-сар, буш шешә лә йыртыҡ ҡағыҙ, ир менән ҡатындың да йөҙ-һыны бер күреүҙән тәүбәгә килерлек.

Василий Петрович машинанан сыҡты ла, ҡулдарын иркен салбарының кеҫәләренә тығып, майҙансыҡта әйләнеп йөрөй башланы. Мангалға утын ярып аҙапланған асҡаҡ ир, һын-ҡиәфәтенән һиммәте ташып торған үткенсенән ҡыйынһынып, ҡулындағы балтаһын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, ярым сүгәләгән хәлдә ҡатып ҡалды. Төҫө уңып, әрһеҙләнгән оҙон күлдәк кейгән, ҡара сәстәре майланып торған йомро кәүҙәле ҡатын йәһәт кенә яр аҫтына төшөп, күҙҙән юғалды.

– Нимә эшләйһең бында? – тип һораны Василий Петрович, бер ни тиклем теге иргә диҡҡәт менән ҡарап торғас. Ир кеше, йәпһеҙләнеп, тырнанды ла ҡарашын ситкә алды.

– Аҡса бөттө…ҡыҙымды ҡалаға уҡырға биргәйнем. Аптыраған көндән инде.

Ирҙең тырпайған мыйығына тәмәке көлө йәбешеп ҡатҡан, кипкән ирендәре араһынан серек тештәре һарғайып күренә.

Василий Петрович тағы ла ян-яғына ҡаранып алды.

– Һым-м…Аҡса эшләргә булдың инде, әләйһә… Тик кем, ҡурҡмай ғына, һиндәй ҡараҫҡы янына туҡтап, ерәнмәй генә ашанып ултырыр икән?

– Бына, һеҙ туҡтаныгыҙ…

Василий Петрович, тегенең был хәбәренән көлөргәме, иларғамы белмәгәндәй, бер мәлгә генә телдән ҡалып торғас, пыр туҙып, урынында әйләнеп үк китте.

– Туҡтар инемме, машинам боҙолмаһа? Ана, күр, тиҙлектәрен өҫтәп үтеп китәләр! Был килеш, бушҡа әҙәм ҡурҡытып торғансы, мылтыҡ тотоп, юл баҫыр инең?! Ҡиәфәт-һының менән урмандан сыҡҡан юлбаҫарҙан һис тә ҡайтыш түгелһең бит! Ә юлға сығып, сауҙа итергә булғас, – ул иргә боролоп, тегенең йөҙөнә бармағын төбәне, – иң тәүҙә бысраҡ һаҡал-мыйығыңды ҡырып ташла, битеңде йыу, матур итеп кейен, алъяпҡыс таҡ, мангал, өҫтәл, ултырғыстарыңды яңыға алмаштырып, аҡ япма йәй, йәмле итеп сатыр ҡуй, ҡатыныңды йыуындыр, матур итеп биҙәнеп-төҙәнеп йөрөһөн, ошо сүп-сарҙы, – Василий Петрович аяҡ аҫтында ятҡан буш шешәне йән асыуы менән ситкә тибеп осорҙо, – йыйнап, күҙҙән ал! Шул саҡта ғына һинең яныңа кеше туҡтар, шунда ғына ҡулыңа аҡса төшөр!

Әңгәмәсеһе, күҙҙәрен күтәреп ҡарарға ла ҡыймай, урынында тапанды.

– Улайтырға ҡағыҙым юҡ…

– Ниндәй ҡағыҙ кәрәк һиңә?

– Сауҙа итергә рөхсәт ҡағыҙым юҡ…

Василий Петрович ниҙер әйтергә уҡталды ла, ниңә бушҡа һүҙ әрәм итәм әле, тигәндәй, ҡулын өмөтһөҙ һелтәп, ситкә китте һәм кинәт ҡупҡан асыуынан яйлап һүрелә башланы. Ни аралалыр әрәмә араһынан сығып өлгөргән ҡатынҡай, йылдам ғына йөрөп, тирә-йүндәге сүп-сарҙы йыйырға кереште.

Инеш өҫтөндә елпелдәп осҡан күбәләктәр өйөрөн күҙәтеп, нисек ваҡыт уҙғарырға белмәй аҙаған Василий Петрович бер аҙҙан мангал янына ҡабат боролоп килде.

– Атаң башын ҡарап тораһыңмы? – тине ул теге иргә тынысланған тауыш менән. – Ҡуй утҡа шампурыңды, тамаҡ ялғап алырға кәрәк…

Тиҙҙән тирә-йүнгә, ауыҙ һыуын ағыҙып, әскелтем шашлыҡ еҫе таралды. Нимә көткәнен дә белмәй, бушҡа ваҡыт уҙғарыуҙан арыған Василий Петрович кеҫә телефонын сығарып ҡараны ла, үҙе лә һиҙмәҫтән, ауыҙ эсенән генә һүгенеп ҡуйҙы. Шул саҡ уның артынан:

– Телефон ана тегендә тота, – тигән тауыш ишетелде. Йыуантыҡ ҡатынҡай, ҡулын һоноп, ҡайҙалыр һыу буйына күрһәтә ине.

– Йә, күрһәт әле, – өмөтө уянған Василий Петрович ҡатын артынан һыу буйына эйәрҙе. Ҡатынҡай яр ситенә баҫты ла:

– Ятыу уртаһындағы йомро ташты күрәһегеҙме? Шул таш өҫтөндә тота ,– тине.

Тулы һыулы инеш арба кисеүенән түбәндә түңәрәк кенә ятыу хасил иткән. Ятыу ярын ҡуйы ҡыуаҡлыҡ, бейек ҡамыш баҫҡан, ваҡ ҡырсынға аҡ күбәләк көтөүе өймәкләшкән. Төбө күренеп ятҡан таҙа ятыу өҫтөндә энәғараҡтар, күбәләктәр ҡыуышып оса. Ятыуҙың ҡап уртаһында, пеләш кеше түбәһеләй, шыма бүкәнташ һыуҙан ҡалҡып тора.

Василий Петрович теге ҡатынға шикле генә ҡараш ташланы.

– Юҡ, юҡ, алдашмайым, – тине ҡатынҡай, уғата ныҡышып. – Һеҙҙең кеүек абруйлы кешегә лаҡап һөйләргә ни… Шул таш өҫтөнә менеп, ҡиблаға ҡарап ултырһағыҙ, һөйләшә алаһығыҙ. Эргәләге һымаҡ, бик асыҡ ишетелә.

Аяҡ кейемен һалып, салбарын тубығына тиклем төргән Василий Петрович ялан тәпәй һыуға төштө. Һалҡынса инеш һыуынан эҫегә йонсоған тәне рәхәт зымбырҙаны, хатта күҙ алдары яҡтырып китте. Кинәт кенә бала сағы иҫенә килде. Ҡытлыҡ заманы. Йәй буйы, аяҡ кейемен һаҡлап, ялан тәпәй йөрөрҙәр ине улар, табандары, мал тояғылай булып, ҡатып бөтәр, баҫҡан ерҙе лә тоймаҫ, ауыртмаҫ ине. Шуға ла, бәлки, әлегә ҡәҙәре ауырыу-һыҙлауҙы белмәне ул… Бөгөнгө мажараларым бөтмәгән, ахыры, тип уйланы ул, тубыҡтан һыу кисеп, ятыу уртаһындағы йомро ташҡа барғанда.

Ҡояш аҫтында мунса ташылай ҡыҙған бүкәнташ өҫтөнә менеп ҡунаҡлағас, Василий Петровичтың кеҫә телефоны, йоҡоһо туйып уянған йәш балалай, шат «көлөп» алды.

– Әлеге мәлдәге хәлемде һин күҙ алдыңа ла килтерә алмайһың, – тине ул күптәнге дуҫына, ошо райондың хакимиәт башлығына. – Аҡылымдан яҙмаҫ борон, тиҙерәк килеп ал…

Бер сәғәттән килеп еткән район хакимиәте башлығы Ғәлимовтың күҙҙәренә, берҙән, таң ҡалдырғыс хозур, икенсенән, һын ҡатырғыс мәрәкә күренеш асылды. Аяҡтарын һыуға тығып, ятыу уртаһындағы таш өҫтөндә ултырған Василий Петровичтың башында гәзиттән эшләнгән ҙур кәпәс, бер ҡулында боҫорап торған шампур, икенсеһендә хәмерле көрөшкә, һыу эсендәге аяҡтарына ваҡ балыҡ йыйылған, ә тирәһендә, күҙ сыбарларлыҡ булып, бихисап күбәләктәр оса…

Һуңынан, мунсала йыуынып сыҡҡас, мул табын артында теле сиселгән Василий Петрович дуҫына бөгөнгө хәлдәрҙе тулайым бәйән итеп бирҙе.

– Күрерҙәр әле инвестицияның артын әҙергә-хәҙер йөрөгән әрәмтамаҡтар, – тип һөйләнде иҫерек Василий Петрович, теле көрмәлеп. – Күрһәтермен, мин дә йүкәнән ишелмәгән… Пенсияға сыҡһам, насармы ни? Грецияға китәм дә ятам шунда: унда минең матур йортом бар, эргәһендә генә аҡ ҡомло диңгеҙ яры, бейек пальмалар, итәғәтле кешеләр… Батша заманында ла немецтар, инглиздар, француздар беҙгә эшкә килгәндәр, ә беҙҙең кенәздәр, графтар, киреһенсә, шунда сығып йәшәгәндәр. Әле лә шулай… Мин кенәз түгелме ни? Кенәздән ни ерем ҡайтыш? Ялыҡһам, илемә кире ҡайтырмын. Юлға сығырмын да шашлыҡ менән һатыу итермен, ха-ха!

Йәнәһе, французлар әйтмешләй, си ля ви: тормош шулай.

7

…Сауҙагәр Кәрим Зәйнулла улы Латипов, мейес янындағы мендәрле урындыҡтан тороп, йәшел еләненең иҙеүҙәрен доғалы билбауы аҫтына йыйнаны ла тәҙрә янына килде. Ҡалын тәҙрә ҡорғаны артында күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек төн ҡараһы хөкөм һөрә. Көҙгө һалҡын ел, юҫығын юғалтҡан һуҡырҙай, бәрелә-һуғыла утрау буйлап һыҙғырып йөрөй, йорт алдындағы бейек ҡайындарҙы шаулата, ҡыйыҡ аҫтына кереп, мөрйәләрҙә геүләй. Тәҙрә быялаларына һирәк кенә ямғыр тамсылары ҡуна. Ҡайһы саҡта, төн пәрҙәһен тишеп, күлдең арғы ярындағы ҡаланың һары уттары емелдәшеп ала.

Утрауҙа урынлашҡан ике ҡатлы йорт эсендә ҡәбер тынлығы. Иҙән таҡталары аҫтында күсәләр сырҡылдаша. Һуңғы ваҡытта бигерәк аҙҙы улар, ҡайғылы йортто күсә баҫа, тигәндәре шулдыр.

Кәрим Зәйнулла улы тәҙрә ҡорғанын тартып, бүлмә уртаһында торған өҫтәл янына килде. Йорттағы ҡолаҡ сыңларлыҡ тынлыҡта аяғындағы йомшаҡ ойоҡбаштарҙың иҙәнгә һыпырылыуы ишетелә хатта. Әүәле көнө-төнө геүләп торған йортта һуңғы ваҡытта тормош һүнде. Утрауҙа эшләгән тиҫтәнән ашыу ялсы-хеҙмәтселәр, бер-бер артлы ҡайҙалыр юғалып, эшкә сыҡмаҫ булды. Бөгөн килеп, уның янында тоғро дуҫы Миңлеғол ғына ҡалды. Әле ул, йорттоң беренсе ҡатындағы аш бүлмәһендә, тиҙ ҡулға ниҙер бешереп маташа, сөнки ашнаҡсылар бөгәсә бөтөнләй күренмәне.

Кәрим Зәйнулла улы ошо утрауҙы бынан егерме биш йыл элек, мәрәкә булһын тип, һатып алғайны. Күлдең ҡап уртаһында урынлашҡан «өсмөйөшлө» утрау уны үҙенең аулаҡлығы, хозурлығы менән йәлеп итте. Утрауҙан ҡалаға тиклемге ара саҡрым ярымдан ашыу. Ҡарап тороуға тигеҙ яҡлы өсмөйөш рәүешендәге утрауҙың оҙонлоғо саҡрым самаһына һуҙыла, утрауҙың мөйөштәрендә, текә булып, аҡ ташлы ҡырлас ҡаялар ҡалҡып тора, шулар араһындағы ер, уйпатланып, ваҡ ҡырсынташ ҡаплаған һөҙәк яры менән күлгә төшә. Утрауҙың ҡалаға ҡараған яры, түңәрәк яһап, эскә керә лә шунда тымыҡ боғаҙ хасил итә. Шул боғаҙҙың ярына Кәрим таштан, йыһазлап, ике ҡатлы йорт күтәрҙе, кәмә ҡуйырлыҡ биҫтә төҙөнө, ҡая баштарына аҡ таштан аулаҡтар ҡуйҙы, сауҡа, шыршы, муйыл ағастары араһына таш һуҡмаҡтар һалды… Мәшәҡәтле кәсебенән, тормош ығы-зығыһынан арыған саҡтарында ошонда килеп, аулаҡта ял итер ине ул әүәле. Тормош ғауғаһынан ваҡытлыса ғына булһа ла арынып, иҫ алғандай булғас, туған-тыумасаларын, дуҫтарын саҡырып, ҡунаҡ итер ине…

Хәтирәләргә бирелгән сауҙагәр, өҫтәлдәге көмөш ҡыңғырауҙы ҡулына алғайны, ҡулы бешкәндәй, йәһәт кенә кире ҡуйҙы. Онотолоп, хеҙмәтсе ҡыҙҙан сәй һорарға булған, имеш. Мейес яғыусы ла булмағас, өйҙә һалҡын. Ул йыһазлы шкаф янына килеп, ишеген асты ла йомро ҡара шешәнән бейек һауытҡа шарап һалды.

Бөгөн ул һуңғы лавкаһын япты. Быға ҡәҙәре дөрләп торған сауҙаһын тамамлап, һүндерҙе шулай. Сөнки ҡаланы ҡыҙылдар баҫып килә. Ҡалдыҡ эшен түңәрәкләгәс, уға ла бында артабан ҡалыуҙан фәтеүә юҡ. Һуғыш-ҡыйралышҡа бирелеп, хоҡуҡ, әхлаҡ, тәртип юғалған илдә эшҡыуарлыҡ йөрөтөү генә түгел, әҙәм рәүешле йәшәп тә булмаҫ инде. Ярай әле, ғаиләһен сит илгә сығарып өлгөрҙө. Ҡатыны Минифа дүрт балаһы менән йылдан ашыу инде Төркиәлә көн күрә. Тәүҙәрәк сауҙагәрҙең күңелендә, тамуҡтан сыҡҡан шайтандай, көтмәгәндә илгә хужа булған большевиктарҙы аҡ ғәскәрҙәр ҡыуыр ҙа, ата – улын, әсә ҡыҙын танымаҫ хәлгә етеп, ҡанға батҡан илдә, ниһайәт, тыныслыҡ урынлашыр, әүәлгесә эш башҡарырлыҡ тәртип булдырылыр, тигән өмөтө бар ине. Шуға ла ул, эшен һүндермәҫкә тырышып, илдә ҡалды. Тик тиҙҙән еңеүле һөжүмдәре менән баш ҡала тупһаһына аяҡ баҫырға еткән аҡтар, ни ғилдә менәндер, уңышһыҙлыҡҡа дусар булып, сигенә, ҡаса башланы. Тәртипһеҙлектәренең, ябай халыҡҡа ҡарата ҡатылыҡтарының һөҙөмтәһе булды был. Аҡ офицерҙар менән аралашырға мәжбүр булған сауҙагәр уларҙың эскеселегенә, башбаштаҡлығына таң ҡалыр ине. Уларҙың башында тик Николай батшаны күтәреп, тәхетенә кире ҡайтарыу булды. Шундай бөйөк илде теҙгә сүгергә, быумаһы ҡупҡан сырхауҙай, үҙ-үҙен ҡыйнарға мәжбүр иткән хәлдәрҙең сәбәбен аңларға, шул йәһәттән тейешле яңы саралар күрергә теләмәне улар. Уйҙарында үҙҙәре менән риза булмағандарҙы атыу ҙа киҫеү генә ине. Вәхшилек менән тәртип ҡуйып буламы ни? Шуға ла яҡты

киләсәккә тамам өмөтө һүрелгән Кәрим Зәйнулла улы һуңғы ай һуҙымында бындағы кәсебен өҙөү, сауҙаһын ябыу менән мәшғүл булды. Ғүмер буйы тотҡан эшен үҙ ҡулдары менән быуып, һәләкәткә дусар иткән сауҙагәрҙең күңеле һүрелеп, ауыр кисерештәренән йөҙө һурығып йөрөгән сағы. Әҙәм балаһы һәр саҡ шулай: уҙған ғүмеркәйенең баһаһын, бөгөнгө көнөнөң ҡәҙерен, киләсәгенең хаҡын белмәй. Бер уйлаһаң, уларҙы белеүҙән ни файҙа? Йыйған малыңды ғына түгел, иҫтәлектәрең, өмөттәрең менән үҙеңде лә бергә арматорма бутап, мәңгелек ҡотопҡа елдереүсе ваҡыт даръяһы бер кемде лә ҡыҙғанмай. Күпме генә ғүмеркәйҙәр ҡалғандыр ҙа, нисек һәм ҡайҙа ғына уҙыр икән улар? Тыуған ерҙән ҡыуылғас, һөйәктәре ят ерҙә сererме ни шулай? Әллә ошонда, шартлатмайынса урынынан ҡуҙғалтып булмаған таш ҡаялай, нимәгә лә риза булып, тик торорғамы? Атығыҙ, аҫығыҙ, тик үҙ еремә һалығыҙ, тип… Тик ул шундай яман хәлгә тарый ҡалһа, йәш ҡатыны Зөләйха ҡайғыһын күтәрә алмаҫ шул. Зөләйханың унан ауырға ҡалыуына ете ай инде. Уйындан уймаҡ сыға, тиеүҙәре, шулдыр. Ғаиләһен ситкә оҙатҡас, яңғыҙы ҡалып, бошҡан күңелен шарап менән йыуатҡан бер кистә бүлмәһен йыйыштырырға кергән йәш ҡыҙҙы йығып, танһығын ҡандырғайны ул. Билдәле, ул аҙап берҙән бөтәме ни, яйы тура килгән һайын, ҡабатланып торҙо, меҫкен ҡыҙҙың да ҡарышыр әмәле юҡ, үҙенә лә йәшәргә, ҡартайып эшлектән сыҡҡан атаһын да ҡарарға кәрәк бит. Бер көндө һыуға ташланған еренән ҡотҡарып ҡалдылар Зөләйханы. Ауырға ҡалғанын һиҙгәс, хурлыҡҡа ҡалыуҙан үлемде артыҡ күреп, үҙ башына үҙе етергә булған икән шымыҡ ҡыҙ. Шунан һуң, мулланан ижап уҡытып, Зөләйханы хәләл ефетлеккә алды, ҡаланың күл буйындағы урамынан һайлап, йәш ҡатынына йорт алып бирҙе. Йәш балаһын ҡулына алып бәүетергә насип булырмы икән уға? Ҡаланы ҡыҙылдар баҫырға тора, нисек булһа ла халыҡты тәртиптә тотҡан аҡ ғәскәрҙәр ҡаланы ҡалдырғас, йыйын әтрәгәләм тағы баш күтәрә, кеше талай, йорт баҫа башланы. Уҙған төндә уның күптәнге танышы сауҙагәр Пантелеевтың өйөн талап, ут төрткәндәр, хужалары ҡасып ҡотолғанмы-юҡмы, билдәһеҙ.

Кәрим Зәйнулла улы стенаға беркетелгән ҙур көҙгө алдына килеп баҫты. Көҙгөләге тәбәнәк буйлы, оло йәштәрҙәге йыуантыҡ ирҙең йөҙө аруҡ таушалған, һаҡал-мыйығы ҡырҡылмаған, түбәһендәге һирәк аҡ сәстәре төрлө яҡҡа тырпайып тора. Ул, әсе көлөмһөрәп, ҡулындағы шараплы стакан менән көҙгөләге һынын тәбрикләне. Ғүмереңдә бағышлаған эштәрҙең имен-аман тамамланыуы менән ҡотлайым, алдағы тормошоңда иҫәнлек-һаулыҡ теләйем, йәнәһе.

Шул саҡ тыштағы ағас баҫмалар аша кемдер дөбөр-дөбөр йүгереп уҙҙы. Сауҙагәр тәҙрә янына килеп, ҡорғанды асыуға, ишектә ялсыһы Миңлеғол күренде.

– Кәрим, утрауға әле генә ике кәмә яғылды, – тине ҡыҙыу йүгереүҙән бышлыҡҡан Миңлеғол. Икәү ҡалғанда бер-береһенә исемләп өндәшәләр улар, бала саҡтан алып гелән бергә булғанға инде. – Кәмәләрҙә унарлаған кеше. Яҡшы ниәтлеләр ҡара төндә йөрөмәҫ…

Сауҙагәр бер мәл генә өҫ кейеме ямғырҙан һыуланған Миңлеғолға ҡарап торҙо. Уның бар ҡиәфәте, күптән нимәнелер көтөп, ниһайәт, көткәненә инанған кешене хәтерләтә ине. Шунан ул, йылдам ҡуҙғалып, бейек шкаф янына килде лә, ниндәйҙер тотҡаға баҫып, уны еңел генә ситкә этәрҙе, шкаф артында йәшерен ишек күренде. Ул, ҡулын иҙәп, Миңлеғолдо саҡырҙы ла ишеккә кереп юғалды. Тауҙай ауыр шкаф, тауышһыҙ ғына ҡуҙғалып, урынына кире ҡайтты.

Тышта ямғыр көсәйгәйне. Ямғыр шыбырҙауы, ағас баштарын шаулатҡан ел тауышына ҡушылып, йорт янында, ер аҫтынан сыҡҡандай, ҡайҙандыр пәйҙә булған ике кешенең ҡабалан аҙымдарын йәшерҙе.

Яр буйына етәрәк, алдан барған Миңлеғол кинәт кенә туҡтап ҡалды ла, иптәшенә күрһәтеп, һыу буйына ымланы. Ҡыуаҡтар араһына йәшерелгән кәмә тәңгәлендә ҡыҙғылт осҡон тоҡанып һүнде, танауға әсе тәмәке төтөнө бәрелде. Кәрим ҡуйынынан алтатарын сығарғайны, Миңлеғол, киҫәтеп, бармағын иренөнә терәне лә ҡараңғыға кереп ғәйеп булды. Кәрим, алтатарын төнгә төбәп, яңғыҙ ҡалды. Ел шаулауы аша йорт яғында ҡысҡырышҡан, һүгенгән тауыштар ишетелде. Ямғыр тамсылары сикәләрен еүешләп, яғаһы аҫтына аға. Күпме шулай торғандыр, ниһайәт, яр буйынан өйрәк ҡыжҡылданы…

– Эй, раббым, зинһар, кисерә күр ҡолоңдо… ләйләһи–илалла…

Кәмәне күлгә төшөрөп, ишкәккә ултырған Миңлеғол, ауыҙ эсенән генә уҡынып, айҙай ялтыр хәнйәрен һыуҙа сайҡай ине.

Тап шул мәлдә ярҙа мылтыҡ аттылар, мылтыҡ йәҙрәһе, уҫал һыҙғырып, кәмә артындағы һыуҙы сәсрәтте. Кәрим, алтатарын ярҙа шәйләнгән ҡара шәүләгә төбәп, өс тапҡыр тәтегә баҫты. Ярҙа кемдеңдер әсе тиргәнеүе ишетелде.

– Атма, Кәрим, берүк, атма! – тип ҡысҡырҙы Миңлеғол. – Алтатарыңдың ялҡынына төбәп ата башлаһалар, бөттө баш.

Бер аҙҙан утрау өҫтөнән ағылған болоттарҙы бейек ут ялҡыны ҡыҙылға мансыны, унда бер туҡтауһыҙ шартлатып мылтыҡ атҡан, ҡыйҡыу-һөрән һалған тауыштар ишетелде, әйтерһең дә, һауанан утрауға ен-бәрейҙәр өйөрө төшөп, ҡот осҡос байрам уҙғаралар ине. Кәмәлә барған Кәримдең сикәһенән ямғыр тамсыларына ҡушылып аҡҡан күҙ йәштәрен төн ҡараңғыһы йәшерҙе…

…Төндөң ялбыр шәүләләре өҫтәлдә янған һуҡыр шәм яҡтыһынан, гүйә, өй босмаҡтарына ҡасҡандар ҙа бүлмәләге ир менән ҡатындың мөхәббәт аҙабын шыпырт ҡына күҙәтәләр. Күрше бүлмәлә Миңлеғолдоң ара-тирә ғәйрәтле хырлауы ишетелә. Ҡартлыҡтан зиһене буталған Зөләйханың атаһы аңлайышһыҙ ауаздар менән төшөндә кемделер тиргәй йә хихылдап көлөп ала...

Кәрим Зәйнулла улы ҡатынынан ҡағыҙ менән ҡәләм һорап алды ла өҫтәл артына ултырып хат яҙҙы. Яҙыуынан ара-тирә туҡтап, үҙенә һыйынып ултырған Зөләйхаһының йомрайған биленән ҡосто, күҙҙәренән, ирендәренән иркәләп үпте. Ауырайған ҡатынының йөҙө түңәрәкләнеп, күҙҙәре уғата ҙурайып киткән, уның бар ҡиәфәтендә бөткөһөҙ сабырлыҡ, яҙмышына ризалыҡ сағыла. Шул күренештән сауҙагәрҙең күҙҙәренә йәш төйөлдө, ул, йөҙөн устары менән ҡаплап, хат өҫтөндә уйланғандай, бер аҙ тынып ултырҙы. Вәт, ҡәһәрле замана… Алланың ҡаты ҡәһәре төшкәндер был илгә, был халыҡҡа. Шулай булмаһа, әлегә ҡәҙәре һәүетемсә генә йәшәп ятҡан халыҡ, ҡапылдан ҡуҙғалып, шулай аҙып-туҙмаҫ ине. Ҡылған гонаһтары өсөн әҙәмдәрҙе язалар булһам, иң башта уларҙың аҡылын алырмын, тигән бит Хоҙай. Бында ҡалыу күрәләтә башыңа бәлә көтөү менән бер. Үҙеңде генә түгел, ауырлы ҡатыныңды ла йәлләмәҫтәр…

– Әлегә яныңда була алмайым, Зөләйхам, – тине ул ҡатынына, сәстәрен һыйпап. – Артымдан баҫтырыҡлап киләләр. Ул вәхшиҙәр аяу белмәй. Кендек әбейе Мөхлисәгә һинең турала әйткәнмен, ул һине ҡарап торор. Биргән аҡсаны һаҡлап ҡына тотон, сөнки был мәхшәрҙең ҡасан бөтөрө билдәһеҙ. Үҙеңде, баламды берүк һаҡла. Ҡыҙылдарҙы ҡыуғас та кире ҡайтырмын.

Ул өҫтәлдәге хатты алып, ҡатынына тотторҙо.

– Ошо хатты Хәкимйән ҡустыма бирерһең. Хәкимйәнде, беҙҙең ижапта

булған офицерҙы, иҫләйһеңме? Ул хәҙер хәрби кейемен һалған, бер төркөм иптәштәре менән урманда ята. Бер ҡайҙа ла китмәйем, көнөм бөткәнсе ҡыҙылдар менән алышасаҡмын, ти. Ул һине үҙе табыр. Әлегә хатты алыҫҡараҡ йәшереп тор, яттар күҙенә берүк эләкмәһен…

…Бер аҙҙан ҡапҡанан сыҡҡан ике шәүләне төн ҡараңғыһы йотто. Мәңгегә…

## 8

Сәркәтип ҡатын хакимиәт башлығының ҡабул итеү бүлмәһенә килеп кергән ҙур күҙлекле пеләш кешегә күҙ һирпеп кенә ҡараны ла, өндәшмәй ҡалып, ниҙер яҙыуында булды. Салбар ҡайышы аша аҫылынып торған йомро ҡорһаҡлы, һимеҙ йөҙлө тәбәнәк кеше, хакимиәт башлығы кабинетының ялтыр тотҡалы ишеген ашыҡмай ғына асты ла, айыуҙай тайыш баҫып, эскә үтте. Өҫтәл артында ултырған кабинет хужаһы кереүсегә ҡарамай ғына баш ҡаҡты һәм ҡаршыһындағы ҡала Советы депутаты Ғәлләмов Нурислам Әхәт улы менән әңгәмәһен дауам итте. Ошо мәлдә Василий Петровичтың йөҙөндә, аяҡ аҫтындағы әсе ҡуҙғалаҡты өҙөп ҡапҡандай, мәрәкә ҡиәфәт ҡатып ҡалғайны.

Ғүмер буйы уҡытыусылыҡта йөрөп олоғайған Ғәлләмов Нурислам Әхәт улы һын-ҡиәфәте менән баҡсалағы ҡараҫҡыны хәтерләтә. Уның ябыҡ кәүҙәһе кәкре ҡолғалай бейек, башындағы аҡ кәпәсе һәр саҡ йәмшек булыр, бишмәт-салбары ҡыҫҡа һәм һырыш, гүйә, кейеме эсендә кәүҙә түгел, ә ботаҡтары тырпайып торған ҡыу ағас. Осло эйәк-танаулы ябыҡ йөҙөн шырт баҫҡан, төпкә батҡан бәләкәй күҙҙәре тирәһендәге һырҙары, бала ҡулы менән ҡағыҙға төшөрөлгән ҡояш нурҙары һымаҡ, уның маңлайында, сикәләрендә тоташып, эреле-ваҡлы бихисап әүернә хасил иткән.

Ғәмәлдә ҡала Советы йә хакимиәт алдында туҙға яҙмаған тәҡдимдәр сығарыуы менән исем-шәриф ҡаҙанған инсандар рәтенән Нурислам Әхәт улы Ғәлләмов. Депутат булғансы, дини эшмәкәрлек менән шөғөлләнһә, уның өгөт-нәсихәте, әлеге фани донъяла аҙашып, юлдан яҙған ҡайһы берәүҙәрҙең күңеленә май булып ятыр ине, бәлки. Әммә алтын-көмөшкә ҡоролған был тормошта ҡала Советы депутатының изге теләк-тәҡдимдәре, фәлсәфи рәүештә инҡар ителмәһәләр ҙә, ғәҙәттә, тормошсан нигеҙләнеү тапмайҙар.

Василий Петрович өҫтәл артынан торҙо ла, ҡулдарын салбар кеҫәһенә тығып, кабинет иҙәненән ниҙер эҙләгәндәй, мөйөштән мөйөшкә йөрөй башланы.

– Дөрөҫ аңлаһам, хөрмәтле Нурислам Әхәтович, һеҙ утрауҙа урынлашҡан йорт-ҡаралтыларҙы төҙөкләндереп, шифахана яһарға һәм шунда наркомандар менән алкоголиктарҙы дауаларға тәҡдим итәһегеҙ?

– Эйе-эйе,– тип ҡыуанып китте депутат, ултырған урынында ел өргән ҡараҫҡылай елпенеп. – Шул меҫкендәрҙе ҡаланан ситкә алып, күҙ-ҡарау аҫтындағы аулаҡ утрауҙа дауалағанда, уларҙың күптәре һауығып, әҙәми төҫкә ҡайтыр, йәмғиәткә файҙалы ағза булыр ине.

– Туған-тыумасаларың араһында наркомандар йә алкоголиктар бармы әллә?

– Аллам һаҡлаһын, – депутат ултырған ерендә ырғып уҡ китте.

– Тәҡдимегеҙҙе нигеҙләп, иҫәп-хисап та иткәнһегеҙҙер, моғайын. Ундағы ташландыҡ йорт-ҡаралтыны төҙөкләү, утрауҙы таҙартып рәткә килтереү өсөн күпме сығым талап ителәсәген беләһегеҙме? Етмәһә ул утрауға электр уты ла үткәрелмәгән бит әле…

– Аҡса шутына мин тыумыштан аңра булдым. Уның өсөн белгестәр бар.

Василий Петрович беләгендәге сәғәтенә күҙ һирпте һәм, һалмаҡ ҡына баҫып, кабинетының ҡалаға ҡараған ҙур тәҙрәһе янына килде.

– Нурислам Әхәтович, – тине ул, ҡулы менән ҡалаға күрһәтеп. – Ошо ҡаланы һинең ише ябай, тырыш эшселәр, төҙөүселәр һалған. Бушлай тиерлек. Уларҙың күптәре шул эштә һаулыҡтарын юғалтҡан, әлеге мәлдә бармаҡҡа ла эләкмәҫтәй бәләкәй генә пенсияға ыҙа сигеп йәшәйҙәр. Хәлемдән килһә, утрауҙағы шифаханала уларҙы дауалар инем мин. Ә һин, наркомандар, эскеселәр, тиһең… Ошо ҡаланы эскеселәр менән наркомандар күтәрмәгән бит. Хөкүмәт шифаханаһында ятып дауаланырға уларҙың ни хаҡы бар? Наркомания һәм алкоголизм, минеңсә, сир түгел, улар – аҙғынлыҡ һәм яманлыҡ эҙемтәһе. Сир булһа ла, «һатып алынған» сир. Кешелеккә кире ҡайтырға теләгәндәр, ихтыярҙары етһә, наркомания һәм эскелек тигән яман шөғөлдән шифаханаһыҙ ҙа, дауаханаһыҙ ҙа арына ала. Ә инде теләктәре, ихтыярҙары булмаһа, – Василий Петрович вайымһыҙ ғына ҡул һелтәне, – йәмғиәткә лә ул әрәмтамаҡтарҙың кәрәктәре юҡ.

– Халыҡты һаҡлау, кешеләрҙең һаулығын, көнкүрешен ҡайғыртыу дәүләтебеҙ алдында торған иң мөһим мәсьәлә түгелме ни? – Ғәлләмов Нурислам Әхәт улының тауышында ҡорос сыңланы. Әүәлге коммунислыҡылар инде, уларҙы шулай тамаҡ ярырға йәштән өйрәткәндәр бит. – Халҡыбыҙҙың һаны йылдан-йыл кәмей, яҡшы тормошҡа өмөттәре һүнгән ватандаштарыбыҙ күпләп ҡырыла, эскегә һалыша, наркотиктарға бирелә. Ошо ауыр хәлгә дәүләт тарафынан сик ҡуйылмаһа, илебеҙҙе киләсәктә ни көтә?

Василий Петрович, теше һыҙлағандай, йөҙөн һытты.

– Дәүләт, имеш… Барыһын да дәүләт өҫтөнә япһарып, үҙҙәре ситтә тәмәке көйрәтергә оҫтарҙылар, – тине хакимиәт башлығы, өҫтәл башындағы урынына кире ултырғас. – Дәүләт ул – йәмғиәт сығанағы, йәмғиәт, халыҡ ни хәлдә – дәүләт тә шул хәлдә. Шулай икәнде бөйөк тәғлимәтселәр Маркс менән Энгельс бынан йөҙ илле йыл элек иҫбатлағандар инде. Ә халыҡҡа килгәндә… Халыҡ рухи яҡтан хәлһеҙләнеп, көрсөккә, деградацияға бирелһә, уны батша ла, батыр ҙа, хатта Хоҙай үҙе лә ҡотҡара алмай. Сөнки тарих ҡанундары шулай, улар көсһөҙҙәрҙе кисермәй ҙә, яҡламай ҙа.

Ғәлләмов Нурислам Әхәт улы, ниһайәт, урынынан тороп, сығырға ҡуҙғала башланы.

– Бигерәк тә ҡаты күңеллеһең, Василий Петрович,– тине ул, ҡарттарса рәнйеп. – Халыҡ араһындағы айырым кешене күрмәйһең, уның зар-моңона һаңғырауһың.

– Әйткәндәй, әлеге тәҡдимегеҙҙе ҡала Советы ултырышына сығарырға кәңәш итәм. Эшем шулай, – тине Василий Петрович, депутатты ҡарашы менән оҙатып.

Депутат сығып киткәс, кабинетта тынлыҡ урынлашты. Өҫтәлгә терһәкләнеп ултырған Василий Петрович, күҙҙәрен ишектәге билдәһеҙ нөктәгә төбәп, нимә тураһындалыр нығышып уйлана ине. Уның ҡаршыһында ултырған пеләш кеше, кабинет хужаһының уйынан сығыуын көтөп, таш һындай, өнһөҙ генә ултырыуында булды. Стенаға эленгән ҙур сәғәттең, табалай ҙур, ялтыр телен һалмаҡ бәүетеп, тоноҡ ҡына текелдәүе, әлеге һиллекте уғата тәрәнәйтеп, кабинетта сәйер бушлыҡ хасил итте.

– Ни әйтерһең?

Василий Петровичтың кинәт кенә яңғыраған был һорауынан пеләш кеше, елгә һиҫкәнгән ҡыуаҡтай, урынында ҡыбырҙап ҡуйҙы ла, муйынһыҙ башын бороп, ҡара тирәсле күҙлегенең ялтыр быялалары аша хакимиәт башлығына төбәлде.

– Камалов шул утрауҙы үҙенә ҡуртымға биреүҙе һорай, – тине ул мискә эсенән сыҡҡандай ҡалын тауыш менән. – Йорт-ҡаралтыһын һатып алам, ти…

– Ҡайһы Камалов?

– Камалов Зиннур Таипович, ҡаланың юл һәм транспорт хужалығы етәксеһе.

Василий Петровичтың һүрән йөҙөнә ғәжәпләнеү билдәләре сыҡты.

– Нимәгә кәрәк булған уға ул сүп өйөмө?

– Ресторан ҡуям, ти, балыҡсылар клубы ла асырға йыйына, йәнәһе…

Хакимиәт башлығы, үҙе лә һиҙмәҫтән, елкәһен ҡашып алды. Был ниндәй көн булды һуң әле? Таң тишегенән алып шул утрау менән башын ҡатыраларсы… Быға ҡәҙәре ул утрауҙың донъяла барлығын бер кем дә белмәгән һымаҡ ине бит. Йорт-ҡаралтыһы ҡыйралып, үткенсе ял итеүселәр тарафынан сүпкә күмелеп, бысраҡҡа батырылған күл утрауының да кемгәлер хәжәте тейер көнө бар икән дә баһа? Революцияға тиклем байлығы менән тирә-яҡта дан тотҡан сауҙагәр Латиповтың милке булған утрауҙа совет заманында, тәүҙәрәк, хәрбиҙәр өсөн ял йорто урынлашҡан булған, һуңынан уны пионерҙар лагеры иткәндәр, аҙаҡ инде, үҙгәртеп ҡороу осоронда, бағаналарҙағы электр сымдарын бурҙар урлағас, ҡул һелтәп, ул ер киҫәген бөтөнләй онотҡандар. Әлеге ваҡытта ул утрау йорт-ҡаралтыһы менән муниципаль милек иҫәбендә тороп, ҡала Советы ҡарары менән шәхси ҡулға бирелергә тейеш мөлкәттәр рәтенә керетелгән. Туҡта әле, күптән түгел генә, үҙәктә, кемдер шул утрау тураһында һүҙ сығарғайны бит әле?

Хәтерен тағатып ултырған Василий Петровичтың йөҙөндә уҫал кинәнес сағылды.

– Ул утрауҙы Камаловтан башҡа бүтәндәр һорағаны булдымы?

– Юҡ, Камалов беренсе…

Василий Петрович, креслоһына арҡаланып, тағы бер аҙ шымып ултырғандан һуң, хәйләкәр күҙҙәрен әңгәмәсеһенә төбәне.

– Бир, – тине ул баҫым менән. – Бир утрауҙы Камаловҡа, әйҙә, кинәнһен.

Күҙлекле пеләш, үҙ ҡолағына ышанмағандай, ауыҙын асып, хакимиәт башлығына ҡарап ҡатты.

– Бир утрауҙы Камаловҡа, – тип ҡабатланы Василий Петрович, ниндәйҙер аңлайышһыҙ кинәйә менән. Уның әлегә ҡәҙәре һүрән йөҙөнә сая шуҡлыҡ сыҡты, ул, гүйә, эсен йыртып килгән көлкөһөн тыя алмай, хахылдап ебәрер сиккә еткәйне.

Пеләш кеше, алпан-тилпән атлап, кабинеттан сығып китте. Уның өсөн хакимиәт башлығының уй-кисерештәре томанлы ине. Ә Василий Петрович ошо ваҡытта үҙен театрҙа тамаша ҡуйған сәхнә оҫтаһы итеп тойҙо. Уның урынына уҡталыусылар башта үҙ-ара «төкөшөп» алһындар әле, тип уйланы ул, үсенән кинәнеп. Теге утрау шуның өсөн бик йәтеш майҙансыҡ булмаҡсы. Ә ул ситтән генә ҡарап ултырыр шул алышҡа. Ике тәкә һөҙөшкәндә, йыш ҡына ҡырҙа йөрөгән өсөнсөһө еңеп сыға бит. Ай-һай, иртәрәк иҫәптән сығаралар уны. Күрәһегеҙме, яҙмыш уға ниндәй уңайлы әмәл бирә! Дошмандарының юлын бутарлыҡ һәләтен юғалтмаған әле ул. Шуныһы ҡыҙыҡ: Камаловтың артында кем тора икән һуң? Күлдәге утрауҙың ни хәжәте бар уларға?

Ошо ваҡытта хакимиәт бинаһы алдындағы майҙанда күҙлекле пеләш кеше ҡағыҙ битенә бер нисә һан яҙып, Камаловҡа күрһәтте.

– Капитализм, – тине ул, һаран ғына көлөмһөрәп, ҡағыҙҙа күргәнен

башына һыйҙыра алмай аңшайып торған Камаловҡа. – Утрау һынлы утрауҙы бушҡа бирерҙәр, тип уйламағанһыңдыр ҙа?

– Ҡасанға әҙерләргә?– тине Камалов, тамағына төйөлгән ҡаҡырығын көсәнеп йотҡас.

– Кәрәкле ҡағыҙҙар бер айҙан әҙер була. Алыш-бирешкә ҡул ҡуйған мәлгә килтерерһең.

– Милицияға ошаҡлар был, тип шөрләмәйһең дә?

Пеләш кеше, ғәжәпләнгәндәй, аҫтан өҫкә баш сөйөп, бер аҙ ғына үҙенән бер башҡа бейегерәк булған Камаловҡа күҙлегенең ялтыр быялалары аша текләп торҙо.

– Аҡыллы кешенән иҫәр хәбәр ишетәм, – тине ул һүҙынан вайымһыҙ ғына. – Утрауҙан ҡолаҡ ҡағыр булһаң, рәхим ит. Етмәһә, билдәле булыуынса, әлеге мәлдә һин үҙең милиция тырнағындаһың…Ҡыҫҡаһы, кәңәшем шул: башыңа бәлә эҙләмә.

**9**

*«Хәкимйән!*

*Мин китәм. Бында артабан ҡалыу мөмкин түгел. Төркиәгә, гаиләм янына юлланмаҡсымын.*

*Зөләйхам ауырлы, юл аҙабын күтәрә алмаҫ, тим. Шул сәбәптән ҡатынымды бында ҡалдырырға мәжбүрмен. Зинһар, хәлеңдән килгәнсә уны һаҡла, ярҙам ит.*

*Мөлкәтемдең бер өлөшөн һиңә ҡалдырам. Кәрәгенсә файҙалан. Фотоһүрәткә ҡара.*

*Изге көрәшеңдә уңыштар теләйем. Хоҙай бойорһа, осрашырбыҙ. Хуш. Кәрим. 1920 йылдың 20 сентябре.»*

Әминә, ҡапылдан, һарғайып бөткән ҡағыҙ битендәге ят хәрефтәр теҙмәһенең зиһенендә ап-асыҡ хәбәргә әүерелеүенә ышанмай, ҡулындағы хатты төрлөсә әйләндереп, уға йә алыҫтан, йә яҡындан ҡарап байтаҡ ултырҙы. Ысынлап та, хат латин хәрефтәре менән башҡорт телендә яҙылған да баһа… Медицина институтының талибы булғанғамы, латинса яҙылған хаттың асылы бер ҡарауҙа билдәле булды уға. Ҡыҙыҡ, ниңә ул шундай ысул ҡулланып яҙылған икән? Ниндәйҙер сер йәшерелгән, ахыры, был хатта…

Ул тәҙрә янына килеп, урамға күҙ һалды. Сираттағы йәмле йәй көнөнөң балҡып уянған мәле. Күл ярында үҫкән тирәктәрҙең ысыҡлы япраҡтары таңғы ҡояш нурҙарында бихисап ынйылар булып емелдәй. Көҙгөләй һыу өҫтөнән ағылған зәңгәрһыу монар эсендә балыҡсыларҙың кәмәләре төҫмөрләнә, арылағы утрауҙы мамыҡтай аҡ томан баҫҡан. Баҡсала турғайҙар сырҡылдаша, күршенең әтәсе һуҙып ҡыҫҡыра, һуңлаған кәкүк, ҡайҙалыр өҙөп-өҙөп саҡырып алғаҫ, үҙ ҡылығынан оялғандай, бер аҙға шымып тора.

Бөгөн Әминәнең ял көнө.

Ғәҙәтенсә, йоҡоһонан иртә тороп, көҙгө алдында төҙәнеп-биҙәнгән ҡыҙҙың уйынан әлеге хат сыҡманы. Зөләйха… Атаһынан шул исемде ишеткәне бар ине, буғай. Өләсәй йә ҡартәсәйҙең исеме булһа кәрәк.

Әминә, нимәнелер иҫенә алып, китап кәштәһен асты ла, бер ни тиклем эҙләнгәндән һуң, ҡағыҙ төргәге килтереп сығарҙы. Ебен сисеп, төргәкте өҫтәлгә йәйҙе. Бер нисә йыл элек уның атаһы ғаилә шәжәрәһен төҙөп аҙаплана ине. Киң ҡағыҙ битенә күп исемдәр яҙылып, бер-береһенә һыҙыҡтар менән тоташҡан. Бына Зөләйха исемле ҡатын, ул уҙған быуат башында йәшәгән. Унан Насип тигән бер генә исем айырылған, ә Насиптан артабан биш исем сыҡҡан,

улар араһында Вәхит бар. Вәхит – Әминәнең атаһы. Тимәк, Зөләйха Әминәнең ҡартәсәһе булып сыға! Тик шәжәрәлә, ниңәлер, уның ҡартатаһы күрһәтелмәгән. Туҡтале, хат аҙағында кемдеңдер исеме бар бит… Кәрим… Тимәк, ошо хатты яҙған Кәрим исемле кеше уның ҡартатаһы булып сыға!

Ҡартатаһы Кәримдең Хәкимйән ҡустыһына яҙған хаты, тәғәйенләгән кешеһенә, ни сәбәптәндер, барып етмәй, ғәрәсәтле замандың зарлы ауазы булып, быуат уҙҙы тигәндә, ниһайәт, дүртенсе быуын ейәнсәре ҡулына килеп эләкте шулай.

Әминә хат янындағы фотоһүрәтте ҡулына алды. Йыһазландырып эшләнгән ҙур ғына кәмә өҫтөнә аҡ япманан матур сатыр ҡоролған. Кәмәлә баҫып торған ике ирҙең береһе ошо хатты яҙған ҡартатаһы булыуына Әминәнең шиге юҡ ине. Хәрби кейемдә булып, ҡылыс таҡҡаны янында торған йыуантыҡ ирҙән күпкә йәшерәк күренә. Тимәк, хат асылы буйынса, кәмәләге түңәрәк йөҙлө, йыйнаҡ ҡына һаҡал-мыйыҡлы, аҡтан кейенгән тәбәнәк буйлы ир уның ҡартатаһы Кәрим булып сыға.

Әминәнең күңелен сәйер тойғо баҫты. Ошо хат менән фотоһүрәт бынан өс быуын элгәре йәшәгән ҡартатаһы Кәрим ҡулынан, бөтән быуындарҙы урап үтеп, тура уның ҡулына килеп эләкһенсе… Бынағайыш, тип эстән генә әсенеп көләмһерәне Әминә, ҡулындағы хат менән фотоһүрәткә ҡарап. Килә торғас, теге донъялағы мәрхүмдәрем дә хат яҙа башланы миңә…

Өйҙә ултырып, яңғыҙлыҡтан ялҡҡан Әминә бөгөн күлгә төшөп һыу керергә, ҡояшта ҡыҙынырға йыйына ине. Ул, көн эҫегәндә көтөп, баҡсалағы сәскәләргә, емеш-eләккә һыу һипте, түтәлдәрҙе баҫа башлаған сүп үләндәрен утаны. Тик теге хат уйынан сыҡманы. Бер аҙҙан ул кинәт кенә эшенән туҡтаны ла, нимәләр күргәндәй ергә текләп ултырғандан һуң, елдәй йүгереп өйгә керҙе һәм, өҫтәлдәге фотоһүрәтте алып, тәҙрә янына килде. Алыҫта, күл уртаһында, томандан арынған утрауҙың текә ҡаяһы зәңгәр һыу өҫтөнә ҡалҡып, ағарып тора. Революцияға тиклем шул утрау сауҙагәр Латиповтыҡы булған, тиҙәр. Латипов Кәрим… Бәй, сауҙагәр Латипов Кәрим Зәйнулла улы Әминәнең ҡартатаһы буламы ни?

Көтөлмәгән был асышын нисек ҡабул итергә белмәгән Әминә, тирә-йүненә күрәғара ҡарап, байтаҡ ҡына уйға батып ултырҙы. Хат менән фотоһүрәтте тағы алып, ҡабат-ҡабат уҡыны, төрлөсә әйләндереп ҡараны, ҙурайтҡыс быяла аша тикшерҙе, хатта, нескә танауын мәрәкә сирып, еҫкәп аҙапланды. Хат менән фотоһүрәттә тағы ла ниндәйҙер йәшерен сер булып, уның асылмай ҡалыуын тоя ине ул. Шулай булмаһа, ябай ғына был хаттың асылын ниңә латин хәрефтәре артына йәшерергә лә, етмәһә, уны башҡортса яҙырға кәрәк булған һуң? Латин хәрефтәрен танығандар, ғөмүмән, һирәк осрай, ә улар араһында башҡортса белгәндәр тағы ла аҙыраҡ. Тап шулай тип фараз иткәндер был хатты яҙыусы. Әһә, бына: «Мөлкәтемдең бер өлөшөн һиңә ҡалдырам. Кәрәгенсә файҙалан. Фотоһүрәткә ҡара»,– тигән ҡартатаһы Хәкимйәнгә. Күренеүенсә, был хат, ни сәбәптәндер, Хәкимйәнгә барып етмәгән, киреһенсә булһа, быға ҡәҙәре иҫке һандыҡ төбөндә йәшереүле ятмаҫ ине. Тимәк, ҡартатаһы ҡалдырған мөлкәттең дә тәғәйен кешеһенә етмәгән булыуы ихтимал… Ә ул мөлкәт нимәнән ғибәрәт тә ҡайҙа ҡалдырылған һуң? Ошо хат ятҡан һандыҡтамы ни? Улай булһа, мөлкәтте алғанда, был хатты ла ҡалдырмаҫтар ине. Бәхәсһеҙ түгел, әлбиттә, был фараз, Мөлкәтте, бәлки, енәйәтселәр талағандыр йә ҡартәсәһе Зөләйха уны ҡайҙалыр ҡуйғандыр… Нисек кенә булмаһын, бик сәйер яңғырай хаттың ошо өлөшө. Сөнки хаттағы был хәбәрҙәр бер

ҡарауға сер-хәйләһеҙ булһалар ҙа, улар араһында яттар күҙенә күренмәгән, әммә хатлашыусыларға ғына билдәле булған ниндәйҙер «сылбыр» бар кеүек. Хаттағы мөлкәт тураһындағы хәбәргә һуңындағы «фотоһүрәткә ҡара» тигән һүҙбәйләнеш бөтөнләй йәбешмәгән һымаҡ. Ҡартатаһы был фотоһүрәтте ниңә хат янына һалған да ниңә уға ҡарарға ҡушҡан? Иҫтәлеккә бирелгән фотоларҙы, ғәҙәттә, ундай күрһәтмә менән оҙатмайҙар. Ғөмүмән, ундай һүҙҙәр бер кеше тарафынан бүтәндәргә тәғәйенләнеп, уларға ниҙер күрһәтергә теләгәндә әйтелә. Мәҫәлән, дәрес аңлатҡан уҡытыусы махсус күрһәткесе менән таҡтала яҙылғандарҙы уҡыусыларына шулай күрһәтә. Һис шикһеҙ, хаттағы мөлкәт менән ошо фотоһүрәт араһында ниндәйҙер бәйләнеш бар… Бынағайыш, фотоһүрәттә хазина йәшерелгән урын күрһәтелгәнме әллә?!

Әминә, ҡараңғы бүлмәлә көтмәгәндә ҡабыҙған уттай булып, зиһененә үтеп ингән был фаразынан сикәләре һулҡылдап, үҙ уйынан оялғандай, устары менән битен ҡапланы. Тауыҡ төшөнә тары керә, тип уйланы ул, үҙ-үҙенән көлөп. Тик ултырған ерҙән хазина тапҡан, ти, берәү. Матур ҡумтаға һалып, уға ал таҫма бәйләп, Әминә ейәнсәренә ынйы-мәрйен ҡалдырып киткәндер шул ҡартатаһы. Барып алырға ғына ҡалды…

*Ул*, зиһенен биләгән буш уйҙан ҡотолорға теләп, көҙгө янына килде *лә* һомғол буйын һығылдырып, борғоланып-һырғыланып алды. Исмаһам, ғашиҡ егете *лә* юҡ бит, былай күңелһеҙ булмаҫ ине. Әллә, башҡа ҡыҙҙар кеүек, ирегеттәр алдында алды-артты ҡыйшанлата башларғамы? Йөҙ-киәфәте, һынкилбәте менән телевизорҙағы сибәрҙәрҙән һис ҡайтыш түгелсе…

Урамдан үтеп барған мәүеш Рәжәпте тәҙрә аша күреп ҡалған Әминәнең башында кинәт кенә сая уй тыуҙы.

– Рәжәп! Кил әле яныма, йомошом бар!

Күрше Зөбәйлә әбейҙең ейәне Рәжәп, аҡылға бер төрләрәк булһа *ла*, ҡара эшкә, ябай йомош-йүнгә бик шәп. Йорт ҡуянылай йыуаш үҙе. Рәжәптең олатаһынан ҡалған кәмәһе бар. Йыш ҡына шул кәмәлә күлгә сығып балыҡсылай *ул*. Тик торғанда Рәжәп менән күлгә сығып, шым ғына теге ҡаяны тикшереп ҡарағанда, бер ҡыҙыҡ булыр ине, тип уйланы Әминә.

Рәжәп уның тәҡдименә бер һүҙһеҙ риза булды. Әйткәндәй, уның һүҙ байлығы былай ҙа бик наҡыҫ, сөнки башындағы уйҙары, ниңәләр, ауыҙындағы теленә юл тапмай.

Бына кәмә, тоноҡ ҡына дырлап, тәпәш тулҡындарҙы яра. Кәмә башында ултырған Әминәнең еңел зәңгәр күлдәге еләҫ елгә күперә. Яр алыҫайған һайын бар донъя киңәйә, түңәрәкләнә барҙы, *ул*, гүйә, кәмәне уратып өйөрөлә, әйләнә башланы. Бәүелеп ятҡан зәңгәр күл офоҡта зәңгәр күк менән тоташҡан, баш өҫтөндәге ҡабарынҡы аҡ болоттар, һонған ҡулға эләгерҙәй булып, түбәнәйҙе. Күлдең саф тыны менән Әминәнең күңеленә әйтеп бөткөһөҙ ләззәт, сафлыҡ керҙе, *ул*, үҙен ураткан тәбиғәт хоҙурлығына иҫергәндәй, шат көлөп, ҡулдары менән елде ҡосто, услап-услап күк көмбәҙенә һыу сәсрәтте.

Әминә һигеҙенсе классты тамамлағас, ғаиләләре менән кәмәгә ултырып ошо утрауға килгәйне улар. Атаһы, балаларыма матур утрауҙы күрһәтәм, аҙ булһа *ла* тәбиғәт ҡосағында булырбыҙ тип, алдан әҙерләнгәйне сәйәхәткә. Тик утрау ярында әсәнән тыума йөрөгән иҫерек ҡатын-ҡыҙҙар менән ирҙәрҙе күргәс, кәйефтәре төшөп, кире әйләнделәр.

Иҫке фотоһүрәттәге ҡаяны бер күреүҙә таныны Әминә. Был ҡая ҡалған икеһенән үҙенең аҡ ташы менән айырыла. Ул һыны менән ҡорһағына тиклем күлгә кереп, томшоғон һыуға тыҡҡан ҙур филде хәтерләтә, ҡаяның ике яҡ

битендәге уйылмалар, гүйә, филдең күҙҙәре. Ҡаяны тирәләп әлморон ҡыуаҡтары, ваҡ шыршы үҫкән, уның ҡырласында олон-ботаҡтары елгә кәкрәйгән тәпәш кенә ике ҡарағай үҫә, улар хатта теге фотоһүрәттә лә төҫмөрләнә. Ошо тәңгәлдә күл утрау эсенә үтеп, унда түңәрәк кенә боғаҙ хасил иткән. Боғаҙҙың бейек ярында, ағастар араһында, ҡыҙыл кирбестән һалынған ике ҡатлы ташландыҡ йорт күренә.

Әминә, Рәжәпте артынан эйәртеп, ҡаяны әйләнеп сыҡты. Тирә-йүн тәртипһеҙ ял итеүселәр тарафынан тапалып, сүпләнеп бөткән, ҡайҙа ҡарама, буш шешәләр аунап ята, ҡағыҙ, консерва өйөмдәренән һаҫыҡ еҫ килә, һаҡһыҙыраҡ йөрөһәң, быялаға йә тутыҡ тимергә баҫып йәрәхәтләнеүеңде көт тә тор. Биш ҡатлы йорт бейеклегендәге ҡая башында ҡасандыр матур аулаҡтың ҡыйралған кирбестәре туҙып ята.

Әминә, эҫелә быуланып ятҡан күл аша ҡарап, ҡаршы ярҙағы өйөн табырға тырышты, әммә ундағы йөҙәрләгән йорт-ҡаралтылар араһында күҙҙәре аҙашҡас, артабан эҙләмәҫ булды. Ғөмүмән, был ҡаяла хазина йәшерелгән хәлдә лә, уны Әминә ише осраҡлы ғына кеше түгел, хатта тәжрибәле эҙәрмән дә табырлыҡ түгел ине.

Ҡыҙ, таңдан алып күңелен биләгән ғәмен тағы мәрәкәгә һалып, ҡаянан төштө лә, «фил томшоғо» янындағы йәтеш кенә таш һикәлтәлә күлдәген ҡалдырып, һыуға сумды. Ташынан эҫе бөркөлөп торған ҡая янындағы һыу һөттәй йылы, йомшаҡ ине. Күл бында ярайһы уҡ тәрән икән, һыу аҫтындағы ҡыҙҙың ҡолаҡ ярылары баҫылып, сәнсеп ҡуйҙы. Күл төбөн йыландай оҙон, ҡуйы һыу үләндәре баҫҡан, үләндәр араһында ваҡ балыҡтар эркелешеп йөрөй. Таҙа һыуҙа тирә-йүн ярайһы уҡ асыҡ күренә. Ҡая төбөндә һыу шомло ҡарайып тора, сөнки унда ҡаяташ эскә уйылып, кәмә һыйырҙай тишек хасил булған.

Әминә һыу өҫтөнә сығып, кәмәгә йәбеште лә бер мәл генә уйланып торҙо.

– Яҡтыртҡысың бармы? – тине ул кәмәлә ултырған Рәжәпкә, һорауының ыңғай яуап табыуына ышанмай ғына.

Тегеһе, бер ҡасан да ябылмаған һалбыр ауыҙын асып, бер аҙ аңшайып ултырғандан һуң, кәмә төбөндәге йәшниктән фонарь алып, Әминәгә бирҙе. Мәрхүм олатаһынан ҡалған әйберҙер инде. Тағы ла шуныһы ғәжәп: «хан заманы»нан ҡалған был фонарь бик матур яҡтырта ине.

«Иллә-мәгәр көнөм ыңғай бөгөн. Изге фәрештәм күктән төшөп, иңемә ҡунған тиерһең. Былай барһа, хазина ла табылмай ҡалмаҫ, һа-һа…» – тип үҙ алдына ғына мәрәкәләне ҡыҙ һыуға сумғанда.

Һыу аҫтындағы тау тишегенең тәрәнлеге кеше буйы самаһы ине. Шунда боҫоп торған күсәктәй ҙур, ыржый суртан, фонарь яҡтыһынан өркөп, тышҡа уҡталды. Суртан үҙенә ташланғандай итеп тойған Әминә, ҡурҡышынан һыуға сәсәп, өҫкә йөҙөп сыҡты. Ыпыҡ Рәжәп ҡыҙҙың ҡиәфәтенән борсолоп китте лә, уны ҡулынан тартып, кәмәгә мендерергә маташты.

Сәсәй-бышҡыра танау-моронона тулған һыуҙан арынғас, Әминә тағы күлгә сумды. Асылында әлеге мәшәҡәтен үҙе лә аңламай ине ул. Йөрәгендә ҡупҡан ниндәйҙер аңлайышһыҙ ҡомар уны алға, һыу аҫтындағы ҡая тишегенә, әйҙәне. Хазина һынлы хазина эҙләгәндә шундай мөмкинлекте нисек ҡулланмайһың да нисек итеп башҡарған эшеңдең аҙағын күрмәйенсә, тыныс күңел менән ҡайтып китәһең, тип аңлатырға тырышты ул үҙенә әлеге мәшәҡәтенең сәбәбен.

Өң төбөндә фонарь яҡтыһы эре таш өйөмөнә теркәлде. Таштарҙы йомшаҡ

ылымыҡ, ләм ҡатламы баҫҡан. Ситтәге таш өҫтөндә ятҡан ҙур ҡыҫала, ҡыҫҡыстары менән көтөлмәгән баҫҡынсыға янап, артҡа сигенде. Әминә тәкә башы дәүмәле ситтәге ташты алып, өңдән сығарҙы. Өң эсендәге һыу шунда уҡ болғанып, бер ни күренмәҫ булды.

Өс тапҡыр сумып, тыны еткәнсе өңдән ни бары өс кенә таш киҫәге сығара алған Әминә, арып, әлеге аҙабынан ялҡа ла башлағайны инде. Дүртенсе ҡат сумғас, һыу буйрағында уның ҡулдарына серек ағас киҫәге килеп эләкте. Ләкин серәнеп тартыуға ағас ҡымшанманы, уны ауыр таш ҡыҫҡан, ахыры.

«Ҡуйсәле, – тип уйланы күңеле һүрелгән ҡыҙ, ярға сығып, ҡояшта кибенгәндә. – Хазина булған хәлдә лә, уға етер өсөн, ошо ҡаяны тулайым емереп, таштарын ситкә ташырғамы ни? Алпамыштың да хәленән килер эш түгел был…»

– Унда…нимә?

Күлдәген кейеп, кәмә башында урын алған Әминәгә Рәжәптең бөгәсә өндәшкән беренсе һүҙҙәре ине был. Күп кеҫәле тетелеп бөткән ҡыҫҡа салбар, ҡаҡашыуҙан төҫөн юғалтҡан иҫке күлдәк кейгән Рәжәп ауыҙындағы ауыр телен теүәл генә ҡуҙғатырға тырышып ҡуйҙы был һорауын. Ул һыуһылыуҙай ҡыҙ янында үҙенең килбәтһеҙлеген уғата ла көслө тоя, ахыры, алас-йолас һирәк ҡыл баҫҡан ябыҡ йөҙөндәге еүеш күҙҙәрен ситкә төбәп, кәмә артында ҡоршайып ултыра.

Әминә рыя ғына ҡул һелтәне.

– Ҡая төбөндә өң бар, шуны ҡараным. Унда таш өйөмө, ағас…

«Ағас? – тип кинәт кенә һиҫкәнде шунда Әминә. – Һыу аҫтындағы тау тишегенә ул ағас нисек барып эләккән һуң? Ташҡа ҡыҫылған, етмәһә?»

– Унда ниҙер бар, – тине ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, Рәжәпкә ҡарап.

Рәжәп, шуны ғына көткәндәй, хәрәкәткә килде. Ул кәмә төбөндәге йәшниктән балта алды ла, тамсы ла сәсрәтмәйенсә, һыу эйәһеләй, күлгә сумды. Әминә, һыуға ҡарап бер аҙ ултырғандан һуң, күлдәген ҡабат һала башланы. Шул саҡ күл төбөнән өҫкә ҡуйы буйраҡ күтәрелде, уның артынан Рәжәп йөҙөп сыҡты.

– Таш… төштө, – тине ул, сәсәп. – Унда…– Рәжәп ҡулын өҫкә төбәне,– дәү тишек… бар… ҡараңғы тишек…

Рәжәп кәмәләге йәшниктән оҙон аҡ еп алып, биленә бәйләне лә ептең бер осон Әминәгә тотторҙо.

– Мин барам… ҡарайым…– тине, ҡая төбөндәге һыуға күрһәтеп.

Ҡыҙ, борсолоп, урынынан ҡуҙғалды.

– Рәжәп, зинһар, кәрәкмәй унда барырға, – тип инәлде ул, Рәжәптең ҡулынан тотоп. – Йә таш аҫтында ҡалырһың, йә һыулы мәмерйәлә аҙашып, тының етмәҫ.

Бахыр егет бер мәл генә Әминәнең күҙҙәренә текләп торҙо ла, оялғандай, ҡыйыш йылмайып, ҡарашын ситкә алды һәм һыуға кереп юҡ булды.

«Уф, Аллам, ни эшләүем был бөгөн? Әллә ниндәй сәйер көн булдысы, таңдан бирле бер яңылыҡ артынан икенсеһе сығып тора… Бәләгә булмағайы…»

Шөбһәләнеүенән ҡолаҡтары шаулай башлаған ҡыҙ, ҡулы аша аҡрын ғына тағалған еп артынан һыуға текләп, балыҡ аулаған ҡоштай, һағайып ултырҙы. Секундтарҙы уҙып күкрәгендә йөрәге дөпөлдәй, ҡулы буйлап бер туктауһыҙ һыу аҫтына киткән еп, гүйә, был күлде генә түгел, бар диңгеҙ-даръялар төбөнән үтеп, Ер шарын әйләнергә ниәтләй…

Бер аҙҙан еп, артабан тағалмаҫ булып, туҡтап ҡалды. Тәне эҫеле-һыуыҡлы

булған Әминә епте кинәт-кинәт тарткылап алды. Еп, уға яуап итеп, теге остан тартылды. Көтөп тәкәте ҡороған ҡыҙ һыуға сумды ла ҡая аҫтына йүнәлгән епте юллатып йөҙөп китте…

Тар ғына тәпәш мәмерйә эсендәге һауа тынсыу, һалҡын ине. Ҡая аҫтынан мәмерйәгә илткән тау тишеге тулайым һыу эсендә. Арыраҡ, мәмерйә төбөндә, тағы ла бер «ҡоҙоҡ» бар. Мәмерйә иҙәне батҡаҡлы, күл һыуы күтәрелгәндә, ике «ҡоҙоҡ»тағы һыу ташып, бергә тоташа, ахыры.

Мәмерйәнең арғы мөйөшөндә, ташты йәнсеп, кәштә уйылғайны. Кәштәлә бүрек дәүмәле өс ҡумта тора. Ике ҡумта алтын тәңкәләр менән өймәләм тулы. Өсөнсөһөнөң ҡапҡасы аҫтынан фонарь утына ҡаршы күҙ яуын алырлыҡ сағыу нур бөркөлдө. Ҡумта эсендә ынйы-мәрйенле биҙәгестәр емелдәшә ине…

**10**

Ҡыҙыл машинаһын ресторандың артҡы ишеге алдындағы майҙансыҡта туҡтатҡан Нажия, күтәрмәгә еткәс, артына боролоп ҡараны. Тәгәрмәсе менән сәскә түтәленә менгән машинаһы, һулға янтайып, бар күренеше менән хужаһының насар кәйефен сағылдырып ултыра ине.

Нажия, күргәненә битараф ҡалып, эскә үтте. Йонсоуы күҙҙәренә сыҡҡан йыйыштырыусы ҡатын, иҙәндә торған йыуынты биҙрәһен ситкә алып, хужабикәгә юл асты.

Иртә әле. Ресторан тын, таң һарыһына ҡәҙәре барған кисәге туйҙы хеҙмәтләндергән эшселәр, өйҙәренә таралышып, ял итә. Залдағы өҫтәл-ултырғыстар, башҡа йыһаздар тырым-тырағай, һауа тынсыу, аш бүлмәһендәге өҫтәлдәргә тауҙай итеп бысраҡ һауыт-һаба өйөлгән.

– Ниңә яңғыҙ? – Нажия йыйыштырыусыға бороldo.

– Иптәшемдең балаһы ауырый, – тип яуапланы йыйыштырыусы ҡатын. – Борсолмағыҙ, яңғыҙым да йыйыштырып өлгөртөрмөн. Нажия Әсғәтовна, был юлы яҡшы аш күп ҡалған, рөхсәт итһәгеҙ… – Ҡатын, уңайһыҙланып, ярты һүҙендә туҡтап ҡалды. Уның бында эшләүенә күп түгел, шуға ла ресторандағы тәртип-ғәҙәттәрҙе белеп бөтмәй әле.

Хужабикә, ризалығын белдереп, вайымһыҙ ғына баш ҡаҡты ла бүлмәһенә үтте.

Алдағы айҙа Нажия ҡырҡ бишен тултыра. Алла бирһә, тыуған көнөн ғаиләһе менән Италияла уҙғарырға йыйыналар. Ҡырҡ биш йәшлек ҡатын-ҡыҙҙар еләктәй була, тигәндәр урыҫтар. Уларға, бәлки, шулайҙыр ҙа, тик беҙҙең мосолман ирҙәре һәр саҡ «еләк»тең йәшерәген табырға тырыша. Нажияның йәш сағындағы ҡаҡса йөҙ-һыны йылдар шауҡымынан йомрайып, тулыланған, был уның бар булмышына уғата нәзәкәтлек, һөйкөмлөк өҫтәй, юҡҡамы ни урамдан уҙғанда ир-ат артынан ҡарап, күҙҙәре менән ашап ҡала. Мәктәптә эшләгән сағында ундай мөнәсәбәтте тоймай ине ул, ни тиһәң дә, мәғариф тормошонда әҙәми заттың нәфсе-тойғоһон ауыҙлыҡлап тотҡан әхлаҡи ҡанундар өҫтөнлөк итә. Ә эшҡыуарлыҡҡа тотонғас, кемдәр менән көрәшмәйһең дә кемдәр менән килешмәйһең. Ҡайһы бер ирҙәр уға кинәйәле тәҡдимдәр ҙә ҡылды. Икенселәренең, аулаҡта ҡалғанда уны һәүетемсә генә яткыра алмағас, көслөк менән алырға маташҡандары ла булды. Ысынлап ғашиҡ тотҡандары ла бар. Һылыу ҡатындар ниндәй генә хәлгә тарымай был донъяла… Тик һуңғы ваҡытта ире менән аралары һыуынды. Бер-береһенә арҡа ҡуйып йоҡлауҙарына айға яҡын инде. Уның Зиннуры элек тә, эше күбәйеп, мәшәҡәте баҫҡан саҡта, ҡатынын ваҡытында һылап-һыйпарға онотор ине. Хәҙер килеп көтмәгәндә

отпускыға китте лә, һөмһөрө ҡойолоп, өйҙә тик ята. Әйткәндәй, иренең кәйефен ҡырырлыҡ хәлдәр ҙә юҡ түгел шул. Эшендә милиция соҡсона, был ҡала хакимиәте башлығы Василий Петровичтың этлеге инде. Әлегә енәйәт эше асылмаған, прокурор тикшереүҙе утыҙ тәүлеккә хәтлем оҙайтырға рөхсәт биргән. Унда ни булыр? Иренең тел төбөнә ҡарағанда, тикшереү һөҙөмтәләренән шөбһәләнергә урын да бар, буғай. Әлеге эшҡыуарлыҡты башлаған саҡта үҙе етәкләгән хужалыҡтың мөлкәте менән «шаярып» та алғайны шул. Шуның осона баҫһалар, хөкөмгә тарттырылыуы, эшенән бушатылыуы мөмкин икән. Төрмәгә, бәлки, япмаҫтар ҙа, әммә ҙур тырышлыҡ менән яулаған вазифаһынан ҡолаҡ ҡағыуы көн кеүек асыҡ. Юғарыраҡ үҫергә форсат тыуған ғына саҡта быңдай уңышһыҙлыҡтарҙы кисереү ауыр, әлбиттә. Әммә ирмен тигән ир күктә лә, ерҙә лә ҡатынының тәбиғи хәжәтен онотмаҫҡа, ваҡытында араларын майлап, күңелен күрергә тейеш. Юғиһә... Етмәһә, ғаилә бизнесын һатырға ныҡышасы. Иренең был һүҙҙәрен тәүге тапҡыр ишеткәс, Нажия уны, мәғәнәһеҙ шаяртыу, тип ҡабул иткәйне. Тик Зиннуры, уны ғәжәпкә һалып, һаман тылҡыны шул хәбәрен. Төшкән аҡсаға күлдәге утрауҙы алып, кәсепте шунда дауам итербеҙ, ресторан, ял урындары, пляж, биҫтә, кәмәле сәйәхәт, балыҡсылар клубы асырбыҙ, тисе? Сүп-сар өйөмөнә әйләнеп, электр уты ла булмаған ташландыҡ утрауҙы рәткә килтереү, унда төҙөлөш асып, ял итергә яраҡлы шарттар булдырыу өсөн иҫәпһеҙ күп аҡса кәрәк тә баһа? Бөгөнгө көндә ул утрауға бер кирбес илтеүе лә оло бәлә бит. Банктан бурысҡа аҡса алып, баштан аша тағы бирәсәккә батырғамы ни? Унан бөгөнгө көндә ғаиләләрен кейендереп, туйындырып торған килемле кәсептән күрәләтә һемәйергә алйоттоң ғына аҡылы етер. Мин хакимиәт башлығы булғас, был сығымдарҙы кире ҡайтарып, кәсебебеҙҙе уғата ла үҫтерербеҙ, ти ире. Башың төрмәгә керергә торғанда, хакимиәт тураһында уйларға диуана булдыңмы әллә, тип туҙҙы ла китте Нажия иренең был хәбәренә кисә. Уға эйәреп, Зиннурының да ене ҡупты, ул аяҡ аҫтында һыпырылып йөрөгән бесәйҙе тибеп осорҙо ла һыуытҡыста ярты йылдан ашыу торған хәмерҙе яңғыҙы эсеп иҫерҙе. Ярай әле, балалары өйҙә юҡ ине. Һиҙә Нажия: Зиннуры унан ниҙер йәшерә. Кисә, эсеп иҫергәс, ул, теле сиселеп, ҡатынына нимәлер һөйләргә уҡталып ҡуйҙы ла ярты һүҙендә, телен тешләгәндәй, туҡтап ҡалды.

– Кисә улар тағы килде, – тине ире, ҡарашын йәшереп. –Ашыҡтыралар. Һине өгөтләргә ярҙам итербеҙ, тинеләр. Аңлайһыңмы, Нажия? Уларҙың ярҙамынан Хоҙай үҙе һаҡлаһын!

– Кемдәр улар?

– Бандиттар... Беҙҙең бизнесты тулайым килеш һатып алыусыны ла тапҡандар инде. Улар вәхши, уны-быны ҡарап тормайҙар. Нажия, зинһар, эш олоға китмәҫ борон, һатайыҡ бизнесты. Балаларым өсөн ҡурҡам...

Шуны ишеткәс, Нажияның йөрәге жыу итеп ҡалды. Ул шиғәлселәр ҡулы аҫтында эш итергә мәжбүр булған эшҡыуарҙар тураһында ишетеп кенә белә ине. Ләкин әлегә ҡәҙәре уның ишеген тибеп аҫҡандары булманы, бәлки, иренең дәрәжәһе, ҡаланың законлы хөкөмдарҙарына яҡын булыуы шул афәттән ҡурсалағандыр. Ә бөгөн нимә үҙгәрҙе һуң? Ире вазифаһынан бушатылмаған, ул, милиция баҫымына дусар булһа ла, һаман эшләй, ҡаланың юғары даирәләрендә әйләнә... Ай-һай, аҡ эттең бәләһен ҡара эткә япһармаймы ире? Быға ҡәҙәре йәшәп тә, Зиннурының аҙып-туҙып, ҡатын-ҡыҙҙар менән сыуалғанын ишеткәне юҡ ине лә Нажияның. Әммә тормош үҙгәреп тора, дәрәжәһе үҫеп, ҡаланың ғына түгел, өлкәнең мәртәбәле кешеләре араһына кергәс, иренең дә

күңеле шайтан ҡотҡоһона бирелгәндер, бәлки. Унда аҡсаға ҡомһоҙ, ялтыр күҙле һылыуҡайҙар етерлек. Уның ирен нуҡталап, мөлкәтен тартып алырға ниәтләгән берәй уйнаштың мәкере түгелме икән был?

Нажия сәскә тажына оҡшатып эшләнгән йомшаҡ ултырғысына урынлашып, өҫтәлдәге көндәлеген асты ла бөгөнгө көн тәртибе менән таныша башланы. Бөгөн был ресторанда, кисәге туйҙан һуң, йыйыштырыу эштәре тәғәйенләнгән. Күл буйындағы ресторанда тыуған көн тантанаһы уҙғарыла. Магазиндарҙы ла әйләнеп сығырға кәрәк, юғиһә, һатыусыла, өсөнсө көн үк тауар бөтөүгә зарлана ине. Әйткәндәй, бөгөн үк турфирмаға шылтыратып, Италияға сәйәхәт тәғәйенләргә кәрәк. Тыуған көнөн ул ғаиләһе менән, һис шикһеҙ, Италияла уҙғарасаҡ. Былтыр Мысырҙа булып, шундай оҡшағайны… Бынағайыш, әүәле төшкә лә кермәгән мөмкинлектәр тыуҙырған шундай уңышлы кәсептән нисек итеп үҙ теләгең менән яҙмаҡ кәрәк? Юҡ инде, ҡәҙерлем, тип уйланы кәйефе үҫә башлаған Нажия ире тураһында, кәсеп тә минеке, һин дә минеке, һонолоп ҡына ҡараһындар, күрмәгәндәрен күрерҙәр…

Бүлмә ишеге асылып, йыйыштырыусы ҡатындың түңәрәк йөҙө күренде.

– Нажия Әсғәтовна, һеҙгә килгәндәр…

Сираттағы йомошсолыр, тип уйланы Нажия.

Бүлмәгә килеп кергән ҡупшы кейемле, күҙлекле егет хужабикә менән итәғәтле генә иҫәнләшеп, ҡаршылағы ултырғысҡа ҡунаҡланы. Шунан, кинәт кенә нимәнелер иҫенә алғандай, күҙбәйләүсе маһирлығы менән ҡайҙандыр ысығы йылтырап торған рауза сәскәһе сығарып, Нажияға һондо.

– Сәскә янына – сәскә, – тине ул, мөләйем йылмайып.

– Ҙур рәхмәт, – Нажия көтөлмәгән хәлдән ҡаушауын һиҙҙермәҫкә тырышты. –Тыңлайым һеҙҙе.

– Шундай матур ҡатындың кабинетында йомшаҡ диван булмауына ғәжәпләнәм, – тине егет, кинәйәләп.

– Йомшаҡ диван минең өйөмдә бар. Диванда яткан ирем дә бар.

– Һайларға тура килһә, яңығыҙҙа ирегеҙҙе ҡалдырыр инегеҙме, әллә диванды мы?

Нажия, сәйерһенеп, ултырғыста бот сәнсеп ултырған әңгәмәсеһенә ҡараны.

– Иремде, әлбиттә. Мөхәббәт өсөн диван булыуы мотлаҡ түгел, – тип шуҡ ҡына йылмайып алды ул. – Тик, дөрөҫөн әйткәндә, бындай сағыштырыуҙы урынһыҙ тип табам.

– Алтын һүҙҙәр! – Егет, ваҡ, тигеҙ тештәрен йылтыратып, һуҡ бармағын өҫкә төбәне. – Иң мөһиме – мөхәббәт һәм ғаилә именлеге! Шуны күҙаллап, бизнесығыҙҙы һатырға булғанһығыҙҙыр, моғайын. Ҡотлайым һеҙҙе, теләгегеҙ Хоҙайҙың амин тигән сағына тура килгән, ахыры. Мин бөгөндән бар кәсебегеҙҙе тулайым килеш һатып алырға ризамын!

Нажияның йөҙө ҡараңғыланды. Ҡылт ҡына хәтеренә иренең кисәге һүҙҙәре төштө.

– Һеҙ бында яңылышып йөрөйһөгөҙ, буғай. Мин бер нәмә лә һатырға йыйынмайым. Бүтән йомошоғоҙ булмаһа, хушығыҙ, – тине ул, тауышын ҡатырып.

– Тәҡдимемде кире ҡағырға ашыҡмағыҙ, – тине егет, Нажияның күҙҙәренә йылы ғына бағып. – Һәүетемсә һөйләшеп килешеүгә етмәй. Аҡса мәсьәләһе һеҙҙе борсомаһын, килешелгән хаҡты хәҙерҙән бирә алам.

Нажия урынынан торҙо.

– Башҡаса бындай тәҡдим яһап борсомауығыҙҙы үтенәм. Ә хәҙер, – ул ишеккә ымланы, – рәхим итеп сығығыҙ, юғиһә, милицияға шылтыратырға мәжбүр буласаҡмын.

Егеттең бығаса балҡып торған йөҙөн, гүйә, болот басты.

– Милиция саҡырырлыҡ сәбәп тыумаған, әлегә, – тине ул, һуңғы һүҙгә айырыуса баҫым яһап. – Ғөмүмән, белеүегеҙсә, хоҡуҡ һаҡлаусылар фажиғә һуңында ғына киләләр һәм хәлдәрҙе төҙәтә алмайҙар. Әйткәндәй, – ул урынынан ҡуҙғалды,– минең дә ваҡытым тар. Иртәгә, ошонда ҡабат осрашҡанға хәтлем, был мәсьәләгә булған ҡарашығыҙ ҡырҡа үҙгәрер һәм һатыу-алыу тураһындағы килешеүебеҙ законлы төҫ алыр, тип ышанам.

– Бушҡа өмөтләнмәгеҙ ҙә, килеп тә йөрөмәгеҙ.

– Ышанығыҙ, беҙ кешеләрҙе өгөтләй беләбеҙ.

Шул саҡ теш балҡытып йылмайған егеттең ҡулында, һауанан үҫеп сыҡҡандай, икенсе рауза сәскәһе пәйҙә булды. Сәскәне Нажияға бирергә иткән егет, уңайһыҙланғандай ҡыланып, уны усында йомарланы ла, сүп кәрзиненә ташланы.

– Ғәфү итегеҙ, – тине ул ғәйепле төҫтә. – Ике сәскә – мәйеткә бит. Хушығыҙ…

Был хәлдән бер аҙ ҡаушап ҡалған Нажия ни уйларға ла белмәй күпме ултырғандыр бүлмәһендә. Урамда ниндәйҙер машинаның көслө геүләүе, уның артынан нимәнеңдер гөрһөлдәп ауғаны ишетелде. Ул да булманы, йыйыштырыусы ҡатын, яр һалып, бүлмәгә атылып керҙе.

– Нажия Әсғәтовна! – Ҡатынҡайҙың ҡурҡышынан ҡобараһы осҡайны. – Унда, – ул урамға ҡул иҙәне,– авария унда! Машинағыҙҙы әрәм иттеләр бит!

Урамға елдәй осоп сыҡҡан Нажияның күҙ алдына ултырып иларлыҡ күңелһеҙ күренеш килеп басты. Уның ике ай элек кенә һатып алған, ҡолоҡастай күреп ҡәҙерләгән өр-яңы ҡыҙыл машинаһы, ҡарар ере лә ҡалмай йәмшәйеп, ерҙә аунап ята ине.

– «Запорожец» төкөнө! – Буш шешә йыйып йөрөгән бомж Толиктан уҡшытҡыс һаҫыҡ еҫ аңҡый, ә тауышынан ҡарға тауышы йәмлерәктер. – Йәмшәйеп бөткән иҫке запар! Әллә ҡайҙан геүләп килеп сыҡты ла, бах! Боролдо ла кирегә һыпыртты!

Милиция килеп, яҙыу-һыҙыу иткәнсе төш ауҙы. Йөҙө тартылып, ҡара көйгән Зиннуры ҡатынынан теге егет тураһында төпсөп һорашты ла кемгәлер шылтыратып аҙапланды.

– Бизнесты һатырға кәрәк, Нажия, – тине ул ҡатынына, сираттағы шылтыратыуҙы кире ҡаҡҡан кеҫә телефонын йән асыуы менән өҫтәлгә ырғытып. – Күрәһеңме, нишләйҙәр…

Кисерештәрен быға тиклем эсендә тотҡан ҡатынының күҙҙәренән шул урында йәштәре сәсрәп, йөҙө лысма һыу булды.

– Һатмайым! Һинең хәйер һымаҡ ҡына эш хаҡыңа ҡарап йәшәргәме ни? Италияға сәйәхәткә йыйынғанды, баҡсалы йорт һатып алабыҙ, тигәнде оноттоңмо ни? Улыбыҙҙы юғары уҡыу йортона керетергә кәрәк, ҡыҙыбыҙ икенсе йыл мәктәпте тамамлай… Ошо кәсеп булмаһа, уларҙы нисек күтәрергә уйлайһың?

– Бандиттар, Нажия, бандиттар баҫа бит! – Зиннуры, сәсен йолҡорҙай булып, башын устары менән ҡапланы ла торған ерендә әйләнеп үк китте.

– Алдашма! Бандиттар түгел, ябай урам хулигандары төрттөрҙө машинамды! Иҫерек килеш машина йөрөтөүселәр! Теге егет тә минең менән бик әҙәпле генә һөйләште, хатта сәскә бүләк итте. Ә һин һуңғы тапҡыр миңә ҡасан сәскә бүләк иткәйнең әле?! Онотһаң, иҫеңә төшөрәйем – хан заманында! Бизнесты һатып, һөйәркәңә сәскә менән ҡушайым аҡса ҡосаҡлап барырға итәһеңдер…

Зиннуры, ишеткәненә ышанмай, ауыҙын асып, күпмелер ваҡыт ҡатынына

тексәйеп торҙо ла, аңлайышһыҙ өн сығарып, иҫерек кешеләй алпан-тилпән сығып китте. Нажия, устары менән еүеш йөҙөн ҡаплап, өҫтәле артында ултырып ҡалды.

Нажия менән Зиннур – икеһе лә ауылдан. Университетта уҡыған саҡта танышып өйләнештеләр. Шунан һуң ун биш йылдан ашыу дөйөм ятаҡ тормошо кисерҙеләр. Ах, ул ятаҡтар, һыуһыҙ, бәҙрәфһеҙ, һаҫыҡ, шау-шыулы ятаҡтар… Икеһе лә тәүлек әйләнәһе серәнеп эшләрҙәр, ә тапҡандары ашарға ла, кейенергә лә етмәҫ ине. Балаҡайҙарына уйынсыҡтарҙы ла кеҫә тырнап, устағы тәңкәләрҙе ҡат-ҡат шутлап ҡына алырҙар ине. Әлдә иренең сослоғо, маһирлығы бар, тырышып-тырмашып, бер ярҙамһыҙ ҡала кимәлендәге ҙур дәрәжәгә үҫә алды. Шунда ғына уларға өс бүлмәле фатир бирҙеләр. Нажия, ҡыуанысынан, иренән йәшенеп кенә иланы хатта. Иларһың да шул, ҡырҡҡа етеп, яҡшы тормошҡа өмөттәре һүнә башлағанда шундай мөғжизәгә тарығас. Тора-бара, мәктәптәге эшен ташлап, ире ярҙамында килемле генә кәсеп асҡас, ниһайәт, аҡса ла ҡулдарына йәбешә башланы. Әҙәм рәүешле йәшәүҙәренә лә ни бары биш йыл бит. Өҫтәренә матур кейем кейеүгә, өйҙәренә яҡшы әйбер килеүгә күпме ни? Барыһы ла әлеге кәсептән килгән. Уны юғалтыу алтын йомортҡа һалған тауыҡты салыу менән бер ҙә баһа…ҡала башлығы булғас, юғалтҡанды унлата кире ҡайырып алырбыҙ, ти ире. Нажияға ҡалһа иһә, ҡулдағы көмөш өмөттәге ынйынан ҡәҙерлерәк…

Маҙалы-казалы көндән ҡалған эштәрен кисләтеп кенә тамамлап, ҡояш офоҡҡа ултырғас ҡына ҡайтып керҙе Нажия. Зиннуры диванда телевизор ҡарай ине. Ҡарай тигәндән, башында ҡайнаған уйҙарынан бер ни күрмәй, һуҡыр ҙа һаңғрау булып ултырыуы инде. Иренең былай ҙа асҡаҡ яңаҡтары балта башылай ҡырланып, оҙон танауы оторо ослайып киткән.

Ул да булманы, әсәһенең артынан Илдар улы ла килеп керҙе.

– Ләйсән һеңлең ҡайҙа?

– Әхирәттәре менән күлгә төшкәйне, – әсәһенән аша ҡарап торған Илдарҙың спорт секцияһынан ҡайтып тороуы ине. Ул, кәрәк-ярағын бүлмәһенә ырғытты ла, башҡаларҙан алда өлгөрәйем, тигәндәй, йәһәт кенә ваннаға инеп бикләнде.

Киске сәй артында ауыҙ асып һүҙ әйткән кеше булманы. Ирле-ҡатынлылар бер-береһенә күҙ күтәреп тә ҡараманылар.

Сәйҙән һуң Зиннур балконға сыҡты. Ҡояш тау артына йәшенеп, офоҡто алға мансығайны.

– Илдар, һеңлеңә шылтырат, ҡайтһын, ҡараңғы төшөп бара бит, – тине Нажия улына өҫтәл йыйыштырғанда.

Ләйсән ҡыҙының башһыҙ, алабарман сағы шул. Аҡыллы, тыңлаулы ғына бала ине быға ҡәҙәре. Ун алтыһы тулғас, кинәт кенә шаша башланы, кистәрен һуңлап ҡайта, бәйһеҙ егет-елән, ҡыҙ-ҡырҡын араһында сыуала. Шуға ла Ләйсәне өсөн борсолоп, шөбһәләнеп көндәре уҙа Нажияның. Алдың-артыңды ҡарап йөрө, тип ҡыҙының башына иҫке ҡата менән ҡундырып ҡына тора.

Нажия асыҡ тәҙрә аша урамға күҙ һалды. Йорт тирәләп үҫкән ҡайындарҙың ҡуйы япраҡтары араһынан бер ни күренмәй. Һауа сафланып, ҡыҙыл эңер төшөп, күҙ бәйләнә башлаған мәл.

– Әсәй, Ләйсәндең телефоны яуап бирмәй…

– Нисек инде яуап бирмәй? – Нажия, күңеленә кергән шомдо еңергә тырышып, үҙенең телефонын эҙләп тапты. Ҡыҙының бер ҡасан да саҡырыуға яуап бирмәй йөрөгәне юҡ инесе... Иҫән-һау ғына ҡайтып керһен әле, сәсенән һөйрәкләп, арт һанын ярасаҡмын бисураның…

Ҡат-ҡат шылтыратып та, ҡыҙынан яуап килмәгәс, Нажия уның Камила әхирәтенә шылтыратты. Камила оҙаҡ көттөрмәне. Ул күлдә Надя, Ләйсән менән бергә булған, әлеге мәлдә өйҙә, ҡайтып кереүенә сәғәттән ашыу инде... Өсөһө лә күлдән бергә ҡайтҡандар, Ләйсән дә күптән ҡайтып етергә тейеш...

– Йәйәүләп килдегеҙме?

Шул урында Камила бер аҙға шымып ҡалды.

– Беҙҙе машинала килтерҙеләр,– тине ул һуңынан, ғәйебен танығандай итеп.

– Ниндәй машина ул тағы ла?– тип ҡысҡырҙы Нажия телефонға, йөрәге атылып сығырҙай булып.

Баҡһаң, күлдән ҡайтып килгәндә, уларҙы ниндәйҙер машина ҡыуып еткән дә, шундағы егеттәр ҡыҙҙарҙы ҡалаға илтергә тәҡдим иткәндәр. Бер тирәлә торған Камила менән Надяны, ысынлап та, өйҙәренә тиклем илтеп ҡалдырғандар ҙа ҡала үҙәгендә йәшәгән Ләйсәнде, өйөнә илтәбеҙ тип, артабан алып киткәндәр... Машинаның төрөн дә, төҫөн дә белмәй Камила, номерын да иҫләмәй...

– Йәшел ине, шикелле... Машинала өс егет ине, мин уларҙы белмәйем. Үҙҙәре шундай дәүҙәр, әҙәпһеҙҙәр, телдәренән йүнле хәбәр сыҡмай, ҡулдары ла уйнап тора. Ниңә ултырҙым, тигән хәлгә төштөм...

Шунда Нажияның күҙ алдында хасил булған ҡыҙыл тап бик тиҙ киңәйеп, ҡуйырып, ҡоромдай ҡара пәрҙәгә әүерелде лә аңын томаланы. Иҫен юйған Нажия дивандан иҙәнгә шыуып төштө, ҡулындағы телефоны диван аҫтына шылды...

Аңын юғалтып күпме ятҡандыр Нажия. Күҙҙәрен асҡас, янында ултырған аҡ халатлы ҡатынды күреп аптыраны. Ни булған уға? Үҙе лә белмәҫтән берәй бәләгә тарығанмы әллә? Зиннуры ниңә сәбәләнә, улы ниңә илай? Ләйсәне ҡайҙа?

Тик шунда ғына Нажияның мейеһендә ниҙер балҡып шартланы ла, бар ысынбарлыҡ бер юлы иҫенә бәреп керҙе.

– Зиннур! – тип ҡысҡырҙы ул, торорға уҡталып. – Зиннур, Ләйсән ҡыҙыбыҙҙы... Ләйсәнде бандиттар алып киткән бит!

Иренең йөҙө аҡ ҡағыҙҙай булды. Бер ни аңламаған табип ҡатын ҡиәфәтен юғалтып, тороп ултырған Нажияны урынына кире һалырға маташты.

– Нажия Әсғәтовна, зинһар, ҡуҙғалмағыҙ, һеҙгә ятырға, тынысланырға кәрәк...

Шул саҡта ҡайҙалыр телефон шылтырағаны ишетелде. Илдар, булдыҡһыҙ малайҙарса алан-йолан ҡаранып, фатир буйлап телефонды эҙләй башланы. Телефон бер мәлгә шымды, ҡабат башланы... Зиннуры кинәт кенә иҙәнгә сүгәләне лә диван аҫтында шылтырап ятҡан кеҫә телефонын табып алды.

– Ләйсән шылтырата!

Нажия, ел осорғандай, ятҡан еренән ҡубып торҙо һәм ҡалтыранған ҡулдарын телефонға һуҙҙы...

...Төнгө юл буйлап күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә машина елдерә. Йөҙө һулып, бер көн эсендә ун йылға ҡартайғандай булған Нажия, күгәргән ирендәрен усы менән баҫып, руль артында барған ирен һаман-һаман ашыҡтыра: тиҙерәк, тиҙерәк, ниңә шулай аҡрын бараһың...

...Юл ситендә ләүкеп янған усаҡ янындағы Ләйсәнен күреп ҡалған Нажия, машинаның тамам туҡтағанын көтөргә лә түҙеме етмәй, ишеген асып ергә баҫты ла, сайҡалып, ҡолап китте. Ләйсән йүгереп килеп, әсәһен тотоп алды.

Күҙҙәре ҙурайып, сәстәре ялбыраған Нажия, хыялый кеүек, ҡалтыранған ҡулдары менән Ләйсәненең башын, тәнен, аяҡ-ҡулдарын ҡапшай, күҙҙәренән үбә, сәсенән һыйпай…

– Шашлыҡ һатып ошонда көн уҙғарҙыҡ та ҡайтырға йыйынып йөрөй инек, – ҡара сәсле йыуантыҡ ҡатын таяҡ менән һүнеп барған усаҡты болғатты. Инеш аръяғындағы туғайҙа ат ҡыңғырауы ишетелә. – Бер ҡараһаҡ, юл буйлап ҡыҙыҡай йүгереп килә, артынан уны машина баҫтырыҡлай, берәүһе, машинанан төшөп, хас маймылдарса ҡыланып, бахырҡайҙы тоторға итә. Битһеҙҙәр, хахылдашып көләләр, һыҙғыралар… Ирем мылтыҡ тотоп ҡаршы сыҡты ла аралап алып ҡалды ҡыҙығыҙҙы… Аллаға шөкөр, ҡыҙығыҙға теймәгәндәр, тик ул ныҡ ҡурҡҡан. Ҡурҡмай ни…

Яр башынағы өҫтәл янында торған ҡаҡса кәүҙәле ир ҡырлы стаканға өйгәнсе араҡы һалып, Зиннурға ымланы.

Ҡыҙын ҡосаҡлап, һыҡтап илап ебәрҙе Нажия. Уның йөрәге ҡәһәрле көндөң йән өшөткөс һалҡынынан шулай арына ине…

…Зиннур, нотариус төҙөгән ҡағыҙҙарҙы диҡҡәт менән уҡып сыҡҡас, ҡатыны Нажияға бирҙе. Күҙлек кейгән ялтыр тешле егет, үҙе менән алып килгән күн ҡапсыҡтағы аҡсаларҙы күрһәтеп, һөйләшелгән хаҡты түләргә әҙер булыуын белдерҙе. Зиннур аҡса бәйләмдәрен иғтибар менән тикшерә, һанай башланы.

– Бушҡа аҙапланаһығыҙ, – тип ыржайҙы теге егет, ваҡ тештәрен балҡытып. – Барыһы ла дөрөҫ, теүәл. Искәндәр бабай алдашҡанды яратмай…

Нажия һүҙһеҙ генә ҡағыҙҙарға ҡултамғаһын ҡуйҙы.

Теге егет ҡайҙандыр шарап сығарып, һауыттарға һалды.

– Алыш-биреш мәгәрисһеҙ булмай,– тине ул, шат йылмайып. – Әйҙәгеҙ, был уңышлы килешеүҙе «йыуып» алайыҡ.

Нажия ҡулындағы стаканға бер мәл генә ҡарап торҙо ла шарапты егеттең битенә һипте.

– Ҡәбәхәт һин…

## 11

Автобустан төшкән Сатура артына боролдо ла, асыҡ тәҙрәгә үрелеп, ниҙер әйтергә маташҡан бөҙрә сәсле егеткә телен күрһәтте. Юл буйы бәйләнеп, юҡбар хәбәре менән ҡолаҡ итен ашап килгән егеткәйҙең йөҙөндә мәрәкә генә кисереш сағылды. Шуны күргән Сатура селтерәтеп көлдө һәм шау сәскәле болон аша үткән саңлы һуҡмаҡҡа төшөп атлап китте.

Йәй уртаһы. Тәпәш кенә урманлы тау артынан ҡояш ҡалҡып килә. Мул ысыҡҡа мансылған туғай өҫтөнән шыйыҡ ҡына томан ағыла. Һуҡмаҡҡа эйелеп төшкән оҙон үләндәр еүеш ҡыяҡтары менән Сатураның яланғас балтырҙарын сылата. Иртәнге һалҡынса һауа ҡыҙҙың асыҡ иҙеүенән үтеп, тәнен наҙлай, күңелендә әйтеп биргеһеҙ иркенлек, ләззәт уята. Тирә-яҡ ҡоштар тауышынан гөрләп тора.

Сатура затлы балаҫтай йәйрәп ятҡан болон уртаһында туҡтаны ла, йөҙөн зәңгәр күк көмбәҙенә сөйөп, ҡулдарын йәйҙе һәм күҙҙәрен йомдо. Ниндәй рәхәтлек… Ошо торған ерҙә аҡ томанға әүерелеп, хозур тәбиғәт ҡуйынында ирергә ине… Унан, йомро болот булып донъя гиҙгәндән һуң, йылы ямғыр тамсылары менән ошо ергә ҡабат төшөргә һәм, кире һауаға күтәрелгән күк томандан яралып, әлеге ҡиәфәткә ҡайтырға. Бер хәлдән икенсе хәлгә әүерелеп, үҙенән-үҙе таҙарынған һыу кеүек…

Күҙҙәрен асҡас, бар донъя тағы ла матурланып, яҡтырып киткәндәй тойола. Күңеле йәмләнеп, кәйефе күтәрелгән ҡыҙ юл буйындағы түңгәккә ултырып аяҡ кейемен һалды ла ялан тәпәй атлап китте. Аяҡ аҫтында бырхып ятҡан йомшаҡ саң, тапалған үлән ҡыяҡтары ҡыҙҙың йомшаҡ табандарын ҡытыҡланы, ул, кисерештәрен тыя алмай, йылмая-көлә атлауында булды.

Ауыл ҡырынан аҡҡан инешкә төшкәс, Сатура, аяҡтарын күмгән һыуҙың сафлығына һоҡланып, һыуға ҡарап байтаҡ ҡына ҡуҙғалмай торҙо. Бала сағында, йәй айҙарында, ошо инеш буйынан ҡайтмаҫ ине ул, атаһы кис еткәс кенә уны эҙләп алыр ҙа, иркәләй-ороша, күтәреп алып ҡайтыр ине. Үҫә биргәс, уны эшкә ектеләр. Ата-әсәһе бесәндә йә бүтән эштә саҡта һеңлеһен, ҡустыһын ҡарар, ғөмүмән, бар йорт булған ҡош-ҡорто, мал-тыуары менән уның ҡулында ҡалыр ине.

Ул, инеш буйында һаман уйнап йөрөгән ялан тәпәй бала сағын шыпырт ҡына күҙәткәндәй, онотолоп торҙо. Йөрәгендә ниндәйҙер һағыш тойғоһо уянды, гүйә, әле генә күңеле күгендә балҡыған сағыу ҡояш, ни сәбәптәндер һүрелеп, һары айға әүерелде.

– Сатура?!

Яр буйындағы ҡырсында торған ир кеше, күҙҙәренә ышанмағандай, шулай һаҡ ҡына өндәште инеш кисеп килгән ҡыҙға.

– Әхәт, һинме был? – Көтөлмәгән был осрашыуҙан ниңәлер ҡаушап ҡалған ҡыҙ ашығып ярға сыҡты ла һомғол буйлы, матур йөҙлө ир янына ашыҡты. – Һаумы, Әхәт, ҡасандан бирле күрешкәнебеҙ юҡ…

Йөрәктәрендә быға ҡәҙәре йәшенеп ятҡан әүәлге тойғоларының сараһыҙҙан ҡабат уяна башлауын һиҙгән икәү, бер-береһе алдында уңайһыҙланып, тынып торҙолар.

– Әсәйемде күрергә ҡайтҡайным, – тине Әхәт, күҙҙәрен ситкә алып. Ул да һыу эсендә ялан тәпәй тора, өҫ-башында еңел-елпе генә күлдәк-салбар.

– Ә минең әсәйемдең тыуған көнө бөгөн. Ҡайтып ҡотларға булдым, бына… Үҙең нисек йәшәйһең?

– Ҡалала, янғын һүндереүсе булып эшләйем.

– Янғындар күптер шул, йәй бигерәк эҫе быйыл, – тигән булды Сатура, башҡа һүҙ тапмағас.

Әхәт күҙҙәрен тултырып Сатураға ҡараны ла:

– Һүндереп кенә торабыҙ,– тине. – Өйләндем инде, бер ҡыҙым бар…

– Ысын күңелдән ҡотлайым һине. Ҡыҙыңа кем тип исем бирҙең?

– Сатура тип…

Битенә ҡайнар ялҡын бөркөлгәндәй тойған Сатура Әхәткә ҡарап ниҙер әйтергә теләне лә, өнһөҙ ҡалып, йәпһеҙ генә ҡул иҙәп китеп барҙы.

Ҡулдарына болон гөлләмәһе тотоп, күктән төшкәндәй ихатала пәйҙә булған ҡыҙын күргән әсәһе, албырғап, биҙрәһен төшөрөп үк ебәрҙе. Шул арала әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан ҡустыһы Әмир, һеңлеһе Зөлфиә, ҡыуаныстарынан йылмая-көлә, апайҙарын ҡосаҡлап алдылар. Утынлыҡта балта менән ағас юнып, ниҙер әтмәләгән атаһы ла, шат булып, ҡыҙы менән ике ҡулын биреп күреште, тупылдатып арҡаһынан һөйөп алды.

– Ә һин, ҡайтмай ҙа, ҡайтмай, тип нисә көн инде йөрәгеңде йыртаһың? – тине ул ҡыуанысынан күҙе йәшкәҙәп торған ҡатынына. – Бына, күр инде, айҙай булып урамыбыҙға килеп төштө ҡыҙыбыҙ! Сығар тиҙерәк йәшереп тотҡан бер яртыңды, байрам итәбеҙ бөгөн! Тыуған көнөң бит! Оло ҡыҙым, матурым ҡайтты!

– Ауыҙыңды йәйеп, яңғыҙың хәмер һемерегә булдыңмы? – тип асыуланды әсәһе. – Кис етеп, күрше-күләнде йыйғансы сабыр итергә булмаймы?

Бик һирәкләп кенә ҡайта Сатура тыуған ауылына һуңғы ваҡытта. Ҡайтҡан һайын бындағы тормоштоң торғонлоғон, тынышлығын мәрәкә итә. Ҙур ҡалала енле айғырҙай елдереп кенә үткән ваҡыт бында, гүйә, сыбыҡ менән осаһына төртмәйенсә урынынан ҡуҙғалмаған үшән атҡа әүерелә. Ул тағы ла тыуып үҫкән өйөнә күҙ йөрөтөп, эстән генә ғәжәпләнеп торҙо. Мәңгелек үҙе оялағанмы ни бында… Шул уҡ алты мөйөшлө, ҙур аҡ мейесле йорт, кәртә-ҡура, йәшел балаҫтай бәпкә үләне баҫҡан ихата… Әйткәндәй, атаһы баҡса кәртәһенең рәшәткәһен яңыртҡан, буғай. Мейес өҫтөндә торған сөгөн ҡаҙансыҡта ата-әсәһе бесәндән ҡайтыуға ул аш бешереп ҡуйыр ине әүәле.

Аласыҡ алдындағы ышыҡта йәһәт кенә өҫтәл йыйҙылар. Өҫтәлдә йәне теләгән нәмәне күрмәгәс, күңеле ҡырылып, ҡатынына үсеккән атаһының ҡиәфәтенән ҡыҙыҡ тапҡан Сатура көлөп алды ла ҡапсығынан ҡиммәтле хәмер сығарып, атаһына бирҙе. Шунда уҡ атаһының ябыҡ йөҙө, болот артынан сыҡҡан ҡояштай, балҡып китте. Уға яуап итеп, әсәһе, өндәшмәй генә, өҫтәл аша йоҙроҡ төйҙө.

– Ҡунаҡтар килеүгә иҫереп, болғанлап йөрөһәң, ҡара уны…

Ҡапсығындағы сауғаларын сығарып, туғандарына өләшкәс, Сатура, иң һуңында, зәр* биҙәгенән эшләнгән ҡумтаны асып, әсәһенә күрһәтте.

– Тыуған көнөң менән, әсәкәйем, – тине ул, әсәһен ҡосаҡлап битенән үпкәс. – Иҫән-һау бул, оҙаҡ йәшә.

Ҡумта эсендә емелдәп ятҡан ынйы-мәрйенле муйынсаҡты күреп, әсәһе һушынан яҙырҙай булды.

– Әстәғәфирулла! Бигерәк ҡиммәттер ҙә инде? Шундай матур биҙәкте, оялмай, ауылда нисек тағып йөрөйөм, ти? Матур күлдәгем дә юҡ бит…

– Һыйыр муйынына алтын муйынсаҡ таҡҡан һымаҡ инде, – күҙҙәре майланырға ла өлгөргән атаһы шулай шаяртты. Көндәр буйы ауыҙ асып һүҙ әйтмәгән атаһының теле ҡайһы саҡта бигерәк әсе була.

– Күпме тора һуң?

Ғүмер буйы ҡулына кергән тәңкәләрҙе шутлап ҡына тотонорға күнеккән әсәһе ҡыҙының бүләккә сарыфлаған аҡсаһын ысынлап ҡыҙғана ине, ахыры.

– Ошо йорт ҡәҙәре. Һаҡлап ҡына тот, әсәй.

Сатура дөрөҫөн әйтһә лә, әсәһе барыбер ышанманы, шикелле.

Һеңлеһе Зөлфиә әсәһенең бүләген алды ла, аҡҡоштай нәҙек муйынына тағып, көҙгө алдында борғоланырға кереште. Затлы муйынсаҡ, йәш тәндә тойоп ҡыуанғандай, күҙ яуын алып, ҡояшта емелдәне.

– Әсәй, оҡшатмаһаң, миңә бир муйынсағыңды. Шундай матур, шундай килешеп тора!

Сатура, әҙәпһеҙләнгән һеңлеһен йомшаҡ ҡына орошоп, муйынсаҡты алды ла әсәһенә таҡты.

– Бүләк хужаһында ғына матур була…

– Аллаға шөкөр, ғаиләбеҙ менән тулайым йыйылдыҡ бына. Бөтәбеҙ ҙә иҫәнһаубыҙ, балаларым алма кеүек матурҙар. Шунан да артыҡ бүләк, бәхет бармы ни?

Ҡалған көн табын мәшәҡәттәре менән үтте. Саҡырылған ҡунаҡтар иҫәпле генә булһа ла, аш-һыуҙы тик сейҙән, ҡоро ҡул менән әҙерләү еңел түгел. Ауылдағы халыҡ кәмеп, торбаларынан төтөн сығарған өйҙәр һирәкләнеп бөткән. Эшһеҙлек сәбәбенән инде. Булдыҡлыраҡ йәштәр аҡса артынан ситкә

*Зәр — алтын.

китә, йүнһеҙерәктәре, ҡартайып бөткән ата-әсә елкәһенән төшмәй, эскегә һалыша, барыр ерҙәре булмаған ҡарт-ҡоро ла әбей-һәбей генә һаман нигеҙ һаҡлай.

Тәүҙә ауылдың арғы осонда йәшәгән Заһир ағай менән Зәкиә еңгә килделәр. Ауылса булһа ла, бөхтә генә кейенеп алғандар. Бер заман Зәкиә, ҡәйнәһенең уҫаллығына түҙмәй, ике балаһын алып, ҡалаға сығып та киткәйне. Кем белә, ҡәйнә яуыҙлығы, бәлки, һылтау ғына булғандыр… Инәлеп-ялбарып та ҡатынын кире ҡайтара алмағас, Заһир ситтән эҙләп, икенсе, балалы ҡатын алғайны йортона. Нишләйһең, тормош күтәргә кәрәк бит. Тик теге ҡатынҡайҙың донъя тоторға һис кенә лә сослоғо юҡ ине, етмәһә, эсеүгә, тәмәке тартыуға ла аптырамай икән. Бер йыл да торманы, ауылыма ҡайтып киләм, тип сығып киткән еренән кире әйләнмәй, әллә ҡайҙа ғәйеп булды. Эҙләп тә ҡараны уны Заһир, юғалған ҡатындың биш йәшлек малайы янында ҡалғайны бит. Тапманы. Кем белә, теге аҙғын ҡатын үҙе килмәгәндер, бәлки, ауыл тормошо уның кеүектәр өсөн түгел бит. Уның ҡарауы, бер аҙҙан Зәкиәһен кире ҡайтарырға иреште Заһир. Юғалған теге ҡатынҡайҙың малайын да, үҙ балалары ыңғайына, улдары кеүек итеп үҫтерҙеләр.

Тейендәй бәләкәй генә бисәһен эйәртеп, Ғәле лә килеп етте улар артынса. Йылғаның бейек ярын ныҡлы кәртә менән ҡамап, ҡәлғәләй донъя ҡороп керҙе ул. Йорт-ҡураһы әллә ҡайҙан ялтырап ултыра. Тәпәш кенә бөкрө бөтә ерҙе бөтөрҙө, тип Ғәле тураһында әйткәндәрҙер. Эшкә ен кеүек шәп шул үҙе. Тик холҡо ямаҡай. Быныһы өсөнсө бисәһе инде, беренсеһе, йәш сағында уҡ, ике балаһын алып, ата-әсәһе янына ҡайтып китте, икенсеһе, иренән күргән йәберҙән эскегә һалышып, хыялыйға ҡалды ла дауахананан сыҡмай. Ике балаһы ҡала мәктәбендә ятып уҡый. Ғәле гармунды ҡулына алһа, сәхнә оҫталарың ары торһон. Ғәжәп, шундай моңло, егәрле кешенең күңеленә ҡайҙан килеп кергән һуң ул йән өшөткөс ҡатылыҡ?

Яңғыҙаҡ Талип саҡырырға барғанда киреләнеп тора ине лә, килергә булған икән. Хужаларҙың ҡыҙҙарынан оялғандай булһа ла, күрше хаҡы бит, нисек баш тартһын? Эсе ҡортлап, эскеһе лә килгәндер, бәлки. Талиптың ҡулынан килмәгән эш юҡтыр. Ҡарап тороуға төҫ-килбәте лә бар, тик шул эскеселеге бөтөрә уны. Шуға ҡырҡты уҙып, һаман тормошлана алмай, ябалаҡ һымаҡ яңғыҙы ғүмер уҙғара.

Ә Мәүлет еҙнә менән Рәбиға апайҙың тормошо үҙе бер ҡисса. Йәш саҡтарында бер-береһенә ғашиҡ тотоп та, өйләнешергә яҙмаған уларға. Ул замандарҙа ауыл Советы рәйесе булған Фәйзрахман бабай, Мәүлеттең зат-ырыуын тиңгә һанамай, ҡыҙын бирмәгән. Икеһе ике яҡта тормош ҡороп, балалар үҫтергәс, ауылға кире әйләнеп ҡайтып, ярты ғүмер уҙғас ҡына бергә ҡушылдылар улар. Буш урында өр-яңынан яландай ҙур йорт һалып, кәртә-ҡура төҙөп, пар күгәрсендәй йәшәп яталар әле…

Иң арттан, таяҡланып, күрше Хөмәйрә әбей килде.

– Күршеләгә ҡунаҡ ҡабаланмай,– тине ул, Сатураға ике ҡулын биреп күрешкәс. – Ҡыҙымдың ҡайтҡанын ишеттем дә күреп ҡалырға булдым. Тағы күрешеп булырмы-юҡмы, Хоҙай үҙе генә белә…

– Бесән эшләшергә ҡайттыңмы, Сатура? – тип һораны Заһир. Зәкиәһе көлөп ебәрҙе.

– Ауһар, һиндә бесән ҡайғыһы булғас, бөтәһендә лә шулдыр, тиһеңме әллә? Сатураның ҡулдарына ҡара, шундай нәҙекәс бармаҡтар, биҙәкле тырнаҡтар бесән эшләр өсөнмө ни?

Сатура, табынға ултырмайынса, аш-һыу ҡарауҙы, ҡунаҡтарҙы һыйлауҙы үҙ өҫтөнә алып, әсәһен өҫтәл артынан торғоҙманы. Хәмерҙән тора-бара ҡунаҡтарҙың телдәре асылды, тәүҙәрәк йонсоу күренгән йөҙҙәре лә яҡтырып, ҡиәфәттәре ирәйҙе. Төш ваҡытынан алып ара-тирә йотоп йөрөгән атаһы, тамам иҫереп, Мәүлет янына күсеп үк ултырҙы.

– Яңы ҡуйған бураңды күреп, эшеңә бер ҙә генә күңелем ятманы, – тип бәйләнде ул тегегә, тызырайып. – Ғүмере буйы балта тотмаған кешеләй ҡыланғанһың да баһа? Ҡолас етмәҫлек йыуан бүрәнәне үләндәй нәҙек бүрәнә өҫтөнә һалғанһың. Минең бисәкәйҙең эсе һымаҡ, тышҡа аҫылынып ята…

– Аҫылынмайсы, бик йәтеш ята. – Эшен һәр саҡ урыны-еренә еткереп башҡарған Мәүлеткә хужаның тәнҡите оҡшаманы. – Ҡырҡ ҡабат әйләндереп-тулғандырып, һыҙып, үҙем һалдым.

– Һалғанһың шул. Күтеңдән килмәгәс, мине саҡыраһың аны. Иртәгә үк барып, шул ерен балта менән юнып ташлайым, эсте бошороп, әҙәм көлдөрөп ултырмаһын бураң…

Рәбиға, иҫереп ҡыҙышҡан ирҙәр араһындағы бәхәсте бүтәнгә бororға тырышыпмы, шаяртып ҡына хужаның ҡабырғаһына төрттө.

– Ислам ағай, әйт әле шуны: үҙең маймыл һымаҡһың, бисәң дә һыйыр һымаҡ, ә ҡыҙҙарығыҙ шундай һылыуҙар. Нисек итеп эшләнең һин уларҙы?

Бәхәскә бирелгән йорт хужаһы һорауҙы аңғармайыраҡ ҡалды.

– Яҡшы балтаң булып, ҡулың оҫта булһа, бөтә нәмәне лә эшләргә була, – тип яуапланы эре генә.

Өй эсе геү итеп ҡалды. Ҡунаҡтарҙың көлөүен аңламаған хужаның, ябалаҡ һымаҡ, ҡырыҫ ҡиәфәт менән башын уңға-һулға борғолап ултырыуы табынға оторо мәрәкә өҫтәне. Күҙҙәренән йәш атылғансы һыны ҡатып көлгән Зәкиә еңгә өҫтәл аҫтына сүгәләп үк төштө.

Мул табын артында ваҡыт һиҙелмәйсә үтте. Бер-береһе менән ауылса ғына шаяра-көлә гәпләшкән ҡунаҡтар гармун менән йырлап-бейеп тә алдылар. Күҙҙәрен йәшкәҙәтеп, диван мөйөшөндә ултырған иҫерек хужаға зәм-зәм һыуы башҡаса әләкмәне. Сәй ҡуйҙылар. Мут Ғәле, гармунын ҡуйып, өҫтәлдәге буш шешәгә ишараланы.

– Сәйгә лә күстекме ни?

Шунда ғына Сатураның атаһы, ҡатынына уҡталып, ғәййәрләнә башланы.

– Бисәкәй, һин нимә, сәй ҡуйҙың...дамы ни? Араҡы, әсе бал сығар, ҡунаҡтарҙың ултырғыһы килә!

Аллы-гөллө яңы күлдәген кейгән әсәһе Сатураның бүләген ҡунаҡтар алдында таҡманы, уңайһыҙланды.

– Ислам, бал бөттө, иртәгә Шәрифйәндәр килергә тора!

Тағы көлкө ҡупты…

– Әхәт улым ҡайтҡайны, кире китте бөгөн, – тине Хөмәйрә әбей ҡапҡанан сыҡҡанда. – Киленем булырһың, тигән өмөтөм ҙур ине. Нишләйһең, яҙмышҡа булмағас… Бигерәк матурһың шул, Сатура ҡыҙым. Матур ҡатын-ҡыҙ ҡулына бәхет ҡошо ҡунып бармай. Үҙ бәхетеңдә табырға яҙһын.

Әбей Сатураның арҡаһынан һөйҙө лә урам аша өйөнә йүнәлде.

Өҫтәлдән алып, һауыт-һабаны йыуғас, ҡыҙҙар әсәһе менән шишмә янына ҡуйылған эскәмйәгә ултырҙылар. Эргәләге муйыл әрәмәһендә һуҙып-һуҙып һандуғас һайрай. Шишмә өҫтөнә күкһел томан ҡалҡҡан. Көнсығышта ҡарайып торған болот өҫтөндә Зөһрә йондоҙо балҡый.

– Апайың әйткәнде тыңлап ҡына йөрө, уның һүҙенән сыҡма берүк, – тип

әсәһе көҙөн университетҡа уҡырға барған кесе ҡыҙына өгөт-нәсихәт уҡыны. – Әлдә ул бар янында. Сатура үҙе уҡыған саҡта, ярҙамһыҙ булып, ыҙаны күп күрҙе инде, меҫкенкәйем. Шулай ҙа бирешмәне, кеше булды, Аллаға шөкөр, башҡалар һымаҡ аҙып-туҙып йөрөмәне. Һин дә берүк алдың-артыңды ҡарап ҡына тор. Аҙғын, яуыз әҙәмдәр күбәйҙе, гонаһ шомлоғолор инде. Үткән аҙнала ғына атайығыҙ менән юлға сығып шашлыҡ һатҡанда, ҡот осҡос мажараға тарыныҡ.

Әсә кеше нисек итеп юл буйында артынан машинала ҡыуалап килгән иҫерек егеттәрҙән йәш ҡыҙҙы ҡурсалап ҡалыуҙары тураһында һөйләп алды.

Киске эңерҙә Сатураның йөҙөнә сыҡҡан шомло күләгәне шәйләгән кеше булманы.

– Аҡса тип юл буйында шашлыҡ һатып йөҙәгәнсе, миңә хәбәр итһәгеҙ ни була? – тине ул әсәһенә, кәйефе ҡырылып.

– Бер һинең ҡулыңа ҡарап ултырырғамы ни? – тип үпкәләгәндәй итте әсәһе. – Ярҙамың былай ҙа күп. Аллаға шөкөр, ата-әсәйеңдең аяҡ-ҡулы һау әле, хәлдән килгәнсе үҙ-үҙебеҙҙе ҡарарбыҙ. Һинең үҙеңә лә аҡса күп кәрәктер, ҡалала аҡсаһыҙ йәшәп булмай. Алла бирһә, кейәүгә сығып, тормош ҡорорһоң, балаларың тыуыр. Беҙҙән артыҡ үҙеңде уйла, Сатура ҡыҙым, йәшлек, матурлыҡ мәңгелек түгел…

Иртәгеһенә, төш етеүгә, өй алдына ҙур ҡара машина килеп туҡтаны.

– Минең арттан, – тип, әсәһе менән аласыҡта һөйләшеп ултырған Сатура әйберен алды ла ҡапҡаға йүнәлде.

Уны оҙатып, ҡапҡа алдына сыҡҡан туғандарының йөҙөндә шөбһә ҡатыш сикһеҙ ғәжәпләнеү сағылғайны. Бахырҡай әсәһе, ауыҙын усы менән ҡаплап, йәш тулған күҙҙәрен дә һөртмәй.

«Бала кеүектәр,– тип уйланы Сатура, уларға ҡарап. – Күпме йәшәп, кисереш-тойғоларын йәшерергә өйрәнмәгәндәр».

Ул артына боролоп ҡул болғаны ла машинаға кереп ултырҙы.

– Сәләм, Сати, – тине шофер, машинаны ҡабыҙып. Машина ҡуҙғалып китте. Сати өндәшмәне. Нимәнелер онотоп ҡалдырғандай тоя ине ул. Үҙенме әллә?

## 12

Таңғы сәғәт алтыла тағы ла «тревога» менән күтәрҙеләр. Күнекмә йәһәтенән инде. Һуңғы көндәрҙә өсөнсө ҡат шулай ҡыланабыҙ. Үҙәктән тиҫтәләгән эйәрсендәре менән эске эштәр министры килергә тейеш. Шул ығы-зығы арҡаһында эшләргә лә ваҡыт ҡалмай, дөрөҫөн генә әйткәндә. Башҡа урындарҙа нисектер, иллә-мәгәр беҙҙә, милицияла, йомшаҡ ултырғыстарында үҙҙәрен болотҡа менеп баҫҡандай бейек тойған ҙур погонлы етәкселәр, һәүетемсә генә барған эште бутап, тик ҡамасауларға ғына шәптәр.

Өсөнсө тәүлек барған был ығы-зығы барыһының да тәҡәтен ҡоротоп, һарыуын ҡайната. Ҡайҙа ҡарама, йонсоуҙан йәмшәйгән һытыҡ йөҙҙәр, әшәке һүгенеү, әрепләшеү, мәғәнәһеҙ йүгереш тә сабыш.

Теҙелешеп, сафтарҙы теүәлләп, сираттағы ҡат өҫ-башты тикшергәс, бүлек етәксеһе полковник Козлов Владимир Иванович урынбаҫарҙарын һәм төрлө бүлексә етәкселәрен эш бүлмәһенә саҡырып алды. Беҙҙең бүлексә етәксеһе Иванов, ғаилә бәләһе менән, төшкә ҡәҙәре өйҙә ҡалған. Шул сәбәптән, уның урынына кәңәшмәгә мин барырға мәжбүр булдым.

Милиция полковнигы Владимир Иванович Козлов, ялтыр башлы пеләш

кеше, етәкселәрҙең кабинет стеналары буйына теҙеп ҡуйылған ултырғыстарға урынлашҡандарын күтөп алғас, беҙҙәй осло күҙҙәре менән килеүселәрҙе берәм-берәм барлап сыҡты.

– Ғәлиәскәров, – тине ул алыҫта яңғыраған күк күкрәүен хәтерләткән тауыш менән, – ҡорал бүлмәһенең ишеге ниңә һаман алыштырылмаған?

Дежур бүлеге етәксеһе майор Ғәлиәскәров, тулҡынланып торған ҡара сәстәрен усы менән артҡа һыйпап, урынынан торҙо.

– Тәьмин итеү бүлеге етәксеһе подполковник Павловҡа шул йәһәттән ҡырҡ тапҡыр мөрәжәғәт ҡылғанмындыр. Ризалашып баш ҡаға ла…

– Павлов ҡайҙа?

– Ауырый, – тип урынынан ҡуҙғалды  лейтенант Хәсәнов. – Мин уның урынына…

Павловтың сирен кем белмәй. Министр килер булғас, ҙур етәкселәрҙең ҡыҙыу ҡулына эләгеүҙән шөрләп, әүәлге «киҙеү»енә һабышып, өйөндә ята ул.

– Ни әйтерһең?

Хәсәнов, күҙле бүкәндәй ҡатып, ҡаршылағы тәҙрәгә төбәлде.

– Ишек тураһында беренсе мәртәбә ишетеүем, – тине ул, үҙ алдына һөйләнгәндәй. – Әйткәндәй, аҡса бүлһәгеҙ,  иртәгә үк әҙер булыр…

Полковник Козлов, һары мыйығын тырпайтып, тәү күргәндәй, Хәсәновҡа тексәйҙе.

– Күрсәле, ҡайһылай сос  малай, – тине ул, уҫал көлөмһөрәп. – Аҡса булғанда ахмаҡ та эшкә шәп. Ә һин шул ишекте бушлай ғына эшләтеп урынына килтереп ҡуйһаң, минең алда ҙур хөрмәт ҡаҙаныр инең…

– Нисек инде?

Полковник ҡулындағы ҡәләмен лейтенантҡа төбәне.

– Һинең өҫтөңдә, лейтенант Хәсәнов, милиция хеҙмәткәре кейеме, яурындарыңда милиция офицеры погондары. Ә улар – власть билдәһе, – полковниктың ауыҙынан «власть» һүҙе сыбыртҡылай шартлап сыҡты. – Шуларҙы хеҙмәт файҙаһына ҡуллана белергә кәрәк,– тип бүлек етәксеһе дөйөм рәүештә кабинетында ултырыусыларға өндәште. – Шунһыҙ йәшәп тә, эшләп тә булмай. Йәмғиәтебеҙ, дәүләтебеҙ ауыр көрсөктә, аҡса наҡыҫ, уны бик һаҡлап ҡына тотонорға мәжбүрбеҙ. Уның ҡарауы, аҡса бурҙарҙа күп. Бурҙарҙы һығырға кәрәк, дәүләткә, йәмғиәткә, исмаһам, ауыр саҡтағы  ярҙамдары шул булыр. Белгегеҙ килһә, – Владимир Иванович,  ҡоласын йәйеп, ултырған ерендә яняғына борғоланып алды, – ошо бинаның яртыһы дәүләттең бер тине сарыф ителмәйсә төҙөлгән. Әүәлге совет заманында бүлек етәксеһе булған Салихов үҙ көсөн һалып төҙөгән уны. Тегенән-бынан кирбес, ағас, таҡта, тимер, башҡа кәрәк-яраҡтар  тапҡан, эшселәр урынына ун биш тәүлеккә бикләнелгән хоҡуҡ боҙоусыларҙы файҙаланған. Мәрхүм Салиховтың маһирлығы булмаһа, беҙ әлеге көнгә хәтлем  бинаһыҙ булыр инек.

– Салиховты шул маһирлығы өсөн һуңынан төрмәгә япҡандар ҙа инде, – тине кемдер ауыҙ эсенән генә. Кәңәшмәндәр, урындарында  ҡуҙғалышып, шыпырт ҡына көлөшөп алды. Полковник, сырайын һытып, усы менән өҫтәлде шапылдатты.

– Алдыңды-артыңды ҡарап ҡына эш иткәндә, бер ни ҙә булмай. Һарыҡтар ҙа иҫән ҡала, бүреләр ҙә туҡ була. Саматов, Ғәзизов, – полковник иҡтисад өлкәһендәге енәйәттәрҙе тикшереү бүлексәһе етәксеһе менән миңә өндәшеп, һаман баҫып торған Хәсәновҡа бармаҡ төрттө. – Ярҙам итегеҙ йәш кешегә.

Йәғни Саматов менән мин тиҙ арала берәй бурҙы тотоп ҡыҫырға ла унан әлеге ишекте эшләтеү өсөн етерлек аҡса «һығырға» тейешбеҙ.

– Әгәр ҙә мәгәр, – Владимир Иванович ҡулындағы ручкаһын һалмаҡ ҡына хәрәкәт менән берәмләп Хәсәновҡа, Ғәлиәскәровҡа, Саматовҡа һәм миңә төбәне, – министр шул ишек йәһәтенән миңә тағы ла киҫәтеү яһаһа, ҡарағыҙ уны, башығыҙҙан һыйпамаясаҡмын… Саматов, баҫ әле! – Полковниктың тауышында ҡорос сыңланы. – Минең әллә ҡасандан бирле ришүәтселек буйынса ҡуҙғатылған енәйәт эше күргәнем юҡ. Беҙҙең ҡалала ришүәтселәр бөткәнме әллә? Шул йәһәттән миңә көн һайын үҙәктән шылтыратып, ошоноң менән, – полковник алдында торған ҡара телефонды алды ла шарт итеп кире һалды, – башыма һуғалар! Ҡалала ришүәтһеҙ берәй нәмә эшләнгәне бармы? Юҡ! Хатта, йүнлерәк эшкә урынлашыр өсөн дә кәрәкле кешегә йомдорорға кәрәк! Ә һеҙ, әрәмтамаҡтар, кабинетығыҙҙан да сыҡмайһығыҙ, сыҡҡан хәлдә лә, ваҡ-төйәк һатыусыларҙы талап, бушлай аҙыҡ-түлек йыйыуҙан башҡа мәшәҡәтегеҙ юҡ! Саматов, тыңлайым һине?!

Йыуантаҡ Саматовтың йомро йөҙө аҡлы-ҡыҙыллы булып, тимгелләнеп, маңлайында ваҡ ҡына тир тамсылары йылтыраны.

– Әлеге мәлдә ришүәтселәрҙе тотоу йүнәлешендә әҙерлек эштәре алып барабыҙ, – тине ул, күҙҙәрен иҙәнгә төбәп. – Ул турала, иптәш полковник, һеҙҙең менән аулаҡта һөйләшеү фарыз…

– Ултыр! Кәңәшмә бөткәс, ҡалырһың, – Владимир Иванович өҫтәлендә ятҡан ҡағыҙҙы ҡулына алды. – Коррупцияға, ришүәтселеккә ҡаршы көрәш киҫкенләшә. Ошо йүнәлештәге эштәрҙе көсәйтергә талап итеп, өҫтән бер-бер артлы ҡарарҙар, күрһәтмәләр, бойороҡтар яуа. Лейтенант Хәсәнов, ябай тел менән әйткәндә, коррупция нимә була?

Хәсәнов аяғөҫтө баҫып, тағы бүкән ҡиәфәтен алды.

– Дәүләт эшмәкәрҙәренең законды боҙоп, вазифаларын үҙ файҙаһына ҡулланыуы…

– Мәҫәлән?

– Мәҫәлән, әлеге ҡорал бүлмәһенә ишек ҡуйыу…

– Ултыр, ахмаҡ! – Полковниктың, буҙарынып, йоҙроғо менән өҫтәл гөрҫләтеүе кәңәшмәндәрҙең дәррәү көлөүенә күмелде. – Белмәйем, Хәсәнов, һинең менән артабан нисек эшләрбеҙ икән, – тине бүлек етәксеһе, шау-шыу тынғас. – Һин әллә үтә аҡыллыһың, әллә өмөтһөҙ диуанаһың – бер ҡарауҙан аңларлыҡ түгел. Нисек кенә булмаһын, милиционерҙа шул сифаттарҙың булмауы хәйерле… ҡыҫҡаһы, – тип дауам итте ул, – йыл аҙағынаса коррупция билдәләре буйынса ҡуҙғатылған бер нисә енәйәт эше кәрәк буласаҡ. Юғиһә күптәребеҙҙең башына бүклы таяҡ менән һуғып, артыбыҙға тибәсәктәр.

– Коррупция, имеш… Мин нисек аҡса табып, бәләкәй улымды нисек мәктәпкә кейендерегә белмәйем әле…

Был участковыйҙар бүлексәһе етәксеһенең урынбаҫары, биш бала атаһы капитан Гавриловтың һүҙҙәре булды.

Уның янында ултырған тәфтишселәр бүлексәһе етәксеһе майор Азаматов тегенең ҡабырғаһына төрттө:

– ГАИ-ға күс… Һис булмаһа, иҡтисад енәйәттәре бүлексәһенә. Улар хәҙер, коррупцияға ҡаршы көрәш асҡас, аҡсаны тоҡлап ташыясаҡтар. Аҡмаһа ла – тамыр…

– Гаврилов, Азаматов! – Эске эштәр бүлеге етәксеһенең беренсе урынбаҫары подполковник Хәмитов өҫтәл аша екерҙе. – Телегеҙҙе йолҡоп алғанды көтәһегеҙме?!

Тап шул мәлдә Владимир Ивановичтың өҫтәлендә торған ҡара телефон

шылтыраны. Бүлек етәксеһе, эҫе әйбергә тотонғандай, һаҡ ҡына телефонды ҡулына алды. Кабинетта тынлыҡ урынлашты.

Һөйләшеүен тамамлап телефонды кире һалғас, Владимир Иванович ауыҙ эсенән генә һүгенеп ҡуйҙы.

– Министр килмәй, – тине шунан көләргәме-иларғамы белмәгән ҡиәфәттә. Кәңәшмәндәрҙең кәйефе күҙ алдында күтәрелә башланы, бүлмәгә, гүйә, саф һауа бәреп керҙе.

Шунда лейтенант Хәсәнов урынынан торҙо ла уйнап хәрәмләшеүҙән һемәйгән бала сүрәтендә бүлек етәксеһенә тызырайҙы.

– Нисек инде? Мин өс тәүлек буйы өйгә лә ҡайтмай ятып йыуҙым, буяным, һеперҙем, таҙарттым, йөҙ йыл сереп ятҡан сүп-сарҙы сығарып түктем… Бушҡамы ни тағы?

Көтөлмәгән хәлдән бүлмәлә тынлыҡ урынлашты. Йыйылғандар, ҡыҙыҡһынып, артабан ни булырын көтә башланы. Хәсәнов, ярҙам көткәндәй, бөтәһенә лә күҙ йөрөтөп сыҡты.

– Әйтерһең дә шул, дүртенсе тапҡыр бит!? Киләм, тип ғауға ҡубара ла кире була. Беҙгә ҡарата ихтирамһыҙлыҡ түгелме ни был?

– Хәсәнов! – тип кадрҙар булеге етәксеһе подполковник Янбаев урынынан ҡуҙғалды. Тик теге уның иҫкәртеүен ҡолағына ла элмәне.

– Шундай ҙур вазифалы кешенең һүҙе бер булырға тейеш! – тине ул, ҡыҙып. – Йүнле әҙәм булһа…

– Лейтенант Хәсәнов! – Янбаевтың тауышынан тәҙрә быялалары зымбырҙаны. –Телеңде тый!

Сығырға рөхсәт иткәнде лә көтөп тормай ишеккә йүнәлгән Хәсәнов:

– Тышҡы яҡтан һары төҫкә буятасаҡмын был бинаны, – тине лә кабинеттан сығып китте.

Был хәлдән бер аҙ аҙап ҡалған Владимир Иванович, Янбаевҡа ҡарап, ниһайәт, телгә килде:

– Әйт әле, Янбаев, шул маңҡаны нишләтергә икән?

– Нишләтәһең уны… Атаһы хакимиәттә ултыра бит. Тәрбиәләргә кәрәк.

Хәсәновтың милицияла эшләүенә өс йыл да юҡтыр. Башҡарған эше минеке кеүек эт мәшәҡәте түгел дә. Тәьмин итеү бүлексәһе етәксеһенең ярҙамсыһы булып йөрөй. Белеүемсә, эшен урыны-еренә еткереп атҡара ул, тәьмин итеү бүлексәһенең башлығы Павлов, Хәсәнов килгәс, рәхәткә сыҡты. Илләмәгәр тура һүҙле Хәсәнов, кешенең абруйына ла, дәрәжә-погонына ла ҡарап тормай, күҙенә ҡарап уйлағанын әйтә лә һала. Шул сәбәптән һаман лейтенант булып йөрөй, сөнки бүлек етәксеһе полковник Козлов, Хәсәновты «тәрбиәләү» сүрәтендә, уға бер-бер артлы шелтә сәпәп, сираттағы дәрәжәне бирмәй тотоп килә.

Хәсәновтың һүҙҙәрендә хаҡлыҡ юҡ түгел, әлбиттә. Яңы министр, һуңғы йылда дүрт тапҡыр бында килергә уҡталып, тәғәйенләнгән көн еткәс кенә, дүрт тапҡыр уйынан кире ҡайтты. Алыҫ райондарға вертолет менән генә оса, тиҙәр. Тегеләй-былай осоп йөрөүгә арзанға төшмәйҙер. Ә теге райондарҙа тәфтишселәр документацияны һаман совет заманынан ҡалып шаҡылдап бөткән яҙыу машинкаларында баҫа. Ҡағыҙҙы ла, башҡа эш кәрәк-ярағтарын да үҙ аҡсаларына һатып алалар. Командировкаға барғанда үҙем күрҙем. Егерме беренсе быуат, тиең инде шуны…

Кәңәшмәнән һуң, баштағы уйҙарҙы рәткә һалырға тырышып, эш бүлмәһендә тәмәке көйрәтәм. Иптәшем Урал сәй ҡуйҙы. Иртәнсәк бер йотом сәйгә

лә ваҡыт булманы бит. Тап шул мәлдә бүлмәнең асыҡ ишегендә пәйҙә булған «фәрештә»не күкһел тәмәке төтөнө аша шәйләп, телһеҙ ҡалдым.

Мин уны бер күреүҙә таныным. Ҡасандан бирле ошо һын, ошо йөҙ, ошо күҙҙәр төштәремә кереп, ҡатып бөткән күңелемә һағышлы моң һалып ғазаплай бит… Өнөммө был, әллә төшөммө?

– Һаумыһығыҙ, Таһир ағай, – яңы туңған боҙға баҫҡандай һаҡ ҡына ишек тупһаһы аша атлаған ҡыҙ, ҡыйыуһыҙланып, бүлмә уртаһында туҡтап ҡалды.

Минең быға тиклем бер ҡайҙа шундай гүзәллекте күргәнем булмағандыр. Ғәҙәттә, ҡыҙ-ҡырҡын менән үҙемде иркен тотам. Ә был юлы, ниңәлер, ҡаушап ҡалдым, ҡулымда төтәгән тәмәкене, көтмәгәндә, ерәнес тойоп, йәһәт кенә һүндерҙем дә төпсөгөн өҫтәл аҫтына йәшерҙем.

– Иҫләйһегеҙме, һеҙ миңә телефонығыҙҙы ҡалдырғайнығыҙ. Ә мин уны юғалттым, – һылыуҡай уңайһыҙланып ҡына йылмайып алды, гүйә, төнгө болот артынан ай ҡыйырсығы күренде. – Шуға үҙем килергә булдым… Һеҙҙән башҡа ышаныслы кешем…

Урал, урынынан кинәт кенә тороп, минең өҫтәл ҡаршыһына ултырғыс ҡуйҙы ла, ҡыҙҙы ҙур илтифатлыҡ менән ултыртып, сығырға йүнәлде. Ишектә миңә боролоп, шым ғына һуҡ бармағын маңлайына терәп, «шөрөп борғандан» һуң, күҙҙән юғалды.

– Һаумыһығыҙ. Ни йомош?

Телемде йолҡоп ташларҙай булдым шунда. Әлеге мәлдә шундай һорау бирәләр тиме ни? Ошонда эшләп, ҡорағасҡа әйләнеп бөтөлгән бит…

Ҡыҙ, күҙҙәрен күтәреп, миңә баҡты. Миңә ҡалһа, ошо йөҙҙән, ошо күҙҙәрҙән ҡараштарымды алмай, мәңге ултырырға ла ризамын.

– Йомошом ҙур, – тине ул, серле генә итеп. – Мөмкин булһа, эшегеҙ тамамланғас, һеҙҙең менән тағы осрашырға ине…

Минең эш ҡиәмәт көнөндә лә бөтмәйәсәк. Әммә әлеге мәлдә ошо фәрештәләй ҡыҙ хаҡына йәһәннәмгә төшөргә лә әҙер инем.

Әминә сығып киткәс, тойғоларға сумып, әҫәрләнеп ултырырға бирмәнеләр, әлбиттә. Күл буйында мәйет тапҡандар. Уҙған төндә иҫерек егеттәр бысаҡлашҡан икән. Ғәйеплеләрҙе эҙләп тапҡансы кис тә етте.

Кабинетҡа ҡайтып, прокурор ҙа танымаҫлыҡ кәкерсәк-бөкөрсәк хәрефтәр менән кәрәкле ҡағыҙҙарҙы яҙған арала тәҙрәгә күҙ һирптем. Йәйге кис таңға ялғана, шуға ла ҡояшҡа ҡарап ваҡытты белеү мөмкин түгел. Эш көнө тамамланған мәл. Әйткәндәй, был беҙгә, ғәҙәттә, ҡағылмай. Әммә эштән тиҙерәк ысҡынырға ашығам мин бөгөн. Сөнки мине Әминә көтә…

Сейфты бикләп кенә тора инем, бүлексә етәксеһе Иванов бүлмәлә пәйҙә булды.

– Козлов рейд иғлан итте, – тине ул, ишек яғына һөйкәлеп, тәмәкеһен ҡабыҙғас. – Киске сәғәт ун бергә хәтлем. Рейдҡа ниндәй эштәр күҙаллайһың?

Ивановтың был хәбәренән башыма ҡан бәреп, күҙ алдарымда ҡыҙыл таптар күренде хатта. Үҙем дә һиҙмәҫтән, ҡаты һүгенеп, кире ултырҙым да, сикәләрем һулҡылдауын баҫырға тырышып, усым менән битемде ыуалай башланым. Кисерештәремде Иванов та шәйләмәй ҡалмағандыр. Ләкин ул тәҙрәгә ҡарап, өнһөҙ генә тәмәке көйрәтеүендә булды.

– Генка Шприцты аңдырға уйлайым. Ҡыҙ балалар менән «шаяра», тиҙәр… – тинем.

Иванов баш ҡаҡты ла, бер һүҙ әйтмәй, кабинеттан сығып китте. Сейфты асып, пистолетымды алдым. Йәнем һөймәй шул нәмәҫтәне. Ҡуйында тотҡан

йылан һымаҡ бит ул, йышыраҡ хужаһын саға. Сөнки хәл тыуып, ҡоралына йәбешергә мәжбүр булған милиционер шул мәлдә үк бер аяғы менән төрмә тупһаһына баҫа. Ғәҙәттә, уны үлтереп өлгөрәләр. Өлгөрмәһәләр – ултыртып ҡуялар.

– Таһир Әғләмыч, – бесәйҙәй йомшаҡ баҫып кабинетка кире әйләнеп кергән Ивановтың ерән мыйығы аҫтына ниндәйҙер мутлыҡ йәшеренгән. – Һуңғы арала һине, Әғләмыч, йонсоп киткәндәй итеп күрәм. Ял ит бөгөн, йөрөмә урамда эт өрҙөрөп. Көнбағыш ярғандай, ябай ғына эш тапшырырға булдым һиңә.

– Көнбағышты ярырға була, тик уны «һығырға» тура килмәгәйе. Ғәләмәт ауыр һәм бысраҡ эш, тиҙәр…

– Ярырғамы, һығырғамы – үҙең ҡарарһың. Иллә-мәгәр аш булһын. Эшең бөткәс – дүрт яғың ҡибла… – Иванов ишекте асып, кемделер бүлмәгә саҡырҙы ла сығып китте.

Күмәс йөҙлө йыуан урыҫ әбейенә эйәреп бүлмәгә май, һуған, әсе ҡамырҙың ауыр еҫе инеп тулды. Әбекәйҙең өҫ-башы әрһеҙ генә, ҡала баҙарында сыуалып, ваҡ-төйәк менән һатыу иткәндәрҙең береһенә оҡшай. Ят аҙбарға кергән һыйыр һымаҡ тота үҙен. Йөрәге етеп, бында килеүенә үҙе лә аптырай, ахыры.

– Ултырығыҙ, – тип ҡаршылағы ултырғыска ымланым. – Һөйләгеҙ ялыуығыҙҙы…

Әбекәй, арт һанын йылан өҫтөнә төшөрөүҙән шөрләгәндәй, һаҡланып ҡына урынлашты ла, «хан заманы»нда тегелгән бихисап кеҫәле күк ҡапсығын түшенә ҡыҫып, еүеш күҙҙәрен миңә төбәне.

– Аҡсамды урланылар, – тип ыңғырашты ла әбей, сеңләп илай ҙа башланы. Шул ғына етмәй ине…

– Илағандарға имсәк бирмәйҙәр бында, – тинем, тауышымды күтәреп. – Һөйлә хәбәреңде йәһәтләп, ултырма аҫтыңа һыу ағыҙып. Аҡсаң күп инеме?

– Мең тәңкә, – әбей кеҫәһенән иҙелеп бөткән һары ҡулъяулыҡ алды ла ебегән танауын, йөҙөн һөртөргә, күҙҙәрен ҡоротorға кереште. – Ошо ҡапсығымдың эске кеҫәһендә ята ине…

– Йәл, миллион булмағас. Эҙләргә ҡыҙығыраҡ булыр ине. Кемдән күрәһең был бурлыҡты?

– Гуля ҡарсыҡтың ғына эше… Баҙар ҡапҡаһы янында йәнәш торҙоҡ бөгөн. Мин йылы ойоҡбаш, бейәләйҙәр бәйләп һатам, ул көнбағыш ҡыҙҙырып һатыу итә. Баҙар эргәһендә генә йәшәйем мин. Иртәнсәк, өйҙән сыҡҡанда, утты һүндерергә онотҡанмын. Иҫемә төшкәс, йәһәт кенә ҡайтып әйләндем. Тегеләй-былай ташырға йыбанып, ҡапсығымды Гуля ҡарсыҡҡа ҡалдырып торғайным… Ай, көтмәгәйнем унан быңдай хилафты, – шул урында әбейҙең йөҙө тағы һаҙланды. – Әхирәттәр бит беҙ. Күрше генә йәшәйбеҙ. Гуля ҡарсыҡтың ҡулы уйнағанды ишетеп белә инем дә. Миңә, иң яҡын дуҫына, зыян итер тип һис тә уйламағайнымсы… Эй-й, Гулька, Гулька… Һеҙ мине кисерә күрегеҙ берүк, йөрәгемде баҫырға тип, әҙ генә зәм-зәм йотҡайным…

Мин, урамдағы киске саф һауаның ҡәҙерен тоя башлап, нисек булһа ла үҙ еҫең, тигән уйҙан, тәмәке ҡабыҙҙым.

– Зәм-зәмеңде тотоп килһәң дә, ғәйеп итмәҫ инем. Алла бәндәләре өйҙәренә ҡайтып йылы аш ашай, телевизор ҡарай. Мин генә бында, тамуҡ кисәүеләй, һинең йыртыҡ мең һумың менән…

– Барсы, – әбекәй, шуны ғына көткәндәй, ҡапсығынан шешә башы күрһәтте.

– Үҙемдеке. Бик маҡтап эсәләр. Ҡана, энем, күрөшкәнде тот, йотоп ебәр, йөрәгеңә ял булыр.

Әбейҙең эскерһеҙлегенән кәйефем үҫкәндәй булды. Ямаҡ ҡарсыҡ түгел дә баһа, әҙәмсә генә һөйләшеп, күңелен күргәндә, юғалған аҡсаһына ла ҡул һелтәр, бәлки. Мин дә тиҙерәк ҡотолормон…

– Юҡ-юҡ, рәхмәт. Мин эштә бит. – Итәғәтле генә ҡыланып, тегенең тәҡдименән баш тарттым. – Гуля ҡарсыҡ ҡайҙа тора?

– Ул бында! Үҙем ҡултыҡлап алып килдем. – Әбей, етеҙ генә ҡуҙғалып, кабинет ишеген асты. – Гуля, Гуля, гонаһ шомлоғо, һине саҡыралар.

Ҡасандыр муйыл ағасынан киҫелеп, ел-ямғырға ялтырап бөткән кәкре таяғын туҡылдатып, көйәнтә буйлы ғына ҡарсыҡ ишектә пәйҙә булды. Аб-ба, Гөлғәйшә әбей ҙә баһа! Әбейҙең аяҡтарында йылы ойоҡ өҫтөнән кейелгән кәмәләй ҙур ҡаталар, Урҙа хәйерсеһенән ҡалған еңһеҙ сәкмәненең иңенә суҡлы йәшел яулыҡ бәйләгән, ҡасандан бирле һыу төҫө күрмәгән бәбәйле ҡыҙыл күлдәгенең итәктәре иҙәнде һеперә… Йөндәре уҡмашып, бөрҫәләнгән яулығы аҫтынан мунса йыуғысылай еүеш сәстәре битенә туҙып төшкән, секерей күҙ төптәре эрешкеләнеп тора, сығынҡы эйәгенә аҫылынған кәкре танауы осонда тамсы емелдәй… Ҡыҫҡаһы, хас та Мәскәй әбей инде, батман эсенә төшөрөп, ҡулына ағас һаплы һепертке тотторғанда, шул мәлдә үк тәҙрәнән осоп ғәйеп булыр.

Гөлғәйшә ҡарсыҡты кем белмәҫ тиһең. Етмешкә етһә лә, баҙарҙағы алыпһатарҙарҙың ваҡ-төйәк тауарына «айыу майы» һөртөргә йыбанмай әле ул. Йәш сағында бик сая кеҫә буры булған, тиҙәр. Тик бер саҡ, уҫал бәндәләр ҡулына тарып, тегеләр дағалы итектәре менән бармаҡтарын тапағас, кәре киткән уның.

Алдымдағы күренештән күңелем тамам ҡырылып, тирә-йүндәге әйберҙәрҙе пыран-зыран ҡыйратып, һыпыртып ҡаҫҡым килде. Гөлғәйшә әбейҙе бурлыҡта тоторға тырышыу ағас күҫәк менән бүкәнташты онтарға маташыу менән бер бит. Ах, Иванов, быңдай мәғәнәһеҙ эште миңә ҡушырға ни зыяным тейгән һиңә? Башҡалар урамда оҙон ботло алсаҡ ҡыҙҙар менән тел сарлай, ә минең янда һаҫып бөткән алйыу ике әбей… Былай булғас, Әминә янына билдәләнгән ваҡытҡа барып өлгөрөүем шикле. Нисек кенә булмаһын, шылтыратып иҫкәртеү фарыз.

Кеҫә телефонымды алып, иртәнсәк ҡағыҙға яҙған һандарҙы йыйҙым.

– Ал-ло-уу,– тип, яуапланы теге остан иркә генә ирҙәр тауышы. Мин сәйерһенеп ҡалдым.

– Кем был?

– Ҡәҙерлем, үҙең миңә шылтыратаһың, ә үҙең һорашаһың… Шуҡлашырға булдыңмы ни, шаяным минең?

Был тауышта ниндәйҙер ытырғандырғыс шауҡым бар ине. Мин, тамам аҙап, телефоныма ҡарап ултырҙым да тағы ҡолағыма терәнем.

– Кем һин? – тип ҡаты ғына екерҙем тегегә.

– Ой-й,– тине күкрәк төбөнән сыҡҡандай ҡалын, шул уҡ ваҡытта ерәнгес наҙлы тауыш. – Ысын ирҙәр тауышы ишетәм… ҡәҙерлем, тауышыңдан тоям, беҙ пар күгәрсендәй бер-беребеҙгә тап килербеҙ һымаҡ… Шундай һағындым ысын ирҙәрҙе. Беҙгә яҡыныраҡ танышырға, бер-беребеҙҙе белешергә кәрәк, – тип теге тауыш серле шыбырҙауға күсте.

Үҙем дә һиҙмәҫтән телефон төймәһенә баҫып элемтәне өҙҙөм дә, сәйер был хәлдән тарҡалған зиһенемде йыйырға ниәтләп, устарым менән битемде

ыуалап алдым. Ҡаршылағы әбейҙәр, ағас ботағына йәнәш ҡунған ике ҡарғалай, һүҙһеҙ генә мине күҙәтәләр ине.

– Иҫәнме, Гөлғәйшә инәй?

– Әү-ү?!

Ҡарсыҡтың мәмерйәләй ҡара, тешһеҙ ауыҙына ҡарға оялаған тиерһең. Һиҙәм инде, Гөлғәйшә ҡарсыҡ башта тома һаңрау булыр, унан һуң урыҫса белмәгәндәй ҡыланыр, аҙаҡ килеп, башын иҫәргә һалыр.

Был «көнбағыш»тан һыҡҡан майҙы Ивановтың үҙенә эсерергә ине…

– Әбей, Глафира әхирәтеңдең аҡсаһын ҡайҙа тыҡтың?

– Әү-ү?!

– Гулечка, имей совесть, верни деньги по-хорошему, и все забудем, – тип һүҙ ҡушты Глафира, ҡарсыҡҡа инәлеп.

– Суҡынып ҡатҡыры мәрйә!

Әбейҙең ауыҙында теле бар икән әле.

– Гөлғәйшә әбей, хәҙер үк ҡайтарып бир урлаған аҡсаны!

Алдымдағы эс бошорғос күренештән күңелемдә кинәт кенә ҡуҙғалған асыуымды тыя алмайса, ажғырып, өҫтәлгә гөрһөлдәтә йоҙроҡлап һуҡтым.

– Әү-ү?!

Юҡ, былай булмай. Әбейҙең әлеге ҡылығына сик ҡуйылмаһа, унан алда үҙемдең гүр эйәһе булыуым мөмкин. Урынымдан тороп, тәҙрәне шар астым, Глафираға бүлмәнән сығырға ҡуштым. Ни эшләргә? Бер аяғы менән ҡәберенә төшкән ҡарсыҡты таңға хәтлем бикләп тоторға ярамай. Глафира әбей менән килешеп, Гөлғәйшә ҡарсыҡтың бурлығын олоға ебәрмәйенсә йоморға ла мөмкин булыр, әлбиттә, тик, бының өсөн тәүҙә күҙ буярлыҡ ҡына тикшереү уҙғарыу барыбер кәрәк. Тимәк, иң башта ҡарсыҡтың ҡолағын асып, телен сисеү тейешле. Туҡта әле, өҫтәл тартмаһында шаян малайҙарҙан тартып алған көкөрт шартлағысы ята түгелме?

Иллә-мәгәр, малайҙар дан шартлағыс әтмәләгәндәр! Ҡаты гөпөлдәүҙән өҫтәлдәге төпсөк һауыты урынында ырғып китте, хатта әллә ни арала башын таяғына һалып серемгә талған ҡарсыҡ, сарбайлап, иҙәнгә тәкмәсте. Бүлмәгә тулған әскелтем көкөрт еҫенән әбекәй бер туҡтауһыҙ сәсәп, бышҡырырға керешкте.

– Ниндәй атыш?! Кем атты?! – Ишектән атылып кергән Ивановтың ҡобараһы осҡайны.

– Бына көнбағыш ярам, – тип вайымһыҙ ғына ҡулымда әлеге шартлағысты уйнаттым.

Иванов, күҙҙәрен тупайтып, көлөргәме, иларғамы белмәгәндәй, өнһөҙ генә бер аҙ тапанып торғандан һуң, иҙәнгә лаҫҡылдата түкөрөп сығып китте.

– Гөлғәйшә әбей, тыңла әле, – тинем, йөн ҡапсығылай еңел ҡарсыҡты күтәреп кире ултыртҡас. – Күҙҙәремә тура ҡара! Глафираның аҡсаһын һин алдыңмы?

Ҡарсыҡ, күҙҙәрен сел-селт итеп, һушын йыйырға аҙаплана.

– Мин урыҫса аңламайым…

– Мейең тиҙәккә әйләнгәнме ни?! Башҡортса өндәшәм дә баһа һиңә, Гөлғәйшә әбей? Башҡортса менән урыҫсаны айырмаҫлыҡ хәлгә етеп, ҡорбанға ла хәрәм булған ҡарт һарыҡтай, алйып бөткәнһең, ахыры?!

– И–и–и, Хоҙайҙың рәхмәте, ысынлап та саф башҡортса мөғәмәлә итәһең, имеш… – Әбекәй ауыҙын яулыҡ осо менән баҫып, кеткелдәп алды, уның

күҙҙәрендә зиһен уты тоҡанды. – Ишетсәле, бигерәк йәтеш икән үҙ телеңдә һөйләшеү. Йәш сағымда тәфтишселәрҙе үҙем менән тик туған телемдә һөйләштерер инем. И-и, Раббым, уҙҙы инде ғүмеркәйҙәр заяға…

– Ни хәлдә йәшәп ятаһың, Гөлғәйшә инәй?

Ҡарсыҡ менән һәүетемсә генә гәпләшеп алырға булдым. Бур ҙа әҙәм балаһы бит, ҡартлығы ла еткән, хәйлә-мәкер ҡулланып, доньъя артынан ҡыуыры ла ҡалмаған. Бәлки, йылы һүҙҙән йөрәге ireп, ыҡҡа килер ҙә урландыҡ аҡсаны ҡайтарып бирер әхирәтенә.

– И-и, энекәйем, йәшәү тиерһеңме ни ошо тормошто? Тормош түгел, ормош ул! Эреле-ваҡлы уғрылар ҡуйҙай ҡуҙырап, фарсит иткән заманда аслытуҡлы әжәл көтөп еткерә алмай йөрөйөм. Их, ҡулдарым, бармаҡтарым иҫән булһа икән, – тип әбекәй ырғаҡтай кәкрәйеп ҡатҡан бармаҡтарын күрһәтте. – Ул саҡта һинең эше эшкә ашмаған мент менән һүҙ туҙҙырып ултырыр инемме ни? Ҡама тундар кейеп, ынйы-мәрйендәр тағып, затлы машинала прокурорҙың үҙенә генә йөрөр инем. Иҙҙеләр шул ҡулдарымды, тапанылар бармаҡтарымды. Ҡулдарыма теймәгеҙ, зинһар, тип ялбарҙым, ун һалдатҡа бирһәгеҙ ҙә ризамын, тинем. Ҡыҙғанманылар. Тәндәре мәңге тамуҡ утында янғырҙар, йәндәре йәннәттә булғырҙар…

– Ҡапсыҡтағы аҡсаны һин алдыңмы?

– Алғанмындыр ҙа, бәлки…

– Ҡайҙа ҡуйҙың?

– Бәй, аҡса булғас, тәләфләгәнмендер…

– Нимәләр алдың?

– Бәй, миндәй көнө бөтөп барған ҡарсыҡҡа ризыҡтан ары нимә хәжәт? Аҙыҡ-түлек һатып алдым, еткән ҡәҙәре…

– Мең тәңкәне сарыфлап та бөттөңмө ни?

– Әстәғәфирулла тәүбә, мең тәңкә, тисе? – Әбейҙең ҡыҫыҡ күҙҙәре ғәжәпләнеүҙән түңәрәкләнеп китте. – Аҡ эттең бәләһен ҡара эткә япһарырға маташыуыңмы был, энем? Тәүбә, тиең, ҡорсаңғы мент! Сумканан бармаҡтарыма ни бары илле тәңкәлек ҡағыҙ аҡса йәбешеп сыҡты, валлаһи-билләһи!

– Ялғанлама, әбей?! Әхирәтең, Глафира, ҡапсығында ятҡан мең һумды урлауҙа һине ғәйепләй! Мең һум!

– Әх, дуңғыҙҙан яралған бисә! Теле ҡороғоро алдаҡсының! – Гөлғәйшә ҡарсыҡ, сарбайлап, урынында сәбәләнде. – Бур тигән даным сыҡһа ла, ни йөҙөм менән йәндәй күргән әхирәтемдең аҡтыҡ аҡсаһына уҡталайым, ти? Эй, Глафира, йөҙөң аҡ булһа ла, эсең тулы…

– Теге илле тәңкәне кемдән сәлдерҙең һуң?

– Исемен һорағанмындыр шул? Йөрөй ине шунда бер аңра бисә, яурыны аша бикһеҙ сумочкаһын аҫып…

Был мажара мине тамам еләтә башланы. Бикәр эш менән булғанымды баштан уҡ һиҙгәйнем дә, раҫ булып сыҡты.

– Глафира! – тип ҡысҡырҙым, бикле кабинет ишегенә төбәп. Ишек асылыуға тауышым тынып та өлгөрмәгәйне, ахыры, Глафира, ишеккә ҡолағын ҡуйып, беҙҙе тыңлап торған. Мин Гөлғәйшә ҡарсыҡҡа бармаҡ төрттөм. – Әбейҙең өҫ кейемен ентекләп тенте ошонда. Тапҡан аҡса – һинеке, тапмаһаң – онот.

– Бында килгәнсе үк ҡараным да. Күлдәк-ыштандарына, һыҡтырма-ҡаптырмаларына хәтлем тетеп эҙләнем. Торлағын да тет иттем. Сәйнәп йотмағандыр ҙа инде?

– Әҙлә, – тип асыҡ тәҙрәгә бороддом да тәмәке ҡабыҙҙым. Артымда мыш-мыш килеп көрмәкләшкән, шыпырт ҡына әрепләшкән тауыштар ишетелә. «Ғүмереңде урлыҡҡа һалып, шуға ла әхирәт ишектәрен аса алмай интеккән ҡарт мәлғүн һин, Гуля. Ҡайтарып бир аҡсамды, хәрәмдән ейгән ашың ҡорһағыңда ҡортлар бит!» – «Ҡулыңды ал, гидай! Һаҫып бөтһәм дә, һин кафырҙың ҡағылыуынан сирҡанам мин! Теймә миңә, баҡа!» – «Гуленька, бәлки, һин аҡсамды һаҡлау ниәтендә алғанһыңдыр ҙа онотҡанһыңдыр? Алйыу бит һин?» – «Нахаҡҡа рәнйетеүеңде мәңге онотмам, мөртәт! Дәһи һин! Ошо эшеңде һөйләп фашлаһам, баҙарҙа һаҫыҡ артыңды терәрлек тә урын ҡалдырмаҫтар!»

Асыҡ тәҙрәнән урамға һикереп, күҙҙәрем ҡараған тарафҡа ырғанлай-борғанлай йүгереп киткем килде.

– Бирмәй, – иламһырап уфтанды Глафира, йәш тулған күҙҙәрен миңә төбәп. – Эй, Гуля, Гулечка… Мең тәңкә аҡса ҡайһыларға юҡ иҫәбендә булһа ла, минең өсөн ҙур ниғмәт бит. Кем өсөн йәшәгәнемде, тырышҡанымды беләһең дә баһа, Гуля…

– Хоҙайҙың ҡәһәре төшмәгере, бысраҡ кәүҙәң тамуҡҡа ҡолаһа ла, йәнең йәннәттә булғыры! – Ярһыуынан һөйәктәре шалтырап ҡойолор хәлгә етеп ҡалтыранған Гөлғәйшә әбей, асырғанып, таяғы менән иҙәнде төйҙө. – Теймәнем һинең аҡсаңа, Глафира! Хоҙайым шаһит! Үҙең юғалтҡанһыңдыр. Бинахаҡҡа рәнйетәһең бит бөгөн булмаһа – иртәгә үлеп, Тәңре хөкөмөнә дусар ителергә тейеш әбейҙе?!

Ләм-мим әйтмәй, ике ҡарсыҡтың ыҙғышыуына ҡарап ултырғанда, күҙҙәремә Глафираның иҫке ҡапсығы эләкте. Ынтылып алдым да биген астым. Туҙып, төҫөн юғалтҡан күн ҡапсыҡтың тетелеп бөткән бихисап кеҫәләрен сиратлап тикшерә, бармаҡтарыма эләккән төрлө әйберҙәрҙе сығарып, өҫтәлгә теҙә башланым. Бер шешә самогон, тешләнгән кәнфит, төймәләр, дарыуҙар, ҡайсы, энә ҡаҙаулы йөн йомғағы, бәйләү энәләре, ваҡ тәңкәләр, биҙәкле сепрәк киҫәге… Әһә, был кеҫә йыртыҡ, имеш, ә тишек кеҫә төбөндә ниҙер ҡыштырҙап ҡалғандай булды түгелме?

– Был нимә!?

Бишәр йөҙлөк ике ҡағыҙ аҡсаны ҡапсыҡтан сығарып, йән асыуым менән өҫтәлгә шапылдаттым.

Бүлмәлә йыһан тынлығы урынлашты. Беләгемдәге сәғәтем генә, вайымһыҙ текелдәп, ваҡыт бөрәмектәрен шутлауын белде.

– Ҡана, ҡайтайым инде. – Гөлғәйшә әбей шығырҙап урынынан торҙо ла бөксәнләп ишеккә йүнәлде. – Афарин, энем, ҡотҡарҙың бит был нахаҡтан. Кәңәшем шул: беҙҙең һымаҡ меҫкендәр менән бәйләнешмә бынан кире. Гонаһһыҙ түгелбеҙ ҙә, тик беҙҙең зыяныбыҙ себен кәкәйеләй генә. Үҙ-ара һөйләшеп тә аңлашырбыҙ. Һин фәрештәләй балаҡайҙарҙы мәктәпкә бикләп шартлатҡан ҡара йөҙҙәрҙе аула. Тәндәре лә, йәндәре лә, йәһәннәм ялҡынында төтәй-быҫҡый мәңге янғырҙарҙы. Ярай, хуш, ғәйеп итмә… Глафира, бетле баш, мейеһе ҡортлаған һарыҡ ише, нимәгә аңшайып ултыраһың һаман? Әйҙә, ҡайтайыҡ!

Быға ҡәҙәре өҫтәлдә ятҡан аҡсаһына өкөләй тупайып, шымып ултырған Глафира әбей, һаҡ ҡына һонолоп, ҡапсығына әйберҙәрен йыйҙы, ә аҡсаһын ҡуйын кеҫәһенә йәшерҙе.

– Үпкәләмә, берүк, энем, – тине ул, дымлы күҙҙәре менән миңә мөлдөрәп. – Ваҡытыңды алдым, башыңды ҡатырҙым. Алйып барамдыр шул. Үҙемә бер ни кәрәкмәй ҙә. Ике ейәнемде үҫтерәм. Шулар тип ятып китәм, кис етһә, шулар

тип таңда торам. Ҡыҙым, эскегә һалышып, аҙғынланғас, кейәүем дә, ғаиләһен ташлап, ғәйеп булды…

– Ярай, Глафира апай, борсолма. Минең эшем шул.

– Гуляны тиктәҫкә рәнйеттем тағы… Ярай инде, үҙебеҙ һөйләшеп аңлашырбыҙ әле, бур булһа ла, күңелсәк кенә әбей ул. Уның да ейәнсәре балалар йортонда тәрбиәләнә бит. Әсәһе вафат булды ла… Тапҡан-ҡапҡанын шул бәләкәсенә ташый Гуля.

Өҫтәлдә ятҡан кеҫә телефоным шылтыраны шунда. Йәһәт кенә ҡулыма алып, ҡолағыма ҡуйҙым.

– Ал-ло-уу, – тине баяғы сирҡандырғыс моңло ирҙәр тауышы. – Ҡәҙерлем, миңә әйтер һүҙҙәрең бар ине, буғай. Ниңәлер ҡыйынһындың да туҡтап ҡалдың. Аңлайым, иркәм, тормошта, беренсе тапҡырҙан уҙмай, мөхәббәт тәмен дә белеп булмай…

Мин, ғәжәпләнеп, Глафираға ҡараным.

– Кем ул?

Глафира әбей телефонымды алып ҡолағына терәне лә, бер аҙ тыңлап торғас, көлөп ебәрҙе.

– Евгений ҙа баһа! Ул, ғәҙәттә, үҙен Евгения тип таныштыра. Кейенеп, биҙәнеп алһа, ҡатын-ҡыҙ менән бутап яңылышмам тимә! Зәп-зәңгәр бит ул! Әйткәндәй, – әбекәй мут ҡына күҙ ҡыҫты, – уның менән танышып, күңелен тапһаң, белмәгән нәмәң ҡалмаҫ. Ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә! Миңә лә ҡунаҡҡа кил. Иң яҡшы һыйымдан ауыҙ итерһең. Зәм-зәмдең ысыҡтайы менән һыйлармын үҙеңде. Белгән-күргәнемде лә һөйләрмен. Мин күпте ишетәм, күпте күрәм! Баҙар тулы уғры! – Глафираның йөҙөнә шымсы ҡиәфәте сыҡты. – Әүәле мин Ивановҡа эшләп килдем. Тик, етәксе булғас, моронон сөйҙө, иманһыҙ. Мине күргеһе лә килмәй хәҙер, танауын сирып ҡына ҡараны ла һиңә ебәрҙе. Ҙур рәхмәт һиңә, энем, әҙәмсә генә һөйләштең беҙҙең менән, ҡыр типмәнең, аҡсамды ла табып бирҙең.

– Рәхмәт, Глафира апай, алда мотлаҡ осрашырбыҙ. Бар ҡайт инде, ейәндәрең көтәләр.

Сәғәтемә күҙ һалдым. Киске туғыҙ булып та килә. Өс сәғәт һуҙымы аҙапланғанмын да баһа теге ҡарсыҡтар менән! Һуңланым. Ҡараңғы төшкәс, нисек барып йөрөйһөң, уйнашҡа өмөт иткәндәй була бит. Әминә һылыуҡай көтөп арығандыр ҙа, мине алдаҡсыға һанап, үпкәләгәндер инде. Ҡабат шылтыратырға шөрләйем, теге Евгенийҙың тауышы иҫемә төшһә, сирҡаныуҙан тәнем зымбырҙай башлай. Иртәнсәк, төшөмдән сығып, өнөмдә пәйҙә булғандай, алдыма килеп баҫҡан ҡыҙҙы күргәс, алағайымға ҡойолоп төшкәйнем шул, шунда, уның телефон номерын яҙғанда, яңылышҡанмын, буғай…

Өҫтәл артынан араҡы шешәһе сығарып, өҫтәлгә ҡуйҙым. Күңелемдә томалаған бошоноуға ҡаршы башҡа сара тапманым. Ысынлап та, ошо эсемлек булмаһа, Евгения янына ғына барырға ҡала бит…

Шул саҡ телефоным шылтыраны. Шылтыраны ла, ҡойондай өйөрөлтөп, мине урынымдан ҡубарҙы. Бер минуттан мин урамда туҡтатҡан машинала күлгә табан елдерә инем инде.

Һуңынан ни булды, тиһегеҙме? Һуңынан, көмөш табаҡтай ай яҡтыһында, утрауҙан алып килгән хазиналы өс тимер йәшникте Әминәнең йәшелсә баҡсаһына сығарып, ергә күмдем. Ғөмүмән, улар менән бергә донъяның бар бысрағын йыйып, шунда күмергә лә риза инем мин ул төндө. Тик янымда бар ғәләмде нурға мансыған айҙай балҡып Әминә һылыуҡай ғына баҫып торһон…

## 13

Геннадий Самуилович Шприц – бар булмышы менән замана балаһы. Йәғни Геннадий Самуилович тормошта осраған яһалма сик-кәртәләрҙе шартлы рәүештә генә танырға һәм, кәрәк саҡта, үҙ мәнфәғәте өсөн файҙаланырға күнеккән. Ысынлап та, кәзәләргә ҡуйылған кәртә фил йә юлбарыҫтың юлын быумай бит. Икенсе яҡтан, кәзәнең – кәзә, ә юлбарыҫтың йыртҡыс булыуында бер кемдең дә ғәйебе юҡ. Әҙәми заттарға килгәндә инде, был хаятта уларҙың башҡаларға ашмы йә башмы булыуы һәр кемдең кеҫә ҡалынлығынан ғибәрәт.

Дәүләт, йәмғиәт ҡанундары ҡуйған ситлек эсендә йәшәргә риза булғандарҙың урыны ла шунда. Шул ситлекте емереп сыҡҡандарҙың ғына артабан үҫергә хаҡы бар. Шуны белгән Геннадий Самуилович үҙен һәр саҡ иркен, тәбиғи тота.

Төрмәлә сағында улын күрергә килгән әсәһе, юғары белем алып, яҙа юлға баҫмай, намыҫлы ғына эшләһәң, ҙур кеше булыр инең, тип иламһыраны. Ғүмерен өйҙәй ҙур станоктар дөбөрҙәгән заводта эшләп уҙғарған әбейҙә ни аҡыл… Исемдәре китапта ҡалып, бөгөнгө көндә әруахтар һымаҡ күренгән мәрхүм инсандар ысынында иһә бәйһеҙ енәйәтсе булған. Күҙ йомоп, тарихтың ҡайһы ғына төпкөлөнә бармаҡ төрткәндә лә шундай «изге йән»гә юлығаһың. Хәҙергеләр ҙә шул юлдан бара.

Эйе, Геннадий Самуилович – бур, енәйәтсе. Тик ул үҙенең булмышын бейек түшәмле кабинеттарҙа торған дәүләт билдәләре артына йәшермәй. Мәктәпте ул яҡшы билдәләр менән тамамланы. Юғары уҡыу йортона ла имтихандарҙы уңышлы тапшырҙы. Барыбер үтмәне. Уның ҡарауы, дәрестәрҙе күп ҡалдырыуҙан мәктәп юлын онота башлаған иптәше Витька бер бәләһеҙ генә шул уҡ институтҡа уҡырға керҙе. Атаһы ҡала кимәлендәге ҙур ғына әмәлдәр ине шул. Үҙенең «ахмаҡ»лығын тәү тапҡыр шунда тойған Генка хәмер-шарапҡа битараф булмаған иптәшен һыйлап лаяҡыл иҫертте лә, кеҫәләрен таҙартҡас, милицияға шылтыратып, айныҡтысҡа бикләтте.

Шул саҡтан бирле тормошонда тап иткән кешеләрҙе ҙур иғтибар менән өйрәнер булды Геннадий Самуилович. Маҡсаты: кешенең көслө һәм йүнһеҙ яғын асыҡлау. Шул сифаттары асыҡланған әҙәмде ҡурсаҡ уйнатҡандай итеп ҡулланырға мөмкин. Ә аҡса – меҫкен кешекәйҙәрҙе табындырған йә абындырған төп көс. Әҙәмде хан иткән дә, ҡол иткән дә шул аҡса. Геннадий Самуилович өсөн был тәғлимәт – бәхәсһеҙ. Уның хаҡлығын үҙ башы, үҙ арты менән татыған ул. Шул уҡ саҡта мөхәббәт тойғоһо, әхлаҡ ҡанундары, дини инаныуҙар ҙа инҡар ителмәй уның тарафынан. Сөнки улар – әҙәми заттарҙың көсһөҙлөгөн күрһәтеүсе билдәләр, ә Геннадий Самуилович кешенең ауыртҡан еренә баҫып, уны кәрәкле яҡҡа йүнәлтеү ысулын һәйбәт белә һәм яратып ҡуллана. Әммә был маһирлыҡҡа эйә булғансы бик оҙон һәм хәүефле юлдар үтергә тура килде уға. Енәйәтсел кәсебен башлап ҡына торғанда үҙ ҡулдары менән баш китерлек хилафлыҡтар ҙа ҡылды. Төрмәне тыуған йорттай күреп, бер кислек һый-сафа өсөн ҡот оҫҡос башбаштаҡлыҡҡа әҙер булған башкиҫәрҙәргә хужа булыу һәр кемдең хәленән килә торған эш түгел. Ул ваҡыттарҙы хәтерләргә яратмай ул. Шул саҡта ҡылғандарын тәфсилләп яҙып, прокурорға илтһә, башы төрмәлә серейәсәк. Юҡ, башҡаса төрмә ҡандалаларын һыйларға мәжбүр итә алмаҫтар уны. Иректән мәхрүм ителгән сағында етәрлек өйрәнде инде ундағы тәртиптәрҙе. Унда белгәндәрҙе азат тормошта файҙаланыу зарур. Үҙен законһыҙ ысул менән төрмәгә тыҡҡан теге менттан ҡон алырға ҡулы

ҡысып тора ла, тик һиҙә: мент, йыртҡыс аулағандай, уның ян-яғына ҡапҡан-тоҙаҡ ҡороп, яҙа баҫҡанын аңдып ҡына тора. Шул хәл тота уның ҡон-ҡоһорон. Иреккә сыҡҡас, ҡыҙыулыҡ менән менттың эшенә барып, уға янап йөрөгәненә үкенә хәҙер. Ауһарлыҡ булмаймы ни инде шул? Дошманы уғата һағайҙы хәҙер. Тәжрибәһе үҫеп, эшендә оҫтарған менттың уға ҡаршы әллә ниндәй ысулдары барҙыр әле. Ярай, йәшәй бирһен әле, сабырлығы етеп көтә белгәнгә бер яйы сыға торған. Тормош та ярайһы уҡ үҙгәргән булып сыҡты ул төрмәнән сыҡҡансы. Әүәлге һымаҡ күрәләтә кеше талап булмай. Ҡайтҡас та ваҡытлыса әсәһенә ҡалдырылған кафеһын тергеҙҙе ул. Әммә килем наҡыҫ ине. Быға ҡәҙәре килеменең күп өлөшөн енәйәтсел кәсебе килтереп, мул тормошҡа күнеккән Геннадий Самуиловичтың алдында ярайһы уҡ сетерекле мәсьәлә килеп баҫты. Әүәлге хилафлығына тотонһа – төрмә янай, барына шөкөр итеп ултырырға – нәфсеһе бирмәй, «таҙа» кәсебен үҫтерер ине – бирәсәккә батырға кәрәк. Эшҡыуар булам тип, буш кеҫәне тырнап, матур тормоштоң ләззәттәренән үҙенде мәхрүм итеп, һәр һум артынан сабыулап йөрөргәме ни?

Баштан-аяҡ аҡҡа кейенгән Геннадий Самуилович машинаһын кафеһы алдындағы майҙансыҡҡа ҡуйып, эскә үтте. Арғы мөйөштәге өҫтәл артында һыра һемереп ултырған ирҙе иҫәпкә алмағанда, кафе буш ине. Иртә әле. Ғәҙәттә, клиенттар кис еткәс тула башлай. Хужа аш бүлмәһенә үтте. Ашнаҡсы булып эшләгән ҡыҙ ағас таҡтала тоҙло балыҡ таҙартып аҙаплана. Геннадий Самуилович, ҡыҙҙың һын-килбәтен һынсыл ғына күҙәтеп торғандан һуң, элгестәге алъяпҡысты алып бәйләне лә, ҡыҙҙың ҡулынан бысаҡты алып, ситкә һалды.

– Балыҡ таҙартҡанда ошо бысаҡ менән файҙаланалар, – тине ул, өҫтәлдәге бысаҡтар араһынан тейешен һайлап алғас. – Бысаҡты ла дөрөҫ тоторға кәрәк, – ул ҡыҙға бысаҡты ҡулда тотоу ысулдарын күрһәтеп алды. – Ә балыҡты өҫтәлгә ҡуйыр өсөн ошолай итеп киҫәләр, шул саҡта ул матур ҙа, ашау өсөн уңайлы ла була…

Ҡыҙ уңайһыҙланды.

– Белә инем дә… Һөнәрем буйынса эш таба алмай оҙаҡ йөрөгәс, онотоп бөткәнмен.

Шул саҡ ишектә Геннадий Самуиловичтың ярҙамсыһы Борька-электрик пәйҙә булды.

– Генка! – тип тамаҡ ярҙы ул тупһанан. – Әйткәнеңде табып килтерҙем.

Геннадий Самуилович ашыҡмай ғына ҡулын йыуҙы ла үтеп барышлай усы менән ашнаҡсы ҡыҙҙың йомро осаһын һәрмәп алды.

– Яныма керһәң, тағы ла бер һөнәргә өйрәтермен…

Тегеһе хужаның артынан һынсыл ғына ҡараш ташланы. Кем кемде өйрәтер әле…

Хужа ишек яғына һөйкәлеп һағыҙ сәйнәп торған Борька-электрикты кинәт кенә сәсенән эләктерҙе лә башы менән стенаға дөңкөлдәтте.

– Генка түгел, ә Геннадий Самуилович! Күпме әйтергә була? Ҡабатла!

Борька бынан ете йыл элгәре теге ментты туҡмаған дүртәүҙең береһе ине. Төрмәнән сыҡҡас, әүәлге хужаһының ҡул аҫтына ҡайтты тағы. Иптәштәренә ҡарағанда төрмәнән ни сәбәпле иртәрәк сығарғандар һуң уны? – шуныһы шикле. Уны күҙ уңынан ысҡындырмау фарыз…

Йомшаҡ диванда ағас ботағылай аҡ, нәҙек боттарын ҡыҫып, мәктәп йәшенән уҙмаған ас яңаҡлы ябыҡ ҡына ҡыҙ бала ултыра ине. Уның ерән сәстәре оҙон, нәҙек муйыны буйлап иҙеүе асыҡ еңел күлдәге аҫтында яңы йомарлана

башлаған түштәренә төшкән. Ҙур зәңгәр күҙҙәре бүлмәгә килеп кергән хужаға өркқән ҡоралай һаҡлығы менән ҡарай.

Ҙур телевизорҙа Владимир Набоковтың «Лолита» китабы нигеҙендә төшөрөлгән нәфис фильм бара ине. Күренеүенсә, маҡсатҡа ярашлы рәүештә алдан әҙерләп ҡуйылған был кино ҡыҙҙы ярайһы уҡ мауыҡтырып өлгөргәйне.

Геннадий Самуилович, мөләйем генә йылмайып, ҡыҙҙың сәсенән һыйпаны.

– Ҡурҡма, бында һиңә насарлыҡ ҡылмаясаҡтар. Һөйләшеп бөткәс, өйөңә илтеп ҡуйырҙар.

Ҡыҙыҡай өндәшмәне, әммә күҙҙәре тиҙ үк тынысланып, ҡарашында балаларға ғына хас ҡыҙыҡһыныу уянды. Геннадий Самуилович дивандың икенсе башынан урын алды ла ҡыҙға боролоп ултырҙы.

– Анжела, Анжелочка, Анжелика, – тип аҡрын ғына һамаҡланы ул, ҡыҙҙың исеменән ләззәт тапҡандай. – Бик матур исем. Ошо исемде йөрөткән ҡатын-ҡыҙҙар, ғәҙәттә, башҡаларҙан үҙҙәренең һылыулығы, нәзәкәтлеге, байлығы менән айырылып тора. Шул уҡ ваҡытта уларҙың тормошо ҡыҙыҡлы һәм мажаралы була, уларҙың юлдашы – уңыш һәм бәхет. Анжела исемлене алтын-көмөш, ынйы-мәрйен, ғөмүмән, донъялағы бар зәр биҙәктәре яратып, тормошонда оҙатып йөрөй. Киләсәктә минең һүҙҙәремә һис шикһеҙ инанырһың. Тик унда илткән һуҡмаҡҡа бөгөндән аяҡ баҫыу мотлаҡ. Бәхет ҡошо ҡыйыуҙарҙы, саяларҙы ғына үҙ итә, шикләнеп, уңайһыҙланып торғандарҙы көтмәй…

Ҡыҙыҡайҙың күҙҙәрендә өмөт ҡабынды.

– Анжелочка, һинең турала мин барыһын да беләм, – тип дауам итте Геннадий Самуилович серле генә итеп. Ҡыҙҙың йөҙөнә ялҡындай ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. – Һиңә ун дүрт йәш, быйыл етенсе класты тамамланың. Атайың сырхау, әсәйең эскегә һалышҡан. Һеңлең менән ҡустың бар. Тормошоғоҙ ауыр. Артабан нисек йәшәргә уйлайһығыҙҙыр, белмәйем.

Геннадий Самуилович урынынан торҙо ла, ҡулдарын салбар кеҫәһенә тығып, һүҙһеҙ генә бүлмә уртаһында торған өҫтәлде әйләнеп сыҡты. Ситтән ҡарағанда, кафе хужаһы нимә тураһындалыр борсолоп уйланғандай ине. Бүлмә ишегеләй булып күҙҙе алдаған бейек көҙгөлә сағылған кафе хужаһының баштан-аяҡ аҡҡа кейенгән шәүләһе, был хәлдең аҙағын көтөп йөрөгән башҡа бер әҙәм һымаҡ, сәйер тойғо уята. Телевизорҙа барған нәфис фильмда балалыҡтан да сыҡмаған ҡыҙҙың сая мөхәббәтен кисергән урта йәштәрҙәге ир күп ваҡытын, күҙле бүкәндәй, өнһөҙ уҙғара.

– Өҫ-башың да алама ғына, – Геннадий Самуилович диван мөйөшөнә һырышып ултырған ҡыҙ баланың ҡаршыһына баҫып, уға йәлсел ҡарашын төбәне. – Ә һиңә матур кейенеп, төҙәнеп, биҙәнеп йөрөй башларға ваҡыт. Шулай иткәндә, Анжела, һин ҡалалағы иң һылыу ҡыҙҙарҙың береһе булыр инең. Белгең килһә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың бәхете – уларҙың йөҙ-һынында. Сөнки бәхет, бал ҡорто һымаҡ, иң матур, иң татлы сәскәләргә генә ҡуна.

Ҡыҙыҡайҙың йөҙөнә күләгә төшөп, ҡарашы тоноҡланды.

– Булған аҡса ашарға ла етмәй, – тине ул, йәш мөлдөрәгән күҙҙәрен иҙәнгә төбәп.

Геннадий Самуилович салбар балаҡтарын бармаҡ остары менән тартып, ҡыҙ янына ултырҙы.

– Иллә-мәгәр һинең бәхетең үҙеңдән алда йөрөй, Анжела, – тине ул, мөләйем йылмайып. – Һиңә уны, осоп китмәҫ борон, ҡойроғонан тотоп алырға ғына ҡала. Ҡыҫҡаһы, – ул, яҡшы хәбәр килтергән шымсылай мут ҡына

көләмһөрәп, тауышын баҫты, – һинең менән ҡыҙыҡһынған бер бай кеше бар. Һинең менән ҡапылдан һөйләшергә ҡыймай үҙе. Шуға әлеге һөйләшеүебеҙ – уның йомошон үтәүем.

– Кем ул?

– Әлеге мәлдә быны белеү һиңә мөһим түгел. Ул һине күптән яратып йөрөй. Уны күреп, танышырға риза булһаң, миңә хәбәр ит. Иң мөһиме, – кафе хужаһы кинәт кенә бармаҡ остары менән ҡыҙҙың эйәгенән алып, йөҙөн күтәрҙе лә, үҙенә бороп, күҙҙәренә ҡараны, – ул сереп байыған әҙәмдәрҙең береһе. Ул һинең өсөн бер нәмәһен дә йәлләмәҫ. Хан ҡыҙы һымаҡ итеп ҡарар үҙеңде. Һинең гүзәллегең шуға торорлоҡ, ышан миңә, – тип ҡулдары менән ҡоралайҙай ҡылтайып, диванға һырыҡҡан ҡыҙҙың нәҙекәс муйынынан, сибек түшенән яй ғына һыпырып, боттарына төштө. – Ҡәҙерен белгән кешегә ошолар – торғаны бер хазина бит…

Урынынан ырғып торорға иткән ҡыҙ бала, ауыр ир ҡулын еңә алмағас, диванға кире ултырып, алдына бөгөлөп төштө. Енси ҡомары уяныуын тойған Геннадий Самуилович, урынынан тороп, телевизор янына килде.

– Ҡатын-ҡыҙ менән ир-ат араһындағы тәбиғи мөнәсәбәттәрҙән ҡурҡырға ярамай, – тине ул ҡыҙға, телевизорға ымлап. – Унан тик ләззәт һәм файҙа таба белергә кәрәк. Һин дә ҡыҙлығыңды һаҡлап оҙаҡ йөрөмәҫһең. Быҫраҡ подвалда йә еүеш үлән өҫтөндә маңҡаһы ла кипмәгән берәй малайға бушлай бирелгәнсе, үҙеңде яратып, ынйы-мәрйенгә күмгән ысын ир ҡосағына эләгеү күпкә яҡшыраҡ түгелме ни? Артыңды ялтыратып йөрөй бирһәң, күмәкләп көсләүҙәре лә бар… Уйла шуны. Ә был, – Геннадий Самуилович өҫтәл тартмаһынан бер бәйләм аҡса алып, ҡыҙҙың осло тубығына һалды, – уның һиңә беренсе бүләге. Артабан – күберәк. Тик уларға ғарыҡ булыр өсөн, үҙеңдең хәсиәт күрһәтеүең мотлаҡ.

Башлап ҡына торһа ла, был «кәсебе»нең бик килемле булырын һиҙгәйне инде Геннадий Самуилович. Фани донъяның һый-сафаһынан, ләззәт-шифаһынан еләп, аҡсаларын ниндәй йәм-ғәмгә сарыфларға белмәй шашҡан байғурҙар араһында етлекмәгән ҡыҙ балаларға ымһыныусылар аҙ түгел ине. Улар, йәмғиәт алдында яман исеме сығыуҙан шөрләп, үҙҙәренең бәйһеҙ нәфселәрен туйҙырыуға йүнәлтелгән хәстәрлектәрҙе бүтәндәргә тапшыра. Быны күҙгә күренмәгән икенсе яғы ла бар. Геннадий Самуиловичҡа шул йәһәттән бөҫөп ҡына төшөргән фотоһүрәттәрҙең хәжәте килер көндәр алда әле…

«Ҡатын-ҡыҙҙар араһынан сиғандай сос берәүҙе табып, шуны йәлеп итергә кәрәк был эшкә, – тип уйланы Геннадий Самуилович, ҡыҙ баланы кафеның артҡы ишегенән оҙатҡас. – Уға ошондай «тауар»ҙы эҙләп табыу ҙа, өгөт-нәсихәт ҡылыу ҙа, шуға бәйле башҡа эштәрҙе хәстәрләү ҙә ҡулайлыраҡ булыр. Икенсе яҡтан, шулай иткәндә, закон менән үҙемдең араға ныҡлы кәртә ҡорасаҡмын».

Алдында һын-килбәте менән гидайға оҡшаған әрһеҙ кейемле яңғыҙ әҙәм тора ине. Уның асыҡ елкә-ҡулдары, аяҡтары ҡояшҡа янып ҡарайған, күптән ҡырҡылмаған ҡара сәстәре боларып, ян-яҡҡа тырпайған, ябыҡ йөҙөндәге һирәк кенә һаҡал-мыйығы яңаҡ ҡырғысты бер ҡасан да күрмәгәндер.

Бармен ҡыҙ сәйерһенеп усындағы нимәгәләр тексәйгән.

– Геннадий Самуилович, – тине ул һөйөнгәндәй, залға сыҡҡан кафе хужаһын шәйләгәс, – бынауы ыпыҡ ошоно аҡсаға алыштырыуҙы һорайсы?

Күгәреп, төҫөн юғалтҡан тәңкәнең саф алтын булғанын усына алыу менән тойған кафе хужаһы янындағы кешенең терһәгенән эләктереп алды.

– Әйҙә әле, һөйләшеп алайыҡ…

Бүлмәгә кергәс, хужа, ҡаршылышып маташҡан әҙәм ишаратын ныҡлы ғына йоҙроҡлап ыҡҡа килтергәс, тегенең ҡыҫҡа балаҡлы салбар кеҫәләрен ҡапшап, бер нисә алтын тәңкә тапты. Тәңкәләрҙе өҫтәленә теҙеп һалғас, лупа аша диҡҡәтләп тикшерҙе. Алтын тәңкәләр бермә-бер булып, революцияға тиклемге Николай батша заманында ҡойолған булып сыҡты. Тәңкәләр, еүеш ерҙә оҙаҡ ятҡанғамы, күгәреп бөткәйне, хатта, быяла аша ҡарағанда, йәбешеп ҡатҡан һары балсыҡ таптары шәйләнә.

Геннадий Самуилович, ҡорбанының еҫен һиҙгән ата бүреләй, һағайҙы. Ул бар булмышы менән ниндәйҙер сергә тарыуын тоя ине. Ләкин туҡмалған мал һымаҡ дерелдәп, мөйөшкә һырыҡҡан теге бахыр үҙенә ҡабат-ҡабат бирелгән һорауҙарға аңлайышһыҙ өндәр менән генә яуап бирә ине. Кафе хужаһының яуап талап итеп ҡаты типкеләүенән сыҙамы ҡороған әҙәми зат, үкереп илап, серек тештәре ыржайған ауыҙынан телен сығарып күрһәтте – ыпыҡ мин, йәнәһе. Был хәл Геннадий Самуиловичты уғата ярһытты ғына. Ысынлап та, килеп тыуған был хәлдә һөйләп килештергеһеҙ мутлыҡ менән йән көйҙөргөс уҫал шуҡлыҡ бар һымаҡ ине. Бынағайыш, бынауы ыпыҡ әҙәм аҡтығына хазина табырға насип булһын әле? Уға хазина кәрәкме ни? Тапҡанының хәсиәтен күреү генә түгел, әҙәмсә аңлатырлыҡ рәте лә юҡ бит. «Телеңде асмаһам, башыңды ярып, мейеңде уҡыясаҡмын, – тип енләнде Геннадий Самуилович. – Кемгә кәрәк һин? Ни ҡылһам да, тикшереүселәргә үҙең менән булғандарҙы һөйләп аңлатыр хәлдә түгелһең».

Бармен ҡыҙ хужаның ҡабатлап һорауына:

– Эйе, ул теге тәңкәне аҡсаға алмаштырырға теләй ине. Тик ул бик насар һөйләшә, әйткәнен аңлай алмай башым ҡатты, – тине.

Тимәк, хазинаға юлыҡҡан «бәхетле йән»дең башында – мейеһе, ауыҙында теле бар.

Геннадий Самуилович, Борька-электрикты саҡырып, теге бахырҙы подвалға төшөрөргә ҡушты ла шунда торған тимер ултырғысҡа ымланы.

– Тик ҡара уны, үлеп ҡуйһа, үҙеңде шунда ултыртасаҡмын.

Хужаһын ярты һүҙҙән аңларға күнеккән Борька-электрик теге меҫкенде тимер ултырғысҡа ҡуша бәйләгәс, баш өҫтөндәге электр сымдарын төшөрөп, ултырғысҡа элде. Һуңынан сымдың арғы осон кафе алдына сығарып ҡуйылған һыу һатҡыс автоматҡа тоташтырҙы.

Эҫенән сарсаған үткенселәр, автомат төймәһенә баҫып, һалҡын, татлы һыу эсеп кинәнде. Төймәгә баҫҡан һайын һуш киткес һыҙланыуҙан йәне сығырҙай булып аҡырған бахырҙың тауышын йорттоң ҡалын стеналары тышҡа сығарманы. Борька үҙенең эшен яҡшы белә, юҡҡа ғына «электрик» тигән ҡушамат элмәгәндәр уға.

Сәғәт самаһы ваҡыт уҙғас, подвалға төшөп, иҙәндә һушһыҙ аунап ятҡан кешенең өҫтөнә һалҡын һыу һибеп аңына килтерҙеләр. Тиктәҫтән тарыған ғазаптарынан кеше ҡиәфәтен юғалтҡан меҫкен әҙәм, ҡотһоҙ күҙҙәрен аҡшайтып, ауыҙына тулған шайығына тонсоғоп, тыңлауһыҙ теле менән ниҙер әйтергә уҡталды. Геннадий Самуилович еүеш иҙәнгә сүгәләне лә ҡолағын ерәнеп кенә тегенең ауыҙына яҡынайтты.

– Ут... ут-т-ғау-ҙа…

…Төш уҙып, күк көмбәҙенән ысҡынған ҡояш түбәнгә ауыша башлаған мәлендә, күлдең аҡ ташлы бейек ҡаяһы аҫтына моторлы кәмә килеп яғылды. Кәмәлә өс кеше ине. Кәмә башында бөршәйеп ултырған һынһыҙ әҙәм, маймылдай оҙон, яшыҡ ҡулын һуҙып, ҡая аҫтындағы һыуға күрһәтте.

Геннадий Самуилович өҫ кейемен һалып, ян-яғына күҙ атты. Тирә-йүндә һиллек хөкөм һөрә. Утрау уртаһындағы ағастар араһында ике ҡатлы ташландыҡ йорт төҫмөрләнә. Геннадий Самуилович, ниндәйҙер һығымтаға килгәндәй, тамаҡ ҡырып алды. Әүәлге сауҙагәр Латипов, ҡыҙылдарҙан ҡасҡан сағында, мөлкәтенең бер өлөшөн йәшереп ҡалдырырға ғажиз булған, тимәк. Һис тә ғәжәп түгел, ул заманда аҙ булғанмы ни ундай хәлдәр…

Геннадий Самуилович ыпыҡ әҙәмдең биленә еп тағып, сумырға ҡушты ла уның артынан Борьканы ебәрҙе. Үҙе, тирә-яҡҡа ҡарап торғандан һуң, башы менән күлгә сумып, аждаһа тамағылай ҡарайып күренгән өң яғына һуҙылған еп артынан йөҙөп китте.

Мәмерйә мөйөшөндәге уймаҡ кәштәләр буш ине.

– Һинән башҡа бында тағы кем булды? – тип һораны Геннадий Самуилович, ыпыҡҡа фонарен йүнәлтеп. Теге бармағын түшенә төрттө лә, өҫкә күрһәтеп, башын сайҡаны. Яңғыҙы булған, йәнәһе…

Фонарь яҡтыһында мәмерйәнең һәр босмағын ентекләп ҡарап сыҡты Геннадий Самуилович. Эйе, был ыпыҡ алдашмай, ахыры, бында ниндәйҙер йәшенмәк хазина булғанға оҡшай. Шул саҡ, уның уйын раҫлағандай, аяҡ аҫтында ниҙер емелдәп алды. Геннадий Самуилович еүеш балсыҡ эсенән кескәй генә аҫыл ташлы йөҙөктө күтәрҙе. Борька, фонарь яҡтыһында йондоҙҙай балҡыған биҙәккә ғәжәпләнеп, һыҙғырып уҡ ебәрҙе.

Аяҡ аҫтындағы бысраҡты ҡулдары менән иҙгеләп, байтаҡ ҡына соҡсондолар. Шунда Борьканың ҡулына ниҙер эләгеп ҡалды. Яҡтыртып ҡарағас, ябай тимерҙән эшләнгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәс ҡыҫтырғысы булып сыҡты.

– Яңғыҙым, тиһең инде?

Геннадий Самуилович, һүгенеп, фонарын ыпыҡ ултырған яҡҡа йүнәлтте. Фонарь яҡтыһы мәмерйәнең еүеш ташына текәлде. Ыпыҡ зымзыя булғайны.

**14**

Эске эштәр бүлеге етәксеһенең беренсе урынбаҫары подполковник Хәмитов Әнүәр Хәкимович, буш өҫтәленә күрәғара текләп, кабинетында ултыра. Асыҡ тәҙрәнән ишетелгән ҡала ғауғаһы ла, бер туҡтауһыҙ коридорҙы тапаған башҡа хеҙмәткәрҙәрҙең шау-шыуы ла уға барып етмәй ине. Ҡулдарын өҫтәленә һалып, ҡымшанмай ултырған урта буйлы, терпе энәһеләй шырт сәсле азиат ниңәлер урмандағы ағас төпһәһенә менеп ҡунаҡлаған һеләүһенде хәтерләтә ине.

Иҡтисад өлкәһендәге енәйәттәргә ҡаршы көрәш бүлексәһенән килгән хәбәр һағайтты уны шулай. Бөгөн, иртәнге кәңәшмә уҙғас, шунда эшләгән капитан Дубко, бүлексә етәксеһе майор Саматовтан боҫоп ҡына, уның янына керҙе. Бүлексә етәксеһе Саматов, эске эштәр даирәһендәге яҙылған һәм яҙылмаған ҡанундар нигеҙендә беренсе урынбаҫарҙың, йәғни Әнүәр Хәкимовичтың, тура етәкселегендә эшләргә тейеш. Ләкин Саматов, шул туралағы күрһәтмәләрҙе инҡар итеп, күп осраҡта үҙе етәкләгән бүлексә эшен бүлек етәксеһе полковник Козлов Владимир Иванович менән хәл итә. Саматовтың бында ғәйебе лә юҡ инде, сөнки Владимир Иванович үҙе шундай тәртип урынлаштырҙы. Бының сәбәбе лә көн кеүек асыҡ. Саматов бүлексәһе иҡтисад енәйәттәренә, коррупцияға ҡаршы көрәште алып барыуҙа иң мөһим мәсьәләләрҙе хәл итә. Ә ул мәсьәләләр, берҙән, енәйәтсел ысул менән табылған мөлкәттәргә бәйләнгән булһа, икенсенән, таяҡ һымаҡ, ике башлы. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Әнүәр Хәкимович йыш ҡына Саматов бүлексәһе алып барған эштәрҙе

белмәй, уларҙан ситтә ҡалыуын тоя. Уға, ғәҙәттә, эштең һөҙөмтәләрен генә хәбәр итәләр. Был хәл уны кәмһетә ине. Етәксе булараҡ, ул эш барышын да белергә, уның менән етәкселек итергә тейеш бит. Шуға риза булып, күрәләтә алданып ултырырға теләмәй ул. Шуға ла ул, иҡтисад бүлексәһендәге эштәрҙе күҙ уңында тотоу йәһәтенән, шунда эшләгән бер нисә хеҙмәткәрҙең «ҡойроғона баҫып», шикәйәтсе итте. Быны эшләү ауыр булманы, сөнки әлеге бүлексәлә эшләгәндәр араһынан «таҙа» хеҙмәткәрҙе табыуы ҡыйын. Бурлыҡтан табылған мөлкәт үҙенә ҡағылғандарға, нәжес һымаҡ, йәбешеп барыусан бит.

Әнүәр Хәкимовичтың әлеге вазифаһында һигеҙенсе йыл ултырыуы инде. Өс йыл элек, эске эштәр бүлегенең әүәлге етәксеһе Зариф Зәкиевич Аҡназаров хаҡлы ялға оҙатылғас, Әнүәр Хәкимович бушаған бүлек етәксеһе кабинетының тупһаһы аша атларға торған ғына мәлендә, әлеге Козлов уның юлын ҡыйҙы. Ҡала хакимиәте башлығы Василий Петровичтың кешеһе булып сыҡты ул. Хеҙмәт баҫҡыстары буйлап һаман юғарыраҡ ынтылған Әнүәр Хәкимовичтың бар өмөт-ышаныстары шул мәлдә пыран-зыран килеп ҡыйралды. Намыҫлы эш менән генә алдырып була торған замана түгел шул. Әшнәһе, машинаһы булмағандарға юғарыға юл бикле. Бер аҙна элек Владимир Иванович Козлов һүҙ араһында Әнүәр Хәкимовичҡа хаҡлы ял тураһында ҡайғырта башлау фарыҙлығы тураһында кинәйәләне. Йәнәһе, уның бөгөнгө эш һөҙөмтәләре ваҡыт талаптарына яуап бирмәй. Имеш, иҡтисад өлкәһендә ҡылынған күп енәйәттәр асылмай ҡала, шул йүнәлештәге эштәрҙең һөҙөмтәләре насар. Ә был, үҙ сиратында, ошо эштәр өсөн яуаплы етәкселәрҙең вазифаһына ярау-ярамауы хаҡында уйланырға мәжбүр итә. Шунда Әнүәр Хәкимович, ҡыҙып китеп, бүлек етәксеһенең иҡтисад бүлексәһе эштәренә ҡыҫылмауын талап итте. Козлов, яуап итеп, һинең, Хәмитов, булдыҡһыҙлығың сәбәбенән, шул эштәрҙе үҙем етәкләргә мәжбүрмен, тине. Эш һөҙөмтәләре хөрт булғас, тимәк, насар етәкләйһегеҙ, иптәш полковник, тип яуап ҡайтарҙы һөйләшкәндә һүҙ һайларға күнекмәгән Хәмитов. Шул көндән бирле ҡул бирешеп күрешкәндәре юҡ. Ә кисә Әнүәр Хәкимовичҡа министр урынбаҫары шылтыратып, ҡаты тәнҡитләне. Эштән арығанһың, буғай, тине. Тимәк, Владимир Иванович тик ултырмаған, беренсе урынбаҫарының «йүнһеҙле»генә юғарыға зарланып та өлгөргән. Ҡыҫҡаһы, хоҡуҡ һаҡлау даирәләрендәге юлының осо сығып килеүен тойҙо Әнүәр Хәкимович. Йыл аҙағында бүлек етәксеһенә иҡтисад өлкәһендә ҡылынған енәйәттәргә, коррупцияға ҡаршы көрәш һөҙөмтәләренең хөрт булыу сәбәбен юғарыға аңлатырға кәрәк буласаҡ. Шунда аҡ эттең бәләһен ҡара эткә, йәғни хаҡлы ялға оҙатылған Әнүәр Хәкимовичҡа япһарыуы бик уңайлы булмаҡсы. Беренсенән, Владимир Иванович үҙенең һаҫыҡ арты менән әлеге йомшаҡ урынын һаҡлауын дауам итәсәк. Икенсенән, уның хаҡында бик күп насарлыҡтарҙы белеп, бүлек етәксеһе вазифаһына һаман дәғүә итеүсе Хәмитовтан ҡотоласаҡ. Әйткәндәй, Владимир Иванович Козловтың иҡтисад бүлексәһе иҫәбенән ҡылған яҙыҡ эштәрен башбаштаҡлыҡ тип кенә атау аҙ булыр. Мундир-погонлы шиғәлсе ул. Йәл, Әнүәр Хәкимовичтың уға «теше үтмәй»…

Ғөмүмән, юғары вазифалы дәүләт, сәйәсәт эшмәкәрҙәренең коррупцияға ҡаршы оран һалыуы хәйерсе хәленә ҡалған ябай халыҡтың күңелен күреүгә генә йүнәлтелгән бит. Быны асылын аңлаған кеше күңелендә ул тик асыу уята. Хәйерселеккә дусар ителгән милицияның шундай ауыр көрәшкә йүне бармы ни? Суд, прокуратураның хәле күпкә яҡшыраҡ та, тик улар кабинеттарын

ташлап, милиция һымаҡ, көндө-төндө белмәй, урам тапап, хоҡуҡ боҙоусыларҙы баҫтырыҡламай. Улар әҙергә күнеккән, уларға килтереп бир ҙә алып кит…

Ил башында торған юғары вазифалы әмәлдарҙарҙың «коррупция» тигән теш емерерлек һүҙҙе халыҡ алдында әйтергә өйрәнеүҙәре лә ҙур уңыш, әлбиттә.

Капитан Дубконың хәбәре буйынса, иртәгә ҡаланың юл һәм транспорт хеҙмәте етәксеһе Зиннур Таипович Камалов ҡала хакимиәте хеҙмәткәренә ришүәт илтәсәк. Ришүәт күлдәге утрауҙа тапшырыла. Зиннур Таиповичтың шул утрауҙы ҡуртымға алырға ниәтләүен ишеткәйне инде Хәмитов. Ҡалалағы бизнесын һатыуы тураһында ла беләә ине. Һуңғыһы, ысынлап та, сәйер тойола, сөнки утрауҙы законлы рәүештә ҡуртымға алыу ундай ҙур сығымдар талап итмәҫкә тейеш. Бизнесын һатып тапҡан аҡсаға шул ташландыҡ утрауҙы төҙөкләндерергә уйлаймы икән әллә? Юҡтыр, алтын йомортҡа һалған тауығын һуйырға Зиннур Таиповичтың башына тай типмәгәндер. Тимәк, беренсенән, кемдер шул утрауҙы алырға  ғажиз иткән уны. Икенсенән, утрау  өсөн ришүәт талапланғас, Зиннур Таипович үҙенең кәсебен һатып, аҡса табырға мәжбүр булған. Дубко ул хәбәрҙе кемдән алғанын әйтмәне. Хаҡы бар. Хакимиәттән сыҡҡан ошаҡ булыуы былай ҙа билдәле инде. Сөнки мәжбүрлеккә тарыған Камаловтан шикәйәтселек көтөп булмай, был уның уй-ниәтен бутап, утрауҙан ҡолаҡ ҡаҡтырыуы ихтимал. Бөтәһе лә тап килеп торған һымаҡ та был фаразда, тик ғүмере буйы аҫтыртын ришүәтселәрҙе аңдып танауы сосайған Әнүәр Хәкимовичты сәйерһендергән ниндәйҙер бер аңлайышһыҙ ғилләә бар кеүек ине был эштә. Ысынлап та, ни өсөн ришүәт тап утрауҙа тапшырылырға тейеш һуң әле? Аҡсалы ҡапсыҡты кәмәгә тейәп, күлде тегеләйбылай йөҙөү кәрәкмәгән мәшәҡәт  һәм ҡурҡыныс тыуҙыра ла баһа? Ниңә уны осраған бер йорттоң подъезында йә машинала ғына алыш-биреш итмәҫкә?

Телефон шылтыраны. Үҙәктә уны тағы иҫкә алғандар, имеш. Яғымлы ғына ҡатын-ҡыҙ тауышы, шатлыҡлы хәбәр еткергәндәй итеп,  алдағы аҙналағы коллегия ултырышында иҡтисад енәйәттәренә һәм коррупцияға ҡаршы йүнәлтелгән эш һөҙөмтәләре тураһында уны тыңлаясаҡтарын белдерҙе. Һис шикһеҙ, бүлек етәксеһе полковник Козловтың этлеге был. Башындағы бетен беренсе урынбаҫарына осора ла башлаған, тимәк.

Әнүәр Хәкимович урынынан тороп, асыҡ тәҙрә алдына килде лә тәмәке тоҡандырҙы. Ҡаршылағы бинаның икенсе ҡатындағы тәҙрәлә лейтенант погондары таҡҡан йәш егет  тәфтишсе ҡыҙҙы ҡосаҡлап үбергә маташа. Шунда уҫал ҡыҙ йәтеш кенә итеп сәпәй ҡолаҡ кейҙерҙе тегегә, сыбырҡы шартлағандай тауыш хатта Әнүәр Хәкимовичтың кабинетында яңғырағандай булды. Шундуҡ дәрте ҡайтҡан лейтенант, үпкәләһә лә, аҙып-туҙманы, сикәһен һыйпап бер аҙ ултырғас, шым ғына сығып китте. Ысынлап яратыуылыр…

Әнүәр Хәкимович тәмәкеһен тәҙрә аша урамға осорғас, кабинетына бороддо ла, ҡулдарын түшенә ҡаушарып, фекер йөрөтөүен дауам итте. Килеп тыуған сетерекле хәлдән ҡотолоу сараһын уға Хоҙай үҙе тәҡдим итә түгелме? Эше уңып, ришүәтселәрҙе ҡулға алғанда, уның  тоҙағына бер юлы өс ҡуян эләгә тигән һүҙ бит. Беренсенән,  коллегияла тәнҡитселәренең ауыҙын ябырлыҡ мәрәйе буласаҡ. Бәлки, шуны алдан белеп, уны коллегия алдына баҫтырып та тормаҫтар. Сөнки, хакимиәт кимәлендәге ришүәтсене тотоу әлеге көндә оло дан һанала, уға ирешкәндең түшенә хет бөгөндән миҙал таҡ. Икенсенән, юлына соҡор ҡаҙып аҙапланған бүлек етәксеһе Козловтың бар ғәләм алдында

маңҡаһын һөртә. Беренсе урынбаҫарының баһаһын төшөрөү ниәтендә үҙәктәге юғары етәкселәрҙең ҡолаҡтарына байтаҡ ҡына «туҡмас элеп» өлгөргән Козлов, йомшағыраҡ итеп әйткәндә, бик уңайһыҙ хәлдә ҡаласаҡ. Өсөнсөнән, ҡала хакимиәте башлығы, үҙенең итеген яларға тейеш яранының башбаштаҡлығын кисермәй, уны күрәләтә «төшөрәсәк». Василий Петрович хакимиәт даирәләренә рөхсәтһеҙ баҫып кергән хоҡуҡ һаҡлаусыларҙы яратмай. Владимир Иванович, бүлек етәксеһе булараҡ, уңышлы эштең бөтә дан-шөһрәтен үҙенә ҡайтарып, башҡалар алдында түш ҡағасаҡ, әлбиттә. Тик яңғыҙ ҡалғанда уның кәйефе, юғарыла әйтеп үтелгән сәбәптәр нигеҙендә, бик хөрт булмаҡсы. Был эш уңышһыҙлыҡҡа осраған хәлдә иһә, Хәмитов өсөн, төптән генә уйлап ҡарағанда, тормош аҙ үҙгәрәсәк. Эйе, уны тәнҡитләрҙәр, битәрләрҙәр – аҙ кисергәнме ни ул ундай хурлыҡты? Һис юғында бер генә ҡағыҙ яҙыр ҙа хаҡлы ялға китер. Барыбер эш шуға бара. Коррупция менән, ана, Козлов көрәшһен. Үҙ-үҙен боғаҙынан быуып, үҙ-үҙе менән көрәшһен… Ул да әлеге урынында күп тигәндә тағы бер йыл ултырыр… Әйткәндәй, Владимир Иванович ҡул аҫтындағы хеҙмәткәрҙәренең «башбаштаҡлығы»н хакимиәт башлығына аңлатһын әле тәүҙә. Белмәй ҡалдым бит, тиһә, бигерәк тә мәрәкә буласаҡ, Василий Петровичҡа ундай милиция етәксеһе ни бысағыма?

Ярай, әләйһә. Нисек булһа ла, тейешле эштең башҡарылыуы мәғҡул. Ә унда күҙ күрер.

Әнүәр Хәкимович, телефондан шылтыратып, Дубконы саҡырҙы. Шуны ғына көтөп ултырғандай, тегеһе йәһәт кенә килеп тә керҙе. Капитан Дубко һалам сәсле, һары йөҙлө, шуғалырмы кәкес танауындағы ҡара күҙлеге уның йөҙҡиәфәтенә шомло серлелек өҫтәгәндәй. Капитандың закон алдындағы гонаһтары күп булмаһа ла, ҡулдары таҙа түгел. Нишләйһең, эшендә ыңғай һөҙөмтәләргә ирешергә тырышҡан хоҡуҡ һаҡлаусыға ҡайһы саҡта закон кәртәләрен һанға һуҡмаҫҡа тура килә. Ғаиләне ҡарарға, балаларҙы ла үҫтерергә кәрәк… Тик ул ҡырын эштәрҙе ваҡытында «йомдора» белеү фарыз. Саматов менән Козловты урап, Әнүәр Хәкимовичҡа һыйыныуы Дубконың нисек тә булһа «таҙараҡ» эшләргә теләүенәндер, бәлки. Сөнки Әнүәр Хәкимович, Владимир Иванович һымаҡ, үҙ файҙаһын ҡайғыртып, ҡул аҫтындағы хеҙмәткәрҙәренә баш китерлек хәүефле йомоштар ҡушмай. Дубко урынында икенсе берәү булһа, башын иҫәргә һалып, әлеге хәбәрҙе бер кемгә лә еткермәй йәшереп ҡалыуҙы уңайлыраҡ күрер ине. Хакимиәт менән бәйләнешеү арыҫландың мыйығын тартыу менән бер бит. Етәксеһенең урыны ҡаҡшағанды һиҙеп, ҡулынан килгәнсе ярҙам итергә теләүеме икән?

Әнүәр Хәкимович өҫтәл аша капитанға төбәлде.

– Иртәгә ришүәтселәрҙе фашлауға йүнәлтелгән операция уҙғарасаҡбыҙ, – тине ул, тауышын баҫып. – Операцияға яуаплы итеп һине тәғәйенләйем. Иртәнсәк тәфтишсе менән тағы бер милиционерҙы алып, утрауға сыҡ. Шунда боҫоп, ришүәтселәрҙе көтөгөҙ. Һеҙгә ярҙамға Иванов бүлексәһенән бер хеҙмәткәрҙе бирәм. Ул тегеләрҙе аңдып, ришүәтте алыш-биреш иткән мәлде фотоға төшөргәс, һеҙҙе саҡырып алыр. Иң мөһиме, – Әнүәр Хәкимович һуҡ бармағы менән өҫтәлде туҡыны, – бүлексә етәксеһе Саматов был турала белергә тейеш түгел. Ни өсөн икәнде аңлатып тороу кәрәкмәйҙер.

Капитан Дубко өнһөҙ генә баш ҡаҡты.

– Һорауҙарың бармы?

– Был эш нисек бөтһә лә, унан оло ғауға сығасаҡ…

Әнүәр Хәкимович бер мәлгә тынып ултырҙы.

– Әлбиттә, – тине ул һуңынан, Дубкоға һынсыл ҡарап. – Был мәшәҡәт уңышлы тамамланған хәлдә лә, унан яҡшылыҡ көтөү урынһыҙ. Аңлайһыңмы мине?

Капитан ризалашып баш ҡаҡты ла, рөхсәт алып, кабинеттан сыҡты.

Капитан Дубкоға ярҙамға Иванов бүлесәһендә эшләгән майор Ғәзизовты тәғәйенләргә ниәтләгәйне Әнүәр Хәкимович. Ҡыйыу, сос егет, бер ҡасан да юғалып ҡалмай. Тик Ғәзизов, эштең айышына төшөнгәс, ҡырҡа баш тартты.

– Ғәфү итегеҙ, Әнүәр Хәкимович, ләкин мин был эштә ҡатнашырға теләмәйем, – тине ул, етәксеһенең күҙенә тура ҡарап. – Сөнки Камалов – минең яҡын дуҫым…

Эш башында уҡ ҙур хата ебәргәнен аңлаған Әнүәр Хәкимович, әсенеп, эстән генә үҙен битәрләп алды. Камалов менән Ғәзизовтың дуҫлығын алдан белергә тейеш ине бит ул. Йәл, яҙа төбәлгән уҡтың сәпкә тейеүенә өмөт юҡ. Ысынлап та, хаҡлы ялға китергә ваҡыт еткән, ахыры. Әүәле бындай яңылышыуҙарға юл ҡуймай торғайныһы…

– Дуҫыңды иҫкәртергә уйлайһыңмы? – тине ул, һеләүһендәй күҙҙәре менән Ғәзизовҡа тишерҙәй итеп ҡарап.

– Белмәйем әле. Минеңсә, Камалов кемдеңдер баҫымына дусар булып, шулай эшләргә мәжбүр ителгән…

Дубкоға ярҙамға лейтенант Сәйетов Уралды ҡуйырға тура килде.

**15**

Рәжәп диуана ла, ахмаҡ та түгел. Аҡылы теүәл уның. Тик ул был донъяға тыуғанда Хоҙайҙың кәйефһеҙ сағына тура килгәндер. Шулай булмаһа, Аллаһы Тәғәлә, тыуыр баланың күңеленә гөлдәр сәскәнен онотоп, уның һынкилбәтен ҡараҫҡылай итеп яратмаҫ ине. Рәжәптең һонтор, ябыҡ кәүҙәһе кәкре бүрәнәне хәтерләтә, уның оҙон, кәкерсәк аяҡ-ҡулдары, гүйә, ағастың тарбағай ботаҡтары. Йоҙроҡтай үмрәшле оҙон үңәсе, үҙенә ҡуйылған өсмөйөшлө башты күтәрергә көсө етмәгәндәй, уны гел түбәнгә һалындырып тота. Мөйөшләнеп торған эйәк-яңағындағы һирәк кенә оҙон ҡылдарҙы һаҡал-мыйыҡ тиеүе лә ауыр. Бер ҡасан да ябылмаған ауыҙындағы эре тештәре кителеп, ҡарайып бөткән. Өҫтәүенә, Рәжәп ыпыҡ. Уның теле, һүҙ әйтергә уҡталғанда, ауыҙында әйләнгән таштай, бик ауыр ҡуҙғала.

Ғәҙәттә, Рәжәпте тәү ҡат күргән әҙәм, кәйефе ҡырылып, күҙҙәрен тиҙ генә ситкә ала.

Рәжәп үҙе лә башҡаларға бер ҡасан да тура ҡарамай. Үҙенең һынһыҙлығын белә ул. Шуға ла ул өҫ-башын да ҡарамай, йөҙ-һынын да тәрбиәләмәй, көҙгөнән иһә уттан ҡурҡҡандай йәшенә. Бәләкәй сағынан уҡ ошо йәмһеҙлеге сәбәбенән ҡыйырһытыуҙарға, йәберләүҙәргә түҙеп үҫкәс, ул башҡаларҙан ситләшеп, яңғыҙ йөрөүҙе артыҡ күрә. Ә инде кешеләр араһына барып юлыҡҡанда, Рәжәп сараһыҙҙан башын иҫәргә һалыуҙы артыҡ күрә. Сөнки уның һымаҡтарҙы йәберләргә әүәҫ булған күңеле тар әҙәмдәр, ғәҙәттә, аҡылы һай булған заттарҙан шөрләйҙәр, уларға теймәйҙәр. Рәжәп, шулай итеп, ҡотһоҙ ҡиәфәтенә ҡушылған яһалма ахмаҡлығынан үҙенә ҡоршау ҡороп, күңелендә үҫкән бер нисә бөртөк матур гөлөн һаҡлап ҡалырға тырыша.

Әминә менән утрауҙағы хазинаға барып юлыҡҡас, йәпһеҙ тотоноп, тимер йәшникте ер кәштәнән ауҙарып төшөргәйнеләр улар. Мәмерйәнән кире сығырға йүнәлеп, һыуға төшкәс, аяҡ аҫтында ятҡан бер ус тәңкәне шәйләп ҡалды ул. Шуларҙы алып, салбар кеҫәһенә тыҡты. Һуңынан Әминәгә бирергә уйлағайны ла, онотҡан. Салбарының кеҫәләрендә бихисап әйбер уның. Бер

нисә көндән шул тәңкәләрҙе кеҫәһенән табып алды. Өләсәһенең йомошо менән ҡалала йөрөгән сағы ине. Тәңкәләрҙе аҡсаға алмаштырыу мөмкинлеген тикшереү уйы менән, осраҡлы кафеға кереп, һатыусы ҡыҙға күрһәтте…

Бүлмәһенә керетеп, үҙен аяуһыҙ туҡмаған аҡ кейемле әҙәмдең ниәтен тәүҙән үк аңланы Рәжәп. Ҡаҡҡылау-һуҡҡылауҙарға күнегеп бөткән инде ул. Ыпыҡтан һүҙ сығара алмаһа, сығарып ебәрер, тип өмөт итә ине ул башта. Әммә уның телһеҙлеге кафе хужаһын оторо йыртҡысландырҙы ғына. Ҡанға туҙҙырып ҡыйналһа ла, сыҙамын юйманы Рәжәп, хазина хаҡында бер һүҙ өндәшмәне. Сөнки был вәхши әҙәмде Әминәгә юлыҡтырыуҙан ҡурҡты ул. Шуға түҙҙе. Әминәнең, ниндәйҙер егет менән, хазиналарҙы өйөнә алып ҡайтыуын да белә ине Рәжәп. Осраҡлы рәүештә генә ситтән күреп ҡалғайны. Юҡ, аҡ кейемле был йыртҡыс киҫәктәргә тураҡлаһа ла, Әминәне һатмаясаҡ ул.

Һуңынан уны подвалға төшөрөп, тимер ултырғысҡа бәйләнеләр. Электр һуғыуынан нисә тапҡыр үлеп, нисә тапҡыр терелгәндер шунда, ул белмәй. Ток һуҡҡан һайын эсендәге барлыҡ ағзалары өҙөлөп, мейеһе сәсрәгәндәй булды, аңы, бер туҡтауһыҙ янып-һүнеп торған яҡтыртҡыстай, ысынбарлыҡты танытмай ине. Рәжәп, ғөмүмән, үҙенең тәнен ҡыҙғанмай. Уның бәхетһеҙлеге тән-ҡиәфәтенең ҡотһоҙлоғонан бит. Ләкин был подвалда уның тәнен генә түгел, йәнен дә ҡыйнанылар…

Ошо ғазаптарҙан нисек тә ҡотолоу теләге менән ҡыйнаусыларҙы утрауға килтерҙе Рәжәп. Шәп йөҙә ул, шуға ла, яйын тура килтереп, күлгә сумырға ине уйы. Тик уны кәмәгә бәйләп ултырттылар. Мәмерйәгә кергәс кенә, ҡараңғынан файҙаланып, билендәге бәйҙән ҡотола алды, сөнки уның ҡыйнаусылары, табылдыҡ йөҙөккә мауығып, донъяларын онотҡайны. Рәжәп шыпырт ҡына мәмерйә төбөнә шылышты ла шундағы һыулы тишеккә сумды.

Күл, меңәрләгән йылдар һуҙымында утрау таштарын йыуып, уның аҫтында мәңге ҡояш төшмәгән ҡараңғы ятыуҙар хасил иткәйне. Әҙәм ҡиәфәтле теге йыртҡыстарҙан ҡасып, һыу тулы ер тишегенә сумған Рәжәп, ҡулдары менән һәрмәнеп, дөм-ҡара һыу эсенән өҫкә, һауаға, юл табырға ынтылды. Һыу аҫтында аҙашып, тыны бөтә башлағас, кире боролорға ла булғайны, тик кире юлды тапманы. Һауаға сарсаған үпкәһе янып, алҡымына терәлгән мәлдә, төрлө яҡтан ҡыҫып, сурайып торған ҡаяташтар араһынан өҫкә ҡалҡып сыҡты. Тынсыу һауаға сәсәп, ауыҙ-танауына һыу керҙе. Ҡараңғыла һәрмәнеп, ян-яғына һуҙған ҡулдары шыйғалаҡ таштарға төртөлдө – бында юл юҡ ине. Ҡәбер ҡараңғылығы хөкөм һөргән һауа тоғонда тороп, бер аҙ тын алғандан һуң, Рәжәп тағы һыуға сумды. Әжәл донъяһына терелэй килеп юлыҡҡан меҫкендең башҡаса ҡотолоу сараһы юҡ ине.

Икенсе ҡат барып юлыҡҡан һауа тоғо тағы ла бәләкәйерәк, ҡыҫығыраҡ булып сыҡты Рәжәп был юлы, һыу өҫтөнә ауыҙ-моронон ғына сығарып һулай алды. Уның ҡарауы, өсөнсө ҡат йөҙөп сыҡҡан урын киңерәк тә, бейегерәк тә ине, Рәжәптең ҡулдары мәмерйә түшәменә етмәне. Тиҙҙән, мәмерйә эсендәге һалҡын һыу уны күшектерә башланы. Мәмерйәгә кергән юлды табырға һаман өмөтләнә ине ул. Ҡыйнаусыларынан да ҡурҡмай ине инде, бәлки, улар ҡайтып та киткәндәрҙер. Йәһәннәм төбөләй ҡот осҡос ҡараңғыла быға ҡәҙәре кисергән ғазаптары ла онотолғайны. Яҡты көнгә ни етә. Һыу аҫтындағы мәмерйәгә кереп, шомло ҡараңғылыҡҡа тарыған Рәжәп тағы, тағы сумды, башын таштарға төкөп, һыуҙан сығыр урын эҙләне, унан, таштарға йәбешеп, ҡайҙалыр ары йөҙҙө, тик кире юлды таба алманы. Ваҡыт ағышы ла, гүйә, туҡтап ҡалды, сөнки бында көн дә, төн дә юҡ ине.

Бер аҙҙан ул мәмерйәнең бейегәйеүен тойҙо. Йөҙөп барған юҫығы ҙур ташҡа юлыҡтырҙы. Рәжәп, ҡулдары менән һәрмәнеп, тотанаҡ тапҡас, һыуҙан таш өҫтөнә сығып ултырҙы. Мәмерйә эсендәге тәүге ҡоро ер ине был. Һыуҙан ҡалҡып торған таш ярайһы уҡ яҫы һәм бейек булып, өҫтө лә шыма ине. Рәжәп, өшөүҙән дер-дер ҡалтыраныуын баҫырға тырышып, күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек ҡараңғы бушлыҡты тыңлай башланы. Ҡайҙалыр, ташҡа һуғылып, тулҡын шыбырҙай. Һирәк кенә супылдап тамсы тама. Шунан башҡа ҡолаҡ ярыларын һиҫкәндерерлек тауыш-тын ишетелмәй. Рәжәп битенә ҡоромдай һыбашҡан был ҡараңғылыҡта, гүйә, үҙен дә юҡҡа сығып, бушлыҡҡа әйләнгәндәй итеп тойҙо. Уны фани донъя менән аҫтындағы таш ҡына бәйләй. Тағы – һулышы менән аңы… Бөгөнгө баш киткес мажаралярҙан тамам йонсоған Рәжәп, ташҡа ятып, үҙе лә һиҙмәҫтән серемгә талды. Бала саҡтан оҙатып килгән йәберле яҙмышы уны йомшаҡ-йылыға күнектермәгәйне, шуға ла мәмерйә эсендәге ҡолаҡ сыңлатҡыс тынлыҡ менән ҡоромдай ҡараңғылыҡ уның аңын тиҙ үк томалап, мөғжизәле йоҡо донъяһына күсерҙе. Төшөндә Рәжәп үҙен матур егет итеп күрҙе. Имеш, ул кәмәлә балыҡ ҡармаҡлай. Зәңгәр күктә бөҙрә болоттар йөҙә. Тотҡан балыҡтарҙың тәңкәләре тик алтындан ғына. Ул балыҡтарҙы ҡармаҡтан алып, кәмә төбөнә ырғыта, балыҡтар шунда ынйымәрйенгә әүереләләр ҙә, күҙ яуын алып, ҡояшта емелдәйҙәр. Утрауҙа, ҡаяташ башында торған Әминә, көлә-көлә, уға ҡул болғай. Ә балыҡтар бер-бер артлы ҡаба ла ҡаба, кәмә төбөндәге зәр-зиннәт өйөмө һаман үҫә, ҙурая, ауырайып, ҡырынайған кәмәнең ҡырҙары аша эскә һыу сайпыла… Шул саҡ ҡая башында йылмайып торған ҡыҙ, ел осорғандай, кинәт кенә һыуға йығылды. Йөрәге жыулап, уны тоторға ынтылған Рәжәптең кәмәһе сайҡалып китте лә, ул һыуға ҡолап төштө…

Таш өҫтөнән һыуға ҡолаған йоҡоло Рәжәп батып үлә яҙҙы шунда. Мәмерйә һыуы был тәңгәлдә бигерәк тәрән булып, таштары шыма һәм шыуғалаҡ ине. Матур төшөнән арына алмай башы буталған Рәжәп, тонсоға-сәсәй һыу өҫтөнә йөҙөп сыҡҡас та, алан-йолан ҡаранып, төшөндәге кәмәһен эҙләне, башын сөйөп, аҡ болотло зәңгәр күкте күрергә өмөтләнде. Тик уны өшәндергес һалҡын ҡараңғылыҡ ҡына ураҡтайны. Бер мәлдә уның башынан, кәмәнән йығылғанда, һуғылып, һуҡырайғанмын, ахыры, тигән уй ҙа йүгереп үтте. Йоҡоһонан айнып, үҙен ураҡтан шомло, өмөтһөҙ ысынбарлыҡ иҫенә төшкәс, ул, төшө менән өнө араһындағы айырманы күтәрә алмай, һыҡтап иланы. Үҙен терелә́й ошо еүеш ҡәбергә тыҡҡан әсе яҙмышын ҡәһәрләп иланы ул. Күңелен һаман яҡтыртып торған матур төшөнән дә йөрәге әрнеп, күңеле болоҡһоно уның. Ҡәҙимге кешеләр төштәрен изгелеккә юрап, алдағы тормоштарынан бәхет, ҡыуаныстар көтә. Ә ул шунан да мәхрүм. Сөнки, мөғжизәгә тарып, әлеге ҡараңғы ер аҫтынан яҡты донъяға сыҡҡан хәлдә лә, төшөндәге матур күренеш уның тормошона күсмәйәсәк.

Рәжәптең үлеп, ошо урында юҡҡа сыҡҡыһы килде.

Күңеле бушап, бер аҙ тынысланғас, ул алға барырға ҡарар итте. Ултырған ташын ҡулдары менән һәрмәп, юҫыҡ алды. Быға тиклем йөҙөп үткән юлының ғазаптары иҫенә төшкәс, кире боролорға ҡыйманы. Ысынында иһә быуаттар буйы һыу йырмаслаған мәмерйәнең ҡайҙалыр башы йә аҙағы булыуы шикле ине. Рәжәп бар өмөтөн тик мөғжизәгә бағланы. Өләсәһе өйрәткән доғаларҙы ҡабатлап, Алланан ярҙам һораны. Әй, Хоҙайым, ни үсең төшкән мин байғошҡа, кемдең гонаһтарын миңә япһарып, терелә́й ер аҫтына тығырға булдың

мине? Тормошта ла башҡаларға тейгән бәхет-шатлыҡтан мәхрүм бит мин, ниңә мине яҡты көндән, ҡояштан, йылы елдән, зәңгәр күктән мәхрүм итәһең?

Муйындан һыу кисеп, ун аҙым тирәһе үткәс, ҡороға сыҡты. Тубыҡланып алдындағы ерҙе ҡулдары менән һәрмәй-ҡапшай, артабан йүнәлде. Билдәһеҙ упҡынға йә тәрән соҡорға йығылыуҙан шомлана ине ул. Был тәңгәлдә аяҡ аҫтындағы ер, һыуҙан күтәрелеп, ҡоро тойола, аяҡ аҫтында ваҡ ҡырсын шығырлай, тос ҡына таш киҫәктәре осрай. Күпме барғандыр, Рәжәптең ҡулдарына таяҡҡа оҡшаған оҙонса әйбер килеп эләкте. Уның ике башы ла суҡмарҙай йомрайып, бүлкәсләнеп тора. Йәнәшәһендә тағы шундай бер таяҡ... Ә был нимә, сепрәкме әллә? Рәжәп, ҡулына эләккән йомшаҡ әйберҙе һаҡ ҡына үҙенә тартҡайны, тупты хәтерләткән ниндәйҙер шыма нәмә уның алдына тәгәрәп төштө. Ул шуны ҡулдарына алып, төрлөсә әйләндереп, тотҡолай, һәрмәй башланы. Бармаҡтары сәйер әйберҙәге йәнәш тишектәргә тап килгәс, ул, көтөлмәгән табышының асылын кинәт кенә аңлап, ҡысҡырып ебәрҙе лә, теге нәмәне, ҡулы бешкәндәй, ситкә атып, ҡараңғыға ташланды. Уны һалҡын һыу ҡаршы алды. Ҡурҡышынан йөрәге ҡупҡан бахыр үҙе ҡолап төшкән һыу тауышын артында шарҡылдап көлгән мәйет ауазы итеп ҡабул итте...

Алағайымға һыу ҡаплаған мәмерйә тишегенә сумып, тыны бөтөүҙән йәне алҡымына терәлгән Рәжәпте өҫтә тағы ҡараңғылыҡ ҡаршы алды.

Һын-киәфәтенең шөкәтһеҙлеген белгән Рәжәп гелән яңғыҙы йөрөр ине. Яңғыҙлыҡ уны кеше ҡулына ҡарамай, тик үҙ көсөнә генә таянырға өйрәтте. Өсөнсө класты тамамлағас, мәктәпкә йөрөмәне ул. Ете бала үҫтергән ата-әсәһе лә тыумыштан бахырлыҡҡа дусар булған кинйә улдарын артабан уҡырға ҡыҫтаманы. Ҡәҙимге тормошта ҡулланырлыҡ белемде үҙ алдына өйрәнеп, уҡып белде Рәжәп. Яңғыҙ йәшәгән өләсәһе ҡартайып, кәрһеҙләнгәс, Рәжәпте шуның янына ебәрҙеләр. Ә күрше ҡыҙы Әминәне ул бала саҡтан белә. Әминә йыш ҡына уның сәсенән һыйпар ине. Башҡа берәү ҙә уны шулай иркәләтмәне. Уның шөкәтһеҙлегенән Әминә бер ҡасан да көлмәне.

Бер туҡтауһыҙ сума-ҡалҡа, дөм-ҡараңғы мәмерйәне гиҙгән Рәжәптең күңелендәге өмөт осҡоно, еүешләнгән шырпылай, һүнеп, ҡабат тоҡанмай ине инде. Рәжәп ошо ҡараңғы ер тишегендә мәңгегә ҡалырын аңлағайны. Тик ниндәйҙер көс уға туҡтарға бирмәне. Ул, ҡалдыҡ көсөн, ихтыярын туплап, тағы, тағы сумды, һәрмәнеп йөҙҙө, ҡаяға тотоноп шыуышты, башын, ҡулдарын, аяҡтарын осло таштарға һуғып ауырттырҙы, ҡайҙалыр меңде, кире төштө...

Ҡәбер ҡараңғылығы хөкөм һөргән һыулы мәмерйәлә яңғыҙ осҡондай балҡыған аңы томаланып ҡына барғанда, Рәжәп ҡоро ергә барып юлыҡты. Ул ҡасандан бирле үҙен сорнаған ҡараңғынан, күҙҙәрен тоймай, күҙ ҡабаҡтарының асыҡмы йә ябыҡмы икәнен дә аңламай ине инде. Бихисап тапҡыр, күҙҙәрендә осҡондар сәсрәгәнсе, таштарға һуғылған ҡул-аяғы, башы ауыртып, зиһенен һиҫкәндермәһә, үҙен ошо ҡараңғыға, тынлыҡҡа һеңгән тәнһеҙ-кәүҙәһеҙ шәүлә итеп тоя башлаған булыр ине. Рәжәп, йәрәхәттәренән янған устары менән алдындағы ерҙе һаҡ ҡына һәрмәп, артабан шыуышты. Был тәңгәлдә уның юҫығы, һөҙәк кенә булып, юғарыға үрләй ине. Бына, ҡулдары ниндәйҙер йомшаҡҡа тейҙе. Ҙур ғына ҡалын сепрәк киҫәге булып сыҡты был. Янында тағы ла бер сепрәк... Тимәк, ҡасандыр бында кешеләр йөрөгән. Рәжәп иҫен юйып, онотола башлаған сағында ғына, сепрәк өҫтөнә ятып, йәнәшәләге икенсеһен өҫтөнә япты...

…Уның аяҡ осонда хасил булған аҡ томан эсендә ултырған малай, терһәктәрен осло тубыҡтарына терәп, битен услаған да зәңгәр күҙҙәре менән ҡыҙыҡһынып Рәжәпте күҙәтә. Көтөлмәгән был күренеш Рәжәпте ҡиңәлер ҡурҡытманы. Киреһенсә, әллә ҡасандан бирле осҡондай ҙа яҡтылыҡ күрмәгән күҙҙәре ошо сәйер томандан, аҡ күлдәкле, күк ыштанлы малайҙан ләззәт табалар һымаҡ.

– Кем һин?– тип һораны ул.

– Андрей. Андрюша Солнцев,– тине малай, йылмайып.

– Нишләйһең бында?– тине Рәжәп, терһәгендә ҡалҡынып. – Ата-әсәйең юғалтҡандыр бит үҙеңде?

– Улар мине күптән юғалтҡандар инде,– тине малай вайымһыҙ ғына. – Әйткәндәй, беҙ һинең менән тиңдәштәр булабыҙ.

– Нисек инде? Һин минән күпкә бәләкәйһең бит?

– Һаман йәшәһәм, миңә быйыл егерме ете йәш тулған булыр ине, – тип малай бармағы менән һауаға төрттө. Һауала шул һандарҙы белдергән ике аҡ юл хасил булды. – Тик мин күптән үлгәнмен инде.

Рәжәп, ғәжәпләнеп, тороп ултырҙы.

– Әләйһә, мин дә үлдемме ни?

Малай кинәйәле генә итеп башын һелкетте.

– Юҡ. Һин тере. Мин үлгәндән бирле ошо мәмерйәгә килеп эләккән беренсе әҙәм һин. Шуға ла һинең алдыңда пәйҙә булырға хәл ҡылдым. Был ҡылығым өсөн миңә тағы ла эләгер инде, – тип малай селтерәтеп көлөп алды.

– Кемдән эләгер?

– Фәрештә апай, ағайҙарҙан. Улар үлгән кешеләрҙең йәндәренә тереләргә күренеүҙән тыялар.

– Үлгәндән бирле ошо ҡараңғы мәмерйәлә йөрөйһөңмө ни?

– Юҡ, әлбиттә. Һирәкләп кенә киләм мин бында. Мин күберәк һауала осам. Йыш ҡына ата-әсәйем янына ла кереп сығам. Ярҙам итәм хатта, тура килгәндә. Тик улар мине күрмәйҙәр.

– Ә бында нисек килеп эләктең һуң?

Малай рыя ғына ҡул һелтәне.

– Мин ошонда үлдем. Ул саҡта был утрауҙа пионерҙар лагеры бар ине. Көндөҙгө йоҡонан ҡасып, һыу керергә төшкәйнем. Шунда яр аҫтында бәләкәй генә тишекте күрҙем дә кереп ҡарарға булдым. Тик кире сыға алманым. Үҙең беләһең бит, бында шундай буталсыҡ…

Рәжәп, нимәнелер иҫенә алғандай һиҫкәнеп, килгән яғына ҡулын һондо.

–Тегендә…

– Эйе, – тине малай, һаламдай сәстәрен һыпырып. – Минең һөйәктәрем улар… Беләһеңме, – ул тирә-яғына шыпырт ҡына ҡарап, Рәжәпкә яҡынырaҡ күсте. – Бынан сыҡҡас, мөмкин тапһаң, әсәйем менән атайымды күрергә тырыш. Минең һөйәктәремде мәмерйәнән табып, сиркәү янында ерләһендәр. Шунһыҙ мин һаман малай булып ҡаласаҡмын. Күпме шулай бәләкәс ҡалып, бүтәндәрҙе көлдөрөргә була? Белгең килһә, был донъяла ла үҫәләр…

Рәжәп, ризалашып, баш ҡаҡты.

– Тик мин ыпыҡмын, шуға һөйләгән хәбәремдең рәте юҡ. Һын-килбәтем дә шөкәтһеҙ. Улар миңә ышанмаҫтар, тием…

Малаҡай етди төҫтә, бармаҡтары менән эйәген тотоп, уйланып ултырғандан һуң, һонолоп, Рәжәптең саңҡауына ҡулын һалды. Рәжәп йөҙөнә йомшаҡ ҡауырһын ҡағылғандай итеп тойҙо.

– Ыпыҡлығыңды дауаланым, – тине малай, ҡулдарын алып. – Бынан кире ап-асыҡ һөйләшерһең. Шундай мәхшәргә тарып, ыҙалауыңдың бер ыңғай яғы булырға тейеш тә баһа! – тип малай, мәмерйә эсенә ымлап, күңелле генә көлөп алды. – Тик һын-килбәтеңде төҙәтә алмайым, ғәфү ит. Көсөм етмәй. Иллә-мәгәр телеңде асҡаным өсөн артымды яралар икән бөгөн, – тип өҫтәне ул, кинәт кенә борсолоп. – Беҙҙә ғөмүмән фани донъяға, кешеләр тормошона ҡыҫылыу тыйылған. Ярай, нисек тә түҙелер әле. Хуш, мин киттем.

Малай мәмерйә эсендәге ятыуҙы аҡ шәүләһе менән яҡтыртып һыу өҫтөнән барған еренән кинәт кире әйләнде.

– Бынан сығыу юлын күрһәтергә онота яҙҙым, – тине ул, ҡулы менән ҡайҙалыр юғарыға күрһәтеп. – Ошо тишек утрауҙағы йорттоң баҙына илтә. Тик ул өҫтән күмелгән. Һин ундағы ағастарҙы, таштарҙы тартып алып, түбәнгә ташла, шунда юлың асылыр. Унда күп түгел…

Һуңынан, утрауҙағы күңелһеҙ мажараларынан байтаҡ ваҡыт уҙғас та, ошо күренештең өнмө йә төшмө булыуын барыбер аңлай алманы Рәжәп. Нисек кенә булмаһын, шул малайҙың кәңәшен тотоп, ҡалдыҡ көсөн, ихтыярын егеп, күмелгән баҙ тишеген соҡомаһа, ул аҡылдан яҙып, мәмерйәнән сыға алмай, шунда мәңгегә ҡалған булыр ине.

Йорт баҙының ауыр таш иҙәнен күтәреп өҫкә сыҡҡан Рәжәп бер кеше генә һыймалы тар босмаҡҡа килеп юлыҡҡайны. Бында ышыҡ булһа ла, ер аҫтындағы ҡараңғыға күнегеп өлгөргән Рәжәптең күҙҙәре, ҡайҙандыр төшкән һүрән генә яҡтыны күтәрә алмай, әсетеп яна, йәшләнә башланы. Рәжәп, битен устары менән ҡаплап, байтаҡ ҡына босмаҡта ултырырға мәжбүр булды. Бер аҙҙан күҙҙәре, ниһайәт, яҡтыға өйрәнеп, тирә-йүнде шәйләй башлағас, емерелеп бөткән тар ғына баҫҡыс буйлап өҫкә йүнәлде. Баҫҡыс уны йорттоң икенсе ҡатындағы емерек ишеккә илтте. Ишек артында, уға артын ҡуйып, ниндәйҙер кеше баҫып тора ине. Ул иҙәндәге ярыҡ аша, кемделер аңдығандай, һағайып түбәнге ҡатты күҙәтә ине..

Һыу аҫтындағы мәмерйәлә кисергән ғазаптарынан аҡылын яҙырға еткән Рәжәптең аңында быға ҡәҙәре онотолоп торған ҡыйнаусыларҙың йөҙ-һындары ҡабат уянып, шом-шөбһәләрҙән тертләп бөткән йөрәген ҡабат ҡубарҙы. Тап шул мәлдә теге әҙәм, артында ниҙер һиҙгәндәй, уға боролдо. Уның күҙҙәре, баш етмәҫлек сәйер нәмә күргәндәй булып, кинәт кенә ҙурайып, түңәрәкләнеп китте, ул, ҡағыҙҙай ағарынып, ауыҙынан аңлайышһыҙ өн сығарҙы ла артҡа сикте, ҡулындағы әйбере иҙәнгә төшөп китте. Рәжәп, өңөнән сыҡҡан януарҙай, теге кешенең өҫтөнә ырғыны ла йән көсө менән этеп ебәрҙе. Унан, ҡурҡышынан аңды-тоңдо белмәй, тәҙрә ярығы аша урамға һикерҙе…

Йорт алдындағы майҙансыҡта янған ҙур усаҡ янына йыйылған кешеләр, көтөлмәгән ғәжәп күренештән телһеҙ ҡалып, ни ҡылырға белмәй, күпмелер ваҡыт ҡатып торҙо. Уларҙың алдына, күктән осоп төшкәндәй, һын-килбәте менән әҙәми затты хәтерләткән йән эйәһе, һынған аяғын һөйрәп, йән өшөткөс ауаздар менән илай-һыҡтай, һаман ҡайҙалыр ҡасырға маташа ине…

Дауаханала иҫенә килеп, күҙҙәрен асҡан Рәжәптең тәү күргәне Әминә булды. Ул, ошо гүзәл һынды күңеленә мәңгегә һеңдерергә теләгәндәй, йотлоғоп ҡыҙға ҡараны ла, бер һүҙ ҙә әйтмәй, кире йомдо.

Шул хәлдәрҙән һуң ыпыҡ теле ысынлап та асылды уның.

Бер аҙҙан бынан ун ете йыл элек утрауҙа зымзыя булған Андрей Солнцев исемле малайҙың һөйәктәрен табып, сиркәү еренә ҡуйҙылар.

## 16

Ришүəтселəргə ҡаршы йүнəлтелгəн операция уңышһыҙлыҡҡа тарып, эске эштəр бүлеген ҡала хакимиəте алдында бик уңайһыҙ хəлдə ҡалдырҙы. Бүлек етəксеһе полковник Козлов үҙе хаҡында Василий Петровичтан ниҙəр ишеткəндер, унылы билдəһеҙ. Əйткəндəй, ул əңгəмəнең асылы бер кемгə лə сер түгел инде. Ҡыҫҡаһы, Владимир Ивановичтың бүлек бинаһындағы юл-юҫығында сəйер һиллек хасил булды. Сөнки билдəле хəлдəрҙəн һуң, ауыҙына əрем ҡапҡандай һытыҡ йөҙлө полковник, ҡаршыһына осраған берəүҙе туҡтатып, эт итеп һүккəндəн һуң, юҡ-бар сəбəп менəн эреле-ваҡлы шелтə иғлан итə ине.

Кинəт кенə сиргə һабышҡан подполковник Хəмитов, эшкə сыҡмай, өйөндə ята. Уңышһыҙ операцияға йəлеп ителгəн хеҙмəткəрҙəрҙең барыһы ла ҡаты язаға дусар булды. Хатта башы шаңҡып дауаханаға тарыған лейтенант Сəйетовты ла ҡыҙғанманы Козлов.

Иҡтисад енəйəттəре бүлексəһенең етəксеһе майор Саматов, капитан Дубкола башҡаса хəжəт тапмауына ишара яһап, əйберҙəрен йыйнарға ҡушты.

Мин был «ыстырам»да туранан-тура ҡатнашмаһам да, ундағы минең ҡатышлығым бөтөнлəй, юҡ түгел ине. Хəмитов ришүəтселəрҙе тотоуға тəүҙə мине йəлеп итергə булғайны ла, һуңынан, мин баш тартҡас, Уралды тəғəйенлəне. Козлов, шул турала белеп ҡалһа, ниңə ваҡытында үҙемə еткермəнең, тип мине лə кисермəйəсəк. Асыуы ҡаты уның. Һеҙҙең аңра булыуығыҙҙа минең ни ғəйеп, Хəмитов менəн һеҙҙең арала сабыулап йөрөргə ошаҡсы түгелмен, тиергəме ни? Шуға ла һуңғы көндəрҙə, бүлек етəксеһенең күҙенə элəкмəҫкə тырышып, гел урамда эшлəйем, кабинетыма, ғөмүмəн, бүлеккə, сараһыҙҙан ғына керəм.

Нисек кенə булмаһын, был эш сəйерлеге менəн мине баштан уҡ һағайтҡайны. Ҡалалағы бар кəсебен һатып, буш утрауҙы ҡуртымға алырға йөрөгəн Камаловтың уй-ниəтен аңлау йəһəтенəн, бер күрешкəндə, уйынлы-ысынлы ғына итеп ебен тарҡылап та ҡарағайным. Шул саҡта теше һыҙлағандай йыртыҡ йөҙлө Зиннур Таиповичтың ҡиəфəтенə ҡарап фараз йөрөткəндə, мəшəҡəтенең сəбəбе ҡаты иҫəп йə ахмаҡлыҡ булмауын ғына аңланым. Тимəк, ул кемдеңдер ҡыҫымына ҡалып, шулай эшлəргə мəжбүр ителгəн. Фаразымды раҫлағандай, минең ярҙам тəҡдим итеүемə ул ауыҙ ситенəн генə əсе көлөмһөрəп ҡуйҙы. Уның утрау өсөн ришүəт бирергə йыйынғанын Хəмитов əйткəс кенə белдем. Белдем дə, иҫкəртеү ниəте менəн, Зиннур Таиповичҡа шылтыраттым. Хəмитов алдында минең намыҫым таҙа, сөнки Камалов менəн дуҫлығымды унан йəшермəнем. Дуҫымдың ҡулына быҒау һалғандарын күрəлəтə күтөп ултырырғамы ни? Шуға ла артабан булған хəлдəр мине оторо сəйерһендерҙе. Хəмитов, минең Камаловты иҫкəртəсəгемде белеп тə, өмөтһөҙ операцияны ниңə туҡтатмаған? Ə ҡулға алыныу ҡурҡынысы тураһында иҫкəртелгəн Камалов, үҙ сиратында, ни бысағыма аҡсаһын йөкмəп утрауға барған? Утрауҙағы йорттоң икенсе ҡатына менеп ришүəтселəрҙе аңдыған Урал, бер ҡапсыҡ аҡсаның алыш-биреш ителеүен үҙ күҙем менəн күрҙем, ти. Хатта шул мəлде фотоһүрəткə төшөрөп тə өлгөргəн. Ысынлап та, фотоһүрəттəрҙə аҡса тулы күн ҡапсыҡтың ҡулдан-ҡулға күскəне асыҡ күҙəтелə. Лəкин ришүəтте алыш-биреш иткəн кешелəрҙе һис тə танырлыҡ түгел, сөнки юғарынан түбəнгə төбəп төшөрөлгəн фотоһүрəттəрҙə уларҙың түбəлəре генə күренə. Бер ҡарауға сүптəй генə күренгəн был етешһеҙлек ысынында иһə енəйəтте дəлиллəүгə ярайһы уҡ ҙур ҡатмарлыҡтар тыуҙырасаҡ. Сөнки, ришүəтселəрҙең йөҙ-ҡиəфəттəре танырлыҡ булмаҒас, енəйəттə ғəйеплəрлек кеше лə

ҡалмай. Ә Камалов менән теге хакимиәт хеҙмәткәре, тикшереү барышында, аяҡ терәп, енәйәт ҡылыуҙарын, һис шикһеҙ, инҡар итәсәктәр. Фотоһүрәткә төшөрөү өсөн шунан да йәтешерәк урын тапманым, ти Урал. Был эште тәжрибәле хеҙмәткәргә тапшырғанда, уңайлы урын табылыр ине, әлбиттә. Ришүәттең тап шул бүлмәлә бирелергә тейешлекте капитан Дубко әйтте, ти Урал. Быныһы тағы бер ҡыҙыҡ. Сөнки ундай ентекле мәғлүмәттәрҙе, ғәҙәттә, ришүәт бирергә мәжбүр ителгәндәр генә әйтә ала. Тик, әлеге осраҡта, уларҙың Камаловтан сыҡмауы шикһеҙ. Уға утрау кәрәк. Ришүәт хаҡында һүҙ-хәбәр сығарһа, утрауҙан ҡолаҡ ҡағыуы ла мөмкин бит. Ғөмүмән, былдай енәйәттә ҡатышыусыларҙың иҫәбе ике, күп тигәндә өс кешенән артмай. Ришүәт тураһындағы ошаҡты кемдән алыуы хаҡында капитан Дубконан һорау ҙа урынһыҙ, ул, намыҫын һаҡлап, барыбер әйтмәйәсәк. Шуныһы ҡыҙыҡ: ниңә аҡсаны күлдә барған саҡта уҡ кәмәнән кәмәгә йә бүтән урында тапшырмаҫҡа? Ысынлап та, ни өсөн бер ҡапсыҡ аҡсаны, кәрәкмәгән мәшәҡәт һәм көтөлмәгән ҡурҡынысҡа дусар итеп, утрауға сығарырға? Ваҡытын һөйләшеп, өйҙән генә алып сығырға булмаймы ни?

Был эшкә ҡатышлығым булмаһа ла, ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та тойолған мажара менән мауығып, шул эште тикшергән тәфтишсегә барҙым. Танышлығым менән файҙаланып, уның ҡулындағы тикшереү ҡағыҙҙары менән танышырға ине уйым. Тәфтишсе Сергеев Костя, бер һүҙ әйтмәй, өҫтәлендә өйөлөп ятҡан ҡағыҙҙар араһынан һорағанды табып, минең алға ырғытты ла нимәлер яҙыуында булды.

Ҡағыҙҙарҙан күренеүенсә, Даниил Петрович Цупко исемле хакимиәт хеҙмәткәре Камалов биргән ҡапсыҡты тотоп бүлмәнән сығырға йүнәлгәндә, йорттоң икенсе ҡатында ришүәтселекте аңдып фотоһүрәткә төшөргән Уралға көтмәгәндә ҡайҙандыр килеп сыҡҡан диуана ташлана. Йығылып, башы менән ташҡа бәрелгән Урал күпмелер ваҡытҡа иҫһеҙ ҡала, шул сәбәптән бынан ситтәрәк боҫоп көткән Дубко төркөмөн ваҡытында иҫкәртеп өлгөрмәй. Йорттоң икенсе ҡатынан ергә һикергән диуана, аяғын һындырып, янъял ҡуптара. Шул мәлдә Цупко ҡулындағы ҡапсығын йорт янындағы усаҡҡа ташлай, ришүәтле ҡапсыҡ Дубко төркөмө килеп еткәнсе янып та бөтә. Һуңынан, тикшереү барышында, ҡапсыҡты ниңә утҡа ташланың, тигән һорауға Цупко, унда аҡса юҡ ине, ә мине әхлаҡи яҡтан буяусы, ҡатыным алдында фашлаусы фотоһүрәттәр ята ине, тигән. Камалов үҙ сиратында ришүәтте инҡар итеп, артабанғы аңлатмаларҙан баш тартҡан. Бүтәндәрҙең аңлатмалары белгәндәргә бер ниндәй ҙә яңылыҡ өҫтәмәй.

– Был эште нисек итеп хәл итергә уйлайһың? – тип һораным Сергеевтан.

– Билдәле, енәйәт эше асыуҙан баш тартыу тураһында ҡарар сығарам да вәссәләм,– тине Костя, компьютерынан айырылмай ғына. – Үҙең күрәһең бит, тикшереү һөҙөмтәһендә енәйәт ҡылыуҙы иҫбатлаусы дәлилдәр табылмаған. Ришүәт аҡсаһы ла юҡ, геуаһтар ҙа юҡ, Камалов менән Цупко ла ришүәтселекте танымай, инҡар итәләр…

– Бында ниндәйҙер хәйлә бар, тип күрмәйһеңме?

– Ә миңә кәрәкме ул? Бынан башҡа ла минең алда егермеләп «хәйлә» ята, – тип Костя өҫтәленә ымланы.

Тәфтишселәргә ихтирамым ҙур минең. Иллә-мәгәр аҡыллы, маһир әҙәмдәр улар. Беҙҙең эштә юҡты бар, барҙы юҡ итеү, хатта, сихырсы ҡулынан килмәһә лә, тәфтишсе һис шикһеҙ булдыра уны.

Юл ыңғайы Зиннур Таипович янына керҙем. Отпускыла ята икән. Ғәжәп, йәйҙең йәмле көнөндә, шып-шым ҡалып, бар ғаиләһе өйҙә ултыра. Нажия

ханымдың быға ҡәҙәре балҡып торған сибәр йөҙө һурығып, нурһыҙланған, кәүҙә-буйы ла мөйөшләнеп, тәпәшәйеп киткән һымаҡ. Йорт хужаһының йөҙ-ҡиәфәте лә, ҡарға һымаҡ, ҡап-ҡара. Улы менән ҡыҙы ла фатир буйлап аяҡ осонда ғына йөрөйҙәр.

Ысынлап та, был ғаиләнең тормошона, күкте баҫҡан болоттай, шомлоҡ кергән, буғай. Белергә ине лә, һөйләмәйҙәр, ярҙам итәм тип, ярҙан этеп төшөрөүемдән шөрләйҙәр, ахыры.

Үҙемде бер аҙ йәпһеҙ тойһам да, әлеге хәл тураһында төпсөп һораша башланым. Ишеткәндәрем, әлбиттә, ҡағыҙ өсөн түгел ине. Зиннур Таипович әрепләшеп торманы, һүҙҙәрен үлсәп кенә булһа ла, белгәнен һөйләп бирҙе. Йөрәген баҫҡан хәсрәте менән бүлешеү мөмкинлегенә ҡыуанғандай тойола ине ул хатта. Ысынлап та, утрауҙы ҡуртымға алырға булғас, унан ришүәт талап иткәндәр. Кисә ул алдан килешелгән хаҡты утрауға сығарып, Даниил Петрович Цупко исемле хакимиәт хеҙмәткәренә биргән. Әлбиттә, ул шунан алда минең иҫкәртеүем хаҡында Цупкоға шылтыратып, аҡсаны бүтән урында алыш-биреш итергә тәҡдим иткән. Тик теге ниңәлер, уның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмайынса, аҡсаны, алдан һөйләшелгәнсә, утрауҙағы ташландыҡ йортҡа килтереүҙе талап иткән. Йәнәһе, барыһы ла «майлы», милиция утрауға яҡын да йөрөмәйәсәк, Камаловтың шомланыуы урынһыҙ. Ришүәтте ташландыҡ йорттоң бүлмәһендә алыш-биреш иткәс, икеһе ике ишектән сығып айырылышҡандар. Цупконың аҡсалы ҡапсыҡты утҡа ташлауын күрмәгән, сөнки шул мәлдә йорттоң икенсе яғында булған. Йорт янындағы ҙур усаҡты ҡулдан-ҡулға тапшырыу алдынан, сүп-сарҙы яндырып, йорт-ерҙе таҙартыу ниәтендә, хакимиәт эшселәре яҡҡан. Пионерҙар усағылай итеп, тауҙай өйөлгән сүп-сарҙан, ағастан яндырылған утка яҡын барырлыҡ та булмай, ялҡыны бөркөлөп торған... Юҡ, ришүәтте Цупко түгел, уның етәксеһе Бергман Александр Ильич талап иткән. Улар икәүҙән-икәү генә ҡалып урамда һөйләшкәндәр, әңгәмәләренең сит кеше ҡолағына эләгеүе мөмкин түгел. Һуңынан, тапшырыр ваҡыт еткәс, Александр Ильич уға шылтыратып, аҡсаны Цупкоға бирергә ҡушҡан.

– Хәйерсе хәлендә ҡалһам да, утрау хужаһы мин хәҙер,– тип күҙ ҡыҫты миңә Зиннур Таипович, көлөмһөрәп. – Ыштанһыҙ алпауыт, ҡыҫҡаһы...

Уның был һүҙҙәре минең өсөн тағы бер йомаҡ булып яңғыраны.

– Ришүәтең янып, тәғәйен кешеһенә етмәһә лә, бирҙеләрме ни утрауҙы?– тип һораным, ғәжәпләнеүемде йәшерергә лә уйламай.

Зиннур Таипович елкәһен ҡашып алды ла:

– Белгең килһә, шул хәлдән һуң үҙем дә утрауҙан өмөтөмдө өҙгәйнем инде. Бер һүҙһеҙ генә ҡағыҙҙарға ҡултамғаларын һалып, мисәт баҫыуҙарын күҙҙәремә ышанмай ҡарап торҙом. Тик ул утрауҙан барыбер яҡшылыҡ көтмәйем мин.

Уйламай әйткән һуңғы һүҙҙәре менән утрауға үҙе хужа түгеллеген раҫланы Зиннур Таипович.

Урамға сыҡҡас тәмәке тоҡандырҙым да, был турала белгәндәремде рәткә теҙергә маташып, тирә-яғымда геүләгән ҡала тормошона һаңрау-һуҡыр ҡалып, күлгә йүнәлдем. Әйткәндәй, һуңғы ваҡытта был һуҡмаҡты ярайһы уҡ таҡырайтҡайным инде. Сөнки ул мине Әминә янына илтә. Әминә миңә йортонoң асҡысын да биреп ҡуйҙы хатта. Көнөнә бер нисә ҡат шылтыратып ала. Яраталыр, тип ышанғым килмәй, туғанылай күреүелер, ахыры. Тормошта япа-яңғыҙы ҡалған бит. Шуғалырмы, арабыҙҙағы бер баҫырҙай араны үтеп,

уны ҡосағыма алырға батырсылығым етмәй. Рәнйетермен һымаҡ тоям үҙемде. Ә мин уға ғашиҡмын. Һөйгәнемде ярты көн күрмәй торһам, күҙҙәрем һүнә башлай.

Әминә әле эштә. Йортоноң асҡысы кеҫәмдә ятһа ла, яр башында туҡтап торҙом. Төш ауышҡан саҡ. Күлдән еләҫ ипкен килә. Көҙгөләнеп ятҡан һыу өҫтөндә күмәк кәмәләр сайҡала. Яр буйындағы ҡомлоҡта ял итеүселәр ҡайнаша. Бейек ҡаяһы алыҫтан ағарып торған утрау һауала осоп, һыуҙа сағылған бөҙрә болоттар ҡамауында ҡайҙалыр йөҙөп барғандай тойола.

Тап шул мәлдә әлегә ҡәҙәре башымда тәртипһеҙ сыуалған уйҙарым, кемдеңдер бойроғонан кинәт кенә сафҡа баҫҡан ғәскәрҙәй, рәткә теҙелделәр ҙә бик үҙенсәлекле «һүрәт» хасил иттеләр. Ҡапылдан, үҙ фаразымды үҙем дә аңламайса, һушымды йыя алмай, ҡатып торҙом. Һуңынан аяҡтарым үҙҙәренән-үҙҙәре мине яр буйындағы кәмәлеккә йүнәлтте. Ай-һай, Цупко, ай-бай, Александр Петрович, ҡарап тороуға танауына ҡунған себенгә лә теймәҫтәй сабыр, шым ғына әҙәм һымаҡ күренһәң дә, ысынында иһә бик хәйләкәр һәм сос кеше һин, ахыры?

Ҡыҫҡаһы, утрауға сығып, Камаловтың ришүәте ятҡан күн ҡапсыҡты ташландыҡ йорттоң иҙән ташы аҫтынан табып алдым. Цупко, ҡапсыҡты алғас, йорттоң урамға илткән ҡыҫыҡ ҡына бер босмағында башҡаларҙан күҙ яҙҙырып, уны иҙән ташы аҫтындағы соҡорға йәшергән булып сыҡты. Ошо йүнәлештә артабан фараз иткәндә, ул шунда аҡсалы ҡапсыҡты алдан әҙерләп ҡуйған буш ҡапсыҡҡа алмаштырған һәм һуңынан, ығы-зығы башланғас, милиционерҙарҙың күҙ алдында уны утҡа ташлаған. Элгәренән әҙерләнеп күнеккән кешегә босмаҡтағы иҙән ташын күтәреп, ҡапсыҡтарҙы алмаштырыу өсөн күп тигәндә ун секунд ваҡыт етә. Сүп-сар, ватыҡ кирбес, саң-туҙан баҫҡан иҙәнде күпме тапаһаң да, әлеге йәшенмәкте шәйләрлек түгел.

Шулай итеп, хәйләкәр Цупко, ришүәткә ҡағылышы булғандарҙың барыһын да «кәкре ҡайынға терәп», аҡсаны үҙенә ҡалдырған булып сыҡты. Әшнәһе Бергманға, мин, ҡулға алыныуҙан ҡурҡып, ришүәтте утҡа ташларға мәжбүр булдым, тип аңлатасаҡ. Тикшереүселәргә биргән аңлатмаһы билдәле инде. Һуңынан, тикшереү тамам булып, ғауға баҫылғас, ҡапсыҡты шым ғына килеп ала ла утрау ярынан бөтәбеҙгә лә артын асып күрһәтә. Ә ҡапсыҡтағы мөлкәт аҙ түгел…

Йәш кенә хакимиәт хеҙмәткәренең мутлығына таң ҡалып, ҡыйыулығына һоҡландым хатта. Күренеүенсә, олоғайып барған ата бурҙарға алмашҡа бик һәләтле йәш быуын үҫеп килә…

Телефондан шылтыратып, Зиннур Таиповичты утрауға саҡырып алдым. Таланған мөлкәтен көтмәгәндә кире ҡайтарып алыу бәхетенә ирешкән «утрау хужаһы»ның тәьҫораттары һөйләп биргеһеҙ, бик ҡатмарлы булды. Үҙем менән видеокамера алмағаныма үкендем шунда. Бындай мәрәкә, үҙенсәлекле күренештәр ваҡыт уҙған һайын ҡәҙерлерәк һәм фәһемлерәк була бара бит.

– Ауыҙ йырып торғансы, аңлатыр инең?!

Зиннур Таипович ҡалтыранған бармаҡтары менән тәмәке ҡабыҙып аҙаплана. Белгәнемде бер ишетеүҙән төшөнөрлөк итеп, ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирҙем. Кисерештәренән зиһене буталған Зиннур Таипович балаларса бер ҡатлы һорауҙары менән теңкәмә тейә. Бына ғәжәп, әүәле отҡор ғына әҙәм инесе…

– Цупко, аҡсаны урларға булғас, милицияға ниңә хәбәр итте икән? – ти ул, йоҡа тиреле маңлайын йыйырып.

Мин үҙен кинәт кенә аҡылы һайыҡҡандай итеп тотҡан дуҫымдың ҡылығына ысынлап сәйерһенә башланым.

– Аҡса янғанды күреп, шул хәлдә ҡағыҙға теркәр өсөн!

– Аҡса янмаған да баһа?

Юҡ, уға аҡсалы ҡапсығын тоттороп, яңғыҙын ҡайтарып ебәрергә ярамай. Буталған башы менән тағы берәй бәләгә тарыр. Бер үк хәбәрҙе тылҡып, тамам арыһам да, бармаҡтарымды бөгә-бөгә тәҡрарлап, тағы аңлаттым тегегә хәл-әхүәлдең асылын. Ниһайәт, «утрау хужаһы»ның күҙҙәрендәге сәйер томан таралып, ҡарашында зиһен осҡондары күренә башланы.

– Был аҡса минеке, тимәк?– тине ул, үҙ фаразына үҙе ышанырға ҡурҡҡандай. – Ә ҡайҙа ҡуяйым мин уны?

Уның һуңғы һүҙҙәренән осҡолоғом тота яҙҙы.

– Цупкоға илтеп бир, сумаҙанға рөхсәтһеҙ тейгәнең өсөн ғәфү үтен,– тинем, юрамал мыҫҡыллап.

Зиннур Таипович, секерей күҙҙәре менән миңә тексәйеп бер аҙ торғандан һуң, йоҙроғонан яйлап ҡына ҡуҡыш төйнәп, ҡала яғына төбәне.

– Бына уларға!

Аллаға шөкөр, ниһайәт, аҡылына ҡайтты шикелле…

Һуңынан, ай-вайыма ҡарамай, мине һөйрәкләп тигәндәй ресторанға керетеп, ҡиммәтле хәмер менән һыйланы Зиннур Таипович. Үҙе лә лаяҡыл булғансы эсеп иҫерҙе. Зиннур Таипович хакимиәт башлығы булғас, беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнәсәгемде белдем шунда. Артынса ҡыҙына өйләнергә димләп йөҙәтте. Кис етеп, эңер төшкән саҡта подъезда бейеп маташҡан сикһеҙ бәхетле «утрау хужаһы»н, ниһайәт, өйөнә оҙатып, ғаиләһенә тапшырҙым.

Кистең еләҫ һулышына ләззәтләнеп, ашыҡмай ғына ҡайтып барғанымда, Әминә шылтыратты. Баҡһаң, ул һаман эштән ҡайтмаған, имеш, йәш балаһы сирләгән иптәшен алыштырып, төнгә ҡалырға мәжбүр булған.

– Өйөмдөң тәҙрәһен япмай ҡалдырғайным, – ти Әминә. – Барып, шуны бикләһәң ине. Йоҡларға ҡалһаң да була. Мин иртәнсәк ҡайтам.

Һөйгәнемдең өйө йыһандағы бөтән йондоҙсоҡта урынлашҡан булһа ла, шунда барыу әмәлен нисек тә табыр инем мин.

Йорттоң тәҙрәләре ябыҡ ине. Әминәнең борсолоуы бушҡа булған, тимәк.

Зиннур Таиповичтың ҡунаҡсыллығынан мейем ярайһы уҡ шыйыҡланһа ла, быуындарым ҡаты, зиһенем асыҡ. Шуға ла Әминә ҡайтыуға уның өйөнә әсегән ҡатыҡ еҫе аңҡытып ятҡым килмәне. Ҡайтырға уйлап, кирегә әйләнгәндә, өй эсендәге сәйер осҡон күҙ ҡырыйыма эләгеп ҡалғандай булды. Атларға күтәргән аяғымды кире алып, һағайҙым, туҡтап, тәмәке ҡабыҙҙым, үҙем, башымды бормай ғына, күҙ ситем менән тәҙрәләрҙе күҙәтә башланым. Осҡон башҡаса күренмәне. Һауала атылған йондоҙ тәҙрәлә шулай сағылдымы икән? Юҡ, күҙемә тиктәҫтән күренгән ут булманы был. Тәмәке осҡоно һымаҡ… Тәмәке?!

Шул уйымдан йөрәгемә шом кереп, бар булмышымды һағайтты. Үҙем дә һиҙмәҫтән, хәүеф тойған аусылай, бөтә хис-тойғоларымды йорт яғына йүнәлттем.

Утрауҙан сығарып, Әминәнең йәшелсә баҡсаһына күмелгән хазиналар беренсе көндән үк күңелемдә шик-шөбһә ҡуҙғатып, шомландырып торҙо. Хоҡуҡ һаҡлау эшендә йыйылған тәжрибәм ундай ҙур мөлкәттең шом-шауҡымһыҙ ғына ятыуына ышанмаҫҡа өндәп, көтөлмәгән бәлә-ҡазаға тарымаҫ борон ул хазинаны нисек тә булһа хәл ҡылырға кәңәш итә ине. Ләкин, ундағы алтын-көмөштө, зәр-зиннәтте ер аҫтынан берәм-берәм сығарып, үҙ белдегең менән ҡул аҡсаһына алмаштыра башлаһаң, башыңа бәлә табырыңды көт тә тор. Шуға ла табылдыҡ хазиналарҙан иҫән-имен ҡотолоуҙың иң ябай, ышаныслы

ысулы – уларҙы, законға яраҡлы рәүештә, дәүләткә тапшырыуҙан ғибәрәт ине, әлбиттә. Әммә уғрылыҡҡа, мәкерлеккә батҡан заманда был мәшәҡәткә һаҡһыҙ тотонһаң, хазинаңды «законлы рәүештә» юғалтып, һемәйеүең дә мөмкин. Сөнки аҡҡа ҡара менән яҙылған закондарҙы үҙ ҡарамағына бутап, аҙаҡтан осон да тапмаҫлыҡ итеп сеймәлдергән яһилдар етәрлек хәҙер. Шуларҙы күҙ алдында тотоп, хазина табыуға ҡағылышлы закондарҙы үҙ аллы ғына өйрәнеп, ҡағыҙ-ҡиәмәт эшен намыҫлы башҡарырлыҡ ышаныслы юрист эҙләгән сағым ине.

Йортҡа кереп, йөрәгемдә ҡуҙғалған шик-шөбһәне тикшермәйенсә тыныслана алмаясағымды тойҙом. Нисек кенә булмаһын, баҡсала ятҡан хазина шомлоғо, ер аҫтынан сыҡҡан ҡара быу һымаҡ, әле генә балҡып торған күңелемде һөрөмләп, кәйефемде төшөргәйне инде.

Тәмәкемде тапап һүндергәс, йорт алдынан китеп күҙ яҙҙырҙым да, кире боролоп, ҡойма буйынан ҡапҡаға килдем. Ҡапҡаны шыпырт ҡына асҡас, йоҙроҡ дәүмәле йоҙаҡты ҡулыма тотоп ихатаға үттем. Ни тиһәң дә, ҡоро ҡул түгел… Солан ишеге ниңәлер бикһеҙ ҡалған, йоҙағы ла күренмәй… Ҡараңғыла һәрмәнеп, ут алғыска баҫтым, тик ул ниңәлер ҡабынманы. Тотҡаһын табып, йорт ишеген астым, тупһа аша баҫып, ҡараңғы бүлмәгә үттем. Тап шунда ҡараңғы мөйөштән, күҙҙәремде сағылдырып, йөҙөмә яҡтылыҡ бөркөлдө. Артымда ниндәйҙер хәрәкәт тойоп, кинәт кенә әйләнгән ыңғайы, ҡулымдағы йоҙаҡ менән кемгәлер ҡаты тондорҙом, уның артынса алдымдағы шәүлә өҫтөнә һикерҙем. Минең ҡаты тибеүемдән ул артҡа осоп, шкафҡа бәрелде, шкаф иҙәнгә ҡолап, көҙгөһө селпәрәмә килде. Шунда арттан килеп башыма һуҡтылар…

Күпме иҫһеҙ ятҡанмындыр, белмәйем. Өҫтөмә һибелгән һалҡын һыуҙан һушыма килдем. Башым буран кергән мөрйәләй геүләй. Ауыҙ-мороном йәбешкәкләнеп тора, танауымдан ҡан киткән, ахыры. Ҡулдарым бәйле. Өҫтәлдә торған йәшел абажурлы шәмдәл яҡтыһында ултырған берәү минең кеҫә телефоным менән булаша. Бәй, Генка Шприц та баһа…

Ятҡан еремдән шылышып, стенаға арҡамды терәп ултырҙым.

– Сәләм, майор әфәнде, – тине Генка Шприц, миңә боролоп. Ул, ғәҙәттәгесә, баштан-аяҡ аҡтан ине. Арыраҡ, абажур күләгәһендәге диванда, тағы ике әҙәмдең ҡара шәүләһе төҫмөрләнә.

Ауыҙыма тулған әсе ҡанды төкөрөп, өндәшмәнем. Тештәрем иҫән икән, улай ҙа…

– Һине дөмөктөрөп, һаҫыҡ кәүҙәңде ҡайҙа ҡуйырға уйлап ултырам бына. Һине сүп-сар мисҡәһенә генә тығып булмай бит. Әйткәндәй, бындағы картуф баҡсаһында урын күп, ере лә йомшаҡ күренә.

Генканың йөҙө, шәмдәл күләгәһендә ҡалып, миңә күренмәй. Шуға ла уның тауышы башһыҙ муйындан сыҡҡандай тойола. Зиһенемде йыйып, килеп тыуған хәлде бизмәнгә һалырға тырыштым. Күренеп тора, мине көтмәгәндәр улар бында. Сөнки Генка Шприц бер ҡасан да кәсебенә әҙерлекһеҙ сыҡмай. Тимәк, әлеге хәбәре буш уның, ул алағайым тотоноп, көтөлмәгән бәләне тағы ла нығыраҡ ауырайта торғандарҙан түгел.

Һис шикһеҙ, Әминәне көткәндәр улар… Осраҡлымы, әллә Хоҙай ҡулынанмы, үҙем алдан килеп юлыҡмаһам, был хәшәрәттәрҙең һөйгәнем менән ни ҡылырҙары күҙ алдыма килгәс, тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

– Тәүҙә үҙеңде уйла, – тинем мин, ауыҙымда йыйылған әсе еүешлекте иҙәнгә төкөрөп. – Минән ҡала күп йөрөрмөн тиһеңме…

– Ҡыҙғаныска ҡаршы, һин хаҡлыһың. Һине бында көтмәгәйнем. Шуға,

ашыҡ-бошоҡ ҡыланып, бысранғым килмәй. Йомошом Әминә һылыуға бағланған… Башыңа етмәй тороп, һинән арынып булмаç, ахыры, майор. Тамам еләттең бит!

Генка урынынан тороп яныма килде лә осло туфлийы менән бауырыма төбәп ҡаты тибеп ебәрҙе. Күҙ алдарым ҡараңғыланып, тыным ҡыçылды. Тағы типте, тағы… Ҡапыл ғына әйләнеп, ҡанлы ҡулдарым менән тегенең аҡ салбарын таплап өлгөрҙөм. Генка, йыландан ҡасҡандай, ситкә ырғыны…

– Мин һине тамғаланым, – тинем, һулышыма сәсәп. – Йыуынып ҡара инде, эт…

Генка, ытырғанып, салбарына уҡмашҡан ҡан таптарына ҡарап торҙо ла ҡабат өçтәл артына барып ултырҙы.

– Әшәке мент! – тине ул, асыуынан ыçылдап. – Ошонда ғына һуйырға ине үҙеңде…

– Ҡулың ҡыçҡа… Төрмә тупһаһы алдында торғаныңды беләһең, ҡәбәхәт…

– Төрмәгә ҡабат керһәм дә, ҡулдарыма һинең башыңды тотоп керәсәкмен…

– Ә был эшең өсөн башыңдан һыйпарҙар тиһеңме? – тигәс, ҡарашым менән тирә-яҡҡа ымланым. – Рөхсәтһеҙ сит йортҡа кереү – прокурор статьяһы. Юлығыҙҙы ҡыйған милиция майорын ҡыйнауыңды ла өçтәгәндә…

Генка Шприц, күңелле көләмәс ишеткәндәй, хахылдап көлөп ебәрҙе.

– Белгең килһә, майор, бер аҙҙан, башымдан һыйпап ҡына, үҙең оҙатырға сығасаҡһың мине! Ергә теҙләнеп, рәхмәттәр уҡып ҡаласаҡһың!

– Артыңдан атып ҡалырға, эх, ҡоралымды алмағанмын!

Генка Шприц, ирәйеп, аяҡтарын салып ултырҙы.

– Ошо йортта хазина бар, – тине ул миңә, мут ҡына күҙ ҡыçып. – Мин шуны алырға килдем. Һис йыбанмай, өс көн буйы күлде гиҙеп, һорашып-белешеп йөрөүем бушҡа булманы. Һин ошо йорттоң хужабикәһе Әминә исемле ҡыҙый менән утрауҙа табылған хазинаны сығарып, ҡайҙалыр ошонда йәшергәнһегеҙ. Әминәкәй һылыуҙың эштән ҡайтҡанын зар-интизар булып көтөп ултырғанымда, көтмәгәндә һин килеп, кәйефемде бер аҙ боҙҙоң. Типке-һуҡкымды кисерә күр, сөнки, билдәле булғанса, саҡырылмаған ҡунаҡтың моронон ҡыҙартыу борондан изге эш һаналған.

Генка Шприцтың һүҙҙәрен ишеткәс, күптәнән бирле тап шуны көткәнемде аңланым. Табылдыҡ хазина касафаты үҙенә тейгәндәрҙе баçтырыҡлай, тиеүҙәре раç икән. Ғөмүмән, еренә йәшерелгән хазинаһы күп булған илде бәхетле тип булмайҙыр. Сөнки ҡайғы-ҡазаға тарыған, афәт-касафатҡа дусар булған илдә генә кешеләр күҙ терәп торған зәр-зиннәтен ергә күмергә мәжбүрҙәр. Күҙ йәштәре, шик-шөбһәһе менән бергә… Шулай булғас, йылдар, быуаттар уҙғас та шул мөлкәтте ҡаҙып алғандың тормошона төрлө бәлә-ҡаза ябырылыуы ғәжәпме ни…

– Һин дә ҡунаҡҡа килмәгәнһең.

– Кемдә көс – шул хужа. Әлеге мәлдә һинең яҙмышыңды хәл ҡылыусы – мин. Теләһәм, арҡаңдан һөйөп кенә, артабан йәшәү хоҡуғы бирәм. Теләһәм, ошо урында, һаçыҡ һарыҡтай итеп, хәҙерҙән һуям үҙеңде.

Генка һүҙенән туҡтап, тәмәке ҡабыҙҙы ла, юғарыға төтөн балдаҡтары осороп, бер мәлгә тынып ҡалды. Диванда ултырғандарҙың береһе, әшәке һүгенеп, лаçҡылдата иҙәнгә төкөрҙө.

– Яңағымды һындыра һуҡҡан, ахыры…

– Күп һүҙ – юҡ һүҙ, – тип Генка Шприц тағы телгә килде. – Ҡыçҡаһы, был йортта хазина барлығы миңә көн кеүек асыҡ. Һеҙ Афоня ҡарттың кәмәһендә утрауҙан ниндәйҙер ҡапсыҡтар сығарып, уларҙы ошо йортҡа ташығанһығыҙ.

Бер ярты араҡынан ҡарттың теле тиҙ сиселде. Йортто ла үҙе килеп күрһәтте, хужабикәнең исемен дә, хатта һинең мент булыуыңды ла әйтте. Шартымды тыңла, майор. Һин хәҙер үк шул хазиналарҙы беҙгә бирәһең, һәм беҙ тауыштынһыҙ ғына айырылышабыҙ. Бүреләр ҙә туҡ – һарыҡтар ҙа иҫән йәғни. Минеңсә, әлеге сетерекле хәлдән иҫән-һау сығыу өсөн шунан да уңайлыраҡ юл юҡ. Ә инде киреләнеп, һаман да үҙ артыңа мажаралар теләһәң, рәхим ит, мин уларҙы һиңә ғарыҡ булғансы күрһәтәсәкмен. Таңға ҡәҙәре ваҡыт күп әле.

– Ышандырҙың. Һинең хайуанлығыңды кем белмәй… Тик һин аҙға ғына һуңланың. Беҙ ул хазиналарҙы дәүләткә тапшырып өлгөрҙөк инде.

Генка турайып ултырҙы.

– Улайһа, шул туралағы ҡағыҙҙы күрһәт. Хазина ҡабул ителеү тураһында банктан белешмә ҡағыҙы бирелергә тейеш бит?

– Мин уны эшемдәге сейфҡа бикләгәнмен. Әйҙә, шунда барайыҡ, күрерһең…

Генка Шприц урынынан тороп, ярым ҡараңғы бүлмәне бер нисә ҡат урап сыҡҡас, минең янға килеп баҫты.

– Мине иҫәргә һанайһыңмы? – тине ул, миңә өҫтән ҡарап. – Йәнемде көйҙөрәһең, мент. Хазиналар бында әле. Беләһеңме, нимә? – тип Генка иҙәнгә сүгәләне лә шәмдәл яҡтыһында һарғайған күҙҙәрен миңә тексәйтте. – Был турала Әминә һылыу менән генә һөйләшеп, уны күндереү миңә күпкә еңелерәк булыр ине. Һин минең ысулдарымды беләһең. Әммә һин килеп эште бутаның. Мин, әлбиттә, һине көтмәгәйнем. Ә һин килдең. Яҙмыштыр… Яҙмыш бөгөн ошо урында хәл ҡылынасаҡ. – Генка иҙәнгә бармағын төрттө. – Хазинаны сығарып бирмәһәң, миңә Әминә һылыуҙың эштән ҡайтҡанын көтөргә генә ҡала. Һөйгәнеңдең үлем ғазаптарын күргең киләме ни? Рәхим ит. Минең башкиҫәрҙәр, – тип Генка диванда ултырған ике шәүләгә ымланы, – тәүҙә һылыуыңды иҙәнгә һалып, һинең күҙ алдыңда мәсхәрә итәсәктәр. Һин шул хәлдә ошонда ҡарап ултырасаҡһың. Һуңынан, хазинаны табып алғас, ә уны һин, ҡыҙҙың ғазаптарын күреп түйғас, һис шикһеҙ үҙең күрһәтәсәкһең, икегеҙҙе лә бәйләп, өйгә ут төртәм. Янғын эҙ ҡалдырмай. Электр сылбыры өҙөлөп ут сыҡҡан, тиерҙәр. Борька ундайға оҫта. – Генка диванға ымланы. – Юҡҡа ғына «электрик» ҡушаматы йәбешмәгән уға. Нимә көткәнен белдеңме инде?

Ултырған еремдән уның ҡәбәхәт йөҙөнә төбәп аяҡ типкәйнем дә, теймәй ҡалды. Генка, уҫал көлөмһөрәп, аяғына баҫты.

– Уйла, мент, – тине ул, өҫтәл артына урынлашып, ҡабат тәмәке тоҡандырғас. – Ваҡыт бар әле. Оҙаҡламай Әминә һылыу ҙа ҡайтып керер… Минең башыма алтатар терәп, урыҫ рулеткаһы уйнағаның иҫеңдәме? – тине ул, миңә ҡырын ғына ҡарап. – Әлеге хәл ни яғы менәндер шуға оҡшаған, эйе бит? Тик был юлы беҙ урындарыбыҙҙы алмашҡанбыҙ…

Генка Шприц бер ҡасан да бушҡа янамай. Әминәне ошо йыртҡыстан ҡурсып ҡалыр өсөн Хоҙай үҙе бында йүнәлткәндер мине. Иртәнсәк эштән ҡайтып, ошо хәшәрәттәр ҡаршыһында япа-яңғыҙы торған һөйгәнемде күргәндәй булып, күҙҙәремде сетерҙәтеп йомдом. Нисек ер упмай һуң был бәдбәхеттәрҙе, Хоҙай уларҙы тамуҡҡа оҙатмай, ниңә һаман түҙә икән?

Күҙ алдымдан йүгереп үткән йән өшөткөс күренештәрҙән һуң, баҡсалағы алтын-көмөштөң шунда уҡ баһаһы төшөп, улар, гүйә, сүп-сарға әүерелде. Юҡ инде, һөйгәнем был вәхшиҙәр ҡулына ҡалыу ғына түгел, уларҙың донъяла барлығын да белмәҫкә тейеш…

– Хазинаны биргән хәлдә лә, һин мине барыбер үлтереп, өйгә ут төртәсәкһең…

Мөмкин тиклем үҙемдең ғүмерем менән ошо йорт өсөн һатыулашырға булдым хәҙер. Һис юғында тикшереүселәр өсөн артымдан ниндәйҙер эҙ ҡалдырыға ине уйым. Үҙем үлеп, йорт янған хәлдә лә, Генканың ҡойроғона баҫып, башын төрмәлә серетерлек булһын.

Генка Шприц күҙгә күренеп йәнләнде.

– Ул бәлә миңә кәрәкме? – тине ул, өҫтәл аша миңә ҡарап. – Тикшереү, һорашыуҙар, менттарҙың, аусы этеләй булып, эҙләнеп, еҫкәнеүе миңә ни бысағыма? Ҡойроҡҡа баҫһалар – хана бит!

– Кеше талап та артыңдан баҫтырыҡламауҙарына иҫәп тотаһыңмы ни?

– Әлбиттә! – Генка, минең был һорауыма ҡыуанғандай, күңелләнеп үк китте. – Әлбиттә! Сөнки һин мент булһаң да, башыңда аҡылың бар. Һөйгән ҡыҙыңдың беҙҙең ҡулға эләгеүен теләмәйһең бит? Ментлығыңды алға ҡуйып, ҡойроғома баҫа башлаһаң, Әминә һылыуҙы минең егеттәрем күмәкләп… ҡыҫҡаһы, мине аңлайһыңдыр?..

– Килер бер көн, Генка, – тинем мин, тешемде ҡыҫып, – мин һине ҡоторған эттәй күреп атып китәсәкмен!

Генка вайымһыҙ ғына ҡул һелтәне.

– Беҙ күптән инде һуғыш ҡырында ҡара-ҡаршы атышып ятҡан уҡсылар кеүекбеҙ. Кем атып өлгөрә әле…

Тегеләр баҡсанан ҡаҙып алған ынйы-мәрйенгә мауыҡҡан саҡта ботинкамды һалдым да, ауыҙымдағы ҡанлы шайығымды эсенә төкөрөп, шыпырт ҡына ҡарағат ҡыуаҡтарына типтем. Башыма етһәләр, ботинкам тәфтишселәрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятырға тейеш…

– Бик яҡшы көн бөгөн, – тине Генка Шприц ирәйеп, йәшниктәрҙе машинаға тейәгәс. Ул янында торған иптәшенә минең ҡулдарымды сисергә ҡушты. – Һеҙ, майор әфәнде, зинһар, үпкәләмәгеҙ инде, һеҙҙән үс алыуым да, ҡон ҡайтарыуым да түгел был – тик бизнес ҡына. Әминәкәй ҡайтыуға өйҙө йыйыштырып ҡуйһағыҙ ине. Юғиһә унда ҡан, бысраҡ… Хужабикәгә оҡшамаҫ.

– Осрашырбыҙ әле, – тип ҡулъяулығым менән ҡанлы йөҙөмдө һөрттөм. – Донъя – ҡуласа…

– Әлбиттә, мотлаҡ осрашырбыҙ, майор әфәнде. Әйткәндәй, үҙемдең кафела бөгөндән алып һеҙгә бушлай ашау хоҡуғы бирәм. Минеңсә, – Генка Шприц машинаға ымланы, – ундағы байлыҡ илдәге бөтә менттарҙы бер юлы ресторанда ашатып сығарырға ла етәрлектер. Оялмағыҙ, майор әфәнде, килегеҙ! Иң яҡшы ашым менән һыйлармын! Ха-ха!

…Әминә ҡайтҡас, бында булған хәлдәрҙе һөйләп аңлата алмай яфаландым. Йонсоуҙың сигенә еткәнгәме икән? Ниңәлер тотлоҡтом, телем көрмәлде, әйткәнемде үҙем дә аңламай инем. Һуңынан, мәғәнәһеҙ бытылдауымдан оялып, ярты һүҙемдә абынғандай туҡтап, өндәшмәҫ булдым.

Әминә, асыҡ тәҙрә аша томанлы күлгә ҡарап байтаҡ ҡына һүҙһеҙ торғандан һуң, янымa килде лә, сикәләремде устарына алып, күҙҙәремә төбәлде.

– Мин япа-яңғыҙмын. Шуға, һине осратҡас, яҡлаусы, һаҡлаусы дуҫым булды, тип ҡыуанғайным. Ә һин? – Ҡыҙҙың күҙенән атылып сыҡҡан йәш тамсыһы, артабан ағырғамы йә ҡалырғамы белмәгәндәй, оҙон керпек осонда бер аҙ ғына торғас, осҡондай емелдәп, аҫҡа осто. – Һин милиционер түгелме ни? Ниңә шылтыратып иптәштәреңде ярҙамға саҡырманың? Ышанмайым һиңә, Таһир. Шиғәлселәр менән бер булып, алдашып ултыраһың бит?

Һөйгәнемдең һуңғы һүҙҙәре мине тамам телһеҙ итте. Әминә ишек янына барып баҫты.

– Мин, шул Хоҙай биргән байлыҡҡа ышанып, ниһайәт, ошо меҫкенлектән, хәйерселектән ҡотолормон тигәйнем, – тине ул, үҙ алдына һөйләнгәндәй. –

Тик өйөмә йылан кереткәнмен икән. Сығып кит өйөмдән, башҡаса был тарафтарға, зинһар, яҡын да йөрөмә. Һатлыҡ йән һин…

…Машина тормоздарының әсе һыҙғырыуына һиҫкәнеп, артыма боролдом. Юл сатында торам, имеш. Ҡыҙыл машинала ултырған мыйыҡлы әҙәм, йоҙроғо менән светофорға күрһәтеп, урам ярып мине һүгә. Күтмәгәндә бынан өс йыл элгәре ошо юл сатында булған ҡот осҡос фажиғә иҫемә төштө. Мин уға осраҡлы ғына рәүештә шаһит булғайным. Ҡулына скрипка ҡумтаһы тотҡан мөләйем ир, мәктәп йәшенә еткән бәләкәй улын етәкләп, ашығып юл аша сыҡты. Малайҙың ҡулында – оҙон епкә тағылған ҡыҙыл шар. Шул саҡ шар ни ғиллә менәндер ысҡынып китте лә ел ыңғайына юл аша кирегә осто. Малайҡай, атаһынан ҡулын тартып алып, көлә-көлә, шар артынан йүгерҙе. Әлегеләй йөрәк өҙгөс итеп машина тормоздары һыҙғырҙы… Һуңынан, ауыҙы йыртыҡ көләс йөҙҙө һүрәтләгән шар, ебе менән юлситендәге ағас ботағына эләгеп, улының үле кәүҙәһен ҡосаҡлап һуштан яҙған ир өҫтөндә, мәғәнәһеҙ йылмайып, һауала бәүелә лә бәүелә ине…

Әминәнең атаһы менән ҡустыһы булғандар, имеш. Бер йылдан атай кешенең һалҡын кәүҙәһен улының ҡәбере өҫтөндә табып алғандар. Йөрәге түҙмәгән…

Тәмәке тоҡандырып, ҡулымдағы сәғәтемә ҡараным. Эш башланыр ваҡыт етеп килә. Хәлем мөшкөл…

Ниңәлер хәтеремдәге теге шар, ҙур ауыҙын мәғәнәһеҙ йырып, баш өҫтөмдә һаман бәүелеп торғандай…

**17**

Әҙәм балаһының башына күмәртәләп төшкән бәлә-ҡаза, бер килкем, нисектер хәл ителеп онотола башлаһа, уның тормошо ла, йонсоу болоттар таралып, ҡояш сыҡҡандай, яҡтырып китә. Фани донъяла ғүмер иткән һәр инсан үҙ ғүмерендә шундай тойғолар кисерәлер. Шул саҡта ғына тыныс тормоштоң оло бәхет икәнлеге беленә.

Камаловтар йортоноң тәҙрәһенә лә ҡояш ҡараны, ниһайәт. Ғаилә башы һуңғы арала йылмайыуҙы онотоп, йөҙө шырыша башлаған ҡатынын һөйрәкләп тиерлек аулаҡ бүлмәгә керетеп, уйламағанда кире ҡайтҡан аҡсалы ҡапсыҡты күрһәткәс, Нажия ханым тәүҙә телһеҙ ҡалды, шунан, башын тотоп, диванға ҡоланы, һуңынан иһә ҡапсыҡтағы аҡсаларҙы бармаҡтарын теле менән сылатып, «тәмләп» шутларға кереште.

– Бәлки, Таһир сәлдергәндер бер аҙын, – тине ул, мәшәҡәтенән арынмай ғына. – Ышан йолҡош ментҡа…

Уның был һүҙҙәренән Зиннур Таиповичтың мейеһенә ҡан бәреп, ул үҙе лә һиҙмәҫтән ултырған килеш ҡатынына уҡталғандан, ҡулдарынан кемдер тотоп алғандай, туҡтап ҡалды ла, бер ҡасан да булмағанса яман һүгенеп, аяғына баҫты. Бар ғәмен аҡсаға биреп онотолған Нажия ханым шунда ғына иренә күтәрелеп ҡараны ла, күргәненән һиҫкәнеп, эшенән туҡтаны.

– Ғәфү ит, зинһар, – тине ул, устары менән кинәт кенә ҡыҙылға мансылған йөҙөн ябып. – Әллә нишләнемсе, уйым да, телем дә үҙемдеке түгел һымаҡ… Зиннур, иҫеңдәме, беҙ Италияға йыйына инек бит? Хәҙер килеп аҡса ла булды…

Яратҡан тәтәйен тартып алыуҙан ҡурҡҡан балалай, күҙҙәрен өмөт ҡатыш шом баҫҡан ҡатынына ҡарап, Зиннур Таиповичтың йөрәге һыҙып ҡуйҙы. Шундай аяныслы хәлдәрҙән һуң яртылаш ҡартайған ҡатынының теләгенә нисек ҡаршы тора алһын инде.

– Әлбиттә, – тине ул, ҡарашын тәҙрәгә күсереп. – Мин бара алмаған хәлдә лә, балалар менән йөрөп ҡайтырһың.

Зиннур Таипович, яңғыҙы ҡалғас, Сатиға шылтыратып, утрауҙы ҡуртымға алыуын хәбәр итте.

– Афарин, Зиннур Таипович,– тип яуапланы Сати. – Һеҙҙең уңыштарығыҙ бабайҙы, һис шикһеҙ, ҡыуандырыр.

Сати, ғәҙәттәгесә, телефондан һөйләшкәндә, Искәндәр ҡарттың исемен телгә алманы.

– Мин ғаиләм менән илдән сығып, ситкә сәфәр ҡылырға йыйынам,– тине лә Зиннур Таипович шунда уҡ, әйткәненә үкенеп, телен тешләне. Ошо ниәтен бер кемгә лә асмаҫҡа, тигән уйы бар ине лә, теленән ен тартты, ахыры. Тик һуң ине инде.

– Быны хәбәр итеп, бик дөрөҫ эшләнегеҙ, – тине Сати. – Мин уға ниәтегеҙҙе еткерермен, һеҙгә уның рөхсәтен алыу зарур. Сөнки әлеге утрауға ҡарата уның ниндәйҙер хәстәре булыуы мөмкин.

«Рөхсәтен алыу», имеш… Ошо һүҙҙәрҙең асылына төшөнгән Камалов әле генә балҡып торған көнөнөң кинәт һүрәнләнеүен тойҙо. Теге остағы Сати телефон аша ниңәлер шымып ҡалған әңгәмәсеһенең хистәрен һиҙеп ҡалды, буғай.

– Борсолоуығыҙҙың сәбәбен аңлайым, – ҡыҙҙың тауышында быға тиклем бер ҡасан да ишетелмәгән йыуатыу билдәләре салынды. – Өмөтөгөҙҙө өҙмәгеҙ, ул, ғөмүмән, үҙенекеләрҙе ҡыйырһытмай. Әйткәндәй, һеҙҙе яҡлап уға һүҙ ҡатырға вәғәҙә бирәм. Тик ул әйткәнгә берүк кире булмағыҙ, зинһар…

Камаловтың Сатиҙы күргеһе килде. Эх, шул һылыуға бағып, ҡарашты йәмләп, күҙҙең танһығын ҡайтарырға ине…

Ни ғиллә менән шул бүре өйөрөнә барып юлыҡтым һуң әле, тип ғәжәпләнде Зиннур Таипович, асыҡ балкон тәҙрәһенән бөҙрә ҡайын остарына ҡарап. Бур ҙа, кеше талаусы ла түгелмен, Аллаға шөкөр. Хәйлә-мәкер ҙә, яһиллыҡ та миңә ят. Терһәктәренә хәтлем ҡанға буялған шиғәлселәр араһында миңә урын бармы ни? Ытырғанам бит уларҙан. Ни хәжәтем тейгән бәдбәхет Искәндәргә? Хакимиәт башына ҡуйырға үҙе ише берәй бурҙы тапмағанмы әллә? Уғрылыҡҡа мас булып ултырған эреле-ваҡлы дәүләт хеҙмәткәрҙәре аҙмы ни хәҙер? Бынағайыш, исем-шәрифенән ҡан өшөгән ата бурға намыҫын, әхлағын һаҡлаған хакимиәт башлығы ни бысағыма? Юҡ, Искәндәрҙең эте булғансы, алабайҙың бете булыуың мең артыҡтыр. Сати менән сираттағы осрашыуҙа Искәндәр менән күрешеүҙе талап итергә лә ҡартҡа әлеге уйлағандарҙы ярып һалып, араны өҙөүҙе һорарға кәрәк. Ҡарт алдында башҡаса бирәсәге лә юҡ, шулай булғас, биғәйбә, тип, дүрт яғына ебәрергә булмаймы ни уны? Хакимиәт башлығы булам тип, ҡатынын, балаларын бысаҡ аҫтында тотһонмы ни? Ана, ҡыҙымды нишләттеләр. Әүәле юҡҡа-барға сырҡылдап теңкәгә тейгән, кис етһә ҡайтмай борсоған ҡыҙы, шул хәлдән һуң, яңғыҙы урамға сығырға ҡурҡып, бесәй кеүек мыштымға әйләнде. Кәрәкмәй бер ни ҙә. Торбаларҙы ямаусы ябай эшсе булһа ла, үҙ көнөн үҙе күрер, йоҡоһо ла тыныс булыр.

Шунда, Камаловтың күңелһеҙ уйҙарын өҙөп, телефон шылтыраны. Ул төпсөк һауытында һүрәтләнгән шайтандың күҙенә тәмәкеһен баҫып һүндерҙе лә, бүлмәгә кереп, телефонды алды. Әстәғи, Василий Петрович та баһа?! Ҡала хакимиәте башлығы…

Василий Петровичтың тауышы көр, берәй мутлығы бешеп, кәйефе шәптер, ахыры.

– Иллә-мәгәр мыҡшы әҙәмһең дә инде, Зиннур Таипович, – тине хакимиәт башлығы, Камаловтың хәл-әхүәлен белешкәс. – Мин һиңә утрау һынлы утрау һоғондорҙом, ә һин? Мәгәристе ҡасан эсәбеҙ? Алпауыт булдым тигәс тә, минең ише ер ҡорттарына өҫтән генә төкөрөп ятыу ярамаҫ ине? Ниңә шымдың?

– Баҫып килгән бәләләрҙән арына алмағас, әлегә ҡәҙәре ул турала уйларға ла әмәл булманы, – тигән булды Камалов.

– Тормош бәләһеҙ булмай, Зиннур Таипович. Яҙмышыңа тәғәйен бәлә-ҡазанан аңдып та, ҡыуалап та ҡотолоп булмай. Уларға ҡаршы көрәштең берҙәнбер уңышлы ысулы – хәлдән килгәнсә күрмәмешкә һалышыу. Ҡыҫҡаһы, утрауыңды күргем килә. Мин хәйерсенең һүҙен йыҡмай, утрауыңда төтәп торған шашлығың, бер-ике ярты шарабың менән ҡаршы алһаң иртәгә, күңелемә хуш килер ине…

– Баш өҫтө, Василий Петрович. Тағы кемдәрҙе көтөргә?

– Минән башҡа тағы бер-ике кешене. Бар утрауға ашъяулыҡ йәйеү кәрәкмәй. Уныһы алда әле… Си ля ви!

Хакимиәт башлығының кәмәһе утрауға төртөлгәндә эш көнө тамам булып, күләгәләр һуҙыла башлаған мәл ине. Василий Петровичҡа эйәргән икәүҙе танығас, Камаловтың күңелендә шик уянды. Үҙҙәренә барып етмәгән ришүәтте ҡабаттан талапларға уйламайҙарҙыр бит? Тик тегеләрҙең, уны күргәс, ҡапыл ғына туҡтап, ҡайҙа ҡасырға белмәгәндәй, алан-йолан ҡарана башлауҙарын шәйләгәс, шиге таралды. Кем янына барғандарын белмәгәндәрме? Был – Василий Петровичтың сираттағы әкәмәте шикелле. Сысҡан уйнатҡан бесәйҙәй ҡыланырға итәлер... Нисек кенә булмаһын, табын артында ултырғанда ауыҙҙан сыҡҡан һүҙҙәрҙең шутлы булыуы мәғҡул.

Василий Петровичтың өҫтөндә иҙеүҙәре асыҡ аҡ күлдәк, бысаҡ йөҙөләй итеп үтекләнгән ҡара салбар. Маңлайында, муйынында тир тамсылары ялтырай. Һыу буйынан ярайһы уҡ текә ярға күтәрелгән тулы кәүҙәле тәбәнәк кешенең һулышы йышайғайны. Ул, итләс ҡулын биреп, хужа менән күреште лә аҡ япмалы өҫтәл янындағы түмәргә ҡунаҡланы.

– Йә, һал инде тиҙерәк, – тине ул Камаловҡа, өҫтәлдә торған кеүәҫ шешәһенә ымлап. Кеүәҫте ыңҡылдап бушатҡас, йомро ҡорһағын бәүелтеп, ғәйрәтле кикереп ҡуйҙы ла, баҫыуҙағы ике йомран һымаҡ, бер-береһенә арҡаларын биреп яр башында торған ике эйәрсененә ҡул иҙәне:

– Эй, хәстрүштәр, әйҙәгеҙ табынға! Хужа кеше һеҙҙе сыбыртҡылап ҡыуалаһа ла, ҡасырлыҡ ер юҡ бында!

Бергмандың усы лайлалы һалабаштай. Тирле танауынан бер туҡтауһыҙ шыуып ҡоларға янаған күҙлеге аша ҡарашын тотоп булмай. Цупконың ҡулы, өҙөлгән арҡандай, хәлһеҙ. Йәшел күлдәге, һоро салбары таушалып бөткән, әллә теге көндән бирле өҫтөнән һалмаған инде? Йөҙ-киәфәте лә трактор тапаған сепрәктәй, ни тиһәң дә, милицияға аңлатмалар биреү уйын түгел шул… Ҡыҙыҡ, утрауға килеп, йәшергән ҡапсығын тикшерергә форсаты булдымы икән? Теге көндө Таһир, Камаловтың ай-вайына ҡарамай, йәтеш булһын тип, ҡапсыҡҡа баҡалар тултырып, иҙән аҫтына кире тыҡҡайны…

Мангалға шашлыҡ теҙгән Таһир был икәүгә күтәрелеп тә ҡараманы.

Камалов табынды утрауҙың яр башында үҫкән ҡушҡайын ышығына ҡорғайны. Бынан ике ҡатлы йорт алдындағы биҫтә, ә унан ары, зәңгәрләнеп ятҡан күл аша, ағарып ҡаланың таш йорттары күренә. Утрауҙа еләҫ. Юҫығын юғалтҡан йүгерек ел, ни менән мауығырға белмәгән шуҡ малайҙай, әле бер, әле икенсе ағасҡа бәйләнеп, утрауҙы гиҙә. Ҡояш, аяҙ күктә ҡымшанмай торған

күперек болот артына йәшенеп, шаршау артында өҫ-башын йүнәткән кәләштәй, бирегә сығырға ашыҡмай.

Шишмәләй һалҡын хәмерҙе һимеҙ шашлыҡ менән оҙатып ҡуйғас, Василий Петровичтың ҡырыҫ йөҙө йомшарып, ҡарашы дымланды.

– Хозур, бик хозур, – тине ул, ултырған еренән тирә-яғына күҙ йөрөтөп. – Афарин, Зиннур Таипович, яңы мөлкәтең менән ҡотлайым, изгелеккә булһын!

– Рәхмәт, Василий Петрович, ауыҙығыҙға бал да май! Һәр саҡта ла иң ҡәҙерле ҡунағым булырһығыҙ!

– Бәхетең үҙеңдән алда йөрөйҙөр һинең. Күңелем хуш саҡты тап итеп, уңдың! Юғиһә, һинең ҡағыҙҙарыңа ҡултамғамды ҡуйыу түгел, уларҙы өҫтәлемә лә һалдырмаҫ инем. Беләһең мине…

Камалов эстән генә мыҫҡыллы көләмһерәп ҡуйҙы. «Күңелем хуш», имеш… Ошо утрауға ҡарата, һис шикһеҙ, бүтән иҫәп-хисабың бар һинең. Кемдеңдер юлын бутауың был. Һине беләбеҙ, ысынлап та…

Хакимиәт башлығы күрәләтә уға милицияны «һөсләтһә» лә, Зиннур Таиповичтың күңелендә Василий Петровичҡа асыу юҡ ине. Ҡайҙа ҡарама, ыҙғыш та талаш барған саҡта, быға байғошлоҡ йә йүнһеҙлек тип кенә ҡарарға ҡалалыр. Ҡайһы берәүҙәрҙең ҡылығына рәнйеһә лә, үс, кенә тота белмәй ул. Нишләйһең, Хоҙай бирмәгән холоҡто һатып алып булмай.

– Шуны әйт миңә, – тине Василий Петрович, хәйләкәр күҙҙәрен Камаловҡа төбәп, – ошо ике мөртәткә күпме ришүәт бирҙең?

Ул өҫтәл артында мыш-мыш килеп шашлыҡ сәйнәгән Бергман менән Цупкоға ымланы.

Бергман ауыҙындағы ашты сәйнәп йотто ла, танауынан шыуып барған күҙлеген бармағы менән төртөп, урынына ҡайтарҙы.

– Василий Петрович?! – тине ул үпкәсел тауыш менән, хакимиәт башлығына ҡаш аҫтынан ҡарап. Цупко, бер ни ишетмәгәндәй, ҡолаҡтарын елпелдәтеп, ашаныуында булды.

– Өнөңдө тыҡ! – тип екерҙе уға етәксеһе. – Зиннур Таипович, мин һиңә һорау бирҙем, буғай?

Цупко кинәт кенә, ниҙәндер һиҫкәнгән йомрандай, сәйнәүенән туҡтап, ҡатып ҡалды. Бергман, ауыр уфтанып, һауытына тултырғансы хәмер һалды ла, уны бер һелтәүҙән йотоп, артынан ҡабырға онотто.

– Ҡунаҡ булһаң – тыйнаҡ бул, тиҙәр беҙҙә, – тине Камалов, күҙҙәре менән хакимиәт башлығын быраулап. – Ғәфү итегеҙ, Василий Петрович, әммә мин, хужа булараҡ, һеҙҙең һорауығыҙҙы көн тәртибенән сығарам.

– Яуап алдым инде, – тип ҡунағы рыя ғына ҡул һелтәне. – Былар һымаҡ күрәләтә алдашмауың хуп. Ришүәт булған, минең өсөн шикһеҙ был. Милицияның йүнһеҙлегенән генә ҡотолоп ҡалғанһығыҙ. Козлов булдыҡһыҙлығы менән үҙен дә, мине лә, көлкөгә ҡалдырҙы. Бынағайыш, ошо утрау өсөн ришүәт бирелеүе бар ғәләмгә асыҡ, ә шуны фашларға тейеш хоҡуҡ һаҡлаусылар, бур артынан уҡталған ғәрип-ғөрәбәләй, ғауға ҡуптарыуҙан ары уҙҙыра алмай!

– Тотолмаған – бур түгел, – тип мығырҙаны Цупко, сираттағы иткә үрелеп.

Василий Петрович, уға яуап итеп, йоҙроғо менән өҫтәлде гөрһөлдәтте.

– Бур! – тип екерҙе ул, тегегә өҫтәл аша ташланырҙай булып. –Тотолмаған да бур! Сөнки ул – тотолмаған! Урлаған, әммә тотолмай ҡалған! Аңланыңмы? Ә һин, Камалов, улар ришүәт һорағас, ни өсөн миңә ялыу итмәнең? Хакимиәт башлығы ла былар менән бер өйөрҙән, тип уйланыңмы?

Зиннур Таипович өндәшмәй ҡалыуҙы яҡшы күрҙе. Шырпылай ҡапыл ғына тоҡанып киткән Василий Петрович, һауытындағы хәмерен бушатып ҡуйғас, аҡрынлап тынысланды.

– Немец халҡына һоҡланам, – тине ул, һәүетемсә әңгәмәгә күсеп. – Көслө, таҙа халыҡ. Эйе, уларҙың тарихында ла бик күп яманлыҡтар булған. Фашислыҡтары менән генә күпме халыҡты ҡырҙылар. Әммә һуғышып, үҙҙәре лә онталҡан хәленә ҡалдырылғайнылар бит. Көлдән ҡабат яралған әкиәт ҡошолай, ҡабат күтәрелделәр, ана! Япондар ҙа… ҡулдарынан сыҡҡан әйбер-тауарға һоҡланып бөтөрлөк түгел! Ә беҙ? Бер-беребеҙҙең кеҫәһен һәрмәргә генә оҫтабыҙ…

– Тормош шулай һәүетемсә генә тыныс дауам итһә, бер аҙҙан беҙ ҙә тәртипте, әхлаҡты алға ҡуйырбыҙ әле…

– Белмәйем, – тине Василий Петрович, ҡорһағындағы күлдәк төймәһен ысҡындырып. – Беҙгә тыныс йәшәргә биреүҙәренә ышаныс аҙ. Үҙең күрәһең бит, күпме ер, күпме байлыҡ беҙҙә?! Ә сик артында кемдәр? Күсмә ҡымырҫҡалар күсе тиерһең! Ә беҙҙә тыуым юҡ, халыҡ кәмей…

– Ғәскәрҙе көсәйтеп, яңыса ҡоралланырға ғына ҡала, – тип һүҙ ҡыҫтырҙы Бергман. Ул, әңгәмәнең бүтән юҫыҡҡа йүнәлеүенә һөйөнөп, теремекләнә башлағайны. – Илде баҫҡынсыларҙан һаҡлау өсөн берҙән-бер сара…

– Баҫҡынсыларға ҡаршы ҡорал беҙҙә бөгөн дә етәрлек. Ә бына һинең кеүектәрҙән һаҡланыр өсөн ниндәй ҡорал кәрәктер, миңә билдәһеҙ.

– Бәй, мин нишләгән?

Бергман, хакимиәт башлығының тел төбөн һиҙеп, тағы тымҫайҙы. Василий Петрович, хужаға һауытын һоноп, хәмер ҡойорға ымланы.

– Мәле еткәс, ракеталарҙы дошманға төбәп осорорға тәғәйенләнгән кеше теүешле төймәгә баҫмаҫ, тием.

– Баҫыр…

– Шикләнәм. Һеҙҙең ише бурҙарҙы элгәренән ауыҙлыҡламаһаҡ, ракеталар ҙа осмаҫ, мылтыҡтар ҙа атмаҫ. Сөнки улар, – Василий Петрович ҡайҙалыр ҡул иҙәне, – хәрбиҙәргә алдан уҡ ришүәт биреп, уларҙың ҡулынан тотасаҡтар.

– Һәйбәт тә баһа, – тине ауыҙына бер туҡтауһыҙ шашлыҡ тыңҡыслаған Цупко, төйөнөп, ашын йотҡас. – Һуғыш булмаҫ…

Хакимиәт башлығының ҡулынан осоп, ҡаҡ маңлайына тейгән йомро алманан Цупко артына ҡолай яҙҙы.

– Һуғыш булмаҫ та, тик һеҙ шул көндән башлап ҡытайҙарҙың сусҡа аҙбарҙарын, немецтарҙың урамдарын буҡтан таҙартырһығыҙ, – тине Василий Петрович, Камалов менән һауытын сәкәштереп. – Тамаҡ хаҡына… Үҙ илегеҙҙә… Рәсәйҙе ғүмер баҡый тиҙәктән бөлдөргән, – тип дауам итте ул, буш һауытын өҫтәлгә ҡуйғас. – Петр батша, илде үҙгәртеп ҡорам тип, ил башында торған әүәлге баярҙарҙы ҡыуып, урамда йөрөгән йыйын гидайҙарҙы дәүләт хеҙмәтенә алған. Улар, байлыҡ көҫәп, илде талағандар. Әлбиттә, «ил таянысы» хәйерсе булһынмы ни? Капитализм башланғас, тамам ялҡауланып, эшкә ашмайынса бөлгән дворяндар дәүләт әмәлдарҙары булырға ынтылған. Унда улар, эшҡыуарҙарҙы, ябай халыҡты талаған. Уларҙың төп кәсептәре эш кешеләренән ришүәт һығыуҙан ғибәрәт булған. Һөҙөмтәлә илде ихтилалға тарытҡандар. Революцияла большевиктарҙың ғәйебе юҡ! Бурлыҡҡа, коррупцияға бирелгән дәүләт әмәлдарҙары ғәйепле! Башыңды тарихсыларҙың бүтән сүпсары менән тултырмағанда, көн кеүек асыҡ был.

– Илде баҫҡан сир һеҙҙе лә урап үтмәгәндер, Василий Петрович? – тип аҫтыртын Бергман етәксеһенең «сөйәленә баҫты».

Василий Петрович керпеген дә ҡаҡманы.

– Эйе, миндә лә булды ундай гонаһ. Йәш инем – ас инем. Шуға ла һеҙҙе, күҙгә ҡарап алдашһағыҙ ҙа, үтә күреп, аңлап торам. Ҡара әле, Камалов, – Василий Петрович Цупко менән Бергманға ымланы, – минең менән утрауға бармаһағыҙ, эшегеҙҙән ҡыуам, тигәс, инәһенә эйәргән себештәй, эйәреп килделәр бында. Хакимиәтте баштан-аяҡҡаса буҡлап, мине, хакимиәт башлығын, хурлыҡҡа ҡалдырып та, был икәү, һис оялмай, һаман эштә ҡалырға өмөтләнәләр, – тип ул, таң ҡалған ҡиәфәттә, ике ҡуллап бот сапты.

– Беҙҙе эштән ҡыуырға законлы нигеҙегеҙ юҡ, – тип мығырҙаны Бергман.

– Камалов, ишетәһеңме, закон, ти? Закон бурҙар ышығына әүерелгән, ахыры. Ә намыҫ, әхлаҡ, оят тигән төшөнсәләрҙе берәй ваҡыт ишеткәнегеҙ бармы? – Василий Петрович урынынан тороп, кирелеп-һуҙылып алды. – Намыҫ, әхлаҡ булмаған ерҙә – закон да юҡ, – тине ул, өҫтәл аҫтына төшөп боҫорҙай булған ҡуштандарына, өҫтән генә ҡарап. – Янына арсый ҡуйып дөрөҫ иткәнһең, – ул мангал янында булашҡан Таһирға ымланы. – Бындай юлбаҫарҙар янына нисек һаҡсыһыҙ бараһың?

– Арсый түгел ул, дуҫым минең.

– Барыбер. Мент ҡайҙа ла арсый… Әйҙә, «китға»ңды әйләнеп, ҡарап киләйек.

Икәүләп утрауҙың арғы осона йүнәлделәр. Караптың бейек моронон хәтерләткән ҡая башынан бар утрау ус төбөндәгеләй күренеп тора. Ағастар араһында ташландыҡ йорттоң тишек-тошоҡ ҡыйыһы шәйләнә. Утрау мөйөштәрендәге ҡаялар зәңгәр сынаяҡҡа үрә ҡуйылған йомортҡаларҙы хәтерләтә. Ҡая башынан хозур күренеш асыла. Күл, алыҫта, зәңгәр офоҡҡа тоташып, шундағы ҡабарынҡы болоттарҙан сихри утрауҙар хасил итә. Камалов, ҡая ҡырласында үҫкән ҡарағайға тотоноп, түбәнгә ҡараны. Ҡая аҫтындағы һыу ярайһы уҡ тәрән булыуға ҡарамаҫтан, күл, энә ташлаһаң да күренерлек таҙа, яҡты ине. Бер төркөм табан балығы, ялҡау ғына йөҙөп, һыу үләндәре араһында күҙ яҙҙырҙы.

– Бик матур, – ҡулын түшенә ҡаушарып ҡая башында торған Василий Петрович ни ере менәндер Камалов ҡасандыр һүрәттә күргән бөйөк француз батшаһын хәтерләтә. Башында өсмөйөшлө кәпәсе генә юҡ. – Япон баҡсасыларына, төҙөүселәренә ҡушҡанда, был утрауҙы әкиәт донъяһына әйләндерергә була. Дөрөҫөн әйткәндә, бер мәлде үҙем дә уҡталып ҡуйғайным ошо утрауҙы алырға. Әммә, уны төҙөкләндереү бик күп сығымдар талап итәсәген белеп, кире уйланым. Утрауға электр уты тоташтырыу ғына ла кеҫәне тишерлек бит. Һинең хәлеңдән килерлек эш түгел был, Камалов. Әйт, кем һинең артыңда тора?

– Ҡатыным, – тип шаяртты хужа.

Василий Петрович, көлөмһөрәп, бармаҡ яናны.

– Һинең артыңда торғандарҙы эҙләп үҙәкте тет итһәм дә, тапманым. Һаҡ бул, Зиннур Таипович. Борсолам һинең өсөн. Онота яҙҙым, – тине ул шунда, Камаловҡа ҡулын һуҙып, – милицияла һиңә ҡаршы асылған тикшереү эшен бөгөн, енәйәт билдәләре тапмай, кире яптылар. Ҡотлайым!

– Ҙур рәхмәт, Василий Петрович. Һеҙҙән дә етеҙ, сос «ҡапҡасы» юҡтыр…

Ағас-ҡыуаҡтар араһынан йырмаслап, ҡаяға илткән һуҡмаҡта ике кеше күренде. Алдан килгән йәшерәген Камалов таныманы. Уның арттан килгәне тулҡынланып торған сал сәсле олпат ир ине. Камаловтың уны ҡайҙалыр күргәне бар, буғай.

Ул да булманы, Василий Петрович, ҡоласын йәйеп, килеүселәргә ҡаршы атланы.

– Семен Самойлович?! Күктән төшкән фәрештәләй, күҙҙәремә күренмәйһеңдер бит!

Рябиновский Семен Самойлович, имеш. Үҙәктә йөрөгәндә һөйләшеп-аралашмаһа ла, йыш ҡына күрә торғайны уны Камалов. Затлы костюм-галстугын һалып, еңелсә генә кейенгән идара етәксеһен ҡапылдан таныу ҙа еңел түгел ине. Утрауҙа түгел, урамда осратһаң да, иҫкә алмай янынан уҙып китерлек. Василий Петрович ҡына, Камаловты ғәжәпләндереп, бер ҡарауҙан сырамытып ҡалды һиммәтле танышын. Көтөп тормағандыр инде?

Йәш кеше үҙен, Рябиновский Артур Семенович, тип таныштырҙы. Улы, тимәк. Тик һын-ҡиәфәте менән атаһына оҡшамаған. Артур Семеновичтың сөмҡара сәстәре, яңы тыуған һарыҡ бәрәсен хәтерләтеп, бөҙрәләнеп тора, ҡоромдай күҙ-ҡаштары осло танауындағы ҡара күҙлеге артына йәшенгән, нәҙек иренле ауыҙ-мороно тирәләп үҫкән һаҡал-мыйығы ас яңаҡтарында һирәгәйеп, оҙон ҡыл-ҡыуға әүерелә. Буйы ла атаһынан бер башҡа бейегерәк. Себен тейһә лә сер итерҙәй серек интеллигент икәнлеге бар килбәтенә сыҡҡан.

Аталы-уллы Рябиновскийҙар был осрашыуҙы бөтөнләй көтмәгәндәр, ахыры.

– Ялда йөрөйөм, – тине атай кеше, ҡулъяулығы менән йөҙөндәге тирҙе һөртөп. – Улым да ялға ҡайтып төштө бына… Шуға, ваҡыт барҙа, тыуған төйәкте бер аҙ гиҙеп алырға булдыҡ.

– Хуп! Бик хуп! Тыуған ер йылыһы сит ил ҡыҙығынан мең артыҡ. Күрәһегеҙме, ниндәй матурлыҡ!

– Ризамын, Василий Петрович, – тине Семен Самойлович. – Бик йәтеш утрау.

Семен Самойлович шунан һуң ситкәрәк китеп баҫты ла улын үҙе янына саҡырып алды. Улар, тауыштарын баҫып ҡына, ҡыҙыу итеп гәпләшергә кереште. Атай кеше, ара-тирә ҡулдарын иҙәп, улына утрауҙы, йәйрәп ятҡан күлде, алыҫта, бейек йорттары менән ағарып торған ҡалаға күрһәтеп, нимәлер һөйләне. Артур Семенович, атаһы менән бер уйҙан икәнлеген белдереп, йыш ҡына баш ҡағып торҙо.

Василий Петрович, Камаловтың терһәгенә ҡағылып, теге икәүгә ымланы ла ниңәлер мут ҡына күҙ ҡыҫты. Шуҡ ҡиәфәтенә ҡарағанда, тегеләргә телен сығарып күрһәтергә лә әҙер ине ул. Бер ни аңламаған Камалов уның был ҡыланышын хәмер шауҡымылыр тип тапты.

Бер аҙҙан мөләйем йөҙ алған Семен Самойлович улар янына килеп баҫты.

– Бик йәпле тап килдегеҙ әле, Василий Петрович, – тине ул, алтын тирәсле күҙлеген танауына элеп. Уның әлегә ҡәҙәре ғәмһеҙ тойолған ҡиәфәте шунда уҡ эшлекле төҫ алды. – Бик мөһим бер мәсьәлә буйынса әйтер һүҙем бар һеҙгә. Минең улым илселектә эшләй, – Семен Самойлович, ҡулын артына ҡайырып, ҡая башынан тирә-яҡты битараф ҡына күҙәткән Артур Семеновичҡа ымланы. – Ул ҡалағыҙҙың иҡтисадына йәлеп итерлек бик яҡшы инвестор тапты. Әлбиттә, инвесторҙың да беҙгә ҡуйған шарттары етәрлек. Шуларҙың береһе ошо утрауҙы уға ҡуртымға биреүҙән ғибәрәт.

Василий Петрович вайымһыҙ ғына төҫтә Камаловҡа ымланы.

– Ул һорауығыҙ менән Зиннур Таиповичҡа мөрәжәғәт итергә тәҡдим итәм. Утрау хәҙер униҡы. Әлеге мәлдә шул алыш-бирештең мәғәрисен эсеп йөрөүебеҙ. Зиннур Таипович, – тип ул Камаловҡа бороладо, – хужа булараҡ, мәртәбәле ҡунаҡтарҙы табынға саҡырһаң, арыу булыр ине.

Семен Самойлович, күҙҙәрен ялтыр күҙлеге аша уларға алмаш-тилмәш күсереп, бер мәлгә аҙап ҡалды.

– Нисек инде? – тине ул һуңынан, тауышында ҡорос сыңлатып. – Василий Петрович, был мәсьәлә тураһында һеҙҙең менән күптән үк һөйләшкәйнек бит. Утрауҙы бер кемгә лә бирмәҫкә, кәрәге еткәнсе янда тоторға, тип?

– Беләм. – Василий Петрович, тауышын күтәреп, әңгәмәсеһенә ҡаршы бороло баҫты. – Мин тапҡан инвесторҙың юлын ҡыйып, үҙегеҙгә һалдырып алырға маташыуығыҙҙы ла беләм, Семен Самойлович! Улар бында эш башлағайны инде. Һеҙ ниндәйҙер мәкерегеҙ менән туҡтаттығыҙ уларҙы! Улығыҙҙы, Артур Семеновичты, минең урынға ҡоҙалауығыҙ ҙа, әлеге инвестицияларҙы уға эйәртеп килтерергә тырышыуығыҙ ҙа билдәле миңә!

Семен Самойлович, тирләгән күҙлегенең быялаларын еүеш ҡулъяулығы менән һөртөп, бер аҙға тын ҡалды. Уның ҡулдары ҡалтырай ине. Тирле ҡулъяулыҡ күҙлекте уғата яғаландырҙы ғына. Артем Семенович, кеҫәһенән аҡ сепрәк табып, атаһына бирҙе.

– Һеҙ, Василий Петрович, ысынлап та, был эштең мөһимлеген аңлап еткермәйһегеҙ, ахыры, – тине Семен Самойлович, әңгәмәсеһенә ҡарамай ғына. – Ҡыҙғаныс хәл. Утрауҙы бүтәнгә биреп, үҙ ҡулығыҙ менән ҡалаға килергә торған аҡсаға кәртә ҡорғанһығыҙ.

– Миңә – барыбер,– тип Василий Петрович сертләтеп кенә төкөрөп ҡуйҙы. – Мин еккән атҡа ултырып, мин таҡырайтҡан юлдан елдерергә булғайнығыҙмы? Барып сыҡмаҫ! Күтегеҙҙән килһә, артығыҙҙан һары майығыҙ аҡҡансы тапанып юл һалығыҙ тәүҙә, һуңынан үҙегеҙ егеп – үҙегеҙ ҡыуалағыҙ!

– Ғәфү итегеҙ, Василий Петрович, әммә һеҙҙең был башбаштаҡлығығыҙ хаҡында үҙенә еткерергә мәжбүр буласаҡмын, – тип Семен Самойлович һуҡ бармағын күккә төрттө. – Һеҙҙе әлеге вазифағыҙҙа артабан тотоу йәмғиәткә файҙа килтермәҫтер… Йәштәргә юл асыу фарыз.

Василий Петрович хәйләкәр генә көлөмһөрәп ҡуйҙы.

– Ә мин унда булдым инде, – тине ул, күҙҙәре менән юғарыға ымлап. – Улар ҙа һеҙгә ҡарата тап шундай фекер ишеттерҙеләр. Ә йәштәргә килгәндә, – хакимиәт башлығы утрау хужаһына бороло, – таныш булығыҙ! Зиннур Таипович Камалов тиҙҙән ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнәсәк!

Камалов, ишеткәненә ышанмай, аяғы аҫтындағы ер күскәндәй тойоп, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡарағай олонона тотондо. Йөҙө сөгөлдөрҙәй булған Семен Самойлович, бер һүҙ әйтмәй, алпан-тилпән баҫып, ҡая башынан түбәнгә атланы…

Табынды шашлыҡтың әскелтем төтөнө сорнаған. Бергман, үҙе ултырған түңгәктең дауамы һымаҡ булып, өҫтәлгә ялпашып уҡ төшкән. Ҡушҡайын төбөндә Цупко ята. Тик Таһир ғына, ҡарағастай төҙ баҫып, төтөн эсендә сихырлыҡ итә.

– Теге, – тине ул, Цупкоға күрһәтеп, – шыпырт ҡына йортҡа барып килде. Шунан һуң бер туҡтауһыҙ хәмер һемерә…

Камалов һауытҡа хәмер һалып, дуҫына һондо.

– Белдем уларҙың бында килерен, – ҡыуаҡ артынан сығып, салбар төймәләрен элеп аҙапланған Василий Петровичтың йөҙөндә үсле кинәнес балҡый. – Иллә ҡаптырҙым тегеңә. Ух! Үсем ҡанды. Ҡана, Зиннур Таипович, һал хәмереңде, эсәйек, алда ғүмер бар әле…

Шунда Камаловтың кеҫә телефоны шылтыраны. Сати…

– Рөхсәт бирҙе һеҙгә, – теге остағы ҡыҙҙың тауышы йыһандан ишетелгән сихри моң һымаҡ булып ишетелде иҫерә башлаған Камаловҡа. – Көҙгә тиклем дүрт яғығыҙ ҡибла…

*(Аҙагы бар.)*



**Таңһылыу**
**ҒӘЙНУЛЛИНА**

# ҠАРТЫМДЫ ЮҒАЛТҠАС...

### ХИКӘЙӘ

Хоҙайға рәхмәт, ҡартым менән йәшәгән нигеҙем ҡотло ла, уңышлы ла булды: балаларым ауырыманы, мал-тыуарыбыҙ ишле, хатта ҡаҙҙарыбыҙ ҙа теүәл бәпкәләрен. Баҡсабыҙ ҙа ишелеп унды. Әллә үҙебеҙ йәшәүҙән йәмтәм табып, ихлас йәшәнек, әллә бәхетле нигеҙебеҙҙе Аллаһы Тәғәлә үҙ итеп, үҙе насип әйләне беҙгә. Хикмәт бында ғына түгелдер, ә ғүмер буйы бер-беребеҙҙе ихтирам итеп йәшәүебеҙҙәлер, тип уйлайым мин бөгөн. Вафатынан бер нисә көн элек мәрхүмкәйем: «Әсәһе, яҡыныраҡ кил әле эргәмә, әйтер һүҙем бар», – тип саҡырып алды.

– Ҡыуманым түгел, ҡыуҙым мин был донъяның артынан. Уның менән бөгөн бер ниндәй ҙә алыш-бирешем юҡ. Фанилыҡтың да үпкәһе юҡтыр тормошома ҡарата. Әжәлдән ҡурҡмайым. Иң ҙур байлығым – һеҙ. Балаларыбыҙ һәйбәт. Улар алдында йөҙөбөҙ яҡты. Бер кемгә лә ҡыҙыллыҡ та, ауырлыҡ та килтермәнек яҡшылыҡтан башҡа. – Рәхмәт һүҙҙәрем шул булыр тигән һымаҡ, ятҡан яҫтығын һыйпай-һыйпай, ауыр һулап ҡуйҙы ла тынып ҡалды. Өйҙәге һиллекте мин боҙҙом:

– Үҙең донъяны аҡыллы итеп көтә белгәс… Ҡаҡманың, һуҡманың, эсмәнең, балаларҙы үҙеңә ылыҡтыра белдең. Ни һөйләһәң дә, ни эшләһәң дә килеште үҙеңә.

– Бөтә нәмә кешеһенә күрә була ул. Тормоштоң дилбегәһен ҡайырып, шаҡарып тотҡанда, һин киҫкен боролоштарҙың ипле һәм итәғәтле хужабикәһе була белдең. Ошо бәләкәй генә ҡулдарың менән нескә һәм изге хистәреңде ҡушып бешергән аштарыңды кемдәр генә ауыҙ итмәне. Бөхтә, өҫтөнә туҙан ҡундырмай оҫта итеп ойоштороған зауыҡлы йәшәйешебеҙҙе, көткән донъябыҙҙы күреп хайран ҡалғандар әҙ булманы бит. Шуға ла тупһабыҙ рәхмәтле, – тип

---

*Таңһылыу Ғәйнуллина (1948) Сибай ҡалаһында тыуған. Сибай педагогия училищеһын, Магнитогорск педагогия институтын тамамлай. Оҙаҡ йылдар мәктәптә, Сибай ҡала радиоһында мөхәррир булып эшләп, хаҡлы ялға китә. Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы.*

тарамыш ҡулдарымды һөйөргә иткәйне, әммә ҡулдары тыңламаны зиһенгенәһен. Әжәл яҡынайыуын һиҙепмелер, сыҡмаған йәнендә энә осондай ғына ҡалған көсөн йыйып, һуңғы һүҙен әйтте: – Төпсөк улыбыҙ ырыҫлы нигеҙебеҙҙе етемһерәтмәһен, ташламаһын, һәр саҡ төҙөк тотһон, бәхет юрамай ул ҡаралмаған нигеҙ…

Сараһыҙлыҡтан иңрәмәй саҡ-саҡ түҙеп торам, ярай әле, күҙҙә йәш кипкән. Быуындарым ҡалтырай, йөрәгем туҡтар төҫлө. Диҡҡәт менән тыңлайым, тыңлаған һайын ғәжәпләнәм. Бәхилләшкәндә һәр һүҙе зиһенемә яҡты нур булып урала. Һөйөшөп, яратышып ҡауышҡайныҡ. Нығыраҡ мин яраттым, ахрыһы. Хатта ошо минуттарҙа ла уның йәне миндә кеүек. Икебеҙҙең уртаҡ бер йәнебеҙ бына-бына беҙҙе әллә ҡайҙарға, йыһан киңлегенә алып осор, һәм беҙ парлашып ер йөҙөнән юғалырбыҙ һымаҡ. Заманында хәләлем күптәр өсөн буй етмәҫлек хыял ине. Бына бит, ел-дауылдарға ҡаршы тора алмай бирешкән ҡая кеүек, аҙ ғына ваҡыт арауығында гөрһөлдәмәй ҙә, селпәрәмә килеп, тауыштынһыҙ күҙ алдында яйлап ыуалды ла ҡуйҙы. Ҡасандыр айбарланып, ғәйрәтләнеп төҙөгән яландай донъяһында, сәселгән юнысҡылай, күҙгә күренер-күренмәҫ булып ята. Ябынған юрғанының аҫты буп-буш. Ғүмеркәйҙәр нисек матур уҙмаһын, әжәл үткер ҡылысын ялтанлата башлаһа, үкендерә икән…

Шул һуңғы һүҙҙәренән һуң бер кемде лә эргәһенә саҡырманы ла, һис берәүгә өндәшергә теләмәне лә. Иге-сиге булмаған уйҙарын үҙе менән бергә алып китте мәңгелеккә. Уны ерләгән мәлдә түшәк тартып ятып ҡуймайым тип ҡурҡтым. Кәңгерләй-тәнтерәкләй кеше ыңғайына йөрөнөм. Һуңғы юлға оҙатыу сараларын уҙғарыу – үҙе бер афәт. Хатта аҙаҡ ҡартымдың баҡыйлыҡҡа күсеүен белмәйерәк ҡалған туған-тыумаса, тиң-тош, таныш-белештәрҙең хәлемде белешергә килеүе ауыр һынау булды. Үлем язаһы тураһындағы һөйләшеүҙәр арттыра төштө былай ҙа ауыр хәсрәтемде. Тыуымдан ҡалмаған, үлемдән ҡалмайһың инде. Әммә ләкин уның зәһәр уғы ҡаҙалмай торһон әле тереләргә.

Көндәр бер-бер артлы үтеп, килеп-китеп торған кеше таралып, яңғыҙ ҡалғас, бөтөнләй мөҙөрәнем мин. Шулай бер көн бабай барҙағы кеүек аш-һыу әҙерләмәксе булдым, балаларҙың эштән ҡайтыуына. Аҡылымды кәүҙәм тыңламай: һауыт-һаба ҡулымдан оса, тегенеһен тапмайым, бынеһын онотам, яндырам, көйҙөрәм. Тышҡа сыҡһам, тигеҙ ерҙә абынып йығылам. Ҡулға эш бармағас, бабай бүлмәһенә инеп яттым. Серем иткәнмен әҙмелер-күпмелер. Балалар ҙа ҡайтҡан эштән. Ғүмер буйы йүгерә-атлай йөрөп эшләгән эштәремде нисәнсе көн инде башҡара алмай аҙапланам. Әйтерһең дә, миңә ҡушылған көндәлек планды үтәмәйем, ғәйеплемен. Йәнә бөгөн шәмбе – мунса яға торған көн. Әй, эттәгенәһе, былай аяҡ-ҡулымды күтәрә алмай ятһам, тағы ниндәй хәлдәргә төшөрмөн, билдәһеҙ.

Килен менән тәүге көндәрҙән үк ярашып, татыу йәшәнек. Әсәле-ҡыҙлы кеүек. Алсаҡ, эсендәге тышында. Ваҡ мәсьәләме, оло ваҡиғамы, осраҡлы хәлме – икебеҙ бер фекерҙәбеҙ. Тик һуңғы ваҡыттарҙа, бабайҙың вафатынан һуң, ҡартайған да тыртайған тигәндәй, үҙем эшкә ярамаҫ булып киткәс, өйҙәгеләрҙең тын алыштары икенсерәк, айырыуса киленем рыяраҡ. Ошоғаса ауырлығымды һалғаным юҡ балаларға. Һауығып китеүемә өмөтөм ҙур. Бер көн төнөн тәҡәтһеҙ ауырып киттем, бәхетемә күрә, киленем уянды нисектер. «Тиҙ ярҙам» машинаһын саҡыртты. Укол һалып, дарыу эсереп киттеләр. Бер нәмә белмәй йоҡлағанмын. Уянып китһәм, башым тыныс, элекке һау хәлемә

ҡайтҡан һымаҡмын. Торҙом. Тамаҡ кипкән. Сәй әҙерләп эсәм, йәнәһе.

Йоҡо бүлмәһенән киленемдең: «Ҡәйнәмдең балаһы бер һин генә түгел, башҡалар ҙа ҡараһын»,– тигән таңғы асыҡ тауышы ҡолаҡҡа салынды.

– Ни һөйләйһең һин? Ошоға тиклем кем тотоп торҙо донъяны?!

– Йылдан йыл йәшәрмәй инде, ҡартая ла баһа. Ярай әле, ҡайнымды ҡарарға эшкинде.

Килен менән улымдың һөйләше өҙөлдө. Карауатынан да тормаған ейәнем тауыш бирҙе.

– Өләсәй, тәүге пар лекцияға һуңлатма мине. Аш-һыуыңды өҫтәлгә теҙә торһаң да була.

Үҙем яман өйрәттем шикелле барыһын да. Кисен иртәнге ашты әҙерләп ята торғайным һәр саҡ. Бына хәҙер үҙем йөрөйөм төртәңләп. Килен эштә эсә иртәнге сәйен. Ҡалғандары ҡапҡыланылармы берәй нәмә, юҡмы – сығып та йүгерҙеләр. Ниһайәт, саф һауаға сыҡтым. Ҡала ситендә шәхси хужалығың менән йәшәгәс, һәр нәмәгә үҙ ҡулың тейелмәгәнлеге күренеп тора. Ҡайҙа тотонһаң – шунда эш. Аҙбар-ҡура ишектәре шар асыҡ. Һөт-ҡатығы ла нисек бар, шулай ултыра.

Бөртөкләп йыйылған донъяң йәндәй йәл. Кеменә булһа ла шулайҙыр ул, тип үҙемә үҙем һөйләйем.Тыңлаусы булһасы.

Ҡапҡа keләһе келтерәне.

– Хаят инәйем һуңғы ваҡытта күренгеләмәй ҙә.

– Ни хәл, иҫәнлекме, шәплекме?

– Хоҙай ҡушҡанса, әлхәм.

– Әйҙә, түрҙән үт, Сафура.

– Әстәғәфирулла, солан күтәрмәләре үҙеңдекенә оҡшамағансы – ҡаҡашып бөткән. Ҡаҙ өмәһе үткәрҙегеҙме әллә?

– Юҡсы. Ана бит, ҡаңғылдашып тора ҡошҡайҙарым. Күрше хаҡы – Тәңре хаҡы. Бына ошо емде һирп тә алдарына һыу ҡуй.

– Киленеңә ни булған?

– Унан алда улым, ейәнем бар бит әле.

– Киленеңә һүҙ тейҙермәйһең инде… Ир-ат күрмәй ул бар нәмәне. Ир – баш, ҡатын – муйын. Ғүмер буйы текә йөрөмәһен, борһон муйынын. Өс бөртөк өйлө, бөтөп барған ауылдан килдем, тимәй ул хәҙер. Алдында өлтөрәп торған ире. Балалары ҡараулы. Сығып китһә лә, килеп инһә лә – донъяһы саф-ялт. Нишләп ул һәйбәт килен булмаһын, һәр хәлдә мин түгел инде.

– Ниңә улай тиһең? Һинең дә донъяң гөл кеүек.

– Азат менән ҡауышырға йөрөгәндә, һеҙ бит ҡамасау булдығыҙ. Йәнәһе, ауылдан килгән ҡыҙ егәрлерәк, яҡшыраҡ, матурыраҡ, һыйыр һауа, имеш. Яманмы-яҡшымы, яҙғаны менән көн итәм.

– Сафура, егермесе быуатта булған хәлде онотторға күптән ваҡыт.

– Мин түгел, әсәйем онотмай әле беренсе мөхәббәтен. Егете менән икеһе ҡалаға тимер юлын һуҙыуҙа ҡатнашҡандар. Тәүге поезд килеү менән өйләнешергә вәғәҙәләшкәндәр. Йәнәһе, ике байрам бер юлы. Тарихи поезд ГПТУ-ға вагон-вагон ҡыҙҙар тейәп килгән. Араларында кемдәр генә булмаған, әлбиттә, негрҙан башҡаһы: сыуашмы, маримы, сирмешме – тағы әллә кемдәр. Әсәйемдең мөхәббәт ҡошо осҡан шулар яғына. Юҡҡа һөйләмәнем күптәнге ваҡиғаны. Әсәйемдең яҙмышын ҡабатланым мин. Бында һеҙҙең ғәйеп юҡ. Тик былай ғына, һүҙ ыңғайында.

– Ни булһа ла булды инде, былтыр ҡыҫҡанға быйыл илашмайыҡ. Атта ла, тәртәлә лә булғандыр.

– Инәй, мунсамды томалап килдем. Әсәйем килгән, ваннаны өнәмәй бит ул. Ҡайын миндеге менән икегеҙҙе сабындырырмын. Бал, май менән һыйлармын. Ҡыҙҙар һымаҡ осорта баҫып ҡайтып инерһең өйөңә. Шәфҡәт туташы бит мин.

– Иҫ тигән нәмәм булмаһа, онотҡанмын.

– Ҡайҙа инде мине иҫләргә.

– Күтәрмәнән дә ары китә алмай торам. Рәхмәт мине ҡайғыртҡаның өсөн.

– Һауыҡҡас әйтерһең рәхмәтеңде. Өс өй аша ергә ни. Мине эҙләп улым килеп еткән, үҙе рулдә. Йәтеш булды. Әйҙә-әйҙә, өсөбөҙ бер кешеләй булмаһаҡ, оят.

Ай-вайыма ҡуймай, алып ҡайтып китте мине Сафура үҙҙәренә. Кеше таяныр, ышыҡланыр кешеһе булғанда көслө. Мунса төшөп, үлән сәйҙәре менән һыйланыу быуындарыма һығылмалыҡ, күҙемә яҡтылыҡ, башыма асыҡлыҡ индергәндәй итте. Мине өйөмә тиклем оҙата килгән Сафура: «Элекке матур хәлеңә ҡайттың, Хаят инәй. Күҙ теймәһен», – тине.

– Ғүмер буйы йүгерә-атлай йәшәнем. Бабайҙан ҡалғас, аяҡтарға әллә ни булды. Ҡулдың да көсө самалы. Аяғыма баҫтырҙың, ҡулыңдан һөйөн, рәхмәт.

– Һеҙҙең ҡапҡа төбөнә әсәйемдең йәшлектәге «Сирмеш»енең «Джип» машинаһы туҡталған.

Мин ҡурҡып киттем. Шөбһәләндем. Имен-һау ғына булһын йән киҫәккәйҙәрем.

Беҙ өйгә килеп ингәс, ҡара һөрөм баҫты киленемдең йөҙөн. «Больницағамаҙар һалып ҡуйҙылармы, тип хәүефләнһәк, ҡәйнәмдең үҙ врачы бар икән дә баһа,– тип шелтәлгәндәй итте лә, артынса уҡ хәйләкәр йылмайып, тауышын йомшарта төштө: – Малды һатып алыусы табылды. Алыусыһы барында һатып ҡалайыҡ. Бөтә урамға яр һалдырып, баҡырттырып торҙорғансы», – тип эсендәге ҡыуанысын йәшерә алмай, шулай дауам итте ул артабан.

– Кем һата… Мал һатыу тураһында уйлаған юҡ.

– Икебеҙ ҙә һыйыр һауа алмайбыҙ. Эш итергә кәрәк бит малдың ағын.

Мин һүҙһеҙ ҡалдым, улай ғына ла түгел, хатта ебеп төштөм. Көс-хәлемде йыйып һорай ҡуйҙым:

– Азат нимә тиер.

– Ул ҡаршы тороп ҡайҙа барһын. Ейәнеңдең уҡыуына ла түләрлек аҡса кәрәк. Аҡса түләмәйенсә имтиханға индермәй ыҙалаталар ҙаһа.

Шул саҡ һүҙһеҙ ултырған «Сирмеш»: «Йә, һатаһығыҙмы, юҡмы? Сауҙалашайыҡ та, аҡсаны ташлайым өҫтәлгә. Үҙемдеке итеп ҡыуып алып сығып та китәм малдарҙы. Шуның менән вәссәләм…» – тип сабырһыҙланды.

– Бабайым бесәнен дә тейешенсә әҙерләп киткән. Ҡайһылай булһа ла һауырмын үҙем. – Сафураға әйләнеп: «Зинһар, ярҙам ит. Мал ҡараған мәлдә килерһең: иртәле-кисле. Азатым Себер һынлы ерҙән ҡасан ҡайта әле ул. Уртаҡ булыр ағы», – тип ялбарыулы ҡараш ташланым.

Ялтан-йолтан ҡаранған киленемдең күҙҙәре ҡырыҫ, һалҡын ине. Элегерәк күҙем бәйле булғандыр, ахырыһы. Шулай булмаһа, маҡтаулы киленемде бөгөн танымай торор инемме? Юҡтыр. Шул саҡ ейәнем уҡыуҙан ҡайтып инде лә: «Ура, өйөбөҙҙөң ҡото һауыҡҡан», – тип һөрән һалды.

– Юҡ әле, улым, хәлем мөшкөлөрәк. Һин дә имтихандарыңды бирә алмай йөрөйһөң икән.

– Нисек? Аңламайым.

– Атайың уҡыуыңа аҡса түләмәгән түгелме?

– Беҙҙең тоҡомдағы ирҙәр типһә – тимер, баҫһа баҡыр иретерлек. Ундайҙар үтескә, кредитҡа йәшәмәйҙәр, ти атайым. Ул алдан уҡ өс йылдыҡын бергә түләп ҡуйған. Минең атай донъя йөҙөндә берәү. Өләсәй, ниңә улай тиһең ул? – тип тәтелдәне ейәнем.

Ниңәлер уйҙарым буталды. Киленем өнһөҙ ҡалды, әммә, уйланып торғандан һуң, өҫтәп ҡуйҙы: «Түләһә яңы түләгәндер…»

Азатым эшсән булып үҫте. Атаһын да, мине лә берҙәй үк тыңланы. Һүҙебеҙҙе йыҡҡанын һис хәтерләмәйем. Ошоғаса киленемә тел-теш тейгәне юҡ. Бабайым: «Бер тапҡыр Азатты күндерҙең, тыңлаттың – шул еткән. Артабан ҡыҫылма, йәшәһендәр үҙҙәренсә. Тормош үҙе өйрәтер, донъя аҡылы киңерәк һәм тәрәнерәк», – тиер ине яйы сыҡҡан һайын. Етмеш ете йыл оҙонлоғондағы ғүмер ептәрен тағатып уйланһам, йәшәгәнмен икән ҡартым өсөн аҫыл биҙәк миҫалында. Әйтерһең, кисә генә түребеҙ йән рәхәте – тәхет, нигеҙебеҙ бәхет ине…

Үҙ уйҙарым менән мауығып ултырған мәлдә, Азатымдың үҙ бүлмәһенә инеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Ҡатыны менән ҡайһылай күтәренке кәйеф менән берсә өй яңғыратып көлөшәләр, берсә тып-тыныс ҡалалар. Шул һиҙелә: киленем тырышып-тырышып нимәлер аңлата. Азаттың тауышы һанда-һаяҡ сығып ҡала. Һағынышҡандарҙыр бер-береһен.

Эңер төшөр алдынан ихатаға сыҡһам, «Сирмеш» һыйырымдың мөгөҙөн арҡанлап бәйләп маташа. Мин, иҫәр кеше һымаҡ, уның арҡанына йәбештем.

Азат улым йүгереп килде:

– Әсәй, был ни эшләүең, һиңә еңеллек булһын өсөн тырышам бит мин, – тип өндәште ул, ҡото осоп.

– Малдан бик ҡотолғоң килгәс, әйҙә, һинеңсә булһын, тик уларҙы Сафураға һатайыҡ. Ул мал йәнле.

«Ҡәйнәм ҡыҙыҡ ҡына инде, кем алһа ла ярамағанмы. Аҡсаһын бирһәләр, булды. Сафуралар ҡайҙан алһын аҡсаны», – тип киленем килеп ҡыҫылды шул саҡ. Мин дә оҙаҡ уйлап торманым:

– Әҡсән дә Себерҙә эшләй, Сафура ла икене өс итергә әҙер…

Мал һатыу тураһындағы тәүге етди һөйләшеү ошолайыраҡ тамамланды.

Беленер-беленмәҫ йәйге таң һыҙыла. Тәҙрә төбөндә үҫкән муйылдарға бер-бер артлы сыр-сыу булып ҡунған ҡоштар тыуаһы көндөң ҡояшлы, йәмле булаһағына ишаралай. Күңелемде әрнеткәне шул: бер туҡтауһыҙ һыйырым баҡыра. Ҡулымда көсөм булһа, шыуышып барып һауыр инем дә бит. Йәш саҡта йоҡонан туйған мәлдәр була микән? Бигерәк тә таңғы йоҡо тәмле. Киленем дә йәш түгел: ул да ҡырҡты уҙған. Үлеп йоҡлап ята микән ни?

Һуҡырҙың теләгәне – ике күҙ, тигәндәй: «Инәй, биҙрәләрең ҡайҙа?» – тигән тауыш ишетелде соландың тышҡы яғынан. Мин ятҡан килеш: «Синдектә, синдектә», – тип ҡысҡырам, ләкин тауышым сыҡмаған һымаҡ. Тора алмай аҙапланам үҙем. Мин иллә-аллаға тороп баҫҡанда, һыйырҙы гөбөрҙәтеп һауып ултыра ине инде Сафура. Йорт-ҡурамды йәлләүҙән йәшкә тулды күңелем. Сафура: «Инәй, ирем, Әҡсән, Себерҙә – вахтала, уның менән кәңәшләшмәйенсә һатып ала алмайым малыңды. Теүәл бер айҙан һуң ҡайта, ә былай малдарыңды ҡарашырмын», – тине. Шул саҡ киленем, ҡатаһын ҡарп-ҡорп һөйрәп, туҙған сәсен төҙәтә-төҙәтә, ихатанан сығып барған Сафураны ҡыуып етеп, әрләшергә кереште. «Йәшлегеңдә ярай алмағаныңды, хәҙер килештерә алмаҫһың», фәлән дә төгән… Урам тышында килендең ҡулын болғай-болғай артабан ни һөйләгәндәрен ишетмәнем. Ә шулай ҙа: «Һыйырҙы һиңә һатмайбыҙ», – тигәне

ҡолағыма ап-асыҡ салынды. Был ни ғәжәп, тормош арбаһын бер төптән тарта инек тә баһа. Донъябыҙҙың ҡотон ҡартым үҙе менән алып китте микән әллә? Улай тиһәң, донъяһын ҡыҙғанманы балаларынан.

Киске сәй мәлендә киленем башын түбән эйеп, шымтайып һәр беребеҙгә сәй яһаны. Айырыуса миңә йүнәлтте иғтибарын. Әле тегенеһен, әле быныһын эргәмә өйөп: «Ауыҙ ит, ҡәйнәм, Себер күстәнәсен», – тип сутылданы.

– Әсәй, Сирмештәргә һатайыҡ малды бесән-уты менән. Хаҡын да арттырып түләмәкселәр, – тип етди ҡиәфәттә һүҙ ҡатты улым.

– Әсе булһаң, төкөрөрҙәр, тәмле булһаң, йоторҙар, тигәндәй, өҙөп кенә әйтә алмайым. Ҡайтһын әле Сафураның ире Себерҙән. – Килен, ҡулындағы сынаяғын сайпылдыра-сайпылдыра, саҡ-саҡ түкмәй ултыртты батмусҡа. Түңәрәк матур йөҙө аҡлы-ҡыҙыл тимгелдәр менән ҡапланды.

Улым:

– Әҡсәнде вахтала мин алмаштырам бит. Уның ҡайтыуын көтһәк, бик оҙаҡ. Сафураның донъяһы ҙур. Бүлгеләнә алмаç ике яҡҡа, – тине.

– Кем-кем, ул өлгөрә. Малымдың тоҡомон илле йыл үрсетәм, шуға ла йәнем кеүек күрәм. Тик Әҡсән аҡса эшләп ҡайтһын. Минең өсөн көнөнә ике тапҡыр Сафура менән аралашыу – күңелемә дауа. Һөйләһә – һүҙе тәмле, эшләһә – эше ырамлы.

Малдарым бөтөнләйгә Сафураға эйәләште: ҡойроҡ-мойроғон да һелтәмәй, хатта аяҡтарын да алмашлап баçмай, нисек торған шулай һауҙыра. Мал да аңлайҙыр үҙ хәлен.

Ниһайәт, Сафураның ире Себерҙән аҡса эшләп, имен-аман әйләнеп ҡайтты, ә Азатым уның урынына юлланды вахтаға. Балалар итәктә һөйҙөрә, итәктән төшһә, көйҙөрә, тигәндәре бермә-бер раçтыр. Бына хәҙер һәр берeһенең үҙ юлы, үҙ маҡсаты, үҙ ғәме.

Ейәнем Хамматтың донъяға килеүенең тәүге минуттарынан алып һыу индерҙем, доғалар уҡып, аҡ биләүгә һалып үҙем биләнем. Элек-электән кемде һөйләһәм йәки уйлаһам, шул күренә торған. Хаммат ҡайтып инде.

– Тәмле, яңы бешкән икмәк еçтәре таралған өйгә. Өләсәй, һин булмаһаң, ни эшләр инем икән был донъяла.

– Ҡуй, улай тимә. Мин инде оло, бөгөн бармын, иртәгә – юҡ. Һинең иң яҡын кешеләрең – әсәйең менән атайың. Ожмах әсәйҙәрҙең аяҡ аçтында, тигәнде һис бер ҡасан да онотма, улым.

– Минең әсәй, атай өйҙә булмаһа, – көтөп алған ҡунаҡ…

Ейәнем үҙен ныҡ яратҡанымды һүҙһеҙ ҙә тоя, ахырыһы. Шуға ла күргән-белгәнен, оҡшаған-оҡшамағанын түкмәй-сәсмәй һөйләй торған ғәҙәте бар. Һәр ваҡыт түгел, әлбиттә. Бер көндө һис уйламағанда шаҡ ҡатырлыҡ хәбәр ысҡындырмаһынмы:

– Өләсәй, беҙ ҡапсыҡта ятмай, тигәнде ишеткәнең бармы?

– Мин ишетмәгәс, уны кем ишетергә тейеш һуң?

– Әсәйем эшкә китһә лә, ҡайтһа ла, һәр ваҡыт таксиҙа елдерә.

– Ҡала ситендә йәшәгәс. Уның ни ғәйебе?

– Атайым Себергә юлланыуы була, әсәйем Әҡсән ағайҙың иномаркаһында үҙенекендәй күреп ултырып йөрөй.

– Улар элек-электән яҡшы таныштар ҙа.

– Эй, өләсәй, әлеге йәшеңдәсә, бер ҡатлы бала һымаҡ, кем нимә әйтә шуға ышанаһың. Быны аңлауы – еңел һәм ҡыйын. Шул уҡ ваҡытта ҡурҡыныс. Ишетәһеңме, өләсәй...

Элегерәк Сафураның әсәһенән ишеткәнем бар ине. «Киленең йәш сағында

башта Әҡсән менән йөрөнө, һуңынан Азаттың башын әйләндерҙе ләһа» тигәнен ҡолағыма элмәгәйнем. Үҙемдең дә Азат менән Сафураның бергә булмауына ҡыҫылышым булғас, иғтибар бирмәнем уның һүҙҙәренә. Уйлаһаң, уй ысынға әйләнә икән. Сәғәте, минуты менән Әҡсәндең өр-яңы еңел машинаһы беҙҙең ҡапҡа төбөнә туҡтамаһынмы! Киленем йүгерә-атлай өйгә килеп инде лә:

– Төшкө ашҡа бер сәғәт ваҡыт бирелә, һис бер нәмәгә өлгөрөп булмай, – тип һөйләнә-һөйләнә, залдағы көҙгө алдына баҫты. Ҡояш яҡтыһында күҙҙең яуын алырҙай нур балҡытҡан зиннәтле ташлы алтын алҡа, шундай уҡ балдаҡ кейеп, ҡәнәғәтлелек тойғоһонан көҙгө алдында бер-ике зыр өйрөлөп алды. – Такси яллап бер аҙ ҡапҡылап китергә ҡайттым, – тип өҫтәп ҡуйҙы. – Бөгөн етәксебеҙҙең юбилейын билдәләйбеҙ.

Һуңғы һөйләме, мин һуңлабыраҡ ҡайтырмын, тигәнде аңлатҡандыр, моғайын. Осрашыуға йөрәкһеп, ашҡынған еткән ҡыҙ кеүек сығып йүгерҙе. Ауыҙын асып ябырға оноткан кеше һымаҡ, ни уйларға белмәй тороп ҡалдым. Төҫ тиһәң төҫ, һын тиһәң һын, аҡыл тиһәң аҡыл, типһә тимер өҙөрҙәй Азатты һанға һуҡмай йөрөүе микән ни был? Әгәр мин уйлағанса булһа, ояты ни тора! Тоҡом-әкрәбәлә булмаған хәл. Юҡтыр, юҡтыр, ҡайһылай ҙа йүнһеҙ уйҙар ағыла ҡарт башымдан.

Иртә менән Сафура һыйыр һауырға тағы килде. Йоҡоһо туймаған, күҙҙәре ҡып-ҡыҙыл. Күҙгә ҡарап һөйләшмәй. Элекке һымаҡ кәйефте күтәрерлек хәбәрҙәр һөйләмәй. Алдымда бөтөнләй башҡа зат. Күренеп тора: күңеле ғауғалы. Шулай булһа ла, әкрен генә һүҙ ҡаттым.

– Сафура, бер аҙ көтөп тор. Һөттө айыртып, иртәнге ҡаймаҡты биреп ҡайтарам. Ирең ҡайтҡан икән, төрләндерерһең өҫтәлеңде.

– Юҡ, бер нәмәгеҙ ҙә кәрәкмәй. Һеҙгә ярҙам булһын өсөн ваҡытлыса ғына йөрөйөм бит мин. Уны үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ ҙә инде.

Эшен ашыҡ-бошоҡ бөтөрҙө лә, ҡайҙалыр һуңлағандай, ҡабаланып сығып йүгерҙе. Әй әттәгенәһе, малды ҡасан алаһығыҙ, тип әйтергә өлгөрмәй ҡалдым. Борсолам, икеләнәм, әлеге лә баяғы теге уйҙарым бирмәй тынғылыҡ. Кеше ышанмаҫтай хәбәрҙе дөрөҫ булһа ла һөйләмә, тигәндәй, ейәнемә лә көйҙө йәнем.

Ана, Хамматым бүлмәһенән атлығып килеп сыҡты. Трюмола ятҡан хаҡтар күрһәтелгән кескәй ҡағыҙ киҫәктәрен тотоп:

– Быңдай аҡсаны эшләр өсөн бер тонна тир түгеү аҙ. Бриллиантлы алтын алҡа – алтмыш мең, бриллиантлы алтын балдаҡ – илле өс мең һум. Ҡабаланып йөрөгәнендә алтындарының хаҡтары тырым-тырағай көҙгө эргәһендә сәселеп ятып ҡалған. Бындай әйберҙе һатып алырлыҡ аҡсаны ҡайҙан алған икән беҙҙең әсәй? – тип һөйләнә.

– Улым, яңылышаһыңдыр, ундай хаҡ булмай. Атайың алып биргәндер.

– Юҡ, атайым әсәйемә бик ҡиммәтле шәшке туны алып биреп китте. Ул да йөҙ мең һум тора. Ундай зиннәтле әйбергә төрөнгән әсәй ниңә өйҙә торһон да ниңә өйҙә йоҡлаһын?

Килендең бүлмәһенә яңылыш та ингәнем юҡ. Ике ҡатлы йортта кемдең ҡайҙа йөрөгәне беленмәй шул. Тормошомдағы һәр миҙгелде, һәр хәл-ваҡиғаны күңел иләгенән үткәреп, уландарымды күҙ алдына баҫтырам: Алмасым – Мәскәүҙә, Булатым – Өфөлә. Уларға бәләкәй ҡала төҫ түгел хәҙер. Ҙур уҡыуҙы тамамланылар. Инде хәҙер үҙҙәренең ейәндәре бар. Бер ҡыйыш хәбәрҙәрен ишетмәнем. Бәлки, алыҫта йәшәүҙәре яҡшыраҡтыр. Барыһы өсөн нисек түҙәлер бер йөрәк?

Көн кискә һарыҡты, тау артына тәгәрәгән ҡояш һуңғы нурҙарын сәсә. Тағы ниҙәр килтерер икән уҙып барған көн – билгеһеҙ. Күңел шулай ҙа нимәлер һиҙә. Бөгөнгө йәшем юғарылығынан фекер йөрөткәндә, яҙмышыма үпкәләргә хаҡым юҡ. Тик кеше ишетмәҫлек хәбәр йөрәгемде әрнетте, күпте күргән күҙем күрә ҡарауға әйләнде, йәғни күҙҙәрем, ҡараһа ла, күрмәй. Күпте кисергән күңелем, әйтерһең дә, минеке түгел. Бер уйлаһаң, ғәжәп. Әле лә моң тулышҡан мөлдөрәмә һағышлы күҙҙәрҙең миңә төбәлгәнен шәйләмәйем дә. Дөрөҫөрәге, күрмәйем, танымайым. Мин уны тәүге тапҡыр күрәм кеүек…

– Атаҡ-атаҡ, Сафура, ниңә өндәшмәйһең? – тием. Сараһыҙлыҡтан меҫкен хәленә төшкән Сафурам:

– Ниндәй гонаһтарым өсөн донъя миңә һырты менән тора икән? Йәнем минең мәңге яралы.

Үкһеп-үкһеп илай ул. Күпме илаһа ла, тыныслана алманы. Тышҡа сығып битен һалҡын һыу менән йыуып килде лә:

– Әксән менән килененң юл фажиғәһенә эләккәндәр. Әле улар дауаханала. Ирле-ҡатынлы икәндәр тип, икеһен бер бүлмәгә һалып ҡуйғандар. Инде хәҙер белмәмеш тә күрмәмеш булып йөрөй алмаҫһың, Хаят инәй.

Йөрәгем алҡымыма килеп төйөлһә лә, һорай ҡуйҙым:

– Имендәрме, иҫәндәрме?

– Хәлдәре бик ауыр. Эргәләренә бер кемде лә индермәйҙәр.

– Әй әттәгенәһе, һау ғына булһындар. Үҙ балаларын үҙҙәре көтһөндәр.

Бейә кешнәмәһә, айғыр тешләмәй икәнен бик яҡшы беләм мин. Тик үлемдән оят көслө. Кемдеке – шуныҡы. Бәләкәй ҡалала хәбәр тиҙ тарала. Етмәһә, килен – ҙур түрәнең секретаршаһы. Шул етәксенең белеше аша Себергә эшкә урынлаштырғайны ул йылдар буйы эшһеҙлектән йонсоған Азат менәт Әксәнде. Хеҙмәт хаҡы алып, кешесә йәшәй генә башлағайнылар ҙа бит. Уңдың да тиҫкәреһе була, тигәндәй, тарттылар бит кирегә. Бер ус ҡылғандан кәбән өйөргә әҙер булған әрһеҙҙәрҙең береһе Себергә, Азатыма, хәбәр итеп өлгөргән инде. Төн уртаһы. Күңелдәге ут-ғәрәсәте бөтә булмышымды ялмап алған. Нисек йоҡлап ятмаҡ кәрәк былдай хәлдә. Тәҙрәләрҙән таң һарыһы ағыла. Нисек ойоп киткәнмен – белмәйем… Ул хәтлем оҙаҡ та серем итмәнем, ә шулай ҙа асыҡ һәм аныҡ төш күреп, һиҫкәнеп уянып киттем. Имеш, ҡартым иҫән… Кескәй генә Азатын, алтын нигеҙ ташым минең, тип яратып һөйә. «Ҡасан кәләш алаһың?» – тип шаярҡан була үҙен. Уныһы: «Бөгөн, хәҙер», – тип яуаплай. «Кемде?» – «Сафураны».

Ҡартым өндәшмәй, әммә мин уның ни әйткәнен күңелем менән тоям. «Сафураның сәсен аҡ таҫмалап икенән үр, иң матуры булһып йөрөһөн баҡса балалары араһында», – ти ул. Ап-аҡ кейемен баштан-аяҡ ҡулдары менән һыпырып төшөрә шунан. Кәфендең кеҫәһе юҡ, «Ҡыҙғанма донъяны» тип аңғартыуы булғандыр, бәлки. Артабан ҡылмаһын ҡылып йөрөгән әлеге киленемдең тәүге тапҡыр йортобоҙға килеп ингән мәле булды пәйҙә.

Ҡурсаҡтай матур, елбәҙәк ҡыҙ, әлегә торор ерем дә, һөнәрем дә, эшем дә юҡ, тип йәлләтеүеме, әллә ылыҡтырғыс төҫ-башы, буй-һыны әсир итте инде беҙҙе. Уны сит-ят күҙҙәрҙән ҡурсалап, күрше әбейгә фатирға индергәйнек. Төш тиһәң, төш тә хәтәр икән. Киленем беҙҙеке түгел, ә күршеләрҙеке, имеш. Уянып киттем дә тәрән уйға ҡалдым: төш түгелдер, өндөр, өндөр был…



Рамаҙан
ҠОЛМӨХӘМӘТОВ

## *Атай йорто*

*Мәңге иҫтә атай йорто,*
*Ҡарт ҡараъас — нигеҙ ҡото,*
*Өрләктәге сәңгелдәгем,*
*Шартлап янъан усаҡ уты.*

*Сөм ҡаҙанда картуф ҡайнай,*
*Әсәй әпәй-икмәк яһай.*
*Аҡ мейестә имән ҡуҙы*
*Миңә күҙен ҡыҫып баҙлай.*

*Иҫемдә гел йортом йәме —*
*Яңы бешкән икмәк тәме;*
*Ҡулына алып атайымдың:*
*«Үҫ, үҫ!» — тиеп һикерткәне.*

*Ғаилә менән табындамын,*
*Атайымдың алдындамын,*
*Саҡ асылъан телем менән*
*«Мәм-мәм» һүҙен бытылдаймын.*

*Апайҙарым шырҡ-шырҡ килә,*
*Беҙгә ҡарап әсәй көлә.*
*Йөҙ сағылъан самауырҙан*
*Наҙлы болот-боҫ бөркөлә.*

---

*Рамаҙан Ҡолмөхәмәтов(1969) Ейәнсура районы Ибрай ауылынан. Шиғырҙары республика гәзит-журналдарында даими баҫыла килә. Салауат ҡалаһында йәшәй.*

*...Саф, эскерһеҙ бала саҡты*
*Мин йыш ҡына иҫкә алам.*
*Күңел менән беҙ барыбер —*
*Сәңгелдәктә ятҡан бала.*

## Һуңлап уфтаныу

*Уфтанған булабыҙ шағир киткәс,*
*Матәм телмәрҙәре тотҡанда.*
*Баш осона ҡуйған ташынан тыш,*
*Һәйкәл кеүек билдә илдә бармы*
*Бағыр өсөн һынын онотҡанда?!*

*Онотҡанда бер иҫкә алабыҙ*
*Берәй юбилейы көнөндә.*
*Туғандары ғына ҡөрьән сыға*
*Рухын һаҡлап йөрәк түрендә,*
*Төпкөлдәге алыҫ өйөндә.*

*...Күк хужаһы ерҙән алдан ала*
*Халҡым тиеп янған уланын.*
*Үҙе үлгәс кенә белдек инде*
*Ерҙә ябай даһи тыуғанын,*
*Шиғыр пәйғәмбәре булғанын.*

## Йылға һағышы

*Тау йылғаһы инем, ҡаяларға*
*Аға инем ярһып, һуғылып.*
*Минең тормош йырҙан тора ине,*
*Зыңлай инем гәлсәр моң булып.*

*Ағымымды бер көн быуҙылар ҙа*
*Ҡаҡ далаға табан борҙолар.*
*Мал шикелле, яһалма йырҙанан*
*Ал-ял бирмәй алға ҡыуҙылар:*

*Имеш, миңә ирек кәрәк,*
*Хөрлөк һәм киңлек кәрәк.*
*Ҡая, тауҙар ҡыҫымында*
*Ирекһеҙмен бигерәк.*

*Буръяҡ һыуға тамам әйләндем мин,*
*Мәте шәреһендәй ҡорормон.*
*Ашъяулыҡтай наҡыҫ баҫыуҙарҙы*
*Һуғарыусы хәҙер бер ҡолмон.*

## Шағир һымаҡ

*Ай түңәрәк кәртә менән*
*Үҙен уратып алған.*
*Йондоҙ-ҡыҙҙар, бойоғошоп,*
*Тыш яҡта тороп ҡалған.*

*Айҙың бындай ҡылығына*
*Яуап таба алмайса,*
*Йондоҙ-ҡыҙҙар серләштеләр*
*Оҙаҡ, һары таңғаса.*

*Ә сәбәбе ябай ғына:*
*Айға ла бит ял кәрәк.*
*Яңғыҙ ҡалып уйланырға*
*Уңайлы бер яй кәрәк.*

*Йүнле әмәл таба алмай,*
*Ҡулайлы мәлде көтмәй,*
*Ул, көмөш ныҡытма һуғып,*
*Үҙ-үҙен шунда бикләй.*

*Ышанмаһаң, күккә ҡара:*
*Ай бөгөн дә кәртәле.*
*Илһам көткән шағир һымаҡ,*
*Үҙенә сумған мәле.*

## *Аҡмулланы ололоҡлау*

*Эй, Аҡмулла, Аҡмулла,*
*Шиғри йәнле хаҡ мулла.*
*Ғилем, тиеп янғандың*
*Ғүмер юлы хаҡ була!*
*Эй, Аҡмулла, Аҡмулла,*
*Сал Уралым уланы.*
*Аҡ күңелле пак мулла,*
*Белем — олуғ ҡоралың!*
*Эй, Аҡмулла, Аҡмулла,*
*Моңсан истәк балаһы.*
*Исем-атың абруйлы,*
*Пәйғәмбәрлек даланың!*
*Эй, Аҡмулла, Аҡмулла,*
*Халҡымдың баш шағиры.*
*Ил, тип янған саф мулла,*
*Сәсәндәрҙең маһиры!*
*Эй, Аҡмулла, Аҡмулла,*
*Башҡорттоң азаматы.*
*Беҙгә остаз аҡ мулла,*
*Рухыбыҙ пар ҡанаты!*
*Эй, Аҡмулла, Аҡмулла,*
*Милләттең йөҙөк ҡашы.*
*Хөр тормош иргә ҡулай,*
*Ирек йәндәш юлдашың!*
*Эй, Аҡмулла, Аҡмулла,*
*Халыҡ йәнле хаҡ мулла.*
*Илгә һиндәй уҙамандар*
*Йөҙәр йылға саҡ тыуа!*



**Зәлифә**
**КАШАПОВА**

# ҠОЯШ ТӨҪЛӨ БАЛҠЫЙ КҮҢЕЛЕМ

## *Уян, халкым!*

*Әйтсе, халҡым!*
*Кемдәр илде*
*Талап, һатып,*
*Аҡса ҡоло булғандар?*
*Ҡайһы арала*
*Заманаһы*
*Табыныуға ҡорғандар?!*

*Сыҙа, халҡым!*
*Улар өҫтә...*
*Ҡул күтәреп,*
*Бер-береһен хуплашалар.*
*Ҡанһыраған*
*Ерҙе бүлеп,*
*Көн дә, көн дә мутлашалар.*

*Уян, халҡым!*
*Халыҡ — һарыҡ*
*Түгеллеген*
*Күрһен ҡоҙғон түрәләр.*
*Бөгөн улар*
*Үҙҙәренә*
*Ау ситлеге үрәләр.*

---

*Зәлифә Кашапова Илеш районының Иштирәк ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт педагогия институтының физика-математика факультетын тамамлай. Оҙаҡ йылдар тыуған ауылы мәктәбендә уҡыта.*

*Әҫәрҙәре республика матбуғатында даими баҫыла килә. РФ һәм БР Журналистар союзы ағзаһы.*

## Ҡояш тотам

*Күктә ҡояш балҡығандай,*
*Балҡый минең күңелем.*
*Ҡояш төҫлө инде үҙем —*
*Бер ҙә һаран түгелмен.*

*Ал ҡояштың яҡты нурын*
*Йыямын уҫтарыма.*
*Уртаҡ шатлыҡ булһын, тиеп,*
*Таратам дуҫтарыма.*

*Белгәндәр белһен, әйҙә,*
*Ҡайнар дуҫлыҡтың көсөн:*
*Гел ҡояш тотам йөрәктә*
*Өшөгән дуҫтар өсөн.*

## Шәжәрә байрамы

*Ҙур шәжәрә байрамына*
*Йыйылды бар туғандар.*
*Һәр береһе дәрәжәле,*
*Эштә сос һәм уңғандар.*

*Байрамдарҙың иң аҫылы —*
*Ул шәжәрә байрамы.*
*Затың, нәҫелеңде йыйған*
*Шиңмәҫ гөлдәр бәйләме.*

*Бейек булһа ла, ағастың*
*Тамыры һәр саҡ ерҙә.*
*Тыуған тупраҡтың ҡөҙрәте,*
*Ныҡлығы батыр ирҙә.*

*Халҡым тыуҙырған ирҙәрҙең*
*Бөркөттәй ҡыйыуҙарын,*
*Шәжәрәләр асып бирҙе*
*Данлы үткән юлдарын.*

*Ҡәрҙәш-ырыуҙың йыйыны —*
*Борондан килгән йола.*
*Изге йоланы үтәһәк,*
*Күкрәп йәшәргә була.*

## Алтын көҙ

*Алтын ҡояш*
*Алтын тараҡ менән*
*Сәстәремдән һөйөп*
*Тараһын.*
*Алтын көҙҙәр,*
*Алтын күҙлек кейеп,*
*Күҙҙәремә көлөп*
*Ҡараһын.*

*Алтын япраҡ,*
*Алтын һағыш булып,*
*Һуҡмаҡтарға төшөп*
*Һарылһын.*
*Алтын нурҙар,*
*Алтын даръя төҫлө,*
*Бәхеттәргә күмеп*
*Ағылһын.*

## Ғүмер үтеп бара бит

*Эх...*
*Янған булам, көйгән булам, –*
*Ғүмер үтеп бара бит.*
*Хәсрәт, юҡлыҡ хәлде алып,*
*Ҡайнар утҡа һала бит.*
*Ғүмер үтә, тиҙәр ҙә ул,*
*Тик ниндәй яҡшылыҡ бар?*
*Нәҫелгәме, илгә микән*
*Тапшырыр яҡтылыҡ бар?*
*Әрнеү, үкенестәр баҫып,*
*Меҫкенгә ҡалмаҫ өсөн,*
*Ваҡ мәшәҡәт донъяһынан*
*Беләгем талмаҫ өсөн,*
*Эх,*
*Дәрт, һин ҡайҙа? Янайымсы,*
*Уғылһын йөрәк көсөм.*
*Һағыш яғаһынан алып,*
*Онтап ташлайыҡ тешен,*
*Ырар ҙа китер эшебеҙ,*
*Бирешмә, ныҡ бул, Кешем!*

# БӨГӨНГӨ ПОВЕСТЬ

Бөгөнгө башҡорт прозаһына байҡау яһаһаң, заман темаһын ярайһы уҡ киң яҡтыртҡан, йәмғиәттәге киҫкен мәсьәләләрҙе ҡыйыу күтәргән, кешеләрҙең рухи ихтыяжын ҡандырған повесть жанрының өлгөрлөк күрһәтеүен икеләнмәй билдәләргә була. Дөрөҫ, оператив жанр булараҡ, көн темаһын-проблемаһын хикәйә тәүгеләрҙән булып күтәреп сыға, шулай ҙа повесть заман ағышын һәм замандаштың рухи йөҙөн төптәнерәк, тәрәндәнерәк асыуы, йөкмәткенең фәлсәфәүи асылына баҫым яһалыуы, ижтимағи һәм эстетик мөһим яңғырашлы хәл-ваҡиғаларҙың һайлап алыныуы менән айырыла. Быны Ш. Хажиәхмәтовтың «Яңғыҙ инә бүре», Ш. Шәкүрованың «Өфө вокзалы», Ә. Әминевтың «Бер кәмәлә», С. Шәриповтың «Гонаһлы шарлама», С. Ильясовтың «Йөрәк ҡола», Т. Ғарипованың «Илекәй» повестары миҫалында күрергә мөмкин. Был повестар тормоштоң төрлө өлкәләрен яҡтыртыуҙары, бөгөнгө заман геройҙарының асылына үтеп инеүҙәре, һүрәтләү сараларының баҙыҡлығы, психологизмдың ҡеүәтле булыуы, фекерҙе образлы кинәйәгә төрөп еткерә белеү, стиль, сюжет-композиция ҡоролошондағы эҙләнеүҙәр, яңы формалар табырға ынтылыш менән характерлана.

Күптән инде танылыу алған Ш. Хажиәхмәтовтың «Яңғыҙ инә бүре» һәм тәү башлап ҡәләм тибрәткән йәш яҙыусы Ш. Шәкүрованың «Өфө вокзалы» повестары хикәйәләү манераһы, донъяны күреү, баһалау, геройҙарҙы кәүҙәләндереү, сюжет һыҙығын тағатыу йәһәтенән, йәғни киң мәғәнәһендәге стиль йәһәтенән бер-береһенә яҡын тора. Был повестарҙың икеһенең дә геройҙары – ҡатын-ҡыҙҙар.

**Шамил Хажиәхмәтовтың** «Яңғыҙ инә бүре» повесының героиняһы, йәш булһа ла, тормоштоң байтаҡ һынауҙарын үтеп, ҡағылып-һуғылып, СССР тигән ҡеүәтле ил тарҡалғас, тишек кәмә янында ҡалған меңәрләгән замандаштарыбыҙ кеүек, теше-тырнағы менән йәбешеп, тормош төбөнән өҫкә ҡалҡып сыҡҡан бөгөнгө заман кешеһе булып күҙ алдына баҫа. Тәбиғәттән бирелгән һәләтенә вузда алған иҡтисадсы белемен дә ҡушып, ҡара тырышлығын, күптәрҙе көнләштерерлек егәрлелеген дә өҫтәп, ул үҙ эшен көйләп ебәрә, ярайһы уҡ мая ла туплай, бизнес донъяһында атаһы урынына күреп ышанған выжданһыҙ компаньоны Стригунковтан алданып та ҡала.

Хәләл аҡсаһын иҫ киткес саялыҡ күрһәтеп ҡайтарып алған Рита күптән күңелендә бәпләп йөрөткән хыялын тормошҡа ашыра – ҡағылып-һуғылып килмешәк хәлендә көн күргән ғәзиз ата-әсәһен Үзбәкстандан Йәнтөйәккә алып ҡайта, тәбиғәттең хозур төбәгендә һалынған йорт һатып алып, ҡәҙерләләрен шунда урынлаштыра.

Фәрит Ильясовичтың Рита ойошторған фирмаға килгәненән, эштәрҙе яйға һалғанынан һуң, отставкалағы хәрбиҙең экстремаль ситуацияларҙан ҡыйыу,

оҫта, таҫыллы сыҡҡан саҡтарын күргәндән һуң, үҙен таланыуҙан, хурлыҡтан, үлемдән ҡотҡарып ҡалғанынан һуң, ысын ир-егеттең ниндәйерәк булыуын да танырға-баһаларға өйрәнә, тормош ауырлыҡтарын бер үҙе күтәргән, замандың аяуһыҙ һынауҙарынан алған яраларын, өңөндәге яңғыҙ бүреләй, бер үҙе генә өнһөҙ-тынһыҙ ялап уңалтҡан героиня. Әҫәр аҙағында Ританың инде яңғыҙ булмауы, йөрәк аҫтында типкән яңы йәндең – өнөндә лә, төшөндә лә яҡты хыялы булған ҡыҙының тиҙҙән тыуасағы асыҡлана.

ПовестаРитаның ҡырыҫ ысынбарлыҡтағы реаль тормошон һәм героиняның төшөнә бәйләп Киске Ҡала – икенсе параллель донъя буйлап сәйәхәтен һүрәтләүсе сюжет һыҙыҡтары алмаш-тилмәш үҫтерелә килә, реалистик-мистик сюжет яҙыусыға әҫәрҙең идеяһын, философияһын отошло итеп еткерергә, характерҙың асылын баҙығыраҡ күрһәтергә булышлыҡ итә.

**Әмир Әминевтың** «Бер кәмәлә» (2010) повесы яҙыусының башлыса ҡырыҫ реализм методына таянып элегерәк ижад ителгән повестарынан айырылып тороуын, романтик пафостың, юғары шиғриәти стилдең, шартлылыҡтың, символиканың ҡеүәтле булыуы, донъя мифологияһынан алынған риүәйәттең сюжет һыҙығының нигеҙенә һалыныуы, әҫәр идеяһын асыуға хеҙмәт иттерелеүе менән үҙгәлекле булыуын күрергә була. Повестың төп геройы яуызлыҡҡа ҡаршы янғыҙ көрәшкә ташланыусы ҡаһарман-максималист, тыуған ере, тәбиғәте өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер патриот, тәрән уй-кисерештәргә, ҡанатлы хис-тойғоларға бай романтик күңелле шәхес булыуы менән характерлана. Шул уҡ ваҡытта халыҡҡа, тотош кешелеккә, тәбиғәткә, ер йөҙөнә һәләкәт менән янаған мөһим ижтимағи-социаль һәм әхлаҡи-этик проблемаларҙы күтәреүе йәһәтенән был повесть Әмир Әминевтың элегерәк ижад ителгән әҫәрҙәренә яҡын да тора, яҙыусының дөйөм идея-эстетик концепцияһын дауам итә, тулыландыра төшә.

Әҫәр романтизм өсөн типик художество алымынан, повестың төп геройы Ғәбиттең символик төшөнән – Аллаһы Тәғәләнең Нух пәйғәмбәр менән әңгәмәһенән, уға өс ҡатлы кәмә төҙөргә ҡушыуынан – башланып китә. Аллаһы Тәғәлә үҙенең ерҙе һыуҙан баҫтырыуының сәбәбен былай аңлата: «...Бәндәләр гонаһҡа батты, инде лә аңдарына килмәҫме, хаталарын аңламаҫмы тигән өмөттәмен – ер йөҙөнә туфан һыуы ҡалҡытыуымдың сәбәп-маҡсаты ла ошо... үҙем бар иткән һәммә нәмәне ер йөҙөнән юҡ итәсәкмен. Мин быны, ҡабатлап әйтәм, ерҙә ғәҙел, хөр, тигеҙ яңы тормош башлар өсөн эшләйем, эшләргә мәжбүрмен».

Был төш Ғәбиткә беренсе тапҡыр ғына инмәй. Нисек юрарға белмәй аптырап йөрөгән сағында, ул был төштөң дауамын күрә. Ҙур кәмәлә йөҙөп киләләр, имеш. Эсәр һыуҙары, ашар ризыҡтары бөткән, ләкин туҡтап булмай, ишәләр ҙә ишәләр. Әммә көтмәгәндә кәмәгә һыу тула башлай, сысҡандың кәмә төбөн кимереп тишкәне асыҡлана. Үҙенең был хаслығын сысҡан «барыбер батабыҙ йә астан үләбеҙ бит» тип аңлата. Һәләкәттән сәңке башлы йылан ҡотҡарып ҡала, ул ҡойроғо менән тишекте ҡаплай. Был төштән һуң Ғәбит оҙаҡ ҡына уйланып, хафаланып йөрөй. Әлеге төштө Ғәбит тә, өләсәһе лә бер нисә ҡат күрәләр. Төш алымы әҫәрҙәге һүрәтләнәсәк ваҡиғаларҙың, конфликттың ниндәйерәк йүнәлеш аласағын тоҫмаллата.

Яҙыусы хәл-ваҡиғаларҙы Юрматы ырыуы өсөн борон-борондан изге һаналған, ғалимдар өсөн ғәжәйеп серҙәргә, ҡабатланмаҫ уникаль геологик үҙенсәлектәргә эйә булған, ә бөгөнгө эшҡыуарҙар өсөн иң сифатлы сеймал – сода табыу урыны булған Торатау итәгендә

йәйелдереп ебәрә. Торатауҙың мөһабәт, ғәйрәтле, олпат, һоҡланып туймаҫлыҡ тау, бөтә ауылдың күрке, райондың йөҙөк ҡашы булыуы хаҡында автор йәйелеп китеп, юғары романтик пафос менән һүрәтләй ҙә ваҡиғалар барышын Ғәбиткә килтереп терәй.

Ғәбит ғәҙел, намыҫлы, илһөйәр, тыуған ерен, эшен яратҡан, үҙ һөнәренә мөкиббән бирелгән фиҙакәр кеше булып һынлана. Уның егерь булыуы, йәғни тәбиғәт байлыҡтарын браконьерҙарҙан һаҡлау эшенә тотоноуы уҡ был кешенең ҡаһарман йөрәкле булыуы хаҡында аңғарта. Ғәбит өсөн Торатау көн дә яңы битен асыусы, бер ҙә ялҡытмаусы, мөғжизәһен, серен юғалтмаусы тере һын булып ҡабул ителә. Тауға барып ҡайтһа, герой күңелен елкендереп, ҡәнәғәтлек кисереп, күпмелер ваҡытҡа етерлек рухи көс, ләззәт ала. Оҙағыраҡ бара алмай торһа, Ғәбит мәғрур тау алдында үҙен ғәйепле хис итә, Торатау Ғәбитте көтәлер, ошо арала күренмәй ҙәһә, тип борсолалыр кеүек тойола.

Ваҡиғалар төйөнләнеше бер байрам көндө Ғәбиттең алты йәшлек улы Искәндәр менән Торатауға барыуы һәм ояһынан йығылып төшкән бөркөт балаһын, инәһен эҙләп-эҙләп тә таба алмағас, төлкө ауыҙына ем булып ҡуймаһын тип, өйҙәренә алып ҡайтыуҙан, уның тамағын туйҙырыу хәстәрен күреүҙән башланып китә. Ғәбиттең бөркөт балаһын алып ҡайтыу хәбәре ауылға тарала, районға ла барып етә.

Берҙән-бер көндө райондан һунарсылар йәмғиәте рәйесе, Ҡырағай тәбиғәтте һаҡлау фонды ағзаһы Сәғитов – бәләкәй генә кәүҙәле, бөрсәләй теремек, ҡолаҡтары дегәнәк япраҡтары кеүек тырпайып торған, күҙҙәре хас сыҫҡандыҡы кеүек әҙәм килеп, бөркөттө күрһәтеүен һорай. Бик шикле күренгән был бәндәнең яуыз уй-ниәтен һиҙенеп, Ғәбит бөркөттө күрһәтмәй, өләсәһе һәм улы ярҙамында йәшереп алып ҡала. Төҫ-ҡиәфәтенән үк ытырғаныс тойғо уятыусы был бәндәнең алдына алғанын ҡуймаҫы уның янап, теш ҡайрап ҡайтып китеүенән күренә. Уҡыусы, үҙе лә һиҙмәҫтән, кәмә төбөн кимереп тишкән сыҫҡан менән сыҫҡан күҙле был бәндә араһында йәнәшәлек үткәрә, уның хаслыҡ ҡылырын шикләнеп көтә.

Ғәбит менән Сәғитов араһындағы килешмәүсән ҡаршылыҡ эҙмә-эҙлекле, баҫҡыс-баҫҡыс үҫтерелә килә. Дегәнәк ҡолаҡлы, сыҫҡан күҙле бәндәнең ҡушыуы буйынса эт ялҡауы, эскесе, кеше ҡотҡоһона ҡотороп йөрөүсе Әбүбәкер, бер ярты хаҡына бөркөттө урларға маташып, лапаҫҡа инә һәм ҡош тырнағына эләгеп яралана. Сәғитов, бөркөттө ыҫҡындырмаҫҡа булып, ҡайтанан ауылға килеп етә, Ғәбиттең өй-ихатаһында тентеү яһап, буш ҡул менән ҡайтып китергә мәжбүр була.

Бөркөт менән булған мажаралы хәл онотолоп та өлгөрмәй, Ғәбит менән Сәғитов һәм уның әшнәләре араһында сираттағы бәрелеш була. Һунар итеү әле тыйылған булһа ла, Торатауҙа болан атып йөрөүсе «тәбиғәт һаҡсы»һы менән уның ике юлдашының енәйәтенә егерь бер үҙе ҡаршы сыға, уларҙың кинәнеп, бер кемдән ҡурҡмайөркмәй тере йән эйәләренең ғүмерен ҡыйып йөрөүҙәренә ҡамасаулай, боландың ғүмерен ҡотҡарыуҙа Ғәбиткә Торатауҙа төшкән ҡуйы томан ярҙам итә.

Ошондай көсөргәнешле ваҡиғалар ағышын драматик көсөргәнешле итеп һүрәтләп килә-килә лә, автор бер аҙға динамик хәл-хәрәкәтте тотҡарлай төшә, лирик-романтик тойғоларҙан туҡылған тәүге һөйөү хистәрен һүрәтләүгә – ретроспективаға киң генә урын бирә. Был ретроспектив план сюжет һыҙығына оҫта ғына – геройҙың тауҙан уйлана-уйлана төшөп барғанында артышҡа бәйләнгән үҙенең ҡыҙыл галстугына тап булыуына бәйле – индереп ебәрелә. Ун

биш йыл элек Сәлимә менән мәңге бергә булырға вәғәҙә бирешкән, шул вәғәҙәнең иҫтәлеге булған галстук герой күңелендә татлы хистәр ҙә, мөхәббәтен юғалтыуҙан һағышланыу-юҡһыныу тойғоларын да уятып ебәрә. Шуны ла һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк: артышҡа бәйләнгән галстук – сағыу деталь – мөхәббәт хәтирәләрен уятыусы ғына түгел, повестың кульминация өлөшөндә был деталгә мөһим идея-эстетик нагрузка йөкмәтелә. Әҫәрҙең романтик пафосын был деталь ҡеүәтләй төшә.

Һунарсылар йәмғиәте рәйесенең, Ғәбитте районға саҡыртып алып, «срогы сыҡҡан» тигән һылтау менән егерлыҡ танытмаһын алып ҡалыуы тәбиғәт һаҡсыһы менән тәбиғәтте ҡоротоусы араһындағы сираттағы бәрелеш, Ғәбиттән болан атырға ҡамасаулағаны өсөн үс алыу, артабан Торатауҙа иркенләп һунар итеү өсөн уны юлдан алып ташлау тип ҡабул ителә.

Танытмаһын тартып алһалар ҙа, юридик яҡтан хоҡуғы булмаһа ла, намыҫы, кешелек булмышы ҡушыуы, йәне-йөрәге тартыуы буйынса Торатауға аяҡ баҫҡан Ғәбиткә ҡаршы вертолетта һунарға килгән түрәләр мылтыҡтан төбәп аталар, пуля менән алдыра алмағас, өҫтән таш тәгәрәтә башлайҙар. Ғүмерен реаль хәүеф аҫтына ҡуйыуын аңлаған Ғәбит, ҡораллы яуыздарға буш ҡул менән ҡаршы тора алмаҫын белеп, боролоп китергә мәжбүр була.

Үҙенең ҡурҡып ҡайтып китеүенә ғәрләнгән, төнө буйы уйланып сыҡҡан Ғәбит иртәнсәк трактор арбаһының артҡы кузовында һүрәт-метканы – «беҙгә ҡамасаулап йөрөһәң, маңлайыңа ошондай пуля аласаҡһың» тигән шомло иҫкәртеүҙе күрә.

Был иҫкәртеү Сәғитовтың улы Шамилдың – Ғәбит ҡулынан Сәлимәне тартып алып киткән, уларҙың бәхетен-мөхәббәтен емергән, өмөттәрен өҙгән, хәҙер килеп Сәлимәне сит ерҙә, ят кешеләр араһында ташлап ҡалдырған бәғерһеҙ, намыҫһыҙ кешенең киҫәтеүе, атаһының ярты юлда туҡталып ҡала торған кеше булмауын ныҡлы раҫлауы менән көсәйтелә төшә.

Төп сюжет һыҙығындағы көсөргәнешлекте Ғәбиттең алты йәшлек улы Искәндәрҙең урамдан туҡмалып ҡайтыу ваҡиғаһы – ярҙамсы сюжет һыҙығы ла көсәйтә төшә. Нескә күңелле, тәбиғәтте, бөтә тереклек донъяһын яратҡан, бөркөт балаһын ҡотҡарып ҡалыу өсөн йән атҡан Искәндәр, атаһы кеүек үк, тәрбиәне бик аҡыллы, осҡор зиһенле өләсәһенән ала: һөйләгән һүҙҙәре, эшләгән эштәре өсөн ауыл халҡы уны ағинәй тип ололоҡлай, унан кәңәштәр, фатиха һорай-ала, уның өгөт-нәсихәтен тоторға, ҡушҡандарын үтәргә тырыша. Өләсәһенең: «Сылтырап аҡҡан көмөш һыуҙарыбыҙ бысранһа, ҡаныбыҙ бысрар. Сәскәләргә күмелеп ятҡан хәтфә ерҙәребеҙҙә кейектәр, хатта ки бөжәк тә бөтһә, күгебеҙҙе ҡара көстәр баҫыр, һауаларҙа осҡан ыласын-бөркөттәребеҙ ташлап китер, күҙҙәребеҙҙең нуры һүнер. Ҡырмыҫҡалар бөтһә – әҙәм балаһының теше төшөр. Ҡырмыҫҡа ғәҙел яратылған, уға ла яҡты донъя алдында оло бурыстар ҡуйылған. Шуға күсенә һис ҡағылма», – тигән һүҙҙәре сабый күңелендә тәрән уйылып ҡала. Халыҡ аҡылын үҙендә туплаған ағинәй образы аша, уның өгөт-нәсихәттәре аша әҫәрҙең төп идеяһы ла ҡалҡыуыраҡ итеп сағылдырыла.

Малайҙарҙың ауыл осондағы ҡырмыҫҡа иләүен туҙҙырыуҙарын күргән Искәндәр: «Аҡтармағыҙ, улар бит ҡышҡа йоҡларға ятты, уларҙың өйө юҡ бит, юҡһа өшөйҙәр, туңалар, үләләр», – тип меҫкен йән эйәләрен йәнфарман яҡлай, үҙенән оло малайҙар менән бәрелешә. Бур, ошаҡсы, эскесе Әбүбәкерҙең үҙе кеүек үк этлек ҡылыусы, үҙ һүҙле, тыңлауһыҙ, һуғыш суҡмары улы Илдарҙың ҡотортоуы буйынса,

малайҙар Искәндәрҙе туҡмап, битен иләүгә тығып китәләр. Ғәбит улы менән ғорурлана ла, холҡонда бөгөндән үк ғәҙеллек тойғоho булған Искәндәренә ошо юлдан барhа, тормошта йәшәүе ҡыйын буласағын уйлап бошона ла.

Ҡотолғоhоҙ hәләкәт яҡынлашыуын, геройҙар араhындағы килешмәүсән ҡаршылыҡтың hуңғы стадияға етеүен яҙыусы бик текемләп хикәйәләй, конфликтты баҫҡыс-баҫҡыс итеп үҫтерә барып, ваҡиғаларҙың тығыҙ ағышында, көсөргәнешле сюжет hыҙығында бирә.

Кульминация өлөшөндә геройҙың тәбиғәтте ҡоротоусы вәхшиҙәр менән үлемесле көрәше ҡырыҫ реализм ҡатнаш ҡанатлы романтизм алымдарында hүрәтләнә. Яуыздарға ҡаршы япаяңғыҙы алышҡа сыҡҡан Ғәбиткә мөhәббәт тәбиғәт, мәғрур Торатау, кейекянуарҙар, ҡош-ҡорттар үҙҙәре ярҙамға килә. Торатауҙы ҡуйы томан ҡаплауы браконьерҙарҙың иркенләп hунар итеүенә ҡамасаулай, Ғәбитте дошмандары күҙенән hаҡлай, үлемесле ҡулсаны йырып сыҡҡан боландың Ғәбит эргәhенә килеүе хәүефтең ҡайhы яҡтан көтөлөүен иҫкәртә. Ғәбиттең ҡарап-тәрбиәләп, осорға өйрәткән бөркөт балаhы – инде ҙур, ҡеүәтле ҡоштар батшаhы – ҡотҡарыусыhын үлемдән аралай, hунарсыларға аяуhыҙ hөжүм итә, күҙҙәрен, биттәрен соҡой, тырнай, ҡанаттары менән туҡмай. Браконьер түрәләр тейәлгән вертолет ҡуйы томанда Торатау таштарына бәрелеп шартлай. Тәбиғәт үҙе вәхшиҙәргә ҡаты язаhын бирә.

Артышҡа бәйләнгән галстугын табып алып, өҙлөкhөҙ ҡан аҡҡан яраhына ҡаплаған, хәле бөткәндән-бөтә барған Ғәбит алдынан ғорур бөркөт саңҡып осоп йөрөй, күҙ алдына берсә Сәлимә, берсә өләсәhе килә, улының «Атай!» тигәне ҡолағына салынғандай була. Әҫәр Аллаhы Тәғәләнең илаhи, ғәйрәтле тауышы менән Нух пәйғәмбәргә өндәшкәне менән тамамлана, хикәйәләнгән ваҡиғаларға hығымта яhала: «Әйттем мин hиңә, Рәсүлем Нух, кәмәгә кешеләрҙе hайлап ал, тип. Күрҙеңме, бәндәләр беҙ биргән мөмкинлекте файҙаланманы, бер кәмәлә икәнлектәрен онотто, нәфсеhен тыя алманы. Бынан hуң мин уларға былдай мөмкинлек бирәhем юҡ. Ҡәҙерҙе белмәгәс, яңынан туфан hыуы ҡалҡытам, Торатауҙы ла hыуға күмдерәм – бәндәләр ҡотолор, үрсер урын булмаясаҡ. Ә был егет маладис, көрәште, ерҙе hаҡлауҙы намыҫ эше итеп ҡараны. Бына шундайҙарҙы кәмәңә күберәк алырға кәрәк булған, Нух. Хәйер, hуң инде...»

Бер кәмәлә – бер Ер шарында, бер тәбиғәт ҡосағында йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, бер яҡты уй, изге ниәт йөрөтөргә тейеш булыуҙарына ҡарамаҫтан, кешеләр – төрлө, ҡылған эш-ҡылыҡтары ла, уйлаған уй-ниәттәре лә ҡапма-ҡаршы. Ғәбит, өләсәй, Искәндәр кеүектәр тыуған төйәген матурлар, уның байлығын арттырыр, күҙ ҡараhылай hаҡлар өсөн тыуhалар, Сәғитов, уның улы Шамил, браконьер түрәләр, Әбүбәкер, уның улы Илдар – улар күмәктәр – донъяны ҡоротор, ер йөҙөнән ҡот-ырыҫты ҡасырыр өсөн бар булғандар. Фәрзәнә кеүектәр иhә үҙҙәренең бәғерhеҙ битарафлыҡтары, күңел тупаҫлыҡтары менән уларҙың хаяhыҙ эш-ҡылыҡтарын ҡеүәтләй.

Повесть кәмәне ауҙармаҫ өсөн барыhының да бер йүнәлештә йөҙөргә тейешлеген, йәғни кешеләрҙең изгелеккә, яҡшылыҡҡа ынтылырға, тыуған төйәген, ғәзиз тупрағын, гүзәл тәбиғәтен, шул тәбиғәттә көн күргән бөтә тереклекте ҡәҙерләп йәшәргә, үҙҙәре ултырған ботаҡҡа үҙҙәре балта сапмаҫҡа тейешлеген, кәмәне тишкән сыҫҡан hымаҡ, яуыз йәнле, ҡара уйлы нәфселе бәндәләргә ҡаршы йән аямай көрәшергә кәрәклеген иҫкәртә.

**Сабир Шәриповтың** «Гонаhлы шарлама» повесының төп геройы Дауыт

Салауатов, утыҙ йылдан ашыу бер цехта тырышып эшләгәне өсөн Өфө мэрияһының Почет грамотаһы менән бүләкләнеүе уңайы менән, ҡала эргәһендәге баҡсаһында күрше-тирәләрен сәй табынына йыя. Көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп ултырғандарында, Вадим Федорыч үҙенең Эсем буйында тыуып үҫкәнлеген иҫкә алып үтә. Быны ишеткән Дауыт күңел тыныслығын юғалта, хәтеренә ҡылт итеп Шарлама, шуға бәйле тарих иҫенә төшә – ҡырҡ йыл элек эшләгән ҡырын аҙымы өсөн ғазаплы кисерештәр эсендә йәшәүе, Шарлама эргәһендәге йорт хужаларына хаслыҡ ҡылған төн убырҙарының береһе булғаны өсөн үҙен ғәйепле һиҙеп ғүмер үткәреүе телгә алына. Әммә автор серҙе шунда уҡ ҡына сисеп һалмай. Шарламаның ни өсөн гонаһлы тип аталыуының сәбәбе әҫәр аҙағынаса аҡрын-аҡрын ғына асыла килеп, уҡыусының ҡыҙыҡһыныуын ләүкетеп тора.

«Ниңә юҡҡа баш вата әле, Дауыт? Ниндәй яҙыҡ, ниндәй яза, ти, ул? Бәғзеләр, ана, бер-береһенең йәнен ҡыя, икенселәр бер-береһен ҡол итә, өсөнсөләр миллиондарҙы сәлдерә, дүртенселәр... – һис кем выждан ғазабы кисермәй», – был һорауҙарҙа-уйҙарҙа геройҙың әлегә уҡыусы өсөн сер булған ниндәйҙер гонаһы өсөн выждан ғазабынан яфаланыуы, ғәйебен башҡалар ғәйебе менән сағыштырып ҡарап, үҙенекенең бәләкәй генә яҙыҡ булыуын уйлап, үҙ-үҙен тынысландырырға, онотorға, намыҫын ойоторға теләүе күренә.

Повестағы хәрәкәт, конфликт тышҡы хәл-ваҡиғалар ағышына ҡоролмай, ә эске ҡаршылыҡҡа, ҡатмарлы психологик процесҡа нигеҙләнә, сюжет һыҙығының көсөргәнешле үҫтерелеше геройҙың үҙ-үҙен ғәйепләүенә, аҡланырға тырышып, бөгөнгө көндәге кешеләр ҡыланышын, болғанышлы донъя ағышын миҫалға килтереп, гонаһының бик бәләкәй булыуына үҙен ышандырырға тырышыуына һәм шунда уҡ намыҫының йөрәген әсетеп һулҡытыуына бәйләнгән. Ниһайәт, ул теге ауылға барып әйләнмәйенсә йәненә тынғылыҡ тапмаясағына ныҡлы төшөнә.

Йылға ярындағы йортҡа яҡынлашҡан һайын Дауыттың тулҡынланыуы көсәйә, уның күңелендә иблис менән фәрештә туҡтауһыҙ һүҙ көрәштерә. Иблис боролоп китергә ҡоторта, фәрештә иһә ғәфү үтен, ярлыҡаһалар, «хәтереңдән шиксел шырау һурылыр, йәнең тынысланыр» тип әйҙәй, тәүбәгә килергә саҡыра. Ярлыҡау эҙләйме, әллә яза көҫәйме – герой был мәлдә үҙ хәлен үҙе лә бик белеп бөтмәй. Бер нәмәне ул яҡшы белә: уға ғәйебен һөйләп биреү хәжәт. Дауыт, Салауат тигән бик мәртәбәле исем-шәрифтәр күтәреп йөрөгән алтмышҡа етеп барған олпат уҙаман алға атларға үҙендә көс таба, тәүәккәлләп ихатаға инә. Йорт хужаһы Тимербай инде гүр эйәһе булһа ла, уның ҡарсығының Дауытты аңлауы геройға еңеллек килтерә. Дауыт Софья Михайловна йөҙөндә Тимербайҙың ярлыҡауын тоя, был хәл уның күңелен күтәрә, ер өҫтөнән ныҡлы баҫып атлауын да, күкрәк киреп һауа һулауын да еңеләйтә.

Софья Михайловнаға урлашыу тарихын һөйләп биреп, Тимербайҙың ҡәберенә һәйкәлташ ҡуйыр өсөн аҡса – һарыҡ хаҡын ҡайтарып биргәндән һуң, Салауатов ҡайтыр яҡҡа юллана. Юлда ул ғүмере буйы «күкрәгеn ҡыҫҡан төйөрҙөң таралыуына, оҙаҡ тыйылыуҙарға дусар ителгән күңел ҡошоноң талпыныуына, һайрап ебәреүенә» ғәжәпләнә, күңел катарсисы кисереп, сафланыуын тойоп, кинәнес тоя, йәшәү йәмен, мәғәнәһен нығыраҡ күргән-аңлағандай була.

Повеста ғибрәтле тарих хикәйәләнеүе, төрлө холоҡ-ҡылыҡлы геройҙар образы кәүҙәләндерелеүе, көсөргәнешле эске конфликттың төрлө психоанализ саралары аша асылыуы менән

бергә, төп сюжет һыҙығына һиҙҙермәй генә үрелеп бөгөнгө замандың бик күп негатив күренештәре лә, үткән халыҡ, ер тарихы ла сағылыш ала килә, һәм был тарихи факттар, мәғлүмәттәр әҫәр йөкмәткеһен ифрат байыта, актуаль яһай. Дауыт Салауатов менән Вадим Федорычтың элекке ер һатыу-һатып алыуҙар хаҡында һөйләшеп, «Нәҡ хәҙерге олигархтар ише» тип һығымта яһап ҡуйыуҙары үткән менән бөгөнгө араһында йәнәшәлек уҙғарырға, халыҡ менән бай-вельможалар, ярлылар менән алпауыттар араһындағы ҡырҡа айырмалыҡтың нисәмә быуат элек тә, бына килеп бөгөн дә упҡын хасил итеүен күрһәтә. Үткән тарих менән сағыштырып ҡарап, замана афәттәре хаҡында геройҙарҙың әсенеп уйланыуҙары повестың актуаль яңғырашын ҡеүәтләй төшә.

**Шәүрә Шәкүрованың** «Өфө вокзалы» повесының үҙәгенә Рита һымаҡ уҡ сая, үткер, бөтмөр, тәүәккәл, донъяға прагматик ҡарашы ҡеүәтле булған хәҙерге замандың йәш быуыны вәкиле – XX быуаттың һикһәненсе йылдар аҙағында вузда белем алыусы, йәйгеһен студенттар отряды составында поезда проводница булып эшләүсе Шәүрә ҡуйылған. Оҙон-оҙаҡ сәфәр барышында Шәүрәгә, бихисап ғәҙәти проводница иңенә төшкән вазифаларҙы башҡарыуҙан тыш, көтөлмәгән ситуацияларҙа ҡаушап ҡалмай, отҡорлоҡ, сослоҡ күрһәтеп, бәлә-ҡазаһыҙ ҡотолоп сығырға ла кәрәк була. Хәйләкәрлеге, иҫәп-хисапҡа шәп ҡоролған зиһене менән ул үҙен аҡыллы һанаған эшем эйәләрен йә һаран-һыҡмырҙарын, йә яһил-уҫалдарын оҫта ғына итеп «уҡытып» та ҡуя. Ташкентта күрәләтә үҙен күрмәмешкә һалышҡандарында, бушҡа-юҡҡа сиратта торған саҡта Шәүрәнең руссанан башҡортсаға күсеп, тоҙло-боросло, ҡатлы-ҡатлы ҡайһы бер һүҙҙәр теҙеүе лә ярап ҡала – оялып тормаған, комплексташһыҙ еңмеш ҡыҙ, тирә-яҡтағы үзбәктәрҙе шаҡ ҡатырып, һатып алаһы нәмәһен алып сығып китә.

Ҡыйыу ҡыҙ бер яңғыҙы поезд начальнигы үҙе дер ҡалтыраған вагон тулы сиғандар менән уртаҡ тел таба, әхирәте Шәүрәне иң киҫкен мәлдә ташлап ҡалдырған хыянатсы Вәлимәнең вагонының өҫтөн-аҫҡа килтергән, талаған табор Шәүрәнең вагонына бер зыян да яһамай. Күрһәткән хеҙмәттәре өсөн проводница ҡыҙға сиғандар рәхмәт әйтеп төшөп ҡала. Тимер тәгәрмәстәр өҫтөндәге сәфәрҙәрҙә күргән-кисергәндәре, төрлө кешеләрҙең ғибрәтле яҙмыштарының шаһиты булыу былай ҙа тормошон алдан планлаштырып алып барырға ятаҡан, йәшәйешкә романтик хыял томаны аша түгел, ә айыҡ күҙ менән ҡараусы, иҫәп-хисаплы донъя көтөүсе отҡор, тартынып-баҙап тормаған героиняны олоғайтып ебәрә.

Күҙәтеүсәнлеге, эске һиҙгерлеге менән героиня мосафирҙарҙың кемлеген, ниндәйерәк яҙмышлы булыуҙарын да тоҫмаллап, яңылышмай билдәләй ала. Тарих факультетында белем алған студентка Шәүрә өсөн, мәҫәлән, башҡорт сырайлы үзбәк ҡартының үткән тормошон, яҙмышын яҡынса билдәләү ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. «Мистика» тиһә лә, Шәүрә лә, йөҙ-һыны менән Шәүрәнең олатаһына оҡшап торған бөхтә кейемле, хуш еҫле үлән сәйе менән һыйлаусы ҡарт та был осрашыуҙың дауамы буласағын белә. Повесть ана шул осрашыу, йәғни XX быуаттың егерменсе йылдарында Башҡортостандағы ҡанлы көрәш ваҡиғаларына ҡағылышлы архивты өйрәнеү өсөн, уны тапшырған әлеге ҡарттың шарты буйынса, Шәүрәнең Америка Ҡушма Штаттарының Манхеттен ҡалаһында кафела ултырған үзбәк егете Олуғбәктең хатын уҡыған сағы менән тамамлана.

Ш. Шәкүрованың әлеге повесы – тәүге һәм ҙур әҫәре, шулай булһа ла,

«тәүге ҡоймаҡ» төйөрһөҙ килеп сыҡҡан. Киләсәктә йәш авторға хикәйәләүҙе гел генә үткән заман формаһына ҡормауын, монотонлыҡтан ҡотолоуын, булып үткәнде түгел, ә әлеге мәлдә булып ятҡан, хәҙерге заманда хәрәкәт йәйелдерелгән ваҡиғаны һүрәтләүгә күсеүен, диалогтар менән автор хикәйәләүен алмаш-тилмәш бер самала сюжетҡа индереүен теләге килә, хикәйәләүҙе динамикалы, картиналы итеп ҡороуға өлгәшһә, конфликтты көсәйтһә, һис шикһеҙ, уңыш киләсәк. Шуныһы ҡыуаныслы: башҡорт прозаһына тормошҡа ҡалыплашмаған үҙ ҡарашы булған, оригиналь геройҙары, традицион булмаған үҙ хикәйәләү манераһы асыҡ төҫмөрләнгән һәләтле йәш көс килә, тип ышаныслы әйтергә ерлек бар.

**Спартак Ильясовтың** «Йөрөк ҡола» повесына хикәйәләүҙәге күҙгә бәрелеп торған милли тел-һүҙ байлығын оҫта ҡулланыу, йүгерек стиль, тәрән психологизм менән йылҡы малына хас холоҡ-ҡылыҡты ныҡ белеп, еренә еткереп тасуирлау хас. Повеста халыҡ йырҙарынан алынған өҙөктәр, мәҡәл-әйтемдәрҙең урынлы ҡулланылышы ла, мал һәм әҙәми зат тормошон образлы тел менән йәнәшә ҡуйып, кинәйәләп һүрәтләү ҙә, аҙыусының әҫәр өсөн һайланған материалды биш бармағы кеүек яҡшы, хатта үтә яҡшы белеүе, мал образына инеп, уны эстән – уйҙары, тойғолары ағышын тәбиғи итеп, тәғәйен сама белеп кенә яҡтыртыуы ла тәүге ҙур әҫәр яҙыуға тотонған авторға уңыш килтергән. Айырыуса өйөр айғыры Лидерҙың бүреләр менән алышыуын, өйөрҙө бергә туплап тотоусы ҡаты холҡон, сабыш аттарының холҡон, төҫөн, йәшен, сабыш тәртиптәрен, сабыу алымын һүрәтләгәндә аҙыусының маһирлығы һоҡландырғыс: «Лидер арлы-бирле йөрөп, тартылып, ер тырнап, аҡтарып бөттө. Ыҫҡындырып ебәреү менән, кешнәп, һөрән һалып, ҡойроғон текә сәнсеп өйөргә табан сапты. Тояҡтары аҫтынан ҡыртыш ер, үләндәре менән ҡырҡылып, киҫәк-киҫәк булып ян-яҡҡа ырғып бара ине... Ҡонандар аҙау айғыр Лидерға ҡаршы сығып баҫтылар. Сабып килгән килеш береһенең елкәһенән алып ситкә быраҡтырҙы. Икенсеһен һәм өсөнсөһөн түше менән һуғып йыҡты, саяраҡ дүртенсеһенең биленән сапсыны. Ҡалған икеһен талап, бөтөнләй ситкә баҫтырып ебәрҙе лә, башын ергә эйеп, йомояндап, барлыҡ бейәләрҙе, ҡолондарҙы, тай-тулаҡтарҙы бер өйөргә йыйыярға кереште... Йәнәш сабырға өйрәнмәгән Ҡола һурылып алға сыҡты... Сабыш юлының яртыһын шулай туптуп булып үтеү был бәйгелә бик көслө, бик йүгерек аттарҙың, йыйылғаны тураһында һөйләй... Әммә Ҡола дүнән, танауы көмрө һоро, бейек туры, аҡ яллы, аҡ ҡойроҡло саптар һәм оҙон күк тәүге тупта ныҡ беректеләр... Көмрө танаулы Һоро юл башланы. Башын уның ҡойроғона терәп, Ҡола дүнән килде... Йәшәрен йәшәгән, ашарын ашаған оло кешеләр ҙә Ҡола дүнәндең сабыу алымына аптырай ине. Ҡола ҡонан юрға булмаһа ла, сапҡанда юрға алымы менән сапты» – быңдай миҫалдарҙы әҫәрҙән әле байтаҡ килтерергә мөмкин булыр ине.

Был повеста бик ҡыҫҡа ғына бәхетле сабый саҡ миҙгелен кисереп, инәһен юғалтҡас, етемлек әсеһен үҙәгенә үткәнсе кисергән, «Ауыҙы йомшаҡ ҡолон ике бейәне имер» тигән әйтемдәгесә, үҙенең яғымлылығы, теремеклеге, сослоғо менән Ҡара бейәнең, һуңғараҡ ҡолонон юғалтҡан йәш Туры бейәнең һөтөн имеп, утыған, инәйле ҡолондарҙан ҡалышмай, аяҡҡа баҫыпүҫеп киткән ат аҙмышы хаҡында хикәйәләнә. Лидер ҡушаматлы өйөр айғырының, бүреләр менән ҡаты алышта алған яраларынан һуң, һауығып аяҡҡа баҫыуы етем Һарыҡайҙың аҙмышын тағы ла еңеләйтә төшә. Лидер атай

ҡурсыуында башҡа тайҙарҙан тибелмәй-тешләнмәй, ҡыйырһытылмай, ирәйеп үҫеп, Һарыҡай ҡолон оҙонаяҡ, киң түшле ҡола тайға әйләнә. Тағы ла ике ҡышты үтеп, дүртенсе йәшкә сыҡҡан ҡола тай Ҡола ҡонанға – «Ҙурыраҡ булһа ла, ҡаҡ башлы, тороҡло, мундаһы бейек, көслө тибенлекле, ҡаты тояҡлы, тулы яллы һәм ҡойроҡло йәш айғырға» әйләнә.

Тыумышы-нәҫеле менән боронғо данлыҡлы сабыш аттарының тоҡомонан булған, ярыш башында ниндәй тиҙлектә саба башлаған, шул тиҙлектә финишҡа килеп етә алған, иҫ китмәле иркен тынлы, ҡеүәтле, ғәйрәтле, бик ныҡ сыҙам, затлыларҙан да затлы булаsaҡ Йөрөк Ҡола – етем Һарыҡайҙан үҫеп еткән Ҡола ҡонан тәүҙә үҙ колхозында үткән һабантуйҙа беренсе булып килә, унан күршеләге ҙур хужалыҡ һабантуйында еңә.

Район һабантуйында оҙон араға – ун ике саҡрымға ярыш Ҡола ҡонан өсөн беренсе мөһим еңеү була. Бында Ҡола ҡонанға үҙ районынан ғына түгел, сит, йыраҡ ерҙәрҙән – Силәбе, Троицк, Ырымбур яҡтарынан да килгән һайланмыш оҙон ботло, торған ерҙәрендә уйнап, кешнәп, арт аяҡтарына баҫып торған, затлы һаналған, ғәм халыҡты тышҡы ҡиәфәттәре менән һоҡландырған, туктауһыҙ фотоларға төшөрөлгән йүгеректәр менән беренсе тапҡыр ярышырға тура килә. Төҫ-ҡиәфәттәре менән балҡып торһалар ҙа, йыраҡ араға сабышта ҡарыуҙары бик мөшкөл булып сыға был оҙон боттарҙың: «Алда оҙон боттар саң туҙҙыра... Өсөнсө урауға Ҡола үҙенән алда барған тәүге оҙон ботҡа йәнәшәләне. Уны еңел генә үтеп киткәндә, оҙондоң аяҡтары тарбайып, кәүҙәһен ян-яҡҡа һелтәгәнен генә күрҙе ул... Ҡола ҡонандың артынан йөҙ илле ҡуһай самаһы ерҙә уның ерҙәштәре: уның кеүек үк ҡолалар, бурылдар, ҡобалар, күктәр һәм башҡалар килә. Килә улар, килә оҙонға сабып, аталары кеүек түҙемле, инсафлы, ҡылыҡтарын артыҡ күрһәтеп бармаусы, тыныс ҡына үҙ яҙмыштарын ғәмәлгә ашырыусы ерҙәштәре килә...»

Автор комментарийҙары менән оҙатыла килгән ситләтелгән тура телмәр формаһындағы эмоциональ яңғырашлы һорау-өндәү тулы Ҡоланың уйҙарында: «Биҙәүле йүгән кейҙерелгән, еңел күн эйәр һалынған, бәкәлдәре аҡҡа бәйләнгән, текә һикереп сапҡан был оҙон аяҡлыларҙы күккә күтәреп маҡтауҙары, дәрәжәле исемдәр биреүҙәре аптырата ине ҡонанды. Минән ни ерҙәре менән артыҡ һуң ул йоҡа яллы, оҙон ботлолар! Арбаға егелеп, бүрәнә ташый алалармы? Тәүлектәр буйы ашамай-эсмәй эйәр аҫтында йөҙәр саҡрым ер үтәләрме? Ғәләмгә күрһәтәм тип, ер тырнап, үрәпсеп, һикереп тормаһа ла, бөгөнгө сабышыуҙа үҙ ҡеүәтенә, ғәйрәте барлығына, тыны иркенлегенә инанды. Оҙон ботлоларҙан сабырлы, күп тапҡыр түҙемле һәм ғәйрәтле ерҙәштәре менән осрашты ул бөгөнгөнән бик күп, бик күп йылдарҙан һуң да» – яҙыусының тормоштоң әсе хәҡиҡәтенә, ғәҙелһеҙлектәр тулып ятҡан, «Күршенең тауығы ла ҡаҙҙай, ҡатыны ла ҡыҙҙай» тигән мәҡәлдәгесә, сит-яттыҡына ҡыҙығып, унан йөҙ-меңарттыҡ булған үҙеңдең хазинаңды һанламауға, күрмәүгә, баһаламауға әрнеүле-рәнйеүле баһаһы ла йәшеренгән.

Һабантуйҙар гөрләп үтеп китә тора, йүгерек Ҡоланың даны бер нисә көн донъяны шаулата ла онотола тора. Көндәлек тормошта ул ябай хужалыҡ атына, йөк атына әйләнә. Йөгөн мәңге ҡыйыш тейәп йөрөгән аяуһыҙ Ғиниәтулланан икһеҙ-сикһеҙ михнәттәр күрә, ҡуштанға егелгән Ерән бейә өсөн дә ауыр йөк тартып миктәй, ҡойоп яуған ямғырҙа һәм ҡарлы-дауыллы буранда, көйҙөргөс селләлә бәйле йә тышаулы көйө асығып, сарсап та, өшөп-туңып та, күгәүен-серкәйҙәрҙән

таланып та тора. Йәнәштә уйнап, тыпылдап ҡына килгән һылыу бейәнең тартмаған йөгөн бер үҙе көсәнеп тарта, Ғиниәтулланың сыбыртҡыһынан ярыла-ярыла үрҙе үр тип белмәй, батҡылды батҡыл тимәй, дөм-ҡараңғы төндә лә абынмай-һөрлөкмәй ышаныслы ат аҡ күбеккә батып саба ла саба.

Сираттағы һабантуйындағы ярышта ҡатнашыуҙан Йөрөк Ҡоланы үсле, көнсөл кешеләр мәхрүм итә. Затлы нәҫелдән булыуы хаҡында документтары булмаһа ла, ярыштарҙа еңелеү белмәҫ Ҡола арҡаһында махсус йылҡы фермаһында тәрбиәләнгән «саф» аттарҙың бәҫе, хаҡы төшә, йөлдәгә ҡуйылған автомобиль хаҡы ла ферма хужаларының эсен яндыра. Аҫтыртын хәйлә ҡороп, улар Ҡоланы ярыштан алып ташлайҙар. Кәрәкле мәлдә «һәр ваҡыт төбөнә етеп, тоҙ ҡойоп йөрөгән» хужалыҡ етәксеһе лә булмай сыға, һигеҙ йыл буйы алдына ат сығармаған йөрөктө бәйгегә индермәүҙәре уның да, мал-тыуар белгесе Алмастың да, хужалыҡ халҡының да башына ла инеп сыҡмай. Шамил ҡарт менән Йөрөк Ҡола яңғыҙҙары иҫ киткес ғәҙелһеҙлек менән йөҙгә-йөҙ осрашалар, хаслыҡ алдында еңеләләр, таяныр, яҡлашыр, ғәҙеллек даулашыр кешеләр хәл иткес минуттарҙа данлыҡлы Ҡола янында булмай сыға. Һәләкәт ҡотолғоһоҙ булып алға баҫа...

Ошо урында яҙыусы, ниңәлер, образлы, кинәйәле художестволы һүрәтләүҙән туҡтап, моғайын, уҡыусы аңламаҫ типтер инде, туп-тура, публицистик баһа биреүгә күсеп китә, киңәйтелгән автор монологы алымын ҡуллана, шунлыҡтан юғары зауыҡлы нәфис әҙәби әҫәр очеркка тартып алып китә: «Ҡола йөрөктө Оло бәйгегә индермәүҙәренең сәбәптәре кешеләрҙең ижтимағи-сәйәси һәм ғәҙәти тормоштарында көн һайын осрай. Аҡты ҡарағa әйләндереү, яҡшы булғанды насар итеп күреү, көнләшеү, күңел тарлығы, барлыҡ халыҡтың теләген танымай, ваҡиғаны үҙ ҡулына алған өймәкәй кешеләрҙең теләген тормошҡа ашырыу ине был... Ул үҙенең тоҡомон аслыҡҡа, һыуһауға, ауыр йөккә, көндәлек эшкә, ярышҡа – барыһына ла ҡулайлашҡан тоғро дуҫ, ярҙамсы, оҙон юлда ал бирмәҫ талымһыҙ итеп танытты. Аңға эйә булған беҙ, халҡым, илемерем, тип янып йөрөгән, уның үткәненә һәм бөгөнгөһөнә матди һәм рухи өлөш индергән шәхестәребеҙгә тейешле баһа бирә алабыҙмы? Быны аңлап, ҡул һәм тауыш күтәреү өсөн халыҡтың рухи баҫҡысы булыу мотлаҡ. Милләтте етәкләүсе ижтимағи-сәйәси, сәнәғәт эштәрен, уның мәнфәғәтен тормошҡа ашырған етәкселәребеҙгә, һәр саҡ алда йөрөгәндәргә көс-ғәйрәт биреү, таяныу, ҡуҙғалмаҫ, сыйылмаҫ нигеҙ булыу – бөтәбеҙҙең дә оло бурысы түгелме?» Был монологта, риторик һорауҙарҙа повестың төп идеяһы, авторҙың әйтергә теләгән төп фекере асыла. Яҙыусы шуны тура һуҡтырмай, тел төбө менән, образлы саралар аша бирһә, отошлораҡ булыр ине, зауыҡлы уҡыусы, һис шикһеҙ, аңлар-төшөнөр ине.

Шулай итеп, Спартак Ильясовтың «Йөрөк ҡола» повесында ат яҙмышы хаҡында хикәйәләнһә лә, уҡыусы ирекһеҙҙән йәнәшә кешеләр яҙмышын да сағыштырып ҡарай, баһалай килә. Беҙҙең илдә, аҫыл, затлы йылҡы малы кеүек үк, күтәреп кенә йөрөтөрҙәй, ҡәҙерләр, һаҡларҙай, донъяға һирәк тыуған ҙур талантлы әҙәми заттар ҙа тейешле ҡәҙер-хөрмәт күрмәй, таяныр терәк тапмай баҡыйлыҡҡа китә. Халҡын, илен данлаған, уның ғорурлығы булған, мәртәбәле еңеүҙәр, затлы бүләк-баһалар алған был аҫыл заттар, бәҫле йәшәр урында, ҡара эшкә, бүрәнә ташыуға егелгән, унда ла үҙе менән ярышлап барған ялҡау, хәйләкәр, аҫтыртын ҡушары өсөн дә ауыр йөктө бер үҙе көсәнеп тартҡан, һәр төрлө үсле, көнсөл бәндәләрҙән, үтә ғәмһеҙ

түрәләрҙән ҡыйырһытылып йәшәргә, көсөн-ҡеүәтен сарыф итергә мәжбүр булған Йөрөк Ҡолалай, ҡағылып-һуғылып ғүмер кисерәләр. Еңеүҙәр яулағанда алҡыштар яуһа ла, ябай халыҡтың күңел түрендә ҡалһа ла, вазифалы түрәләрҙең хәтеренән улар тиҙ юйылалар. Йөрәгендә Йөрөк Ҡолалай ярыш ҡомары йөрөткән, бәйгелә ҡатнаша алмауҙан йөрәге ярылып үлгән данлыҡлы, еңелмәҫ сабыш аты һымаҡ, старттан гөрөп сығарылғас та, эйәрҙән бәреп төшөрөлгәс тә, ярһыу күңеленә сыҙаша алмаған, гөрләтеп-шаулатып оло-оло эштәр башҡарып сығырға, халҡына фиҙакәр хеҙмәт итергә, уны данларға һәләтле уҙамандар, ысын мәғәнәһендәге ҙур шәхестәр, Хоҙай биргән потенциаль мөмкинлектәрен тормошҡа ашыра алмай, йөрәктәре шартлап ауа.

**Таңсулпан Ғарипованың** «Илекәй» повесы Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары хаҡында. Төп геройҙары – Нурулла, Әхмәтйән, Ғиндулла. Хикәйәләү берсә Нурулла, берсә Әхмәтйән, берсә Ғиндулла исеменән алып барыла, тормош күренештәре алмаш-тилмәш улар күреүенән, баһалауынан сығып яҡтыртыла. Геройҙарҙың бөгөнгө йәшәйештәрен һүрәтләү менән үткән бала саҡ, йәшлек, һуғыш һәм һуғыштан һуңғы осорҙарҙағы тормоштары хаҡындағы ҡыҫҡа, тос йөкмәткеле ретроспективалар аралашып килә, шуға күрә повестағы ваҡиғалар ағышы етеҙ, динамикалы алып барыла, хәтирәләр хәрәкәтте һүрәнләтмәй, ә геройҙарҙың бөгөнгө мәлендәге сәйерәк эш-ҡыланыштарына, холоҡ-фиғелдәренә яҡтылыҡ һирпә, асыҡлыҡ индерә, характер асылдарына үтеп инергә мөмкинлек бирә.

...Улар ҡасандыр ата-бабалары төйәк иткән тәбиғәттең иң хозур урынында, илектәр күрһәткән Хоҙай Тәғәләнең изге төбәгендә – Илекәй ауылында донъяға киләләр, тәпәй атлап китәләр, бер синыфҡа уҡырға баралар. Бер ҡыҙҙы – гүзәлдәрҙән-гүзәл Хәтирә исемле ҡыҙҙы яраталар. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, уларҙың өсәүһен дә Хәтирә ҡулъяулыҡтар биреп фронтҡа оҙата. Әхмәтйән менән Нурулланың ҡулъяулығына рауза сәскәләре сигелгән булһа, Ғиндулланың ҡулъяулығына сигелгән йөрәк теге икәүҙең йөрәген яндыра.

Хәтирәнең төҫкә-башҡа ла, буй-һынға ла, тел-һүҙгә лә оҫта, береһе шәп спортсы, береһе өҙҙөрөп гармун уйнаусы Әхмәтйән йәки Нурулланы түгел, ә уларҙан күпкә ҡайтыш, һипкелле, йыуаш, сибек, «теге... ни» тип тотлоғоп тороусы Ғиндулланы яратыуын сос, үткер сая, һылыу егеттәр бер нисек тә аңлай ҙа, килешә лә, кисерә лә алмайҙар!

Өс дуҫ араһынан Ғиндулланың яҙмышы иң ауыры, ғазаплыһы, әрнеүлеһе булып сыға. Ҡазанда хәрби училище тамамлап, офицер дәрәжәһендә һуғышҡа ингән Ғиндулла әсирлеккә эләгә, концлагерь тамуғын үтә. Хоҙай биргән ғүмере бөтмәгәнгә, мөғжизә менән тере ҡала.

Әммә үҙ илендә уны әсиргә ҡарата мыҫҡыллы, кәмһетеүле мөнәсәбәт көтә, йәненән артыҡ күреп яратҡан Хәтирәһе зым-зыя юғалған булып сыға. Хатта һуғыштың аяуһыҙ дөрөҫлөгөн үҙ күҙҙәре менән күргән Әхмәтйән менән Нурулла ла Ғиндулланың әсирлеккә эләгеүен аңларға теләмәйҙәр, ғәфү итмәйҙәр.

Ғиндулла оло юғалтыуҙар кисерһә лә, ауыр һынауҙарҙы кисһә лә, бер нигә ҡарамай, тормоштан йәм табып йәшәргә һәләтле көслө шәхес булып һынлана. Йәшлек таңында Хәтирә менән шаяра-көлә һыуын ташыған йырлы шишмәгә, хәҙер инде һағыш көслөрәк ағылған, Хәтирә көлгәндәге көмөш сыңдар яңғырамаған шишмәгә ҡарап күңелен баҫа: «Бауыр баҫыр балам да, һөйгәнем дә юҡ, ләкин шишмә бар. Хәтирәнең эҙҙәрен һаҡлаған ер бар.

Ошо бәхет түгелме?» – тип йәшәй. «Илкәйемә ҡайтып ун йыл йәшәһәм, үлһәм дә үкенмәҫ инем» тигән Ғиндулла, ҡайтҡанына ҡырҡ йылдан ашҡас та, йәшәүҙән туймай. Хәтирәне күреүҙән һаман өмөтөн өҙмәй, ҡорҙаштары менән аңлашыу мәлен сабырлыҡ менән көтә.

Ғиндуллаға ҡарағанда яҙмыштары күпкә мәрхәмәтлерәк булған Әхмәтйән менән Нурулланы ла тормош ныҡ ҡына һынай, ҡаға-һуға.

Ҡорҙаштарынан иң тәүге булып Илекәйгә ҡайтып төшкән фронтовик Әхмәтйәндең тыныс тормошта арҡа терәрлек таянысы – һуғыштан ҡулын юғалтып, сулаҡ булып ҡайтһа ла, йорт-ҡураны ҡарап тотҡан атаһы, заманына күрә хәлле генә донъя көтөп торған әсәһе була. Арҡаһы ныҡ булғанға күрә, Әхмәтйән башкөллө колхоз эшенә сума. Көнбайыш илдәрҙең ниндәй мул тормошта йәшәүен күреп, сәмләнеп ҡайтҡан айбарлы ир-егет миктәгән хужалыҡты йәнтәслимгә күтәрергә тотона: «Тырышты Әхмәтйән: сәсеүлектәрҙе иркенәйтте, колхоз малдарына аҙбарҙар һалдырҙы, емеш-еләк баҡсаһы булдырҙы, ҡош-ҡорт үрсетте... алған табыштары миллион һумдар менән үлсәнһә лә, ул етәкләгән «Ҡыҙыл Октябрь» һаман «убыточный»ҙар исемлегендә ҡалды. ...Ауыл хужалығы техникаһына хаҡтар бик юғары, ә ауыл хужалығы етештергәнгә хаҡтар, киреһенсә, бик түбән. Ә бына бойҙайҙы тарттырып, он итеп һатҡанда, хатта икмәк бешереп, ҡалала үҙ кибетен булдырғанда? Иттән, емешеләк, йәшелсәнән консерва яһағанда? Һөттән май бешеп, эремсек эретеп, ҡорот ҡайнатып һатҡанда? Ошо уйҙарын ул райкомға барып һөйләне бер. Тыңланылар. Аҙағынан саҡ эшенән бушатманылар: көҙ еткәс, келәттәрен тап-таҙа итеп һепертеп, игенде алып киттеләр... гектарынан егерме бишутыҙ центнер бойҙай алған колхоз ҡыш буйы фуражды хөкүмәттән ҡыйбат хаҡҡа һатып алып ашатты».

«Үгеҙ елкә, йомро баш» Нуруллаға ла яҙмыш һынауҙарын байтаҡ күтәрергә тура килә.

Әсәһе үлгәс, күрше ҡыҙы Зәкиәгә өйләнә. «Елдән етеҙ, ебәктән йомшаҡ» Зәкиәнең күңел йылыһы, өҙөлөп яратыуы «Хәтирә» тип һулҡылдаған йөрәк яраһын уңалта, һағышын баҫа. Ғаиләне шатлыҡҡа күмеп бер-бер артлы тыуған улдарының, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғүмерҙәре оҙон булмай, Ҡыуандыҡтарын Чехословакиянан тимер табутта килтерәләр, Һөйөндөктәре Афғанстандан «ит турағыстан үткән кеүек туралып, тас яра» булып ҡайта һәм, яраларҙан мандый алмай, донъя ҡуя. Нәҫел дауамы булып уның берҙәнбер улы Гәрәй генә тороп ҡала.

Һуғыштан ҡайтҡас, «Илекле ҡыр» ҙа киҫкен бәрелеш-аңлашыуҙан һуң, Хәтирәнең яңғыҙын тауҙа ҡалдырып киткән Әхмәтйән менән Нурулла ауылға икеһе ике һуҡмаҡтан төшә, артабан тормошто ла икеһе ике һуҡмаҡтан атлап үтә, бүтәнсә яҡынлашмайҙар. Оҙаҡ йылдар береһе колхоз рәйесе, икенсеһе ауыл Советы рәйесе булған Әхмәтйән менән Нурулла эш буйынса бер-береһе менән бәрелешһә, тотҡан ҡиблалар, ил ҡоролошо үҙгәреп киткәс, иман, инаныс мәсьәләһендә бәрелешәләр.

Бергә пионерға, комсомолға ингән, коммунист булған Нурулла Әхмәтйәндең дин юлынан китеүенә сикһеҙ нәфрәтләнә. Ғиндулланың һуғыштан һуң егерме йыл үткәс ҡайтып төшөүенә ҡарағанда ла, Әхмәтйәндең хыянаты уның күңелен нығыраҡ үртәй. «Буш боғаҙ, тутыҡҡан флюгер», «предатель» тип атай ул ҡорҙашын.

Шулай итеп, бер үк ҡыҙҙы һөйөү һәм бер-береһенән көнләшеү генә түгел, маңлайҙарына яҙылған яҙмыш ҡушыуы ла, Совет илендәге тормош ағышы ла, социалистик йәмғиәттәге закондар ҙа,

геройҙарҙың үҙ булмыштары, ҡараштары, принциптары ла – ҡыҫҡаһы, мөхәббәт өсмөйөшө генә түгел, ә байтаҡ башҡа мөһим сәйәси-ижтимағи, рухи-әхлаҡи сәбәптәр айыра йәшлек таңында йәндәй яҡын булған өс дуҫты.

Өс герой үҙҙәренсә өс дөрөҫлөктө тотоп йәшәй, һәр береһе үҙен хаҡлы тип һанай, үҙенең хәҡиҡәтен берҙән-бер дөрөҫ тип иҫәпләй. Тормоштоң аяуһыҙ һынауҙары айырылмаҫ өс дуҫты айырып ҡуя, бер ауылда йәшәһәләр ҙә, оҙаҡ йылдар ҡорҙаштар күңелдәрендә бер-береһенә үпкә һаҡлап, бер-береһенең тупһаһына баҫмай, аралашмай-күрешмәй йәшәп ята.

Повеста ябай ғына тойолған деталгә – сигеүле ҡулъяулыҡҡа мөһим идея-эстетик нагрузка йөкмәтелгән, ул геройҙар күңелендә Хәтирәгә булған мөҡәддәс һөйөү тойғоһоноң ни тиклем көслө, бөтмәҫ-төкәнмәҫ икәнлеген күрһәтә. Был ҡулъяулыҡты – йәшлегенән ҡалған берҙән-бер һәҙиәне, ҡарт көнөндә донъялыҡта зиһенен арбаған берҙән-бер әйберҙе, Илекле ҡырҙың – тыуған төйәгенең еҫен һаҡлаған берҙән-бер йыуанысты Әхмәтйән, хатта мөмкин булһа, әхирәткә алып китергә әҙер.

Йылдар дауамында бер-береһенә ҡарата байтаҡ хәтер ҡалдырыуҙар йөрөтһәләр ҙә, тормош үҙенекен итә. Ахыр сиктә, ҡорҙаштар бер-береһен аңлап, ғәфү итеп, бәхилләшеү һорай.

Шулай итеп, геройҙар бөтә нәмәгә лә, үҙҙәренә һәм бер-береһенә лә йәшәлгән ғүмерҙәре бейеклегенән тороп баһа биреүгә күтәрелә.

Илекәй ауылында һәр яңы йорт күтәргән хужа күҙенә күренеп киткән изге илектәр тауына улар ауыртыныуһыҙланыуҙарына, тән ҡыҫыуға, йөрәк ҡағыуына – бер нигә ҡарамай, тәүәккәл күтәреләләр һәм алтын приискылары хужаһы, ер аҫты байлыҡтарына ғына ҡәнәғәт итмәйенсә, ер өҫтө байлыҡтарын да аҡтарып-ҡутарып сереп байып ятыусы ҡомһоҙ Семен Зацепинға һәм уның бихисап хеҙмәтселәренә, аҡса, шәп иномарка хаҡына тыуған төйәген һатҡан Гәрәйгә ҡаршы оборона тоталар, үҙҙәренең ҡәтғи талаптарын ҡуялар.

Сиселеш фажиғә менән тамамлана: Урал батыр эҙләгән Самрау иленә тиң булған гүзәл, хозур «Илекле ҡыр» шартлатыла, ата-бабаларынан мираҫ булып ҡалған тыуған төйәктәрен тоғро һаҡлаған илһөйәр батырҙар, Бөйөк Ватан һуғышы ҡырҙарынан фашистарҙы еңеп тере ҡайтҡан яугирҙар һәләк була. Изге төйәктәрен һаҡлап-яҡлап Илекәй ҡаһармандары шәһит китә. Аяуһыҙ ысынбарлыҡ Нуруллаҙың мөҡәддәс өмөтөн, «ауған ағас тамырҙарына йәшенә» тигән, үҙенең ғүмере Илекәйендә дауам итер тигән ышанысын, йән тыныслығын да селпәрәмә килтерә – бүләре Илекәйҙең дә ғүмере ҡыйыла.

Күренеүенсә, бөгөнгө повесть бөгөнгө ҡатмарлы заманды ябайлаштырмайынса, замандаштың ҡаршылыҡлы күңел кисерештәре аша бирергә ынтыла.

**Гөлфирә ГӘРӘЕВА,**
**филология фәндәре докторы.**

*1812 йылғы Ватан һуғышына — 200 йыл*

**Сабит**
**ФАЗЛЫЕВ**

# БОНАПАРТ ИШЕТКӘН ОРАН

## ХИКӘЙӘТ

Француз армияһының ҡыйыу офицерҙарының береһе Жан Батист Марселен де Марбо император Наполеондың Рәсәйгә баҫып инеүен түҙемһеҙлек менән көтөп алды. Юҡ, ул бер ниндәй ҙә байлыҡҡа өмөт итмәне, Марбоның төп маҡсаты – хәрби карьера, Рәсәйҙе еңгән хәлдә, ул үҙен маршал чинында күрә ине. Шул ҙур ҙа, ҡеүәтле лә империяны еңеүҙәренә капитан Марбо, әлбиттә, нык ышанды, сөнки Наполеондың тағы ла ҡеүәтлерәк армияһында уның кеүек батыр французлар бихисап һәм, иң мөһиме, еңеүҙәргә әйҙәгән императорға улар ышана. Наполеон үҙен еңелеү белмәҫ полководец икәнен дә етерлек иҫбатлағайны. Ымһындырғыс баҫҡыстар буйлап өҫкә тиҙ арала үрләү өсөн тыныс ваҡытҡа ҡарағанда һуғыш – бик яйлы, был хәҡиҡәтте капитан күптән аңлап алғайны. 1799 йылда Марбо 1-се гусар полкының ябай һалдаты сифатында хеҙмәт итһә, 1807 йылда капитан дәрәжәһенә күтәрелеп өлгөрҙө. Күптәр офицер дәрәжәһен алыу өсөн унар йылдар хеҙмәт итә, ә ун ете йәшлек Марбо бер ай эсендә кесе лейтенант чинын эләктерҙе. Яҙмыш та уға ыңғай, туҡтауһыҙ бәхет елдәрен уның яғына өрҙө, ут эсенә атлығып торған һуғышсыға батырлыҡтар ҡылыу өсөн төрлө уңайлы шарттар булдырып торҙо. Италия кампанияһында ла шулай килеп сыҡты: осраҡлы ғына яраланған командир урынына кавалерияға етәкселек итеп, австриялыларҙың байтаҡ пушкаларын ҡулға төшөрҙө ул. Аустерлицта иһә маршал Ожеронның адъютанты сифатында Марбо үҙен булдыҡлы офицер итеп күрһәтте. Эйлау янындағы һуғышта ул капитан ине инде.

Капитан Марбо – йәне-тәне менән Наполеонға бирелгән кеше. Француз армияһының еңеүе өсөн ул үҙен аяманы, пулялар ямғыры аҫтында һалдаттарҙы алға әйҙәп, иң алдан атында елдерер булды, боҫоп ултырырға яратманы, һәр бәрелештә ҡул аҫтындағы һуғышсыларға тынғылыҡ бирмәй, туҡтауһыҙ атакаларға әйҙәр ине. Барлыҡ бәрелештәрҙән дә капитан яраланып сыҡты: йә пуля

*Сабит Фазлыев (1969) Ейәнсура районында тыуған. БДУ-ның тарих факультетын тамамлағандан һуң, Иҙәш мәктәбендә укытыусы-завуч булды. Хәҙер — Себер вахтовигы. Әҙәби әҫәре «Ағиҙел»дә тәүләп баҫыла.*

эләктерҙе, йә казак һөңгөһөнән сәнселде, йә йәҙрә ярсығы тәнен тишеп иләкләне. 1808 йылдың 1 декабрендә Агреда янындағы бәрелештә ул ҡылыстан яраланды, Сарагосаны алғанда тәненә пуля тейҙе, шул йылда уҡ штыкка эләкте, Цнайм аҫтында ҡулын пуля тиште. Ләкин илһөйәр Марбо лазаретта оҙаҡ ятмай, яраһы төҙәлер-төҙәлмәҫтән кире сафҡа баҫырға ашыға, яңы батырлыҡтарға ынтыла ине һәм, ысынлап та, башҡа французлдарға өлгө булып торҙо. Капитандың тырышлығын армия етәкселеге лә күрмәй ҡалманы, уға һоҡланып ҡаранылар, уның батырлыҡтары тураһында хатта император ҙа хәбәрҙар, тинеләр.

Рәсәй кампанияһы башланғанда капитан Марбо егерь полкы командиры вазифаһында хеҙмәт итә ине. Неман йылғаһын кискәндә, ул үҙенең полкы башында, атының өҙәңгеһенә баҫып, императорға дан ҡысҡырып торҙо, сөнки уның хыялы тормошҡа аша – Рәсәй ерендә ул үҙен күрһәтәсәк! Ысынлап та, баҫҡын армияһы урыҫтарҙы ил сигенән башлап туҡтауһыҙ сигендереп, ҙур еңеүҙәргә өлгәште, ил эсенә төпкәрәк үткән һайын Марбоның күңеле күтәрелде. Уның өсөн француз һалдатынан да батыр һалдат юҡ ине донъяла, Францианан да көслө ил юҡ, тик Франция ғына бөтә донъяға хужа булырға хоҡуҡлы. Ләкин капитан өсөн  һәүетемсә башланған һуғыш бер ыҙаға әйләнде, Рәсәйҙең ҡаты һыуыҡтары үҙәгенә үтһә, шахмат таҡтаһындағылай тәртипле булырға тейешле һуғышты батыр французлдарға "тиң булмаған" ҡырағай атлылар боҙоп йонсотто. Уның уйынса, һуғыш ҡанундарын дошман яғы ла боҙорға тейеш түгел, элеккесә тигеҙ сафтар туп-тура ташланып, бер-береһенең боғаҙынан алырға тейеш. Беренсе бәрелештә үк капитан Марбо башҡорт атлыларын үҙһенмәне, йәнәһе, улар барлыҡ һуғыш тәртиптәрен һанға һуҡмай, етмәһә, үҙҙәренең сәйер кейемдәре менән һуғыш күренешен боҙа. Мәгәр капитандың иң яратмағаны – уларҙың ун туғыҙынсы быуатҡа тап килмәгән ҡоралдары, иҫкелек ҡалдығы – уҡтар. Башҡорт һуғышсылары тураһында ул ишеткәне бар ине, тик ул хәбәрҙәргә бик әһәмиәт бирмәгәйне, сөнки күбеһенсә маршалдарҙың адъютанты булып йөрөнө. Башҡорттар ҡатнашлығында барған беренсе бәрелештә үк һыҙғырышып, ҡысҡырышып елгән атлыларҙы күреп, капитан хайран ҡалды, кейемдәренә иҫе китте, елдәй һыҙғырып яуа башлаған уҡтарҙы шәйләп, батыр яугир шөрләне хатта.

– Les amours du nord! Les amours du nord!* – тип ҡысҡырынды ҡото алынған офицер.

Дәһшәтле бер тулҡын булып, ят һүҙҙәр ҡысҡырышып елгән "төньяҡ амурҙары", күҙ-асып йомғансы мәргән уҡтарын яуҙырып, француз полкының өстән бер өлөшөн ҡырҙылар ҙа, уларға килеп еттек тигәндә генә, кире боролоп саптылар. Иҫенә килгән Марбо полкын ҡабаландыра-ҡабаландыра башҡорттар артынан төшөрҙө, ләкин ҡырағайҙар, етеҙ, тәбәнәк аттарында һай-һайтлап, төрләһө төрлө яҡҡа сәселеп таралышты, уларҙы ҡыуалап етеү мөмкин түгел ине. Шул саҡ капитан урыҫтар яғынан уларға табан ыңғайлаған гусар эскадронын шәйләп, полкын кире борорға мәжбүр булды, сөнки тәртипһеҙ сәселгән башҡорт һыбайлылары артынан француз кавалерияһы ла, сафтарын юғалтып, тәртипһеҙ таралышҡайны. Әммә көтмәгәндә хәлдәр тағы ҡатмарлашты: француз полкы ҡабат тупланып, урыҫ гусарҙарын байтаҡ артта ҡалдырып, үҙҙәренекеләр яғына сабыуға, әлеге ҡырағайҙар ҡабырғанан кире пәйҙә булып, атлы полкты өҙгөләргә тотондо. Тағы ла шул уҡтар яуҙы, һөңгөләр осто, ҡото алынған французлар ҡаршылыҡ күрһәтергә уйламанылар ҙа, шыйлаған уҡтар әле бер французды, әле икенсеһен эйәрҙәренән ҡолатты, хужалары артынан

*«Төньяҡ амурҙары! Төньяҡ амурҙары!»

аттар ҙа уҡ ямғырына эләгеп, ергә һөрлөгөштө. Яу яланы буҭҡаға әйләнде, яралы аттар кешнәне, башҡорт ҡылысына һәм һөңгөһөнә эләккән французлар аҡырышты, ә иҫән ҡалғандары, бойороҡ көтөп тормай, бәрелештән сығырға тырышты. Мәхшәрҙән саҡ ҡотолған Марбо, иҫән ҡалған, әммә ҡурҡыуҙан ағарынған яугирҙары алдында, полктың ҡырылыуын аҡлау маҡсатында, асыуланып туҙынды:

– Һағыҙаҡтар! Төптө һағыҙаҡтар! Ҡырағай азиаттар! Һуғыша ла белмәйҙәр! Һуғыштарының бер ниндәй тәртибе юҡ! Ҡоралдарын әйт, ташбыуаттар!

Әммә әлегә алыш батыр француз өсөн ыңғай барҙы. Батырлығы, башлы булғаны өсөн француз командованиеһы уны хөрмәт итте, Марбо тиҙҙән полковник чинына үрләтелде. Ошонан һуң дәрте тағы ла ныҒыраҡ күтәрелде, полковник элеккегә ҡарағанда ла аяуһыҙыраҡ алыша башланы. Элеккесә бер бәрелештән дә ул яраһыҙ сыҡманы. Березина йылғаһын кискәндә пулянан яраланды, өҫтәп казак һөңгөһөнән сәнселде, Яҡуб ауылы янында полковниктың яурынын пуля сыйҙы, ябынса аҫтына тағы ла һөңгө ҡаҙанылар. Ләкин Марбоның йәш организмы көслө, тиҙ йүнәлде, күбеһенсә ул һауығып бөтмәҫ борон яуға ынтыла ине.

Полковник Марбо күрә алмаған башҡорт полктары яҡшы ҡоралланған французлрҙы теткеләүҙәрен дауам итте. Смоленск аҫтында атаман Платов ҡарамағында хәрәкәт иткән 1-се башҡорт полкы генерал Себастиани дивизияһын ҡыйратты. Артабан да был полк фронттың иң ауыр урындарында хәрәкәт итте һәм күп бәрелештәрҙә еңеп сыҡты. Сираттағы ҡыҙыу бәрелештә Марбо хөрмәт иткән офицерҙарының береһе – унтер-офицер Месленның күкрәген башҡорт уҒы тишеп сыҡты. Башҡорт уҡтары күп французлрҙы аяманы, әммә ҡыйыу Месленның һәләк булыуы Марбоны ныҡ тетрәндерҙе. “Урыҫ пуляһынан үлеүең мең артыҡ!” – тип ҡысҡырынды ул һуғыш барышында. Месленның күкрәген тишеп сыҡҡан уҡты йән асыуынан һындырып ситкә бырағтырҙы, әммә үҙе лә саҡ янтайып өлгөрҙө, ҡурҡыныс тауыш сығарып осҡан сираттағы уҡ полковниктың кителен сыйып, ергә ҡаҙалды. “Шул ҡырағай азиаттарҙың тәүтормош ҡоралдарынан һәләк бул инде!” – тип ул әлеге уҡты ла йән асыуынан ҡылысы менән тураҡларға тотондо. Марбо шулай туҙынып, иғтибарын юғалтҡан арала, елдәй елеп ташланған башҡорттар ҡырҡлап французды ҡырып, кире сапты.

Бәрелеш тымып, үлектәрҙе ерләгәндән һуң, полковник шартлап янған усаҡҡа ҡарап уйға батты. “Ҡырағайҙарҙың бер ниндәй һуғыш тактикаһы юҡ... Кәбәхәт уҡтарын әйт әле һин уларҙың! Алдағылары тура атһа, арттағылары алдағы иптәштәренә тигеҙмәҫ өсөн һауаға ата, ә уҡтары, хужаларының бойороғон үтәгәндәй, һауала дуға яһап, тап сәпкә тейә, ситкә осҡандары бик һирәк. Пуляны дуға яһап осороп ҡара! Ә күпме ат һәләк булды! Ҡырҡ аҙымдан шул ябай уҡ атты тишеп сыға ла ҡуя! Аттары ла, үҙҙәренә оҡшап, әрһеҙ бит әле ул, арымайҙар, шик юҡ, “төньяҡ амуры” етеҙ аттар арҡаһында уҫал һуғыша. Ҡайҙан тапҡан уларҙы урыҫ императоры? Мәҙәниәтле Европанан килеп, ҡырағай тәүтормоштарҙан ҡырыл инде! Ана, капитан Бертендың башын йәҙрә өҙҙө, һоҡланырлыҡ үлем – шуға ул йәл дә түгел һымаҡ, ә Меслен үлеме менән һәләк булғандар күңелде өйкәй... Атака барышында иҫерек урыҫтар менән маңлайға маңлай килеүе күпкә еңелерәк, күҙҙәре тоноҡланған урыҫ һалдаты штыгын ҡайҙа сәнскәнен белмәй. Ә башҡорттар араҡы ла эсмәй, тиҙәр. Уларҙың хәҙерге цивилизациянан ситтә булыуы француз армияһы өсөн ҙур бәлә, ҡырағайҙарҙың айыҡ уяулығы күп юғалтыуҙарға килтерә, ҡәҙерле француз ғүмерҙәре ҡыйыла...”– тип көйҙө.

Асыуынан усаҡ йылыһын да тоймаған полковник Марбо ҡулын ҡулға ышҡып ултырҙы-ултырҙы ла янындағы һалдатҡа шарап килтерергә ҡушты. Һалдат тиҙ

йөрөнө, шарап уртлаған полк командиры, эсендә йылы тойоп, тағы үҙ уйҙарына батты.

1807 йылда уҡ ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныслы ла ваҡиғаны бөтә армия буйынса һөйләгәйнеләр. Капитан Марбо ул ваҡыттарҙа маршал адъютанты ине. Башҡорт полктары тураһында ишетеп кенә белә, үҙенең улар менән асыҡтан-асыҡ осрашҡаны булманы. Бәләкәй генә бәрелештәрҙең береһендә ҙур танаулы француз подполковнигының шул танауына башҡорт уғы инеп ултырған, имеш, уҡ танауҙы тишеп, ҡап уртаһында туҡтап ҡалған, ти. Етмәһә, урыҫтарҙы көлдөрөп, подполковник әсиргә төшкән. Был ваҡиғаны бик оҙаҡ онотманылар, сөнки уҡтан танауҙы тиштереүҙе мәҙәниле французлар кәмһетеү һымаҡ ҡабул итте. Күрәһең, Көнбайыш Европа һаман да ҡасандыр аталары иманын уҡытҡан һундарҙы һәм Атилланың ҡамсыһын онота алмай. Ул ваҡытта адъютант Марбо башҡорттар менән бәйле шул ваҡиғаға бик үк әһәмиәт бирмәгәйне. Әле усаҡ янында ултырған кәйефһеҙ полковник һундарҙы иҫкә төшөрөп, башҡорттар менән сағыштырҙы ла үҙ алдына зәһәр һөйләнеп ҡуйҙы: “Варварҙар!”

Артта – Бородино, унан һуң бер файҙаһыҙ – Мәскәү. Мәскәүҙән сигенә башлағас, полковник Марбо Бөйөк армияның көндәре һанаулы ҡалғанын аңлағайны инде. Сигенгән һайын бик йыш уйға сумды батыр полковник. Неман йылғаһын кире кискәс, бик күп юғалтыуҙарҙы, һәләк булған иптәштәрен иҫкә төшөрөп тәныҡ әрнене. Рәсәй ерендә маршал Мюрат атлылары тулыһынса тиерлек ҡыйратылғайны, өстән бере генә Неманға килеп етте. Кем-кем, Марбо бик яҡшы белә кем бында тырышҡанды! “Күренекле маршалдың еңелмәҫ армадаһын ҡыйратыуҙа шул “төньяҡ амурҙары”ның өлөшө ҙур, шулар ғына ғәйепле, тағы ла ҡайҙандыр урыҫтар уйлап сығарған партизан хәрәкәте бөтә һуғыштың йәмен ебәрҙе. Әллә шул башҡорттарҙың тәьҫире булдымы, урыҫтар ҙа тәртипһеҙ һуғышырға өйрәнеп алды. Ҡырағай Көнсығыш!” Рәсәйҙән ҡотолоп, Германия еренә килеп еткәнсе полковник шул ауыр уйҙарынан арына алманы.

Лейпциг янында үтәсәк “халыҡтар алышы”на Наполеонға ҡаршы берләшкән армия – урыҫтар, прусактар, австриялылар, шведтар тупланғайны. Башҡорт полктары шул һуғышта ҡатнашырға бойороҡ алды. 1813 йыл, 16 октябрь. Бәрелеш башланыр иртә болотло килде, яйлап һибәләргә тотонған ямғыр көсәйгәндән-көсәйҙе. Һуғыш Лейпциг биҫтәһендә урынлашҡан ауылдар тирәләй ҡапыл һәм ҡыҙыу башланып китте. Тәүҙә ике яҡтан да ике меңдән ашыу пушкалар ут асып, бер-береһенең позицияларын теткеләп сыҡты, артабан ысын мәхшәр башланды. Французлар, Рәсәйҙән һуң реванш алырға теләгәндәй, көнө буйы урыҫ позицияларына һөжүм яһаны. Уңышҡа өлгәшкән дә булғайнылар, позициялар көн дауамында берсә французларға эләкте, берсә кире урыҫтар ҡулына күсте, әммә икенсе көнөнә бәрелештәр күбеһенсә берләшкән армия файҙаһына барҙы. Наполеон маршалдары Ожеро һәм Понятовский ғәскәрҙәре обороналаған Марклейберг ауылы, французларҙың ҡаты ҡаршылығына ҡарамаҫтан, генерал Хельфрайхтың 14-се дивизияһы һәм фельдмаршал Клейстың 12-се бригадаһы тарафынан баҫып алынды. Генерал Горчаков ғәскәре, Кленау командалығы аҫтында хәрәкәт иткән 4-се австриялылар корпусы ҡатнашлығында, Либертволькквитц ауылында урынлашҡан генерал Лористондың 5-се пехота корпусын һәм маршал Макдональд командалығындағы Н. һанлы корпусты билгән позицияларынан бәреп сығарҙы. Көн үҙәгендә Лейпциг тирәләй һуғыш ҡыҙҙы. Император Наполеон үҙенә тәғәйенләнгән ғәскәр менән Лейпцигтан көнсығыштараҡ ултырған Вахауҙа урынлашҡайны. Юҡҡа ғына һайламаны был ауылды император, унан бөтә тирә-яҡ күренә, был уға бөтә ғәскәрҙәр менән

етәкселек итергә мөмкинлек тыуҙыра. Ләкин уға иркенләп һуғыш барышын байҡап ултырырға ирек бирмәнеләр – генерал Палендың кавалерияһы урыҫтарҙың 2-се пехота корпусы ярҙамында һөжүм итте. Гусарҙар, уландар, казактар һәм башҡорттар – бөтәһе ике меңдән ашыу яугир, ҡапыл ябырылып, француздарҙы ауылдан һөрөп сығарҙы. Үҙенең егерме өсөнсө полкын Вахау гарнизонын ҡотҡарырға ташлаған полковник Марбо, генерал Паленға ярҙамға 1-се башҡорт полкы килер, тип уйламағайны. Күрәһең, Пален кавалерияһының эштәре хөртәйгәнен урыҫ командованиеһы күреп һиҙеп, элеккесә иң ҡыҙыу урынға ҡырағай полкты йүнәлткән. Бәрелеш барышында Марбо йәне-тәне менән тойҙо: хәҙер “төньяҡ амурҙары” пәйҙә буласаҡ, сөнки урыҫ кавалерияһы бирешә башлағайны. Полковник Рәсәй кампанияһында ҙур тәжрибә туплағайны, ундай хәлдәр йөҙ тапҡыр ғына ҡабатланғандыр, эйе, урыҫтар иң ауыр минуттарҙа һөжүмгә әлеге шул ҡырағайҙарҙы ташлай. Француз кавалерияһының бәхетһеҙлегенә шулай килеп сыҡты ла: полк ҡабырғаһынан яңғыраған хәрби орандарҙы полк командиры һыҙғырышҡан уҡ тауыштары менән бер үк ваҡытта ишетеп ҡалды һәм ҡаушай төштө. “Хәҙер ҡыра башлайҙар! Уҡ атҡа тейһә – бөттө, үлемең шунда!” Шул минутта мәргән уҡтарҙан ҡолай башлаған иптәштәрен күреп, ул сәбәләнә-сәбәләнә полкын бәрелештән сығырға әйҙәне. Бик ваҡытлы, тотош полк ҡамауҙа ҡалып ҡырыла ине. “Артабан һағыҙаҡтарса ҡыланасаҡтар…”– тип уйлап өлгөрҙө Марбо, шул мәлдә янбашын нимәлер яман ауырттырып сәнсеп алды. Ҡарап торорға ваҡыт юҡ, ҡырағайҙарҙан ҡотолорға кәрәк. Полковник ярһыған атында сабып, командалар яуҙыра-яуҙыра полкты йыйнарға тырышты, ләкин ҡурҡыныс тулҡын булып ябырылған “төньяҡ амурҙары”н күреп, француз һыбайлылары бойороҡһоҙ ҙа үҙҙәренекеләргә табан ҡасыу яғын ҡараны. Ҡысҡырышып һыҙғырышҡан башҡорттар, паникаға бирелгән француздарҙы Вахау ауылын үткәнсе эҙәрлекләп теткеләгәс, кире саптылар. Егерме өсөнсө полктың яртыһы Вахау яланында ятып ҡалды, һәләк булған француз яугирҙарының аттары кешнәп-кешнәп ауыл тирәләй сабышты. Эйәһеҙ аттарҙың аҙашҡандары унда-бында төшөп шартлаған йәҙрә ярсыҡтарына эләгеп ҡоланы, яралылары, ҡыҙғаныс кешнәп, бәрелеш урынында ятып ҡалған хужаларын саҡырҙы. Яуыҙдарҙан ҡотолғас, арыған Марбо ярһыған атын көскә туҡтатып һикереп төштө лә һыҙланыуҙан ергә ултыра һалды. Уның янына полк табибы Паро йүгереп килде. Полковниктың янбашына башҡорт уғы ҡаҙалған, тәненән һарҡып ҡан аға. Паро йәһәтләп ҡәһәрле уҡҡа тотона һалғайны ла, Марбо ыңғырашып уның ҡулын этте.

– Һаҡ ҡына, һындырып ҡуйма…

Паро уҡтың тирә-яғына баҫып ҡараны ла:

– Һындырырға ярамай, һынһа, яраны ҡырҡырға тура килә, – тине.

Полковник йөҙөн һытты.

– Эш унан түгел, ул уҡ миңә кәрәк… Шайтан башҡорттар… Ярай, уҡтары ағыулы түгел. Ни хәтле ингән?

– Артыҡ тәрән түгел, бер бармаҡ оҙонлоғо булыр, – тип уҡты һыйпаштырған табип, Марбоның ситкә ҡарағанын шәйләп, ҡапыл ғына уҡты тартып сығарҙы. Быңдай хәлде көтмәгән яралы яман үкереп, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡылысына йәбеште.

– Бөттө, бөттө, полковник әфәнде, бына уғығыҙ, бөтөн килеш! – тип әйтә һалды Паро, башҡорт уғын офицерға һоноп.

Полковник ҡылыс тотҡаһын ысҡындырҙы, тирләгән маңлайын һөрттө һәм табип һуҙған уҡты тартып тиерлек алды. Уҡты ул тикшереп өлгөрмәне, хәле бөтөп, ергә һылашты.

***

Наполеон, Вахау янындағы уңышһыҙлыҡтан көйөп, контрһөжүмгә күсеп ҡарарға булды. Рәсәйҙә ҡыйратылғандан һуң ҡабаттан ун меӊ атлыға еткерелгән маршал Мюраттың кавалерияһы ҡапыл һөжүм итеп, берләшкән ғәскәрҙәрҙең урта фронтын өҙөргә маташты. Әммә француз армияһының яҙмышы хәл ителгәйне инде. Өс тәүлеккә һуҙылған «Халыҡтар бәрелеше» Наполеондың Рейн йылғаһы аръяғына, Франция биләмәләренә, сигенеүе менән тамамланды.

Тағы бер көндән полковник Марбо маршал Ожеро аша императорҙың ҡабул итеүен һораны. Һылтыҡлап атлап ингән Марбо, Наполеондың башын баҫып өҫтәл артында ултырыуын күреп, туҡтаған ерендә үрә ҡатты. Император бер аҙыраҡ шулай бер нөктәгә күҙҙәрен төбәп ултыра бирҙе лә яйлап башын күтәрҙе.

– Ни кәрәк һеҙгә, полковник? Барығыҙ, бар, ғәскәрҙәрҙе яңы һөжүмгә әҙерләгеҙ. Ваҡыт бик тар, һәр минут ҡәҙерле. – Наполеон ризаһыҙ ҡулын һелтәне.

– Сир, әйтәһе һүҙҙәрем бар ине…

– Полковник, һеҙ үҙегеҙҙең һуғышсыларығыҙ өсөн аҡланырға теләйһегеҙме? Урыҫтарҙың Вахауға һөжүмендә ҡурҡып ҡасҡандарын бөтә армия белә! Әкиәтегеҙҙе һөйләп, мине ышандырырға тырышмағыҙ!

Марбо ирекһеҙҙән ҡыҙарынды, тулҡынланыуҙан бигерәк, оялыуҙан ул буталды, бер аҙыраҡ паузанан һуң көскә һүҙҙәрен теҙҙе:

– Әйтер… әйтер һүҙем уларға ла ҡағыла, сир! Аҙаҡҡы ваҡыттарҙағы уңышһыҙлыҡтарға нөктә ҡуйырға уйым. Аңлатыр өсөн ентекләп һөйләргә кәрәк, уның өсөн ваҡыт талап ителә. Әгәр һеҙ кәрәк тип тапһағыҙ…

– Һөйләһәгеҙ, мине ышандырырлыҡ итеп һөйләгеҙ! Францияның яҙмышы хәл ителгән көндәрҙә, һүҙ бутҡаһынан бигерәк, ҡыйыу хәрәкәт талап ителә, полковник!

– Мин аңлайым, сир. Минең әйтер һүҙҙәрем киләһе алыштарҙа ярҙам итер, тигән уйҙамын. Урыҫтарҙың уңыштары нигеҙендә ҡырағай полктар тора, сир, уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланған һыбайлылар. Бына… – Марбо ҡулындағы башҡорт уғын императорға һуҙҙы.

Император уҡты алды ла, ҡыҙыҡһынып, әйләндереп-әйләндереп ҡараны.

– Һе, ябай ағас… Һеҙ “төньяҡ амурҙары” тип нарыҡлаған һыбайлылармы? – Әйттең яңылыҡ, тигәндәй, Наполеон Марбоға күҙҙәрен аҡайтты.

– Шулар, сир. Беҙ уларҙы яҡшылап белмәгәнбеҙ. Дошманды еңер өсөн уның үҙенсәлектәрен, тактикаһын өйрәнеү фарыз. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, сир, был ҡырағай полктар һалдаттарыбыҙҙың ҡоттарын алып бөттө…

Император һикереп торҙо ла, полковник алдында ҡулдарын болғап, ҡысҡырынырға тотондо.

– Маренго, Аустерлиц, Иена батырҙары ниндәйҙер йолҡоштарҙан ҡурҡамы?! Полковник, һөйләһәгеҙ, уйлап һөйләгеҙ! Ҡурҡышығыҙҙан паника тыуҙыраһығыҙ түгелме? Урыҫтар Мәскәүгә тиклем сигенгәндәрендә ул ҡырағайҙарҙың үле кәүҙәләрен күп күрҙем, әммә бер ҙә өркөрлөк һуғышсы күрмәнем!

Полковник Марбо ҡурҡышынан түҙемһеҙ тапанды. Асыуланған император, уны аҙағынса тыңлап бөтмәй, язаларға ҡушһа – бөттө баш!

– С-сир, сир… Бүлдерергә рөхсәт итегеҙ. Һеҙ уларҙы һуғышта күрһәгеҙ! Берәһе биш һуғышсыға ҡаршы торорлоҡ!

– Полковник! Һеҙҙең хәбәрегеҙҙе тыңлаһаң, француз һалдаты ҡурҡаҡ булып сыға! Бөтә Көнбайыш Европаға хужа ине француз һалдаты! Йә, ярай… – Наполеон үҙен көскә тынысландырҙы, ҡулъяулығын сығарып, тирләгән маңлайын

һөрттө. Уға армия өсөн ауыр көндәрҙә һалҡын ҡанлылыҡ күрһәтергә кәрәк. – “Төньяҡ амурҙары”ның батырлығы нимәнән ғибәрәт икәнен иҫбатлап ҡарағыҙ... Тик ҡыҫҡаса!

– Сир! Тәүҙә мин уларҙың тәртипһеҙ һуғышҡандарын аңламай бер булдым. Хәҙер “төньяҡ амурҙары”ның тактикаһына хайран ҡалам! Урыҫтар уларҙы һуғыштың иң ҡыҙыу нөктәһенә ташлай. Инде еңдем тигәндә, бөтә эште шулар боҙа. Ул ҡырағайҙар иң киҫкен ваҡытта ер аҫтынан сыҡҡандай ҡысҡырышып пәйҙә була ла юлдарындағы бөтә нәмәне ҡыра! Атлыларҙың һәр береһенең ауыҙында – икешәр уҡ, шул уҡ ваҡытта йәйәләрендә ике уҡ атылырға әҙер. Күҙ асып йомғансы яугир, дүрт уҡты атып, дүрт һалдатыбыҙҙы үлтерә, етеҙ хәрәкәттәр яһап, һөңгөһөн... бишенсегә ҡаҙай! Ә ҡылысына тотондомо, шул мәлдә паникаға бирелеп ҡаса башлаған һалдаттарҙы ҡырыпмы-ҡыра. Уларҙың оҫталығы бының менән генә бөтмәй! Пехотаны ҡотҡарыр өсөн “төньяҡ амурҙары”на ҡаршы кавалерияны ташлайһың. Улар нимә эшләй? Ике тулҡын бер-береһенә бәрелде тигәндә генә, ҡырағай һыбайлылар, ҡапыл артҡа боролоп, ҡасҡан булып ҡылана. Гүйә, яу яланын ташлап һыпырталар. Беҙҙең кавалерия уларҙы ҡыуалап еткәндә генә, яуыздар, ҡапыл йөҙгә-йөҙ боролоп, беҙҙекеләргә ташлана. Әлбиттә, бындай хәлде көтмәгән беҙҙең атлылар ҡаушап ҡала. Тегеләргә шул ғына кәрәк тә. Иң аптыратҡаны: ҡайһы аралалыр йәйәләренә ике уҡ, ауыҙҙарына тағы ла ике уҡ эләктереп өлгөргән “төньяҡ амурҙары” дүртәр французды ҡырып та һала. Артабан ауыҙ асып күҙ йомғансы улар, яман ҡысҡырышып, кавалерияны уңлы-һуллы тураҡлай башлай. Ҡылыстары менән шул хәтле оҫта эш итәләр, хатта күҙ эйәрмәй!

– Полковник Марбо! – Император ҡапыл уны бүлдерә һалды, Марбоның дошманды маҡтап торғаны уға оҡшаманы. – Уларҙың тактикаһын һәйбәт белгәс, ниңә ҡаршы тактика ойошторманығыҙ?

Полковник ул һорауҙы көткәйне, шуға яуабы әҙер ине.

– Ойошторҙоҡ, сир! Әммә бөтә көтөлмәгән хәлдәргә әҙер кавалерия яуыздарҙы баҫтырып еткәндә генә, улар яңы тактика ҡуллана. Йәғни, төрлөһө төрлө яҡҡа сәселеп, юҡҡа сығалар, һөҙөмтәһеҙ һөжүмдән ҡаңғырып, кавалерияны кире үҙебеҙҙең яҡҡа бороуың була, яңынан тупланып, полкты ҡырырға тотона. Гүйә, һағыҙаҡ ояһының өҫтөнә баҫаһың – полкты уҡтар болото ҡаплап ала. Улар тактиканы үҙгәртергә һәләтле, сир!

Наполеон торҙо, ишекле-түрле йөрөп, бүлмәнең оҙонлоғон һанай башланы.

– Александр уларҙы һуғышҡа алдан әҙерләгән, тимәк. Хәйләкәр, шайтан, хәйләкәр. Уның бер күҙле фельдмаршалы ла Мәскәүҙе биреп торҙо ла, ваҡыттан файҙаланып, ғәскәр тупланы. Полковник! Миңә булһа икән шул амурҙарҙы әҙерләгән инструкторҙар!

– Әйтергә ҡыйям, сир, уларҙы һуғышҡа бер кем дә әҙерләмәгән.

– Нисек? – Императорҙың күҙҙәре түңәрәкләнде. – Ул ҡырағайҙар үҙҙәре һуғыша белә, тип әйтмәксеһегеҙме? Ниндәй халыҡ һуң улар?

– Һөйләп бирергә рөхсәт итегеҙ, сир. – Марбо тағы ла турайып баҫты. – Мин уларҙың һуғышсан оҫталығын Бородинола уҡ шәйләгәйнем. План буйынса атаман Платов казактары ҡамауҙа ҡалырға тейештәр ине. Хәйлә барып сыҡты: казактарҙың тотош корпусы ҡамауға эләкте, уларҙы ҡыйратыу ғына ҡалғайны. Әммә шул саҡ үҙҙәренең ҡиәфәте һәм ҡысҡырыштары менән беҙҙең ҡотто алып, “төньяҡ амурҙары” килеп сыҡты. Ҡырағайҙар мәргән уҡтарын осороп, кавалерияның байтағын ҡырып һалғас, Платов казактарына эш тә ҡалманы, минең полкты баҫтырып тараттылар ғына. Шунан башлап яуыздарҙы өйрәнергә

булдым. Минең бәхеткә, Мәскәү янындағы алышта әсиргә ополченец-тарихсы төштө. Һорауым буйынса, ул “төньяҡ амурҙары”ның тарихын һөйләп биргәйне.“Төньяҡ амурҙары” башҡорт милләтле халыҡ икән. Уралда бик борондан ғүмер итәләр. Меңәр йыллап Алтай тауҙарынан Уралға, Уралдан Волгаға күсенеп йөрөгәндәр. Ҡыш айҙарында Ҡара диңгеҙ буйында көн иткәндәр. Башҡорт халҡын төрлө ҡәбиләләр тәшкил итә. Монгол-татар яуына тиклем башҡорттар бер кемде лә илдәренә үткәрмәгән. Унда ла ун дүрт йыл дауам иткән һуғыш башҡорттар файҙаһына килешеү төҙөү менән тамамланған. Башҡорт ҡәбиләләре ун алтынсы быуат уртаһында үҙ теләктәре менән Рәсәйгә ҡушылған. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй тарафынан йәберләүҙәргә ҡаршы ун туғыҙынсы быуатҡа тиклем баш күтәреп торған. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорттар Рәсәй алып барған һәр һуғышта ҡатнашҡан. Шул һуғышсанлыҡтарынан ҡурҡып, хөкүмәт уларға тимерлек тоторға рөхсәт итмәй, һөҙөмтәлә уларҙың ҡоралдары уҡ-һаҙаҡ та һөңгө, тағы үҙҙәре һуҡҡан ҡылыс. Тарихсының һөйләүе буйынса, башҡорттарҙың тормошо тәбиғәт менән ныҡ бәйләнгән. Күреүебеҙсә, уларҙың һуғыш ҡоралдары ағастан, хатта музыка ҡоралдары ла үләндән, үлән шундай матур тауыш сығара, тиҙәр. Һәр башҡорт бәләкәйҙән шул үләндә уйнай белә, атта саба, йәйәнән атырға өйрәнә. Шуның өсөн дә тотош халыҡ, казактар ише, хәрби сословиеға күсерелгән һәм улар беҙгә ҡаршы егерме һигеҙ полк ойошторған.

– Крепостное право уларға ҡағылмағанмы ни? – Наполеон, ҡыҙыҡһынып, полковникка яҡынырак килде.

– Улар ирек һөйөүсән халыҡ, сир, крепостное правоға юл ҡуймаҫтар ине. Бер нисә тапҡыр Рәсәй хөкүмәте үҙенең талаптарын тағып ҡараған, әммә ауыҙы бешкән.

Франция императоры өсөн Марбо һөйләгәндәр яңылыҡ ине. Уның армияһында ла төрлө милләттәр бар, тик башҡорттарға оҡшағандары, уларға еткәндәре юҡ. Наполеон полковник тураһында онотоп, ғәмле уйҙар диңгеҙенә батты, ишеткәндәрен бизмәнгә һалып, берсә йөҙөн боҙҙо, берсә ауыр ыңғырашып ҡуйҙы.

– Ниндәй тәҡдимдәрегеҙ бар, полковник? – Император элекке хәленә ҡайтты. – Быларҙы миңә бушҡа һөйләмәйһегеҙҙер бит?

Марбо тағы ла һынын ҡатырҙы һәм күптән уйлап ҡуйған планын еткерергә ашыҡты.

– Минең тәҡдимдәрем ябай, сир. Мин Францияның бөйөк киләсәгенә ышанам, беҙҙең еңеүҙәр алда әле. Ә хәҙергә ғәскәрҙәргә әҙерәк ял кәрәк. Урыҫтар ҙа Лейпциг янында ныҡ ҡырылды, ғәскәрҙәрен тәртипкә килтерәлер, тип уйлайым. Ваҡыттан файҙаланып, маршал Мюрат кавалерияһын яңы тактикаға өйрәтергә кәрәк, “төньяҡ амурҙары” тактикаһына.

– Һеҙ Мюратта адъютант булып хеҙмәт иттегеҙме әле? – тип уны бүлдерҙе Наполеон.

– Дөрөҫ, сир! – тип ғорур яуапланы Марбо. – Мин биш маршалда адъютантлыҡта хеҙмәт иттем. Бернадотта, Ожерола, Мюратта, Ланнда, Массонда, сир!

– Яҡшы, Марбо. Әгәр дошмандың берләшкән ғәскәрҙәре һөжүмгә ашыҡмаһа, мин әле уларға ҡаршы торорлоҡ ғәскәр йыйнарлыҡ хәлдәмен. Полковник, һеҙ яраланғанһығыҙ, буғай, маршал Мюратҡа инструктор сифатында барып, ярағыҙҙы уңалтып алырһығыҙ. Әлеге тактикағыҙҙы өйрәтегеҙ. Маршалды үҙем саҡыртып иҫкәртермен.

Полковник Марбо теләгәненә ирешкәнгә ҡыуанып боролдо ла сатанлап ишеккә йүнәлде, әммә императорҙың киҫкен тауышы уны шып туҡтатты.

– Полковник! Туҡтағыҙ!

Император, йүгерә-атлай килеп, кире әйләнгән Марбоның яурындарына ҡулдарын һалды.

– Полковник! Ошо ауыр көндәрҙә француз армияһы һуғышсан күтәренке кәйеф көтә. Һеҙ һалдаттарҙа “төньяҡ амурҙары”нан ҡурҡыу тойғоһон бөтөрөргә бурыслыһығыҙ. Ҡырағайҙарҙың бөтәһе лә яҡшы һуғыша белмәйҙер, тип уйлайым. Шуның өсөн бер-ике башҡортто тотоп, бөтә армия алдында мәсхәрәгә ҡалдырыу етә. Аңланығыҙмы?

Теүәл аңлап етмәне Марбо императорҙы, шул минутта башынан йөҙ уй үтте, шулай ҙа полковник ҡаршы төштө:

– Сир! Һеҙҙең менән килешмәҫкә ҡыям… Башҡорттар әсиргә төшмәй…

Бындай дорфалыҡты көтмәгән Наполеон хатта ҡыҙарҙы. Полковник алдында үҙенең һүҙен һүҙ итмәһә, аҙаҡҡы ваҡыттарҙа армия алдында юғала барған абруйының тағы ла төшәсәген бик яҡшы төшөнә. Етмәһә, Лейпцигтан сигенгән француз армияһынан ҡасыусылар күбәйҙе, хәҙер иһә маршалдар ҙа уға ышанысты юғалта... Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Наполеон өсөн тағы ла бер алыш кәрәк, еңеүле алыш кәрәк! Киләһе ҙур бәрелештә уның армияһы дошмандарын тар-мар итһә, бөтә Көнсығыш Европа уныҡы булып ҡаласаҡ!

– Ә һеҙ тырышығыҙ! Борон тотоп булмаҫлыҡ януарҙы соҡорға ҡыуалағандар, ауырғытҡандар! – тип ярһыны император Наполеон.

Рәсәй армияһы был ваҡытта Наполеон ғәскәренең сигенеү юлын бүлер өсөн яңы хәрби операция әҙерләне. Наполеон иһә яңы мөғжизә көтә, маршалдарын ғәскәрҙәрҙә ҡаты тәртип урынлаштырырға өндәй. Һирәк-һаяҡ ғәскәрҙәрҙән ситтә ваҡ бәрелештәр булғылап тора. Шундай бәрелештәрҙең береһендә полковник Марбо ебәргән разведка уңышҡа осраны. Яу үткән яланды айҡап, яралыларҙы эҙләп йөрөгәндә, өйөлөп ятҡан француз кәүҙәләре араһында һалдаттар ыңғырашыу ишетте. Үлектәрҙе таратыу күп ваҡытты алманы, ыңғырашҡан яугирға төртөлгәс, французлар тәүҙә аптырап ҡалды, шунан йылмайышып ҡыуандылар. Ерҙә улар ике көн инде эҙләгән “төньяҡ амуры” ята, уның бер аяғы ат мәйете аҫтында ҡалған. Иҫен юғалтҡан башҡорт һуғышсыһын тағы ла тонсоҡтороп, өҫтөнә унлаған француз кәүҙәһе өйөлгән, күрәһең, ат аҫтында ҡалған батыр аҙағынаса ҡаршы торған, сөнки һәр үлеккә уҡ ҡаҙалғайны. Ҡалғандары ла, һуғышсыны бәйләмәк булғандары, батырҙың хәнйәренән йән биргән... Иҫһеҙ егетте ат аҫтынан сығарып, уң ҡулына ҡыҫып тотҡан хәнйәрен көскә ысҡындырған французлар ҡиммәтле трофейҙы иплән кенә ат өҫтөнә урынлаштырҙы. Тотолған башҡорт өсөн уларҙы затлы бүләктәр көтә ине.

Лагерҙа разведканы ҡаршы алған полковник Марбо, полк табибы Пароны саҡыртып, яралы башҡорт яугирын һушына килтерергә ҡушты. Үҙе яугирҙан алынған йәйә-уҡтарҙы ентекләп тикшерҙе, һаҙаҡтағы уҡтарҙың башаҡтарына күҙ һалды, йәйәне тартып ҡараны. Йәйә үтә ҡаты булып сыҡты, ул көсөргәнеп керешен тартып маташты – юҡҡа, яртылаш тартылған йәйә дыңғылдап кире урынына ҡайтты. Полковник, ғәжәпләнеп, берсә ерҙә ятҡан сибек башҡортҡа, берсә тиҫкәре йәйәгә ҡараны, шунан, йөҙөн асыулы йыйырып, “ғәйепле” “төньяҡ амуры”н уратып әйләнде. Паро үҙ эше менән булашты, егетте ҡапшап, тәнендәге яраларҙы эҙләне, һаҡ ҡына әйләндереп, бөтә кәүҙәне тикшереп сыҡты, елгә ярылып ҡанға батҡан битенә дарыуҙар һөрттө.

– Кәүҙәһе һау, полковник әфәнде. Ат аҫтында ҡалып, аяғы ғына имгәнгән. Оҙаҡ күмелеп ятҡанға оҡшаған... Оҙаҡламай иҫенә киләсәк.

Тәбәнәк буйлы, тарамыш кәүҙәле башҡорт егете, табиптың һүҙҙәрен ҡеүәтләгәндәй, ыңғырашып ҡуйҙы.

– Аяғына баҫасаҡмы? – тип һораны Марбо.

– Аяғы тиҙ төҙәлмәйәсәк, әммә икенсе аяғы һау, – тине полковникты аңламаған Паро.

– Бик яҡшы. Ике көнгә һаҡ аҫтына ҡуйып, һаулығын тикшереп тороғоҙ. Тик һыуҙан башҡа ашарға бирмәҫкә! – Полковник ярҙамсыһына ерҙә ятҡан әсиргә ымланы ла, текә баҫып, штаб яғына йүнәлде.

Ике көндән, императорҙың бойороғо буйынса теҙелгән француз армияһы алдына хәле бөткән башҡорт яугирын сығарып ҡуйҙылар. Үтә йәш егет һау аяғына баҫып, тирә-яғына, тигеҙ сафта торған ғәскәрҙәргә, штаб алдына сығып ултырған императорға ғәжәпләнеп баҡты һәм үҙен уратып алған һаҡсыларҙы берәмләп күҙҙән үткәрҙе. Һөңгө-ҡылыстар менән ҡоралланған һаҡсылар башҡорт һуғышсыһына шикләнеп тә, ҡурҡып та ҡарайҙар ине. Әсирҙең ҡарашы бер генә һорауҙы биргәндәй: “Французлар нимә теләй унан?” Лейпциг һуғышынан иҫән ҡалған француз һалдаттары, өнһөҙ ҡалып, алдарында торған әсир дошманға текләгән.“Төньяҡ амуры” башҡарасаҡ “тамаша”ны полковник Марбо ғына белә ине, нисегерәк башҡарыласағын аңламаһа ла, император ҙа низер һиҙенә. Тәүҙә, Марбоның бойороғо буйынса, кителе аҫтына тимер күлдәк кейгән унтер-офицер әсирҙән ҡырҡ аҙым алыҫлыҡҡа барып баҫты. Тамаша шунан ғибәрәт ине: полковниктың һорауы буйынса, хәлһеҙ башҡорт бөтә армия алдында унтер-офицерға йәйәнән атырға тейеш. Нәҡ ҡырҡ аҙымдан башҡорт уғы атты үтәнән-үтә тишеп сыға, тиҙәр, хәлһеҙ ҡырағай ҡырҡ аҙымдан сәпкә тигеҙәп ҡараһын инде, күрерһегеҙ – ҡулынан килмәйәсәк, тип вәғәҙә биргәйне полковник үҙенең ярандарына. Ғәскәрҙәр офицерҙың кейеме аҫтындағы тимерҙе лә, башҡорт яугирының насар хәлен дә белмәй. Әлбиттә, хәлһеҙ егет атыуын атыр, әммә күкрәккә ҡаҡлыҡҡан уҡ, бер зыян килтермәй ергә төшөп, башҡорт яугирын мәсхәрәгә ҡалдырасаҡ! Шунда асыла ла инде “төньяҡ амуры”ның ысын йөҙө, шунда инде ғәскәрҙәр бушҡа ҡурҡҡандарын аңлап, яңы һулыш аласаҡ!

Марбоның ымлауы булды, ярандары йүгертә һалып башҡортҡа йәйә менән уҡ тотторҙолар. Урыҫса белгән тылмас уға хәлде яртылаш ымлап аңлатты, аҙаҡ унтер-офицер яғына төртөп күрһәтте лә тиҙерәк китеү яғын ҡараны. Таныны башҡорт үҙенең ҡоралын, байтаҡ һуғыштарҙа французларҙы ҡырған йәйәһе – күп бәрелештәрҙә уны ҡотҡарған ҡоралы! Французларҙың нимә теләгәнен дә аңланы егет, уны мәсхәрәгә ҡалдырып, хурларға уйлайҙар, бөтә армия алдында көлкөгә ҡалдырмаҡсылар. Егет бер килке йәйәне тәү күргәндәй ҡулында әйләндереп-тулғандырҙы, ҡәҙерләп һыйпаны, унан төпкә батҡан, әммә үткер күҙҙәрен алыҫҡа төбәп, бер килке уйға батып торҙо, артабан күкрәген тултырып бер һуланы ла ашыҡмай ғына имгәнгән аяғына тубыҡланды һәм, уҡты йәйәгә һалып, офицерҙы сәпкә алды. Француз ғәскәрҙәре өҫтөндә үле тынлыҡ, барыһының күҙе – “төньяҡ амуры”нда. Тигеҙерме ҡырағай йолҡош? Юҡтыр, сәп бигерәк алыҫ, яугир үҙе лә йәш, сибек тә. Император янында баҫып торған ҡәнәғәт Марбо мыҫҡыллы йылмайып ҡуйҙы. “Ас, хәлһеҙ башҡорт нимә ҡырыр тиһең!” – тип ул үҙенең шул йәйәне яртылаш та бөгә алмағанын иҫләне. Бына башҡорт егете кереште яйлап ҡына тарта башланы, уның күҙҙәре осҡонланды, яңаҡтары көсөргәнештән тартылды, йәйә һынырҙай булып бөгөлдө, һау аяғы, ғәҙәтенсә, ат өҙәңгеһен эҙләне, гүйә, яугир яу яланында. Нимәндер хәүефләнгән һаҡсылар, яҡынараҡ килеп, уны тығыҙ түңәрәккә алды. Йылдай тойолған

минуттар үтте, көсөргәнеш башҡорттан ғәскәрҙәргә күскәндәй булды, тигеҙ сафтар ҡатып ҡалды. Шылт иткән тауыш юҡ, ҡайҙалыр алыҫта шартлаған йәҙрәнең үтә тоноҡ тауышы ғына ҡолаҡтарға салынды, йәнә тартылған кереш зыңлауы ишетелгәндәй булды. Ҡалғаны күҙ асып йомған арала башҡарылды, әммә Марбо хыялланғанса түгел, хәүефте һаҡсылар ҡапыл аңлағанда, һуң ине инде. Француз ғәскәре әсе һыҙғырып осҡан уҡ шыйлауын ғына ишетте. Мундиры аҫтындағы тимерҙе тишеп, күкрәгенә ҡаҙалған уктан унтер-офицер, өн дә сығара алмай, ергә тәкмәсләп төштө. Ҡайһы аралалыр тубыктан күтәрелеп өлгөргән башҡорт батыры, етеҙ һеләүһендәй өйрөлөп, һыңар һау аяғына баҫты, оҫта ҡулдарын йәшендәй уйнатып, янында ауыҙын асып ҡатҡан һаҡсының биленән ҡылысын һөйрәп сығарҙы ла, шул ҡылысты һөжүмгә барғандай өҫкә күтәреп, бөтә көсөнә ҡыпсаҡтарса һөрәнләп ебәрҙе:

– Туҡсаба-а-а!

Рәсәй яуҙарын үтеп иҫән ҡалған күп француз һалдаттары өсөн был хәрби оран таныш ине, яу яландарында яңғыраған башҡорт орандары уларҙың ҡоттарын әҙ алманы. Әле лә тигеҙ сафтар ирекһеҙҙән тулҡынланып ҡуйҙы, хатта бер аҙым артҡа сигенеүселәр күренде, һалдаттарҙың күҙҙәрендә ҡыҙыу бәрелештәрҙә әҙ салынмаған ҡаушау сағылып үтте.

Үҙенең яуҙаш иптәштәренән алыҫта башҡорт батыры, яраланған йыртҡыстай, аҙаҡҡы оранын тағы ҡабатланы:

– Туҡсаба-а-а!

Хәрби оран ғәскәрҙәр өҫтөнән үтеп, йыраҡтарға яңғыраны. Ҡурҡышҡан ғәскәрҙәрҙән тыш, ҡаушаған һаҡсылар ҙа, нимә булғанын аңламайса, баҙап ҡалды. Башҡорт егете оран һалған ыңғайы әлеге ҡылыс хужаһының башын бер һелтәүҙә сабып осорҙо, эйелеп, үткер ҡылысты икенсеһенең биленән үткәрҙе лә, ғәйрәтләнеп, өсөнсөһөнөң яурынына төшөрҙө. Һаҡсыларҙың яман үкерешеп тәгәрәшеүҙәре теҙелгән ғәскәрҙәрҙе лә, иҫән ҡалған һаҡсыларҙы ла, үҙ файҙаһына буласаҡ тамаша көткән Марбоны ла сикһеҙ аптыратты, бөтәһе лә юғалып ҡалды. Шул ваҡыт кинәт иҫенә килгән арттағы һаҡсы осло һөңгөһөн егеттең арҡаһына ҡаҙаны, икенсеһе ярҙамға... Императорҙың тәнһаҡсылары, ерҙә ятҡан үле батырға яҡын килергә ҡыймай, байтаҡ ваҡыт уны алыҫтан ғына уратты.

Күргәндәренән тетрәнгән Наполеон торҙо ла, бер кемгә лә ҡарамай, яй ғына атлап штабына инеп китте. Полковник Марбо урынында тора бирҙе, батыр француздың күҙ алдына алынмаған маршал мундиры килде, күңелен болоҡһотоп, уның башҡорт уғы ҡаҙалған яраһы әсетеп һыҙларға тотондо. Үткәнде кире ҡайтарып, хаталарҙы төҙәтеп булмай, полковниктың император алдына барып аҡланыуы урынһыҙ, ул шулай бер килке аңрайып торҙо ла еңеүгә дәртен юғалтҡан ғәскәрҙәр алдында башын эйҙе.

Киләһе көндәрҙә Наполеонға ҡәһәрле яҙмыш тағы ла “бүләк” яһаны: маршал Мюрат уға хыянат иткән – Берләшкән армия яғына күскән, еңелеү белмәҫ маршал Даву Гамбургта ҡамауға эләккән. Хәҙер французлар өсөн бер генә юл ҡала – артабан сигенеү.

31 октябрь... Ганау янындағы һуғышта француз армияһы, сигенеү юлын ҡаплар өсөн ебәрелгән бавар генералы Вреденың 50 меңлек корпусын көскә тарҡатып, Парижға юл алды.

## ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ – ХОҘАЙ ХОЗУРЫ…

*(Ғәлимйән Ибраһимовтың тыуыуына 125 йыл)*

Алтын тапһа, кеше уның эсендә ни бар икәнлеге тураһында ҡыҙыҡһынмай. Ә яңы табылған һүҙ – серле йомғаҡ. Халыҡ уны «һүтә лә һүтә», эсендә ни барын белергә ашыға. Һүтеп бөтөрөп, орлоғон, емешен тапҡас та әле, ул тәрән уйға ҡала: орлоҡ эсендә ни бар икән? Ҡайҙа, ниндәй ерлектә тыуған һуң ул орлоҡ? Ҡайһы бер һүҙҙең этимологияһын асыҡлау өсөн күпме ғалимдар бәхәскә кермәй? Һүҙҙең эске мәғәнәһен дә, тышҡы формаһын да асыҡлау еңел түгел. Һәр әйбергә бер атама. Бына ҡар ирене. Яҙ сәскәһе умырзая донъяға сыҡты. Ләкин уның ғүмере бик ҡыҫҡа. Шуға күрә халыҡ уны заяға үткән кеше ғүмере менән сағыштыра. Яһалышы ла шунан килә. Яҡынса ул былай: ғүмере зая – омер зая – умырзая.

Һүҙҙәрҙең эске мәғәнәһен аңлау яҙыусы өсөн айырыуса кәрәк. Күп кенә әҫәрҙәрҙә умырзая ҡыҫҡа ғүмерҙе тасуирлау өсөн сағыштырыу объекты сифатында файҙаланыла. Матурлыҡ, үкенеү, юҡһыныу, тиҙ ҡауышып тиҙ айырылышыу кеүек күренештәрҙе күрһәтеү өсөн дә ҡулланалар. Был һүҙ тел ғалимдары тарафынан да телгә алына. Улар ҙа уның мәғәнәһен ана шул бер үҙенсәлек буйынса аңлата. Беҙҙеңсә, мәсьәләнең икенсе яғы тураһында ла уйларға кәрәк. Ғүмерен заяға үткәргән кеше бер мәртәбә лә балҡый алмағандыр, бәлки. Кеше ғүмере йылдар һаны менән түгел, хеҙмәт даны менән, тиҙәр. Ә умырзая яҡты донъяға ҡар аҫтынан ашыға-ашыға сыға. Яҙ матурлығы булып балҡый. Шуға күрә халыҡ телендә ул матурлыҡ һәм батырлыҡ символы булараҡ телгә алына. Быҫҡып үткәргән мең кеше тормошонан балҡып йәшәгән бер ижтиһадлының ғүмере ҡәҙерлерәк. Умырзаянан матурыраҡ бик күп сәскәләр, гөлдәр бар. Ләкин беҙ уларҙың исемдәрен белмәйбеҙ. Сөнки улар беҙҙең күҙ алдында ҡар ярып сыҡҡан матур сәскә булып килеп баҫмай. Беҙҙә был исем уға уйламайыраҡ бирелгәндер, бәлки. Башҡа милләттәр уны төрлөсә атай: рустар – подснежник, французлар – ҡар бырауы, инглиздәр – ҡар тамсыһы, немецтар – ҡар ҡыңғырауы.

Һәр атамала – ни ҡәҙәр тәрән уйланыу! Уларҙың эске мәғәнәһе аша төрлө образ, һүрәт яһау мөмкинлеге бар. Ҡар бырауы – бер образ, ҡар тамсыһы – икенсе, ҡар ҡыңғырауы – өсөнсө… Һәр яҙыусы уны билдәле бер стилистик маҡсатта ҡуллана ала. Сәнғәтле һөйләмдә ул поэтик биҙәк функцияһын үтәй.

Әйбергә исем ҡушыу уның барлыҡ үҙенсәлектәре буйынса булмаҫҡа мөмкин. Мәҫәлән, күркә үләненә атама уның күркәгә түгел, фәҡәт уның йөнөнә оҡшауына ҡарап ҡына бирелгән. Кәкүк сәскәһе – ул кәкүктең үҙенә түгел, күҙенә оҡшаған. «Айырым әйберҙең атамаһы уның дөйөм тәбиғәтенә яраҡлашмай», – ти К. Маркс (Капитал, Т.1, кн. 1, 1949, с. 107). Тимәк, исем биргәндә әйберҙең ҡарар күҙгә күренмәгән күп төрлө сифаттары йәшеренеп ҡала. Шуға күрә һәр һүҙҙең

тышҡы яғын һүтеп, эске мәғәнәһен эҙләү – ғәжәп мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡлы, файҙалы шөғөл. Юғары сәнғәт дәрәжәһендәге әҙәби әҫәрҙә бер генә һүҙ ҙә айырым хәлдә йәшәмәй. Һәр һүҙ-образ тел-һүрәтләү саралары менән эске яҡтан органик мөнәсәбәткә керә, башҡа образдар системаһы менән кәрәҙләнә. Абай әйткәнсә, «һүҙҙең эсе – алтын, тышы – көмөш» булыу мөмкинлеге шунда асыҡлана. Мөбәрәк тәсбих төймәләреләй теҙелеп киткән һүҙҙәрҙең мәғәнәһе үҙенсәлектәренә ҡарап, тел-һүрәтләү сараларына ярлы, «урта ҡуллы» әҙәби әҫәрҙәр ҙә бик аҙ осрай. Уның матур өлгөләрен һүҙ сәнғәте оҫталары күрһәтә. Бер үк һүҙҙең эске алтыны (мәғәнәһе), образлылыҡ нигеҙе әҫәр туҡымаһына (контекстҡа) ҡарап та асыҡлана.

Күп осраҡта микроконтекст, макроконтекст ҡына түгел, бөтөн бер әҫәр һәм ул сағылдырған тарихи ваҡиға, социаль-сәйәси көрәш, сюжет-композиция, герой-персонаждар иҫкә алына. Ғ. Ибраһимовтың «Ҡаҙаҡ ҡыҙы» романында ҡан һүҙе, мәҫәлән, ун туғыҙынсы быуаттың аҙаҡтарында – егерменсе быуаттың баштарындағы күсмә ҡаҙаҡ ҡәбиләләре араһында социаль-иҡтисади үҙгәрештәр өсөн барған көрәште сағылдырыу йәһәтенән ҡулланыла: «Ҡанлы, ҡыҙғылт ут эсендә тыуған иртәнге ҡояш даланың тупрағын партия талаштары эсендә ҡаршы алды». «Ҡыҙғылт ут эсендә тыуған иртәнге ҡояш» тип әйтеү ҙә ғәжәп образлы. Ул ғәҙәти ҡояш сығышы түгел. Уның ут эсендә тыуыуы уҡ дала халҡы тормошонда ниҙер барлыҡты һиҙемләүгә ярҙам итә. Ә инде ул ҡыҙғылт утты ҡанға буяу образын күпкә арттыра. «Беҙҙең көндәр» романында иһә ҡан һүҙенең эске мәғәнәһе, образлылыҡ нигеҙе Рәсәйҙәге Беренсе рус революцияһы ваҡиғаһы менән асыҡлана: «...беҙҙең сиккән ғазаптар, түккән ҡандар тулҡыны дошмандың таш крепостарын емерерҙәр, донъяға азатлыҡ тыуҙырырҙар...» «Тәрән тамырҙар» романында инде ҡан НЭП осорондағы синфи көрәште образлы күҙаллауға ярҙам итә: «Әле лә Ғимаҙиның һүҙҙәренән уның (Садиҡтың – **С. П.**) тамырҙарында ҡан ҡайнап ташты». Ҡан һүҙенең ниндәй ҙур ваҡиғаларҙы образлы синтезлауын аңлауы ҡыйын түгел. Уның мәғәнә эстәлеген, Абай әйткән «алтын»ын табыу өсөн бөтә романдың идеяһын, сюжет-композицияһын, ундағы герой-ҡаһармандарҙы, әҫәр сағылдырған тарихи осорҙо белергә кәрәк. Ут һүҙе күсерелмә мәғәнәлә үҙе ниндәйҙер магик, абстракт образ барлыҡҡа килтерә. Ул күп процестарҙы, хәрәкәтте дөйөмләштерә һәм сәнғәтле һөйләмдә, яҙыусылар телендә семантик-стилистик теүәллекте талап итә. Әгәр «Ҡаҙаҡ ҡыҙы»нда ут ҡаҙаҡ халҡының эске тормошондағы тәрән ҡаршылыҡтарҙы тасуирлау йәһәтенән файҙаланылһа, ҡан уның (уттың) эске мәғәнәһен асыуға, образлы ассоциацияны көсәйтеүгә, стилистик вазифаһын теүәлерәк биреүгә ярҙам итә. «Беҙҙең көндәр» романында ҡандың семантик нигеҙе тағы ла киңерәк «профилле», күп яҫылыҡлы. Ә инде «Беҙҙең көндәр»ҙәге ҡандар тулҡыны иһә ер йөҙөндәге киң аралыҡты биләп ала. «Тәрән тамырҙар»ҙа ҡандар тулҡыны тигән төшөнсә инде дөйөмләшә төшә кеүек. Сөнки социалистик революция булған. Ҡандар тулҡыны аҡҡан. Ул тулҡындар хәҙер – миллиондар йөрәгендә. Шуға күрә унда ҡандар тулҡыны тигән һүҙбәйләнеште ҡулланыу характерлы түгел. Сөнки донъяны ҡанлы ут солғаған, ҡандарҙың тулҡын булып аҡҡан саҡтары үткән. Бер ҡараһаң, ут һүнгән, тулҡындар тынған. Әммә ут әле өҫтән ҡарағанда ғына шулай. Киҫкен синфи көрәш дауам итә. Ут кеше йөрәгендә яна, тулҡын кеше йөрәгендә ҡайнай. Ул бер Садиҡ йөрәгендә генә түгел. Садиҡ кеүектәр – миллиондар. Миллиондар йөрәгендәге ут барыбер революция дошмандарын көйҙөрәсәк. Миллиондар йөрәгендәге тулҡын барыбер иҫкелекте, ер йөҙөндәге сүп-сарҙы юҡ итәсәк. Шуға күрә «Тәрән тамырҙар»ҙағы уттың семантик-стилистик функцияһы типиклаштырылған революция һалдатының эске донъяһын, рухи халәтен

тасуирлауға ҡайтып ҡала. Әммә ул тышҡы донъя әҫәр сағылдырған осор менән эске органик мөнәсәбәттә йәшәй.

Ғ. Ибраһимов тәнҡит мәҡәләләрендә һүҙҙең тәрбиәүи әһәмиәте булырға, көрәшкә ҡатнашырға тейешлеге хаҡында ҡат-ҡат әйтә. Ысынлап та, әлеге ут, ҡан һүҙҙәренең ниндәй киҫкен көрәштәргә бәйле булыуын аңлау ҡыйын түгел. Билдәле, улар әҫәр туҡымаһында йәки контекста айырым хәлдә йәшәмәй, башҡа һүҙҙәр, поэтик биҙәктәр, образдар системаһы менән мөнәсәбәткә кереп, әҫәрҙең идея-эстәлеген асыу, аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыу, йәнле картина тыуҙырыуға ярҙам итә. Шулай итеп, яҙыусы телендә, сәнғәтле һөйләмдә һүҙ нигеҙендә барлыҡка килгән образ ҙур эстетик әһәмиәткә эйә.

Һүҙҙәрҙең бер нисә роман туҡымаһында ана шулай эске яҡтан сәнғәти мөнәсәбәткә кереүе сит илдә лә, рус филологияһында ла, тюркологияла ла һаман ныҡлап өйрәнелмәгән әле. Бының өсөн ысын мәғәнәһендә нәфис һүҙ оҫтаһы дәрәжәһенә күтәрелгән ҡәләм әһелдәренең әҫәрҙәре булыу шарт. Ғ. Ибраһимов уның классик үрнәктәрен күрһәтте. Шул яҡтан ғына ҡарағанда ла, уның өслүб (стиль) үҙенсәлеге ныҡлап тикшереүҙе һорай.

Фразеологик әйтемдәр телдең «ҡатып ҡалған» берәмектәре һанала. «Трай тибеү», «ел ҡыуыу» кеүектәр, ысынлап та, үҙгәрешкә дусар була алмай. Әммә әҙип халыҡтағы әҙер тәғбирҙәрҙең бер компонентын үҙгәртә. Халыҡта – күңел көҙгөһө, Ғ. Ибраһимовта – рух көҙгөһө, халыҡта – диңгеҙ кисеү, Ғ. Ибраһимовта – ҡан даръяһы кисеү. Яҙыусының үҙенеке генә булып иҫәпләнгән «хикмәтле һүҙҙәр»: рухтың эске ҡатламына үтеү, алтын менән ямау һалыу, ер берлеген ҡан менән беркетеү, маңлайҙа аҡыл нуры уйнау, күҙҙәрҙә элекке замандың ҡуштанлығы ялтырау һ.б.

Быларҙың һәр береһе тәрән, ентекле анализ яһауҙы талап итә. Һуңғыһына ғына туҡталайыҡ. Ғ. Ибраһимов уны «Ҡыҙыл сәскәләр» повесында Ғирфан бай ҡыҙының рухи донъяһын асыу өсөн ҡуллана. Элек ҡыҙ сәскәләр өҫтөндә осоп йөрөй торған аҡ күбәләктәр кеүек матур, ләкин еңел холоҡло бер туташ булған. Тормоштоң, хәсрәттең ни икәнен белмәгән. Һәр ҡайҙа матурлыҡ эҙләп, шунан башҡаны күрмәйенсә, юҡ ҡына нәмәнән дә үҙенең көмөш кеүек тауышы менән бөтә донъяны йәнләндереп көлә торған булған. Революция булғас, уның тауышында элекке сафлыҡ юғала. Элекке аһәң бөтә. Хәҙер инде туташ баҫынҡылана, аҙ ғына булһа ла эш тураһында, донъя тураһында уйлай башлай, һөйләгәнде тыңларға өйрәнә. Элекке матур, иркә йөҙҙә хәҙер бер аҙ ғына етдилек күренә. Тирә-яҡҡа нур, уйын-көлкө, еңеллек сәсеп торған күҙҙәрендә хәҙер, элекке иркәлектәр өҫтөнә, ниндәйҙер уй ҡатнаш аҡыл пәрҙәһе. Улар ауылдан ун биш йөккә тейәлеп сығып китәләр. Донъяның әллә ҡайһы ерҙәренән ҡыуыла-һөрөлә килгән ҡасаҡтар каруанына ҡушылып, Ғ. Ибраһимовса әйтһәк, улар менән бергә аға. Унан һуң ҡайҙарҙа булалар, ниҙәр күрәләр, нисек ауылға ҡайтып йығылалар – һәммәһен ҡыҙ Солтанға ауыр хәсрәт менән һөйләп бирә. Фразеологик әйтем портрет тасуирлауға ла, эске донъяны асып һалыуға ла ярҙам итә. Уның эске мәғәнәһе әҫәр башламындағы тел сараларының эске мәғәнәһе менән органик мөнәсәбәттә йәшәй. «Иҫке Рәсәй мәмләкәтендә, бөйөк Башҡортостан тупрағында» тип башлана әҫәр. «Иҫке, бөйөк» һүҙҙәре бөтә әҫәрҙең йөкмәткеһенә күпер була. Ул иҫке һәм яңы тормош, еңеү һәм еңелеү конфликттарын да, геройҡаһармандар араһындағы контрастлыҡты ла, уларҙың эске донъяһындағы ҡаршылыҡтарҙы ла сағылдыра.

Иҫке кейемгә яңы ямаулыҡ һалыу килешмәй, ти халыҡ. Ә бына Ғ. Ибраһимов килештерә белә. Сүп тигән һүҙ, мәҫәлән, төрки телле халыҡтарҙа «ҡалдыҡ-боҫтоҡ», «йәшәргә ҡамасаулаусы», «алға барыуға кәртә булыусы» кеүек төшөнсәләрҙе

тәғбир итеү йәһәтенән ҡулланыла. Һуңға табан сүп-сар тигән парлы һүҙ ҙә яһала. Әзербайжан, төрөк, ҡырым татарҙары уны киреһенсә лә әйтә – «сар-сүп». Егерменсе быуат башында уның нигеҙендә тормош сүптәре тигән исем фразеологик әйтелмә яһала. Уның барлыҡҡа килеүе шул осорҙағы иҫкелек менән яңылыҡ көрәшенә бәйле. «Беҙҙең көндәр» романында Ғ. Ибраһимов тормош сүптәрен исем, сифат, ҡылым, бәйләүсе һүҙҙәр ярҙамында киңәйтә: көрәш утының ялҡындары эсендә иҫке тормош сүптәре янып емерелә барыу. Шулай итеп, халыҡтағы ике компоненттан (һүҙҙән) яҙыусының үҙе ижад иткән ун компонентлы индивидуаль фразеологияһы барлыҡҡа килә. Бында бер нисә фразеологик әйтелмә ойошоп, уҡмашып, контаминацияланып китә: янып емерелеү, емерелә барыу, тормош сүптәре яныу, иҫке тормош, көрәш уты, көрәш ялҡыны. Барыһы бергә «контаминацияланған фразеологик әйтелмә» тип атала.

Контаминация – латин теленән ингән һүҙ. «Ҡушылыу», «ойошоу» мәғәнәһендә ул төрлө фәндә, тормош-көнкүрештә, философияла, физикала, социаль-иҗтимағи күренештәрҙә ҡулланыла. Тел-әҙәбиәт фәненә лә шул хосусиәтен һаҡлаған хәлдә килеп керҙе. Контаминацияланған фразеологик әйтеменең яһалыу рәүеше аңлашыла булһа кәрәк. Ер йөҙөндә бөгөн 3000-дән артыҡ тел йәшәп килә. Сит илдә лә, рус яҙыусылары араһында ла фразеологик әйтемдең был төрөн ижад итеүсе, аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыусы, йәнле картина тыуҙырыусы, образлылыҡҡа ирешеүсе яҙыусылар бар. Төрки телле яҙыусылар даирәһенән был өлкәлә Ғ. Ибраһимов Өлкәр йондоҙ йәһәтлеген күрһәтте. Дөрөҫ, баштағы хикәйәләрендә, «Йәш йөрәктәр» романында фразеологик әйтемдәрҙең был төрө аҙ әле. Улар «Тәрән тамырҙар» романында шаҡтай. «Беҙҙең көндәр»ҙә айырыуса күп. Ҡайһы бер миҫалдар: мөхәббәт тулҡындарынан иҫергән башты ҡайҙа ҡуйырға белмәү, боғаҙға килеп тығылған күҙ йәшен тыйырға көс етмәү, халыҡ тулҡыны демонстрациялар ташҡыны аҫтында ҡалыу, дәртле күҙҙәрҙең тамырҙағы ҡанды ихтыярһыҙ ҡайнатыуы һ.б.

Ғ. Ибраһимов әҫәрҙәрендә барлығы 8220 фразеологик әйтем. Беҙҙең тарафтан уның фразеологик һүҙлеге төҙөлдө, бөйөк, мәшһүр яҙыусының фразеологик әйтемдәре төрлө яҡлап өйрәнелде. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: «Ғ. Ибраһимовтың стиль үҙенсәлектәре» (Өфө, 1978); «Поэтика художественной прозы Г. Ибрагимова» (Уфа, 1987); «Ғ. Ибраһимов поэтикаһында фразеология» (Өфө, 2004) һ.б.

Ғ. Ибраһимов әҫәрҙәрендә ике меңләп сығыштырыу, ике меңләп метафора бар. 1910 йылда яҙылған «Яҙ башы» исемле беренсе хикәйәһендә үк шундай сағыштырыу ҡуллана: «...тулҡынлы үлән диңгеҙе» «Тәрән тамырҙар» романында «ялҡынлы ямғыр», «Беҙҙең көндәр»ҙәге «ҡар байрамы» кеүек метафоралар тәбиғәттәге сихри илаһилыҡтың кешеләр психологияһында илаһи сағылышы ул.

**Ғ. Ибраһимовты бөйөк яҙыусы иткән ҡайһы бер фараздар:**

1. Әсә ҡарынындағы саф, гонаһһыҙ, садә донъя. Ғәлимйәндең әсәһе Хәсәнә абыстай баланы ҡарынында саҡта уҡ тәрбиәләй башлай. Биш айҙан һуң тышҡы донъя менән бәйләнешкә кергән балаға Хәсәнә абыстай матур, йомшаҡ, нәфис, латиф һүҙҙәр әйтә, йыр, көй, моң бүләк итә. Бала тыуғас, бишек тәрбиәһе, донъя менән таныштырыу, хеҙмәткә мөхәббәт булдырыу дауам итә;

2. Ғәлимйән тыуған Солтанморат ауылының иҫ киткес бай, матур, гүзәл тәбиғәте – Зәңгәр шишмә, Ҡондоҙло күл, Иҫәнбикә болоно буйҙары тәьҫире;

3. Халыҡтың тел диңгеҙенә нығ сумырға ҡушыуын һәр ваҡыт иҫтә тотоу. Әгәр «һүҙ гәүһәре», «һүҙ алтыны» тип һөйләшәбеҙ икән, әҙәби әҫәр туҡымаһында уларҙың тышҡы матурлығы ғына күҙ уңында тотолмай (уныһы ла кәрәк,

әлбиттә), Ғ. Ибраһимов һүҙҙәрҙең эске мәғәнәһенә нык иғтибар итте. Уның өсөн телдә ваҡ нәмә юҡ. Әҙәби әҫәр стиле барын да ҡабул итә. Мәгәр ҡуллана ғына бел. Ғ. Ибраһимовтың исем, сифат, һан, рәүеш кеүек лексик берәмектәрҙе алыштырып килә торған алмаштар, хатта ярҙамсы һүҙҙәр менән оҫта эш итеүе лә һоҡландыра. Тел – яҙыусының төп ҡоралы. Төп ҡоралы үткер булды әҙиптең;

4. Тема һайлау, сюжет ҡороу мәсьәләһе. Романтик рух уты менән ялҡынланған йәш яҙыусы күңеле хикәйәләре өсөн хис-тойғоға, эмоцияға бай темалар һайланы. Тел-һүрәтләү саралары, өслүб поэтикаһы ла шуға яраҡлаштырылды. Романтика менән артыҡ мауығыу ваҡыт-ваҡыт әҙипте бер яҡлылыҡ ҡанатына ҡайырҙы. Быны өсөн ул бер ни тиклем тәнҡит утына ла эләкте. Ләкин объектив ҡарашлы яҙыусы утта янманы. Ваҡытында хатта үҙен-үҙе тәнҡит итеү егетлеген дә күрһәтте. Үткер күрәшкә ҡоролған «Тәрән тамырҙар», «Беҙҙең көндәр» романдарындағы ҙур тема сюжет ҡора белеү сәнғәтен дә талап итте. «Беҙҙең көндәр» әҫәрен «роман-эпопея» тип атарға ла мөмкин. Был романдарҙың темаһына ла, сюжетына ла реалистик һүрәтләүҙәр кәрәк ине. Тел-стиль саралары ла шуға яраҡлаштырылды;

5. Хәҙерге прозаиктарҙа белем етешмәү мәсьәләһе һиҙелә. Гете әйткәнсә, яҙыусы кәмендә 5-6 сит тел белергә тейеш. Шулай түгел икән, ул үҙ теленең байлығын, эске хосусиәтен, серле яҡтарын, ҡан ағышын, өслүби мөмкинлектәрен аңламай, Ҡазандағы Туҡай клубындағы бер осрашыуҙа Ғ. Бәширов Ғ. Ибраһимовтан һөйләм төҙөү оҫталығына, Ә. Еникиҙән һүҙҙәрҙең эске мәғәнәһен нык аңлауға, Ф. Хөсниҙән юморға өйрәнеүе тураһында әйткән ине. Ғ. Ибраһимов, ҙур әҙәби ижадҡа ең һыҙғанып тотонған бер үк ваҡытта, туған теленең фонетикаһы, графикаһы, орфографияһы тураһында ла фәнни хеҙмәттәр яҙа, 1911 йылда уның «Татар сафы» («Татар морфологияһы»), «Татар нәхүе» («Татар синтаксисы») тигән уҡыу-уҡытыу әсбаптары баҫылып сыға. Й. Вәлиди 1913 йылда Ғ. Ибраһимовтың әҙәбиәттә генә түгел, тел ғилеме өлкәһендә лә классик булыуы тураһында мәҡәлә яҙып баҫтыра. Академик М. З. Зәкиев әйтеүенсә, төрки телле лингвист ғалимдар Ғ. Ибраһимов дәрәжәһенә быуаттың икенсе яртыһында ғына күтәрелә алдылар. Боронғо төрки телде, ғәрәп-фарсы телдәрен, хәҙерге төрки телдәрҙе (улар егерменән артыҡ), башҡа телдәрҙе үҙ теле менән сағыштырып эш итте ул. Татарстандың беренсе академигы ла – Ғ. Ибраһимов. Донъя әҙәбиәтенә алтын фонд булып керерҙәй «Ҡаҙаҡ ҡыҙы», «Тәрән тамырҙар», «Беҙҙең көндәр» романдары яҙыусының образлы, халыҡсан, бай, эмоциональ, йәнле теле менән генә түгел, тәрән белеме, фекер йөрөтөү офоҡтары киңлеге, донъя йөрәгенә үтеп кергән күңел күҙе үткерлеге, аң-аҡыл бөйөклөгө, хис-тойғо ҡайнарлығы менән ижад ителде. Ғ. Ибраһимов «Беҙҙең көндәр» роман-эпопеяһын 1914 йылда яҙған ине. Егерме йылдан һуң әҙип уны бик нык төҙәтә. Теге ваҡытта тормош, революция, йәшәйеш тулҡындарында оҫта йөҙөү өсөн белем ҡанатының етлекмәүе тураһында әйтә. Төҙәткәндә тел-өслүб саралары әҫәрҙең идея-эстәлегенә, ул сағылдырған осорға яраҡлаштырыла.

Татар әҙиптәренең һүҙ сәнғәте оҫталары булып иҫәпләнгән Ғ. Бәширов, Ә. Еники, Ф. Хөсни генә түгел, төрки телле халыҡтарҙың иң данлыҡлы яҙыусыларына ла Ғ. Ибраһимовтың шифалы таланты ярҙам итте. Төркмән халыҡ яҙыусыһы, Социалистик Хеҙмәт Геройы Б. Кербабаев Ғ. Ибраһимовты үҙенең уҡытыусыһы тип һанай. Шул уҡ фекерҙе Әзербайжан халыҡ яҙыусыһы М. Гусейн да, ҡаҙаҡ яҙыусыһы М.Ауэзов та әйтә. Ә башҡорт әҙәбиәтенә йоғонтоһо? Әҙиптәрҙең үҙҙәренә һүҙ бирәйек: «Ғ. Ибраһимов принимал непосредственное участие в закладке фундамента башкирской литературы» (Даут Юлтый); «Г. Ибрагимов дорог башкирскому читателю так же, как татарскому, русскому, казахскому,

украинскому, азербайджанскому своим глубоким реализмом, своим могучим писательским талантом» (Гилемдар Рамазанов); «Галимджан Ибрагимов был и остается крупнейшей фигурой не только татарской литературы, но и всего тюркоязычного востока» (Асхат Мирзагитов). Туғандаш халыҡтарҙың әҙәбиәт белгестәре лә уны юғары баһаланы: «Произведения Галимджана Ибрагимова много раз переводились на азербайджанский язык, и они широко известны азербайджанскому народу. Поэтому мы можем сказать, что он и наш писатель» (Алиби Бабаева); «Г. Ибрагимов – не только ярко выраженный народный, национальный писатель. Он один из крупнейшим представителей многонациональной литературы. Г. Ибрагимов выходит далеко за пределы национально-литературной известности, что дается не каждому, даже талантливому, писателю (Л. А. Гаджаева); «Человеку трудно без ласки, без теплых слов, по-моему, и народ нуждается в том же. Великое спасибо Галимджану Ибрагимову за его доброту, за его высокую человечность, за его блестящую книгу о «казахах» (Шахран Мортазаев); «Галимджана Ибрагимова мы справедливо причисляем к ряду основоположников. Основоположников не только татарской, но и всей многонациональной литературы» (Юрий Суворовцев); «Галимджан Ибрагимов вместе с Горьким проложил путь в новую литературу» (Василий Давыдов); «А какая богатая палитра у художника, как искусно он пользуется красками, ее тонами и полутонами. Вот у кого можно учиться и совершенствовать свой талант! Особо хочется подчеркнуть энциклопедичность творчества Галимджана Ибрагимова» (В. С. Василевский) и т.д.

Йөрәк төпкөлөнән, күңел түренән, аң-аҡылдан, хис-тойғонан алып әйтелгән ошо шәфәғәтле һүҙҙәр генә лә Ғәлимйән Ибраһимовтағы эстетик идеалдың Хоҙай хозуры, ил именлеге, бәндә бәрәкәте менән бәйләнеше ҙур икәнлекте аңлатып тора. Миңә килгәндә, Ибраһимовтың тел диңгеҙенә артыҡ ныҡ сумдым шикелле. Әҫәрҙәренең сәнғәтсә эшләнеше тураһында Әзербайжан Фәндәр академияһында докторлыҡ диссертацияһы яҡлағайным. Унан һуң бөйөк таланттың Алла илаһилығы, нәҫел шәүҡәтлелеге, ата-әсәһе, милләте тарафынан бирелгән ҡәбилиәтлелеген әҙәби әҫәрҙә кәүҙәләндереү дәрте ҡабынды. Дәрт 70 йәш үткәс кенә дарманланды. Трилогия-эпопея («Пәйғәмбәр таңы», «Күктең етенсе ҡатында», «Ожмахҡа бер аҙым» романдары) ижад иттем. Трилогия 2000 – 2010 йылдарҙа ике мәртәбә Ҡазанда (татар телендә), бер мәртәбә Өфөлә (башҡорт телендә) баҫылды, мәктәптәрҙә программанан тыш уҡытыла башланы. Гәзит-журнал биттәрендә трилогия хаҡында 40-тан артыҡ ыңғай мәҡәлә баҫылды. Кемдәр генә юҡ унда: академик, профессор, доцент, нефтсе, тәнҡитсе, вуз уҡытыусыһы, мәктәп уҡытыусыһы, эшсе, колхозсы, журналист, яҙыусы... Рәхмәт уларға! Төркиҙәрҙә генә түгел, донъя даирәһендә алтын бағана булып балҡырлыҡ талантҡа бөтә йәмәғәтселектең ҙур ихтирамы, тәрән хөрмәте, ҡайнар мөхәббәте бит был!

Бөйөк Башҡортостан тупрағынан ҡалҡҡан Ғәлимйән Ибраһимовтың донъя биләмәһендә танылыуы – ил өсөн сикһеҙ ғорурлыҡ ул! Тыуған иле Башҡортостан өсөн – бигерәк тә.

**Суфиян ПОВАРИСОВ,**
**БДУ профессоры, Ғ. Ибраһимов исемендәге премия**
**лауреаты, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы.**

# ЯУҘАРҘА СЫНЫҠҠАН ӘҘИП

*(Нәжиб Иҙелбайҙың тыуыуына 100 йыл)*



Йөҙөнән йылмайыу китмәгән, көр тауышлы һәм көр күңелле кеше ине Нәжиб Иҙелбай. Хистәргә бай йөрәкле, ижади уйлы шағир ине. Үткер телле публицист, оҫта тәржемәсе, яуҙарҙа сыныҡҡан әҙип булды ул.

Нәжиб Иҙелбай (Нәжиб Сафа улы Иҙелбаев) 1912 йылдың 12 мартында хәҙерге Баймаҡ районының Иҙелбай ауылында тыуған. Бер ни тиклем ваҡыт мәктәптә белем алғас, урман ҡырҡыусы, ауыл Советы секретары, китапханасы була. 1929 йылда Баймаҡ тау сәнәғәте техникумын тамамлай, бер нисә йыл Баймаҡ баҡыр иретеү заводында эшләп ала. «Ҡыҙыл байраҡ» исемле район гәзите ойошторолғас, журналистика өлкәһенә күсә. Мәскәү – Волга каналы төҙөлөшөндә эшләй, ундағы «Ударники канала» гәзите редакцияһында әҙәби хеҙмәткәр ҙә була. 1937–1938 йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәтендә мөхәррир һәм тәржемәсе булып эшләй, бер үк ваҡытта ситтән тороп Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡый.

Нәжиб Иҙелбай 1938 йылдан алып Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында взвод, рота командиры була. Ҡаты яраланып дауаланғандан һуң демобилизациялана һәм Өфөгә ҡайта. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн II дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары, миҙалдар менән бүләкләнә. 1945 – 1955 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны», «Ленинсы» гәзиттәре редакцияларында, Башҡортостан радиокомитетында эшләй.

Әҙәби ижад менән әүҙем шөғөлләнеүе һуғыштан һуңғы йылдарға тура килә. «Күк шинель» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1947 йылда донъя күрә. «Ел, ерәнем!», «Йырым һиңә булһын», «Еңеү иртәһе» исемле китаптарына ингән шиғри әҫәрҙәрендә Н. Иҙелбай тыуған ерен, Башҡортостанды данлай, туған халҡына сикһеҙ һөйөүен еткерә. Уның күпселек әҫәрҙәре башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадына нигеҙләнгән, ҡобайыр формаһында яҙылған.

Шулай ҙа Нәжиб Иҙелбай күберәк популяр йыр текстары авторы буларак танылыу яуланы. Бер актлы пьесалар ижад итеүсе драматург та ине.

Нәжиб Иҙелбай талантлы тәржемәсе буларак киң билдәле. Ул Джек Лондон, Н. Гоголь, Т. Аксаков, А.Чехов, А. Островский, М. Горький, А. Гайдар, П. Бажов, С. Злобин, С. Бабаевский, О. Гончар, С. Айытматов, С. Михалков һ.б. әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемә итте. М. Ауэзовтың «Абай юлы» эпопеяһын иһә ҡаҙаҡсанан башҡортсаға туранан-тура ҡайтарҙы.

**Әхмәт МӘХМҮТОВ.**

*Башҡортостан автономияһы иғлан ителеүгә – 93 йыл*

# ҺАҒЫҘАҠТАР ОЯҺЫ

1912 йылда Бөйөк Британия подданныйы Уркварт тарафынан Көньяҡ Урал тау-сәнәғәт акционерҙар йәмғиәте ойошторолоу менән, Таналыҡ-Баймаҡ баҡыр иретеү, Семеновка циан заводтары һәм Түбә бегун фабрикаһы ҡорола. Геология-разведкалау эштәре киң йәйелдерелеп, Беренсе донъя һуғышы башланыр алдынан Таналыҡ-Баймаҡ заводында – 150, Семеновкала – 120, Түбәлә – 110 һәм рудниктарҙа 340 кеше эшләй. Акционерҙар йәмғиәте был яҡтарҙа киң эшмәкәрлек башлап ебәрә. 1912 йылда уҡ ул Бөрйән олоҫо башҡорттарынан ике килешеү буйынса 70 йылға 10 мең дисәтинә ерҙе һәм 30 йылға 50 мең дисәтинә урманды ҡуртымға ала. 1916 йылда акционерҙар йәмғиәте Икенсе Бөрйән олоҫоноң Түбәнге Байрамғол ауылы аҫабаларынан 207 дисәтинә ер һатып ала. Беренсе Түңгәүер олоҫоноң Алғазы ауылы башҡорттарынан – 2709, Беренсе Этҡол, Иҫке һәм Яңы Кинйәбулат ауылдары башҡорттарынан 3909 дисәтинә ерҙе 36 йылға ҡуртымға ала. 3909 дисәтинә өсөн ҡуртым хаҡы йылына 1200 һум, йәғни дисәтинәһе 30 тиндән билдәләнә.

Беренсе донъя һуғышы алдынан Иҫке Сибай ауылы тирәләй баҡыр рудаһы ятҡылыҡтары барлығы асыҡланыу менән, акционерҙар йәмғиәте ауыл башҡорттарынан ҡуртымға 493 дисәтинә ер ала. Бында сәнәғәтселәр алтын, платина, көмөш, баҡыр һәм башҡа мәғдән эҙләү менән шөғөлләнмәксе була. Килешеү ваҡыты 1916 йылдың 1 ноябренән башланып, 36 йылға иҫәпләнә. Һуғыш осоронда руда ятҡылыҡтарында эш алып барыу өсөн Себерҙән ташылған таш күмер етмәй башлағас, акционерҙар йәмғиәте, батша хөкүмәтенә мөрәжәғәт итеп, утын әҙерләүгә тирә-яҡ башҡорт ауылдарынан 15 мең ылау алырға рөхсәт һорай. Башҡорттарҙы ике аҙна буйы урман әҙерләргә ебәрәләр.

Баймаҡ ҡалаһы Бөрйән ырыуы башҡорттары ерендә Таналыҡ-Баймаҡ баҡыр иретеү заводы ҡасабаһы булараҡ барлыҡҡа килеп, унда тик урыҫтар ғына көн итә. 1917 – 1921 йылдарҙа киң йәйелдерелгән башҡорт милли хәрәкәте шарттарында завод эшселәре большевиктар яғына сығып, башҡорт милли автономияһына теше-тырнағы менән ҡаршы тора. Был Таналыҡ-Баймаҡ Советының 1918 йылдың 12 мартында ҡабул ителгән большевистик резолюцияһында асыҡ күренә: «Өс төп дошман – дутовсылар, Башҡортостан һәм донъя революцияһына ҡаршылар менән еңгәнгә тиклем һуғышырға!» «Башҡортостан» төшөнсәһе аҫтында 1917 йылдың 15 ноябрендә иғлан ителеп, 20 декабрҙә III Бөтә башҡорт ҡоролтайы тарафынан раҫланған Башҡортостан республикаһы күҙ уңында тотола. Шулай итеп, Таналыҡ-Баймаҡ Советы өсөн Башҡорт автономияһына ҡаршы һуғыш – башҡорт халҡының милли дәүләтселеген булдырыуға килтергән теләһә ҡайһы күренеште юҡ итеү иң мөһим бурыстарҙың береһенә әүерелә.

Башҡорт халҡын дошман күргән был Советҡа кем етәкселек иткән? Яуап иҫ

*Сибай ҡалаһында йәшәп ижад иткән тарих фәндәре кандидаты Әлим Зарипов «Ағиҙел»дең әүҙем авторҙарының береһе булды. Был — уның редакцияға үҙе иҫән саҡта уҡ әҙерләп тапшырған һуңғы хеҙмәте.*

киткес: баймаҡтар ошо көнгә тиклем табынып, коммунистик тоталитаризм ваҡытында һәйкәл ҡуйҙырған Леонид Азанов – Таналыҡ-Баймаҡ Советының тәүге рәйесе! Был Советтың башҡа ағзалары кеүек үк, Азановтың да ҡулы Башҡорт автономияһы өсөн көрәшеүсе тиҫтәләрсә кешенең ҡанына мансылған.

Башҡорт йөмһүриәтенә ҡаршы ҡанлы һуғышты Таналыҡ-Баймаҡ Советы 1918 йылдың февралендә ошо яҡта беренселәрҙән булып башлап ебәрә. Башҡорт республикаһының офицерҙарын һәм күренекле шәхестәрен күпләп аттырыу тап ошонда башлана. Л. Азанов һәм ул етәкселек иткән Совет тыныс тормош шарттарында бер ғәйепһеҙ башҡорт полкы офицерҙарын тотоп аттырғаны өсөн тулыһынса яуаплы. Бер ғәйепһеҙ граждандарҙы үлемгә дусар иткән бындай мәкерле һәм ҡанға һыуһаған әҙәмдәрҙе хәҙерге тарихсылар «ҡыҙыл бандит», «йәлләд» тип атай. Һәйкәле Баймаҡ ҡалаһын «биҙәгән» Азановҡа ла тап килеп тора был атама. Был әҙәмде шулай уҡ «уғры» тип тә атарға кәрәк. 1918 йылдың яҙында ул Баймаҡ баҡыр заводының барлыҡ продукцияһын тейәп, Екатеринбург ҡалаһына алып китә. Әммә ҡалаға барып күренмәй, алып киткән алтыны ла эҙһеҙ юғала. Шулай итеп, Баймаҡ тарафтарында Граждандар һуғышын Л. Азановтарҙың тоҡандырып ебәреүенә һәм тап ошондайҙар арҡаһында башҡорт халҡының, уның хөкүмәтенең аҡтар яғында булып сығыуына бер ниндәй ҙә шик юҡ. Азанов кеүектәрҙең башҡорт халҡына килтергән афәте – Тәфтиләүгә тиңләрлек хәл, һәм ундайҙарға ғәфү бер ҡасан да булмаясаҡ. 1918 – 1921 йылдарҙа Бөрйән-Түңгәүер кантонында барлыҡҡа килгән ғәйәт ҡатмарлы һәм бик күп ҡорбандарға килтергән хәл Баймаҡ-Таналыҡ Советының милли-пролетар «эшмәкәрлеге» менән аңлатыла.

Был ойошма 1917 йылдың 16 мартында барлыҡҡа килә. Төбәк XX быуат баштарында уҡ күп милләтлегә әүерелеүгә ҡарамаҫтан, Совет ағзалары тик урыҫтарҙан ғына тора, башҡорттарҙы унда индермәйҙәр. Башҡорттар урыҫ менән бер Советта ултырып эшләрлек дәрәжәгә етмәгән әле, тигән ҡараш өҫтөнлөк итә. Тимәк, аҫаба халыҡтың тормош-көнкүрешенә ҡағылған мәсьәләләр ҙә Совет ултырышында ҡаралмай. Яңы ойошма эшселәрҙең тик урыҫтан торған өлөшөнөң генә мәнфәғәтен хәстәрләгән. Был төбәктең башҡа эшсе советтары кеүек үк, Таналыҡ-Баймаҡ Советы ла башҡорттарҙың милли дәүләтселеген тергеҙергә тырышыуында үҙенең тар мәнфәғәтенә хәүеф күргән.

1917 йылдың 19 сентябрендә Таналыҡ-Баймаҡ Советы Көньяҡ Урал тау-сәнәғәт компанияһы хакимиәте өҫтөнән эшсе контроле ойоштора. Был ваҡытта компания предприятиелары территориаль йәһәттән Ырымбур губернаһының Орск өйәҙенә буйһонған була. Ләкин Л. Азанов һәм уның эйәрсендәре, барлыҡ сараларҙы күреп, компания предприятиеларын Башҡорт республикаһы буйһоноуынан сығара. Шулай итеп, был төркөм үҙенең Башҡортостанға ҡаршы булыуын бында ла асып һала. Үҙенең мәкерле аҙымдарын был төркөм Екатеринбург ҡалаһы большевиктары менән һөйләшеп эшләй. Эшсе һәм крәҫтиән депутаттарының Урал өлкә Советы президиумы ҡарары менән 1918 йылдың 20 майында Көньяҡ Урал тау-сәнәғәт акционер компанияһының завод һәм рудниктары тартып алына, 1923 йылға тиклем баҡыр-алтын сығарыу предприятиелары Екатеринбургҡа буйһона.

1917 йылдың 20 декабрендә (яңы стиль менән 1918 йылдың 4 ғинуарында) III Бөтә башҡорт ҡоролтайы эшен тамамлай, һәм иртәгәһенә ҡоролтай делегаттары – башҡорт офицерҙары Әмир Ҡарамышев, Ғабдулла Иҙелбаев, Ғимран Мағазов тәүге башҡорт полкын ойоштороу мәсьәләһе буйынса Орск өйәҙенең Таналыҡ-Баймаҡ ҡасабаһына килә. Рәсәйҙә башланып торған Граждандар һуғышы шарттарында милли хәрби берәмектәр ойоштормай тороп маҡсатҡа өлгәшеп булмаясағын Ҡоролтай делегаттары яҡшы аңлай. Иҫке Рәсәй армияһының патриоттарса фекер йөрөткән офицерҙары, шул иҫәптән бер төркөм поляктар, Башҡорт автономияһына хеҙмәт итергә теләк белдерә. Орск өйәҙенең хәрби комиссары Бриц (милләте – поляк) Башҡортостан хөкүмәте яғына сыға һәм 60 мең һум аҡсаны, патрондары менән 300

винтовканы уның ҡарамағына тапшыра. Ҡалаға ҡыҙыл частар яҡынлашыу менән, Бриц Орскиҙы ташлап, Темәс ауылына килә. 1918 йылдың ғинуар аҙағында башҡорт полкында 400 һалдат иҫәпләнеп, күпселеге Бриц биргән винтовка менән ҡораллана. Хәлдең ҡатмарлашыуын күреп, Ырымбурҙағы Башҡорт хөкүмәте 1918 йылдың 27 ғинуарында Петроградҡа Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе В. И. Ленинға телеграмма һуға: «Беҙгә эске эштәр менән үҙ аллы шөғөлләнергә, үҙ полкыбыҙҙы ойошторорға мөмкинселек бирелһә, Советтарҙың юғары власын танъйбыҙ», – тиелә унда. 31 ғинуарҙа ҡыҙыл гвардия частары Ырымбур ҡалаһын баҫып ала һәм большевиктар хакимлығын урынлаштыра. Советтарҙың төп дошманы – атаман Дутов Верхнеуральск ҡалаһына сигенә. Башҡорт хөкүмәте Ырымбурҙан ҡуҙғалмай.

3 февралдән 4-енә ҡараған төндә Башҡорт хөкүмәтенең Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендәге һигеҙ ағзаһы ҡулға алынып, Ырымбур төрмәһенә ябыла. Иртәгәһен губернаның «Известия» гәзите был хаҡта «Ырымбур мосолман комитеты тарафынан ҡулға алынған башҡорттарҙы совет төрмәһенә ябырға рөхсәт ителде» тигән хәбәр баҫтыра. Комитет менән Башҡорт автономияһының иң уҫал дошмандары, үҙҙәрен «башҡорт большевиктары» тип атаған Ғәли Шәмиғолов менән Баһау Нуриманов етәкселек итә. Үҙ сиратында уларға етәкселекте губернаның баш большевигы А. Коростелев бойомға ашыра. Ул да «Башҡортостанға автономия бирергә ярамай» тигән ҡарашта тора.

Башҡорт армияһы ойоштороу менән бәйле мәсьәләләрҙе уңышлы хәл итеү өсөн Темәстә офицерҙар Ғ. Мағазов менән Ғ. Иҙелбаев етәкселегендәге «Башҡорт хәрби министрлығы» барлыҡҡа килә. Башҡорт хөкүмәте менән башҡорт полкы ихтыяждарына Таналыҡ-Баймаҡ баҡыр иретеү заводынан 8 бот алтын, 17 бот көмөш һәм 700 мең бот дәүләт игене тартып алына. Ошонан Башҡорт хөкүмәте ағзаларын иреккә сығарыуҙы талап итеп Совет хөкүмәтенә телеграмма оҙатыла. Ышаныслыраҡ булһын өсөн «хәрби министрлыҡ» Икенсе, Өсөнсө һәм Бишенсе Үҫәргән олоҫтарында хәрби мобилизация ла иғлан итә. 17 февралдә Ырымбур ҡалаһынан Баймаҡ Советына «бандалар менән ҡаты һуғыш алып барыуҙы» һәм «башҡорттарҙы мобилизациялауҙы тыйған» 5-се бойороҡ килеп төшә. Ошо ваҡиғаларҙан бер нисә көн элек кенә «хәрби министр» Мағазов, Орскиҙағы ҡыҙыл командирҙарҙан 100 винтовка, 30 мең патрон алыу өсөн, Таналыҡ-Баймаҡ Советына 12 мең һум биреп өлгөрә. Артабанғы ваҡиғалар Л. Азанов ойошторған сценарий буйынса дауам итә. Башҡорттарҙан йәшерен рәүештә, Орскиҙа һатып алынған винтовкалар менән заводтың 100 эшсеһен ҡоралландырып, «хәрби министрлыҡ» етәкселәрен «дуҫтарса киске аш»ҡа саҡыралар ҙа, ҡулға алып, ҡасаба төрмәһенә ябалар. Завод эшселәренән төҙөлгән ҡораллы отряд шул уҡ төндә, дүрт төркөмгә бүленеп, башҡорт полкына дүрт яҡлап һөжүм итә. Ҡаршылыҡ күрһәтергә өлгөрмәгән полк, мәғәнәһеҙ ҡорбандарҙан арынырға теләп, бирелергә мәжбүр була. Полктың башҡа офицерҙары ла ҡулға алына һәм төрмәгә ябыла. Полктан тартып алынған 300 винтовка менән тағы 300 эшсене ҡоралландыралар. Советтар осоронда «Баймаҡ ҡыҙыл гвардия отряды» тип маҡталған хәрби берәмек шундай мәкер нигеҙендә барлыҡҡа килә һәм оҙаҡламай хәүефле көскә әүерелә. Эшселәрҙең ауыр матди хәленән файҙаланып, большевиктар уларҙың ҡыҙыл гвардия отрядтарына күпләп яҙылыуына өлгәшә. 1918 йылдың 14 апрелендәге бер документта «Дружинник һәм уның ғаиләһе тәүлегенә ете һум менән бүләкләнә» тип яҙылған. Бөтә урындарҙа ла эш туҡталып торған мәлдә ҡыҙыл гвардияла булыу эшселәр ғаиләләрен матди етешлек менән тәьмин иткән.

Ҡулға алыныуҙан ҡотолоп ҡалған Әмир Ҡарамышев менән шағир Хәбибулла Ғәбитов ҡыҫҡа ғына ваҡытта 14 көньяҡ-көнсығыш олоҫтары башҡорттарынан бер нисә меңлек ғәскәр ойоштороуға өлгәшә. Ғәскәр кем нимә таба шуның менән ҡораллана. 1918 йылдың 21 февралендә Таналыҡ-Баймаҡ ҡасабаһы баш күтәргән башҡорттар ҡамауына эләгә. 500-ләп эшсе һәм ҡыҙыл гвардия уларға ҡаршы тора. Ҡамау өс көнгә һуҙылып, башҡорттар ҡорал һалыуҙы һәм ҡулға алынғандарҙы иреккә сығарыуҙы талап итә. Ләкин 24 февралдә Ырымбурҙан

килгән ҡыҙылдар отряды ҡамауҙы өҙә. Әмир Ҡарамышевҡа отрядын таратып ебәреп, бер төркөм иптәше менән Бөрйән урмандарында йәшенеүҙән башҡа юл ҡалмай.

25 февралдә ҡулға алынғандарҙы юҡ итеүгә тотоналар. Бер ғәйепһеҙ башҡорттарҙың ҡыҙыл гвардиясылар тарафынан күпләп ҡырылыуының беренсе осрағы була был. Атырға алып барғанда Башҡорт хөкүмәте ағзаһы Ғ. Иҙелбаев: «Йәшәһен автономиялы Башҡортостан! Башҡортостан йәшәйәсәк! Атығыҙ!» – тип ҡысҡыра. Ул көндө күпме башҡорт һуғышсыһы атып үлтерелгәне билдәһеҙ. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, «башҡорт эшмәкәрҙәре менән бергә 15 кеше, шул иҫәптән алты офицер атып үлтерелде». Мәйеттәрҙе яҡындағы шахта соҡорона ташлайҙар. Ә бит гонаһһыҙ юҡ ителгәндәр ябай кешеләр түгел, Башҡортостан зыялылары һәм хәрбиҙәре араһында исеме киң билдәле шәхестәр була.

Ни өсөн Әмир Ҡарамышев большевиктарға ҡаршы көрәште киң йәйелдереп, тәүәккәл эш итмәгән, ниңә Баймаҡҡа һөжүм яһамаған? Уға яуапты беҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙә табабыҙ: «...сөнки улар Ырымбурҙа ҡулға алынған Башҡорт хөкүмәте ағзаларын да тотоп аттырыуҙан ҡурҡҡан». Ошо ваҡиғаларға ниндәйҙер дәрәжәлә аңлатма биргән мөһим хәбәрҙе тарихсы Р. М. Раимов теркәп ҡалдырған. «Баймаҡты, – ти ул, –Ырымбурҙан килеп еткән мосолман (татар) ҡыҙыл гвардия отрядтары ҡамауҙан ҡотҡара». Тимәк ҡулға алынғандарҙы ла шулар тотоп ата. Шулай итеп, Таналыҡ-Баймаҡ Советының ҡыҙыл гвардияһы Орск менән Ырымбурҙан килгән отрядтар ярҙамында ҡасабала большевиктар диктатураһы урынлаштыра. Башҡорт милли ғәскәре ойоштороу теләге көс менән баҫтырылып, башлап йөрөүселәр юҡ ителә. Был хәл яҡын-тирәләге урыҫ утарҙарында йәшәгәндәрҙең күңелен күтәреп ебәрә, улар күрше башҡорт ауылдарына ҡоралны һөжүм яһарға тотона.

Таналыҡ-Баймаҡ ваҡиғаларынан һуң бер йыл үткәс, 1919 йылдың 18 февралендә, Темәс ауылы янында башҡорт корпусы һәм Башҡорт хөкүмәте Советтар яғына сыға. Әммә 2, 9 һәм 10 мартта үткән ултырыштарында Ырымбур губерна башҡарма комитеты Башҡорт совет республикаһын төҙөүгә ҡаршы бер ни менән дә нигеҙләнмәгән ҡарар сығара. Ул ғына етмәгән, Башҡортостандың эске эштәренә ҡыҫылып, ошо уҡ комитет республиканың ҡан дошмандары булған Таналыҡ-Баймаҡ һәм Преображеновкала саф урыҫ ревкомдары ойоштора. Ырымбур губерна башҡарма комитеты күскенсе урыҫ крәҫтиәндәре һәм өлөшсә завод эшселәренән торған «урындағы отрядтарҙы башҡорт бандалары менән көрәшеү өсөн» ҡоралландыра, Көньяҡ-Көнсығыш Башҡортостанда хәрби хәрәкәттәр менән етәкселек итә. Был отрядтар Ҡыҙыл Армияның тылында хәрәкәт итеп, кантондар һәм олоҫтарҙағы башҡорт милицияларын ҡыйрата, Башҡорт корпусы ҡалдыҡтарын юҡ итеү менән шөғөлләнә. 1919 йылдың февраль аҙағы – апрель башында был ревкомдар Көньяҡ-Көнсығыш Башҡортостанды башҡорт ҡанына батыра. Йырткыс ҡыҙыл гвардиясылар тарафынан тиҫтәләрсә мең башҡорттоң ғүмере өҙөлә. Ялҡынлы башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич менән философ Ғәбделхәй Иркәбаев та уларҙың ҡорбанына әүерелә.

1919 йылдың авгусында был яҡта Совет власы урынлаша. Большевиктар диктатураһы рәүешендә ул Таналыҡ-Баймаҡта ла ныҡына. 7 сентябрҙә Бөрйән-Түңгәүер кантоны ревкомы кантон менән идара итеүгә тотоноуы хаҡында 1-се бойороҡ сығара. Декабрҙә кантон рәйесе алмашынып, уға Ә. Вәлидиҙең дошманы, большевик Шәһит Хоҙайбирҙин етәкселек итә башлай. Бер үк ваҡытта ул кантондың партия ойошмаһы башында ла тора. Хоҙайбирҙин Башревкомдың «милләтселәр»сә кәйефле етәкселәре менән конфликтҡа инмәй, Стәрлетамаҡтан килгән бойороҡ һәм күрһәтмәләрҙе, кемдән ебәрелеүенә ҡарамаҫтан, теүәл үтәй. Шул уҡ ваҡытта кантон башлығы үҙ эргәһенә Башҡорт автономияһын һәм Әхмәтзәки Вәлиди менән Башревкомды ек күргән кешеләрҙе туплай, улар менән йәшерен кәңәшмәләр уҙғарып, ҡарарҙар сығара.

1920 йылдың июнь аҙағында, Башҡортостанда яңы большевистик хөкүмәт эш башлау менән, башҡорттарҙың хәле ауырлаша. 26 июндән 15 ноябргә тиклем дауам иткән «Шәмиғолов диктатураһы», башҡорт милли хәрәкәтен тамам юҡ итеү маҡсатында, төп халыҡты талау, күпләп юҡ итеү юлына баҫа. Баш күтәргән башҡорттарға ҡаршы көрәшкә йәлеп ителгән урыҫ крәҫтиәндәре һәм эшселәре яза отрядтарына теләп килә, башҡорттарҙың ерен, малын тартып алыу менән шөғөлләнә. Башҡорт хәрәкәте «революцияға ҡаршы» тигән һылтау менән, урыҫтар уларға ҡаршы ысын-ысындан террор ойоштора. Ҡыҙыл отрядтар «Башҡорттарға үлем!» саҡырыуы аҫтында эш итеп, буйһонмаҫ һәм ғорур башҡорттарҙы ер йөҙөнән һепереп түгергә тотона. Быны тик геноцид тип атарға мөмкин.

Әлбиттә, башҡорттар ҙа ҡул ҡаушырып ултырмай, республикала баш күтәреүселәр хәрәкәте көсәйеп, уның үҙеге көньяҡ-көнсығыш төбәктә була. 1920 йылдың 16 июлендә поленовсылар (Поленов – 1920 йылда башҡорт халҡының баш палачы, Бөрйән-Түңгәүер кантоны диктаторы) кантон башҡарма комитетының 10 хеҙмәткәрен бер ғәйепһеҙгә ҡулға ала һәм Таналыҡ-Баймаҡҡа кантон милицияһы начальнигы Руденко ҡарамағына оҙата. 31 июлдән 1 августҡа ҡаршы төндә ҡулға алынғандарҙы, бер ниндәй тикшереү үткәреп тормай, атып үлтерәләр ҙә мәйеттәрен шахтаға ырғыталар. 16 августа Теләскә килгән БашЦИК рәйесе урынбаҫары Мансырев Бөрйән-Түңгәүер кантонының барлыҡ учреждениеларын таратыу тураһында бойороҡ сығара. Кантон үҙәге тик урыҫтарҙан торған Таналыҡ-Баймаҡ ҡасабаһына күсерелә. «Бандитизмға ҡаршы көрәш» һылтауы менән башҡорттарҙы ҡулға алып, атырға тотоналар. Верхнеуральск һәм Силәбенән килгән отрядтар ҡыҙыл командир М. Тухачевскийҙың алымын ҡуллана: башҡаларҙы ҡурҡытыу өсөн, һәр ауылдан 5 – 10 башҡортто тотоп аталар. Баймаҡта ғына 100 кеше ошо сәйәсәт ҡорбанына әүерелә. Бөрйән-Түңгәүер кантоны буйынса иһә – кәмендә 3 мең. Һорау алғанда Поленов үҙ ҡулы менән 25 башҡортто атып үлтереүе тураһында әйтә.

Рәсми булмаған сығанаҡтар буйынса, 1920 йылда террор 20 мең башҡорттоң ғүмерен ҡыя. Пермь, Силәбе, Ырымбур төрмәләре көньяҡ-көнсығыш олоҫтарҙан ҡулға алынған башҡорттар менән тула. Верхнеуральск төрмәһендә бикләргә урын етмәгәнлектән, уларҙы ваҡыты-ваҡыты менән сығарып аталар. Сентябрҙә Поленов менән Руденко 11 башҡортто Баймаҡ халҡы алдына сығарып аттыра: «Башҡорттарға – үлем!» Палачтарҙың ҡотороуы өс айға һуҙыла. Баш күтәргән башҡорттар Таналыҡ-Баймаҡҡа һөжүм итеп ҡарай, әммә уңышһыҙлыҡҡа осрай. Әсиргә эләккән бер нисә башҡортто Поленов үҙе ҡылыс менән сабып үлтерә. Палачтар башлыса коммунистарҙан булып, башҡорт ауылдарында үҙҙәрен йырткыстарса тоталар. Урыҫтарҙан торған яза отрядтары башҡорт ауылдарын талай, ҡаршылашҡандарҙы юҡ итә. Шундай отряд башлыҡтарының береһе Злобин хатта коммунистик батальондан аҙашып килеп сыҡҡан башҡорт милиционерҙарын да атырға бойора: «Барлыҡ башҡорттар ҙа – бандит». Ул ҡанлы йылдарҙың әсе хәҡиҡәте бына шундай. Был документтарҙы ҡулға тотоп уҡығанда, ҡан йөрөүҙән туҡтағандай була башлай. Ә бит әле лә большевистик идолдарға баш эйеп, коммунистик мөхиттә йәшәргә тырышып ятҡандар юҡ түгел.

1941 йылғы Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, 1918 – 1920 йылдарҙа Башҡорт автономияһы өсөн көрәшселәр мәйете менән тулған Баймаҡ шахтаһын яңынан асалар. Ошо эш менән етәкселек иткән Исмәғил Үтәғоловтың иҫләүенсә, йөҙҙән ашыу башҡорт мәйетен уларға яңынан ерләргә тура килә. Был әруахтар – ХХ быуат башында халыҡ азатлығы өсөн шәһит киткән батырҙар. Мәңгелек дан уларға! Ә палачтарға – халыҡ ҡарғышы!

**Әлим ЗАРИПОВ.**

# ӘЙЛЕЛӘР ТАРИХЫНА БЕР ҠАРАШ

Ике тиҫтә йыл инде рухи донъябыҙ оло үҙгәрештәр кисерә, йолалар тергеҙелә, дингә хөрмәт уяна, ауыл-ҡалаларҙа мәсет манаралары ҡалҡа. Был ыңғай күренештәр, һис шикһеҙ, йәмғиәтебеҙҙең сафланыуына ыңғай йоғонто яһай. Ҡыҙғаныска ҡаршы, беҙ һаман да тарихыбыҙҙы элеккесә, йәғни Советтар осоронда нәшер ителгән ғилми китаптарҙан уҡып өйрәнәбеҙ. Миҫалға, «Ҡыҫҡаса Башҡортостан энциклопедияһы»н алайыҡ. Унда ырыуҙар тарихы, Әйле ырыуҙарының үткәне, был яҡтарға күсеп ултырыуы бик һуң осорға ҡайтып ҡала. Ә Тырнаҡлы, Түбәләҫ, Ҡаратаулы ырыуҙары энциклопедияла бөтөнләй теркәлмәгән. «Әйлеләр китабы» ла (төҙөүсеһе – журналист С. Бәҙретдинов. Өфө, 2007 й.) совет ғалимдарының сығанаҡтарын ҡулланып яҙылған. «Урал тауҙарының шоңҡары» тигән бүлектә Әйле ырыуҙарының Әй һәм Йүрүҙән буйҙарына килеп төпләнгән осоро уҡыусыла икеләнеү уята, сөнки китаптан аңлашылыуынса, әйлеләр был төйәккә башҡорт ҡәбиләләренең Мәскәү батшалығына (1557 й.) ҡушылыр алдынан йөҙ йыл элек кенә килеп ултырған булып сыға. Был фекер менән һис тә килешеп булмай, сөнки З. Вәлиди хеҙмәттәрендә төрки ҡәбиләләренең Урал буйына күсенеүҙәре беҙҙең эраның I быуатында башланыуы хаҡында әйтелә, һәм автор был күсенеүҙең бер нисә осорға бүленеүен билдәләй.

Тарихсылар ырыу-ҡәбиләләрҙең күсенеү осорҙарын теүәл генә билдәләмәй, сөнки быға бик күп ваҡыт үтеүе, дәлилдәр етерлек булмауы ҡамасаулай. Шулай ҙа теге йәки был ҡәбиләнең ҡайҙа күсенеүе яҡынса билдәләнеп, тарихи яҡтан был дөрөҫ тип баһалана. Совет ғалимдары Р. Кузеев, Р. Янғужин хеҙмәттәрендә төрки телле ҡәбиләләрҙән Уралға тәүгеләрҙән күсенеп ултырыусылар тип Бөрйән, Түңгәүер, Үҫәргән атала. Әйле ҡәбиләһе иһә IX–XII быуаттарға ҡайтарып ҡалдырыла. Был һығымталарын тарихсылар легенда, шәжәрәләргә таянып аңлата. Зәки Вәлидиҙең «Төрк һәм татар тарихы» (Өфө, 1994 й.) тигән китабында телгә алыныуынса, төрки ҡәбиләләрҙең был яҡтарға күсенеү осорҙары түбәндәгесә:

– һундар (миләди буйынса 92 й.) башҡорт ерҙәренә киттеләр;

– ике быуат үткәс, Сан-Пя татар төркиҙәре Амур йылғаһынан Хазар (Каспий) диңгеҙенә тиклем ерҙәрҙе биләй;

– һундар, Жужин исемле төрктәр, III–V быуаттарҙа иң ҡеүәтле ҡәүем, Дунайғаса барып етеп, Иҙел, Урал башҡорттары улар араһында ине;

– IV–VII быуаттарҙа Түкиү (төрки) ҡағандары хакимлыҡ иттеләр;

– XIII–XVI быуаттарҙа Сынғыҙ хан вариҫтары хөкөм һөрҙө.

Совет ғалимдары буйынса әйлеләрҙең күсенеү осоро Сәйҙәш хан заманына ҡайтарып ҡалдырылһа, «Әйле шәжәрәһе»ндә (Т. Ялсығол) ҡәбиләнең йәшәү осоро II быуатҡа тура килә, йәғни 60-тан ашыу быуын тәшкил итә. Һәр быуын араһын 30 йыл менән иҫәпләгәндә, 1800 йыл тигән һүҙ был. Әйле вариҫтарының һундар осорондағы күсенеүҙә ҡатнашып, Уралға килеп төпләнеүен түбәндәге

дәлилдәр менән раҫларға мөмкин. Ҡәбиләнең тәү төйәге – Урал тауҙары, йәғни Себер тимер юлы үткән Әшә, Усть-Ҡатау, Баҡал, Һатҡы, Златоуст, Куса, Ҡыштым, Мейәс, Өфәле, Нязепетровск, Үрге һәм Түбәнге Өфәле һәм Свердловск өлкәһендәге Түбәнге Серги, Әртә, Красноуфимск райондары. Был төбәк ултыраҡ тормошта йәшәү өсөн уңайлы булған.

Ошо төбәктә байтаҡ дәүерҙәр металл иретеү менән шөғөлләнгәндәр. Тарихтан билдәле булыуынса, төркиҙәр тимер иретеү технологияһын тәүгеләрҙән булып үҙләштергән. Был кәсеп иң тәүҙә Ғәйнә башҡорттары ерендә башланһа, һуңынан әйлеләр еренә лә күсә. Был хаҡта З. Вәлиди хеҙмәтендә лә әйтеп кителә. Рус сәйәхәтсеһе Галиндың сәйәхәтнамәһендә лә башҡорттарҙың Силәбе, Верхнеуральск, Мейәс тарафтарында металл иретеү усаҡтары булыуы телгә алына. Шулай уҡ автор төрөк сәйәхәтсеһе Әүлиә Челеби юлъяҙмаларынан өҙөк килтерә: «Һиштәк (башҡорттар – **М.Ғ.**) – һуғышсан ҡәүем, алты туп (пушка), булат ҡылыстары үткер»,– тип яҙған.

Башҡорт археологы академик Н. Мәжитов 1964 йылда төньяҡ-көнсығыш райондарҙағы (Дыуан, Мәсетле) кургандарҙан, Хәлил, Ҡаранай ҡәберлектәренән күп биҙәнеү әйберҙәре, тимер ҡоралдар таба. Был табылған ҡомартҡылар, тарихсы фекеренсә, – X-XI быуаттарҙа йәшәгән башҡорттарҙың ҡәберлектәре.

Р. Кузеев хеҙмәттәрендә лә әйлеләрҙә биҙәнеү әйберҙәренең күплеге хаҡында әйтелә. XVIII быуатта башҡорт руда сығарыусылары тураһында рус тикшеренеүселәре лә яҙып ҡалдырған. Миҫалға А. Андрющенконың «1773–1975 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы» тигән китабында завод хужаларына мәғдән ташыусы башҡорт сәнәғәтселәренең ихтилалда ҡатнашмауын билдәләй. Ул исемлеккә тарихи шәхестәрҙән Ғәйнә башҡорто Исмәғил Тасимов, Я. Аҙнағолов, Д. Үтәгәнов, Ҡунай Пазаров, Яҡут Әлибаев, Илмәкәй Барысов, Әпсәләм Хөсәйенов, Мортаза Мерәҫов, Аҡбай Бикбулатов, Хәлил Илпәтовтар ингән. Руда сығарыу был шәхестәрҙең быуындан-быуынға килгән һөнәре булған. Тарихта билдәле булыуынса, металл иретеүселәр был һөнәрҙе сер итеп һаҡлаған.

Рәсәй дәүләте был яҡтарҙа заводтар төҙөүҙе ябай ысулдар менән алып бара, уларҙы ла элекке башҡорт домналары урынына һала. Башҡорттарҙың заводтар төҙөүе бер ҡайҙа ла иҫкә алынмай, уларҙы артта ҡалған күсмә халыҡ тип кенә кәүҙәләндерергә тырышалар. 1739 йылдан башҡорттар хатта тимерлек тотоуҙан да мәхрүм ителә, сөнки ошоноң менән батша хөкүмәте, йәнәһе, уларҙың ҡорал эшләүен тыя. Рус дәүләтенең тәүге металл иретеү урыны булған Тулала элек ҡыпсаҡтар металл иреткән. Рустар был төбәкте XVI быуатта ғына яулап алған. Тимәк, металл иретеү һөнәре төркиҙәрҙән башланған.

Әйлеләр төйәкләнгән тәүге төйәк Әй, Ҡариҙел йылғаларының башы, Мейәс йылғалары буйы булып, рус колонизацияһы уларҙы Әй, Йүрүҙән йылғаларынан түбәнерәк күсенергә мәжбүр иткән. Рустар килгәнгә тиклем әйлеләрҙең бер өлөшә ярымкүсмә хәлдә малсылыҡ менән шөғөлләнгән, бер ни тиклеме ултыраҡ тормошта йәшәгән. Һунарсылыҡ, солоҡсолоҡ та киң таралған.

Әйлеләрҙең боронғолоғон, йәғни уларҙың Урал буйҙарына һундар менән бергә иң тәүгеләрҙән булып килеүен Ай (Әй) топонимы аша ла тойомларға мөмкин, сөнки «Ай» төшөнсәһе төрки телдә, тәү һүҙ булараҡ, ер-һыу исемдәрендә, туғанлыҡта киң ҡулланыу тапҡан. Атаманың тылсым көсө уның күк есеме Айға бәйле булыуындалыр, моғайын. Күк есеме Айға ҡушылыу сәбәпле, атама тәү төркиҙәр өсөн иң ҡәҙерле һүҙгә әйләнеп, ул тотем (табыныу) ролен үтәгән. Әйлеләр үҙ тамғаһы итеп ярымайҙы ҡабул иткән.

Ай (Әй) йылға исеме булып йөрөһә, ҡәбилә Әйле исемен алған. Тарихсылар араһында был мәсьәлә буйынса ике фараз йәшәп килә. Береһе Р. Кузеев менән И. Ишбирҙиндыҡы. «Йылғаға исем көньяҡ-көнсығыштан күсеп килеп, йылға үҙәненә урынлашҡан Әйле ҡәбиләһе башҡорттарынан ҡалған»,– ти улар. Топонимия белгесе, филология фәндәре докторы А. К. Матвеев был атамаға үҙ мөнәсәбәтен ошолай белдерә: «Метафора могла возникнуть и другим путем: светлую воду рек сравнили с блеском луны, отсюда толкование – светлая как луна».

Күк есемдәренә табыныу – күп халыҡтарға хас күренеш. Миҫалға японларҙы алайыҡ. Уларҙың үҙ илен «Ҡояш сыҡҡан ил» тип атауы, халыҡтың Ҡояшҡа табыныуы, ә ҡытайҙарҙың үҙ ватанын «Күк аҫты» тип данлауы ла юҡҡа түгелдер. Тәү төркиҙәр үҙ илен Айға тиңләп кенә ҡалмаған, йылғаларҙы ҙурлаған, хөрмәтләгән. Мәҫәлән, Йәнәс-әй (Енисей) мәғәнәһе онотолоп, дөйөм исем менән йөрөтөлә башлаған. З. Вәлидиҙең уны хеҙмәттәрендә «Йәнәсәй» тип атауы ла иғтибарға лайыҡ. Төркиҙәр ҡушҡан Иртыш, Ҡатын йылғалары ла хөрмәт йөҙөнән ҡушылған. Европалағы бөйөк йылға Дунайға ла исемде төркиҙәр ҡушҡан, улар килгәнсе йылғаны «Истр» тип атап йөрөткәндәр. Йылғаның тәүге мәғәнәһе Һун-ай булып Дунайға әйләнеүенә ғәжәпләнергә ярамай, сөнки төркиҙәр атама биргән Тын йылғаһы – Донға, Ене бар (Женепар) Днепрға әүерелгән. Днепр борон таш тупһалы, бөгәрләнеп аҡкан йылға булғанға, моғайын, шулай исем бирелгәндер.

Ҡариҙел йылғаһының да боронғо исеме Өфө. Ул Силәбе, Свердловск өлкәләре аша килеп, Ағиҙелгә ҡоя. Атаманы әйеләрҙең Өпәй ырыуы ҡушҡан булырға тейеш. Өфө йылғаһының башынан (Силәбе өлкәһе) бер аҙ үткәс, Өфөлө йылғаһы Өфөгә ҡушыла. Бәлки, өпәйҙәр йылғаға ла үҙ исемен ҡушҡан йәки йылға исемен үҙенә алғандыр.

Алтайҙан сыҡҡан төрки ата-бабаларыбыҙҙың ерен «Айҙар иле»тип исемләргә булыр ине. Күп төрки халыҡтар араһында Ай ҡушып яһалған халыҡтарҙың атамалары быға миҫал була. Н. Баскаковтың «Төрки телдәр» китабынан түбәндәге исемлекте тәҡдим итәм: алтай теле – айр-ат; әзербайжан теле – ҡаш-ҡ-ай; уйғыр теле – хам-ай; үзбәк теле – сығат-ай, лоҡ-ай; ҡырғыҙ теле – ҡай-саҡ; ҡараим – ҡара-ай теле; нуғай – нуғ-ай теле; Йәнәсәй татарҙары; хаҡас теле – хаҡ-әй; яҡут – сах-ай; тува теле – сай-ан, сай-ут теле. Ошоға өҫтәп, башҡорттарҙың Әйле ҡәбиләһе телен дә айырым Әй диалекты тип ҡарарға мөмкин булыр ине.

Башҡорттарҙың милләт булып формалашыуында ҡатнашҡан ырыу-ҡәбиләләрҙең үҙ-ара бәйләнешенең ныҡлығы түбә, олоҫ атамаларында ла сағылыш таба. Был процесты ғалимдар ентекле өйрәнгән, тип әйтергә мөмкин, сөнки был турала мәғлүмәттәр байтаҡ. Ғилми хеҙмәттәрҙә әйеләрҙең башҡа ҡәбиләләр составында булыуы иғтибарҙы йәлеп итә. Әлегә әйеләрҙең теге йәки был ырыу еренә ҡасан күсенеп ултырыуы тураһында аныҡ ҡына мәғлүмәттәр юҡ. Шулай ҙа З. Вәлидиҙең «Башҡорттар тарихы» тигән хеҙмәтендә бер нисә түбә атала: Әй-үҫәргән, Әйле-табын, Дыуан-әй, Дыуан-көҙәй, Дыуан-табын ырыуҙары Рус дәүләтенә ҡушылғанға тиклем үк бергә йәшәгән.

Әйле аймаҡтарының күп ҡәбиләләр составында булыуы, ниңә улар башҡа ҡәбиләләргә һыйынған, тигән һорауға асыҡлыҡ индереүҙе талап итә, сөнки был күренеш әйеләргә генә хас. Уның төп сәбәбе 1730 – 1740 йылдарҙағы ихтилалдар, йәғни батша хөкүмәтенең әйеләр төйәгендә күп заводтар төҙөүе менән бәйлелер. Был турала беҙҙең көндәргә килеп еткән мәғлүмәттәр етерлек.

Мәҫәлән, Г. Гудков менән З. Гудкованың «Из истории Южно-Уральских горных заводов» тигән китабында Әйле башҡорттарын ауылдары менән күсереп

ултыртыу осраҡтары теркәлә. «Три башкирских деревни Айлинской волости Каскиново, Туктарово и Крымово тогда же (1828 г.) были переселены со своих родных мест на расстояние до 100 верст. Две первые деревни переселились на речку Зюм, а последняя в Ратабынскую волость» (247-се бит). Шулай уҡ әйләләр төньяҡ-көнсығыш райондарҙа йәшәгән ырыуҙаштары араһына ла күпләп һыйынған. Мәҫәлән, өпәйҙәр, Мәсетле районында ҡошсолар эргәләренә – өс ауылды, ҡошсолар ғәйнәләре – ике ауылды (Ғәйнә,Ҡорғат), Терһәк ырыуынан Араҡай ауылын һыйындырған. «Әйләләр китабы»нда Әйле ырыуының башҡа төбәктәрҙә йәшәүе лә һанап үтелгән: Архангел районы Үрге Ләмәз ауылында – көҙәйҙәр, Белорет районының Исҡушты ауылында – төркмән-көҙәйҙәр, Учалы районының Һөйәрғолдо ауылында – төҫлө көҙәйҙәр, Әйле көсөктә һәм Благовещен районының – Арҡауыл, Туймазы районының – Йәрмөхәмәт һәм Иҫке Туймазы, Соҡаҙытамаҡ, Балтай, Шишмә районының Әлебай ауылдарында әйләләр көн итә. (12-се бит) «Тамырҙарыңды беләһеңме?» (Өфө, 2007 й.) тигән методик ҡулланманан ҡәбиләләрҙә Әй аймаҡтары исемлеген һанап үтәйек: Табын ҡәбиләһе –Ҡуштан әй, Төп әй, Сыуаш әй, Ҡол әй, Бөжәк әй, Сүп әй аймаҡтары; Үҫәргән – Әй үҫәргән, Йомаҡ әй, Иш әй, Ҡупы әй, Шеш әй, Тау әй; Меңле – Әйле мең, Аҫыл әй, Мурт әй, Урыҫ әй, Мырҙа әй, Аҡыллы әй; Бөрйән – Ише әй, Ырыҫ әй, Әй үрмәҫ, Саты әй. Ҡатай – Шуҡ әй, Ҡол әй, Саты әй, Мурт әй, Ҡолсо әй; Ҡыпсаҡ – Әй-һай, Ҡара әй, Кире әй, Күс әй; Дыуан – Дыуан һаҡал, Ҡыуаҡлы әйле, Сәм әй.

Әйләләр берләшмәһенә ингән ауылдар 300-гә яҡын. Шул уҡ ваҡытта 1735 – 1740 йылдарҙағы ихтилалда яндырылған ауылдарҙың иҫәбе билдәһеҙ. Ғалим Ә. Бейештең «Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше» китабында «Себер, Уса даруғаларында 51 башҡорт ауылы яндырылған» тигән мәғлүмәт килтерелә. Быны тикшереүселәргә асыҡлайһы бар. Филология фәндәре докторы Фирҙәүес Хисаметдинова редакцияһында сыҡҡан «Башкирская ойкономия в XVI – XIX вв.» китабында әйләләр олоҫтарына ингән ауылдар буйынса ла мәғлүмәт бар. Әйләләр 70 ауылға нигеҙ һалған: Дыуан, Дыуан – әй олоҫо – 90; Ҡошсолар – 37; Көҙәйҙәр – 27; Һарттар – 17; Тырнаҡлы – 11; Мырҙалар – 10; Өпәйҙәр– 9; Түбәләҫтәр – 8; Һырҙылар – 7; Һыҙғылар – 5 һәм Ҡаратаулылар 3 ауыл.

Әйләләр берләшмәһенә ингән ырыуҙар тураһында ҡаршылыҡлы фекерҙәр ҙә бар, уларға ла асыҡлыҡ индереү талап ителә. Дыуан менән Түбәнге Ағиҙел башҡорттары составына ингән Дыуан-әйҙәрҙең айырым ырыу булып йөрөтөлөүе бәхәсле, сөнки тамғаларының оҡшашлығы, бер үк төбәк – Алтайҙан күсеп килеүҙәре бер тамырҙан икәнлекте аңлатмаймы? Өпәйҙәр ырыуының да фин-уғыр сығышлы булыуы ышандырып бөтмәй, сөнки был фаразды дәлилләүсе сығанаҡ әлегә юҡ. Мәҫәлән, Р. Янғужиндың «Башҡорт ҡәбиләләре» китабында шундай юлдар бар: «Өпәйҙәр башҡорттарҙың иң боронғоларына ҡайтып ҡала. Улар Урал аръяғына XVI – XVII быуаттарҙа күсеп ултырған һәм XVIII быуатта ойошоп йәшәүен юғалтҡан»,– тиелә. Автор өпәйҙәрҙең үҙ төйәктәренән ҡыуылыуын иҫкә алмай. Уларҙың өс ауылы – Теләш, Тәкә, Ишәле ҡошсоларға һыйынған; Шәкүр, Аҡбаш ауылдары – Свердловск, ә Арыҫлан Силәбе өлкәһенә ҡарай. Тарихсы Ә. Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Башкортостана» йыйынтығының 8-се томында Арыҫлан ауылының 1695 йылда Жалованная грамота алыуы тураһында яҙылған. Мәсетлеләгә өпәйҙәр үҙҙәренең Өфәле яҡтарынан күсеп килеүен хәтерендә ҡалдырған. Колонизаторҙар уларҙы үҙ төйәген ташларға мәжбүр иткәс, өпәйҙәр ойошоп, әйләләргә һыйынып йәшәргә мәжбүр булған. Ырыуҙың төп ауылы Өпәй (Упи) тарихи сығанаҡтарҙа күренә. Атаманың тәү аталышы Өфө-әйләләр булып, һуңынан

Өпәйгә әйләнгән булырға тейешлеге хаҡында үрҙә иҫкә алынды. Мәсетле районында йәшәгән өпәйҙәрҙең антропологик йөҙ төҙөлөшө һәм һөйләштәрендә ҡошсолар менән бер ниндәй ҙә айырма юҡ, тиергә мөмкин, сөнки улар – Әйле ҡәбиләһе нәҫеленән.

Әйеләр берләшмәһенә ингән Ҡошсо ырыуы тарихында ла аңлашылмаусанлыҡтар юҡ түгел. Ырыуҙың нәҫел тамыры 1360 – 1370 йылдарға тоташҡанын яҡынса билдәләп була. Һөләймән ауылы шәжәрәһендә Ҡошсолар төйәге Туҡтамыш хан биләмәләрендә булыуы тураһында әйтелә. Тимәк, был – Алтын Урҙа ханы Туҡтамыш менән Аҡһаҡ Тимерҙең көрәше осоро. 1390 йылда Аҡһаҡ Тимерҙең ошо яҡтарҙа Туҡтамыш ғәскәрен ҡыйратыуы билдәле. Бәлки, әйеләр үҙ ерҙәренән Әй буйҙарынан түбәнгәрәк, хәҙерге төньяҡ-көнсығышҡа ошо осорҙа сигенгәндер?

«Тарих мең дә илле өстә, – тип яҙыла Р. Хажиевтың «Һөләймән һәм һөләймәндәр» (Өфө, 2007 й.) тигән китабында, – Михайло хан булған. Ул ханға ете кеше баш һалырға барған. Баш (Оло) Ҡошсо иләүенән Икбирҙе улы, Балыҡсы иләүенән Байбаҡты Байтирәк улы». Ошонда уҡ Баш (Оло) Ҡошсо 1644 йыл (һижри 1073) тип иҫкә алына. Быға ла, минеңсә, асыҡлыҡ индереү кәрәк. Зәки Вәлиди хеҙмәттәрендә ҡошсолар, Ҡараячи (хаким) ҡәбиләләр, улар хандарҙың иң ышаныслы кешеләре, тип билдәләнгән.

«Бәлки, татар-монгол яуының килеүе ҡошсоларҙың Оло һәм Кесегә бүленеүенә сәбәпсе булғандыр?» тигән һорау тыуа.

Әйеләрҙең Һарт ырыуы менән туғанлыҡ ептәрен совет ғалимдары уларҙың Урта Азиянан бергә килеүе менән бәйләй. Әммә һарттарҙы әйеләр тармағына индереп йөрөтөү етерлек дәрәжәлә ышандырмай. З. Вәлиди «Башҡорт ҡәбиләләре» тигән хеҙмәтендә былай тип яҙа: «Һарттар – Нуғай һәм Себер юлдарында иҫкә алынған ҡәбилә, Тубыл яғындағы бохаралар кеүек, Мәүреннаһрҙан сауҙа һәм колонизациялау маҡсаты менән килгәндәр»,– тип әйтелә. Уларҙың әйеләргә килеп һыйыныуы боронғо заманда булмағанлығы Ә. Әсфәндиәровтың «История сел и деревень…» китабында ла сағылыш таба. Унда һарттарҙың XVIII быуаттарҙа ергә дәғүә итеүе һәм был олоҫҡа ерҙәр биреү Уложенная комиссияла тикшерелеүе тураһында бәйән ителә.

Әйеләр күскенселәргә ер биргән, ләкин ул өлөш башҡа ырыуҙар менән сағыштырғанда аҙыраҡ булған. Мәҫәлән, ҡошсоларҙың ере 329 мең 816 дисәтинә иҫәпләнгән. Һарттарҙың вариҫтары бөгөн Дыуан районында биш ауыл һаҡланып ҡалған.

Әйеләр берләшмәһенә ингән Һырҙылар ырыуының яҙмышы ла билдәһеҙ. Түбәләҫ менән Ҡыуаҡан ырыуҙарын бер тамырҙан тип ҡарау ҙа бар. «Башкирская ойкономия XVI – XIX веков» йыйынтығына был ике ырыу олоҫтары индерелеп, ҡыуаҡандарҙың – 11, түбәләҫтәрҙең 8 ауылға нигеҙ һалыуы күренә. Тимәк, уларҙы бер үк ырыу тип ҡарау хәҡиҡәткә тап килмәй.

Совет осоронда әйеләр яҙмышы оло үҙгәрештәргә дусар ителә. Рәсәй батшалығы башҡорт ҡәбилә-ырыуҙарҙың бергә ойошоп йәшәүенә юл ҡуймау сәйәсәте алып барһа ла, уларҙың олоҫ (ырыу) исемдәрен һаҡлап ҡалдырҙы. Совет осоронда, 1930 йылда, үткәрелгән яңы административ-территориаль реформа башҡорт ырыу-ҡәбиләләрен төрлө өлкәләргә таратып бирҙе. Республика кимәлендә районлар башлыса үҙәк урынлашҡан ауыл исеме менән аталып йөрөтөлә башланы. Был әйеләр ҡәбиләһе миҫалында ла асыҡ сағыла.

1918 йылда З. Вәлиди эшләгән Башҡорт автономиялы республикаһы картаһы Советтар тарафынан кире ҡағылып, уларҙың проекты тәҡдим ителә. Фәҡәт өсөнсө проект, йәғни хәҙерге административ-территориаль бүленеште кәүҙәләндергән карта ғәмәлгә инә. Башҡорттар йәшәгән төньяҡ-көнсығыш төбәк –

Әйеләр төйәге Силәбе өлкәһенә ҡырҡып бирелә. Өфөгә – баш ҡалаға улар 80 йыл буйына Силәбе өлкәһенең Әшә ҡалаһы аша йөрөргә мәжбүр.

Икенсе ғәҙелһеҙлек: әйеләр ҡәбиләһе берләшмәһенә ингән ырыуҙарҙың ике өлкәгә бүленеп ҡалыуы ҡошсоларҙың 12, шул иҫәптән Өпәй ауылы, Һыҙғылар ырыуы тотошлай – Свердловск өлкәһенә, түбәләс-әйеләр ауылдарының 70-80 проценты Силәбе өлкәһенә ҡушылды. Әйеләрҙең таралып ултырыуын совет ғалимдары хеҙмәттәрендә былай аңлатыла: «Урал арьяғында тороп ҡалдылар йәки күсенделәр». География фәнендә Силәбе өлкәһен – Көньяҡ Урал, Свердловскиҙы – Урта Урал тип исемләп йөрөтәләр. Урал арьяғын халыҡ Ҡурған, Төмән өлкәләре тип аңлай.

Өсөнсө ғәҙелһеҙлек. Башҡорт Автономиялы Республикаһы эсендә лә ырыуҙар райондарға бүленгеләнеп, төрлө райондарға ҡаратылды. Мәҫәлән, көҙәйҙәр – Салауат, Нуриман, Иглин; ҡошсолар – Мәсетле, Балаҡатай, Ҡыйғы; әйеләр – Балаҡатай, Ҡыйғы; тырнаҡлылыр – Ҡыйғы, Салауат; дыуандар Балаҡатай, Мәсетле райондарына бүленде. Һөҙөмтәлә ырыу-аймаҡ бәйләнештәре өҙөлдө, ә сит өлкәләрҙә ҡалған ҡан-ҡәрҙәштәр татар теле йоғонтоһона бирелеп, ассимиляцияланды. Ҡалаларҙа йәшәгән башҡорттар руслашыуға дусар ителде.

Әйеләр төйәгенең совет осоронда Башҡортостандан бүленеп ҡалыуы социаль-иҡтисади йәһәттән йоғонто яһамай ҡалманы. Эшсе көсө – йәштәр элекке йылдарҙан уҡ күрше Силәбе, Свердловск өлкәләренә китә башлап, был күренеш әле лә дауам итә.

Мәҡәләм һуңында халыҡты күптән борсоған һорау ошо үгәйһетелгән төбәктең – Әйлестандың, яҙмышы һәм киләсәге хаҡында әйтеп үтке килә. Республикала башҡорттар ойошоп йәшәгән был төбәк (улар бында халыҡтың 50 процентын тәшкил итә, ә тотош Башҡортостанда башҡорттар 29 процент ҡына) иҡтисади яҡтан иң артта ҡалғандарҙан һанала, бында хатта бер ҡала ла юҡ. Төньяҡ-көнсығыш төбәктең тәбиғәт байлығы: урман, төҙөлөш сеймалы һәм нефть, газ ятҡылыҡтары үҙләштерелә башланыуы мөһим. Халыҡтың төп шөғөлө – ауыл хужалығы – климат шарттарының ҡырыҫлығы арҡаһында ашлыҡ үҫтереү менән табышлы шөғөлләнеүгә ирек бирмәй. Шәхси хужалыҡтар үҙҙәре етештергән ит-һөттө һатыуҙа ла ҡыйынлыҡтар кисерә, сөнки баҙарҙар алыҫ. Алыпһатарҙар сеймалды арзан хаҡҡа ала, шул сәбәпле ауыл хужалығында алға китеш юҡ. Башҡортостан хөкүмәте менән БР Фәндәр академияһы 1996 йылда «Северо-восточный Башкортостан: актуальные проблемы и пути их решения» тигән фәнни-ғәмәли конференция уҙғарғайны, ләкин һөҙөмтәһе булманы. Әле Президент тарафынан күрһәтелгән иғтибар оло өмөттәр уятауятыуын.

Республикаға исем биргән халыҡ башҡорттар булғас, улар күпләп йәшәгән төбәктәргә ҡарата иҡтисади-социаль тиңлек булыуы фарыз. Милләт бәҫен һаҡлаусы, йолаларын, мәҙәниәтен дауам итеүсе булараҡ, төньяҡ-көнсығыш төбәккә яңы ҡараш, уны үҫтереү мәсьәләһен йоғонтоло хәл итеү генә әйеләр варисҭары яҙмышын ыңғай яҡҡа үҙгәртергә мөмкинлек бирәсәк.

**Марат ҒАФАРОВ,**
**Башҡортостан Журналистар**
**союзы ағзаһы.**

# Сатира һәм юмор

**Кәбир**
**АҠБАШ**



## Һатылалар

*Бер олатай силсәүиттә*
*Ҡыҙып-ҡыҙып таптыра:*
*– Бар нәмә лә һатыла бит,*
*Был законды кем ҡора?*

*Ысынлап та, аҡыл етмәй,*
*Бөтә нигеҙ ватыла.*
*Ә урманға аяҡ баҫма,*
*Хатта миндек һатыла.*

*Сөнки урмандар һатылған*
*Йәнлеге-ние менән.*
*Һандуғастар ҙа киткәндәр,*
*Ҡалған ҡороған имән.*

*Һатыла хәҙер тау-таштар,*
*Күлдәр һатылып бөткән.*
*Зыяраттың ере генә*
*Үтә арзанға киткән.*

*Балыҡлы йылға ла осҡан,*
*Аҡмай ул ярға тулып.*
*Ерҙәр күскән сит ҡулдарға*
*Һатлыҡ бер мөлкәт булып.*

---

*Кәбир Аҡбаш (1932) Ғафури районы Биҙәүләт ауылынан. Стәрлетамаҡ Уҡытыусылар институтын тамамлаған, мәктәптә уҡыта. Хәрби хеҙмәттән һуң Ғафури, Стәрлетамаҡ район гәзиттәрендә, ҡала радиоһында эшләй. Шағир, прозаик, драматург.*
*Ҡәләмдәшебеҙҙе 80 йәшлек юбилейы менән ихлас тәбрикләйбеҙ!*

*Олатай аҙаҡ аңланы*
*Һатыу ниңә ҡотора:*
*Сөнки етәксе урында*
*Һатлыҡ йәндәр ултыра.*

## *Бизнес*

*Талап иттеләр үҙәктән:*
*– Эш урыны асығыҙ.*
*Әтеү бөтә ауыл эшһеҙ,*
*Ник ауыртмай башығыҙ?*

*Ауыл түрәһе ҡыҙырта:*
*– Былай йәшәү килешмәй!*
*Баш ауыртып йөрөй ир-ат,*
*Магазиндар етешмәй.*

*Араҡыға улар китә*
*Хатта күрше ауылға.*
*Унан эсеп саҡ-саҡ ҡайта,*
*Ауа яҙып дауылға.*

*Түрә ҡыҙып кәңәш бирә:*
*Яңы магазин кәрәк!*
*Эш урыны йәнә артыр,*
*Аҡса алырҙар күрәп.*

*Ошонан һуң өс магазин*
*Астылар йәһәт кенә.*
*Ирҙәр, ятып канауҙарға,*
*Эсәләр рәхәт кенә.*

*Эштәр өсөн дә түрәләр*
*Күрҙеләр ҙур хәстәрлек:*
*Астылар яңы магазин,*
*Бында һыра етерлек.*

*Ләкин эскән әбей-һәбей*
*Ирҙәр янына килмәй.*
*Сәмей генә эсеп ята,*
*Араҡы барын белмәй.*

*– Интекмәһен улар, – тине*
*Ауыл башлығы, һиҙеп. –*
*Улар өсөн виски-миски*
*Эсерлек булһын йөҙөп.*

*Хәҙер бында биш магазин,*
*Ҡыҙа бизнеслыҡ эше.*
*Яуап әҙер: эшһеҙлек юҡ,*
*Эшләп ята һәр кеше.*

## *Әйләнә тәгәрмәс...*

*Тәгәрмәстәй зырлай донъя,*
*Тағы күпме тығырлар.*
*Көпә-көндөҙ тимер һелтәп,*
*Тапшыралар уғрылар.*

*Һиҙмәй тәгәрмәс ҡылғанын,*
*Белмәй хурға ҡалғанын.*
*Әбей тәһәрәт алғанда,*
*Һелтәгәндәр ҡомғанын.*

*Бабай килһә баҡсаһына,*
*Һыу бешкәген сүрткәндәр.*
*Ә күршенең ҡалаҡтарын,*
*Тасын урлап киткәндәр.*

*Зырлай тәгәрмәс бик әрһеҙ,*
*Тағы ниҙәр көтөрбөҙ?*
*Мәсет айын урлағандар,*
*Ҡайҙа барып етербеҙ?*

*Баҡһаң, барып еткәндәр, ти, –*
*Министрға үткәндәр.*
*Креслоһының тимерҙәрен*
*Һүтеп алып киткәндәр.*

*Хәҙер бахырҡай министр*
*Тора, ти, башын ҡашып.*
*Кемдәр инеп сығыр икән*
*Ҡайғыһын уртаҡлашып?*

## *Гиппократ кәрәкмәй*

*Күрше керҙе йүгереп,*
*Хәүеф ятҡан йөҙөнә:*
*– Гиппократтың адресын*
*Табып бир,– ти, – тиҙ генә!*
*– Нимә булды? – тип һорайым, –*
*Нисек бирәйем табып?*
*Медицинаның атаһы –*
*Ул бит – юғары табип!*
*– Ярҙам итә күр инде, – ти, –*
*Ҡатыныма дауа юҡ:*
*Аҙымы ҡыҫҡарҙы, ә теле*
*Оҙонайҙы – сама юҡ.*
*Йөрөй алмай, ә тел-яңаҡ*
*Һис кенә арыу белмәй.*
*Әйләндерә тирмән ташын*
*Иртә тимәй, кис тимәй.*
*Партияла торғайны ул*
*Егермеләп йыл элек...*
*– Һиңә Гиппократ кәрәкмәй, –*
*Горбачка бар йүгереп!*



Әхтәм
**АБУШАХМАНОВ**

**ЮМОРЕСКАЛАР**

## *Атай һабаҡтары*

Атайым ғүмер буйы районда йә колхоз рәйесе, йә парторг булып эшләгән. Колхозды тартырға кәрәк: иртән сәғәт алтыла тороп эшкә киткән, төнгө ун икеләрҙә ҡайтҡан.

– Ә нисек йоҡоңдо туйҙыра инең һуң? – тип һорар инем – миңә ул саҡта иң тәмлеһе йоҡо була торғайны.

– Төшкө ашҡа ҡайтам да, ҡырын ятып сәй эскәндән һуң, ун биш минут йоҡлап алам, шул мине яңынан кеше итә лә ҡуя, – тип һөйләр ине атайым. Пенсияға егерме ете тәңкә менән сыҡты, персональ пенсия бирмәнеләр, йәнәһе, наградаһы юҡ. Ләкин ул быға әллә ни ҡайғырманы ла:

– Булмаç. Беренсе секретарҙың атаһын ваҡытында кулак итеп ебәргәйнек, малайына ун дүрт йәш ине, шуны онотмағандыр, хәҙер түрә булып ултыра, бирмәçтәр, – тигәне иçтә.

Пенсияла булһа ла, өйҙә генә ятманы, бөтә хужалыҡ эштәрен алып барҙы. Ғәҙәтенсә, сәғәт алтыла тора ла мал ашата, аçтын таҙарта, утын яра һ.б., ә әсәйем был ваҡытта иртәнге сәй әҙерләй. Мин ул саҡта һигеҙҙе бөтөрөп, ауылда клуб мөдире һәм киномеханик булып эшләй инем. Бик һуң ҡайтам да иртән оҙаҡ ҡына йоҡлайым. Атай эштәрен бөтөрөп, сәй эсергә инә лә мин ишетерлек итеп ҡысҡырып һорай:

– Рауза, теге малай һаман йоҡлаймы шул?

– Йоҡлай, һуң ғына ҡайтты бит...

– Ю-ю-ҡ! Был малайҙан бер эш тә сыҡмаясаҡ, булманы бынан... Булыр кеше был заманға тиклем йоҡлап ятмаç, – тип мине әрләй. Мин, әлбиттә, быларҙы ишетеп ятам, әммә йоҡлаған булып ҡыланам. Торһаң, эш хөрт – эләгәсәк. Атайым иртәнге сәйҙе эскәс, тағы үҙ мәшәҡәттәре менән өйҙән сығып китә. Шуны ғына көтөп ятҡан мин тиҙ генә тороп, йыуынып, сәй эсәм дә сығып таям. Был хәл гел ҡабатланып тора.

---

*Әхтәм Әхәт улы Абушахманов (1948) Әбйәлил районының Буранғол ауылында тыуған. Башҡортостан Театр эшмәкәрҙәре союзы рәйесе. РФ-ның атҡаҙанған, БР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Һуңғы йылдарҙа журналистика, әҙәби ижад өлкәһендә лә үҙен танытмаҡсы.*

Шулай йөрөй торғас, Өфөгә артислыҡҡа уҡырға киттем, каникулдарға ҡайтҡан саҡтарҙа ла дауам итте был хәл. Башҡорт дәүләт академия драма театрына саҡырҙылар, артист булып эшләй башланым. Отпускыға, бесән эшләшергә ҡайтҡан саҡтарҙа ла кистәрен клубта йөрөп һуң ғына ятаһың, иртән йоҡо килә, тороп булмай. Атайым, ғәҙәтенсә, иртәнге сәйгә инә лә әсәйемдән ҡысҡырып һорай:

– Теге малай һаман йоҡлаймы шул?

– Йоҡлай, һуң ғына ҡайтты бит...

– Вәт, әй! Мин, ул малайҙан бер эш тә сыҡмаҫ, тип уйлағайным, йоҡоһона тура килтереп, һөнәрен дә тапты бит был...

Театрҙа икенсе йыл эшләгәндә атайым мәрхүм булып ҡалды. Тағы бер йыл үткәс, миңә «Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған артисы» тигән исем бирҙеләр, атайым быны белмәй үлеп китте. Әгәр иҫән булып, шул хәлде ишетһә, ул нимә тиер ине икән?..

– Вәт, әй! Йоҡосоларға ла награда бирәләр икән хәҙер, – тиер ине, моғайын.

***

Етенсе класта саҡта уҡ атайым мине бухгалтер һөнәренә уҡытырға булып китте. Колхоздың баш бухгалтеры булып эшләгән ике туған еҙнәмде ялланы был эшкә. Уға нисек түләгәндер, уныһы миңә ҡараңғы. Мин мәктәптә лә ялҡып бөткәнмен, һис уҡығы килмәй, күңел малайҙар менән урамда уйнарға атлығып тик тора. Ләкин атайым менән еҙнәм миңә бик ҡаты тотондолар.

Берҙән-бер көндө атайым ялан яғындағы бер совхозға ағас әҙерләтеүсе-десятник булып эшкә урынлашып алды ла миңә бухгалтер эшен йөкмәтте, сөнки отчетмаҙарға үҙенең белеме етмәй ине. Мин әҙерләнгән ағасты теүәл генә ҡабул итәм дә ҡырҡыусыларға наряд яҙам, атай ҡултамғаһын ҡуя, совхозға алып барып, аҡса алып ҡайта, тарата.

Ағасты ике төргә бүлеп әҙерләтәбеҙ: утынды әрҙәнәгә һалалар, ә төҙөлөш ағасын былай ғына әҙерләйҙәр. Утын ҡырҡыу хаҡы бер һум да егерме тин, ә төҙөлөш ағасыныҡы – ике тәңкә.

Ҡырҡылған ағасты совхоз үҙенең техникаһы менән ташыта. Мин тейәлгән ағасты ла үлсәп, накладной яҙып, бер данаһын ағас алыусыға бирәм, ә икенсеһен отчет өсөн үҙемә алып ҡалам. Ағастың күләме төрлөсә килеп сыға: әйтәйек, һигеҙ кубометр алтмыш дицеметр икән, ағас ташыусы минән үтенә башлай: «Шуны туғыҙ итеп яҙ ҙа ҡуй инде, унда бер кем дә үлсәп тормай, ауҙарам да китәм, миңә тонна-километр кәрәк, аҡсаһы күберәк булыр», – тип ялбара. Мин, уны йәлләп, яҙам.

Башта отчеттарҙы үҙәктән, төҙәтмәләр яһап, кире ҡайтарҙылар, һуңынан шымарып киттем – бер һүҙһеҙ ҡабул итә башланылар. Совхоз төҙөлөш ағастарын ташып бөтөрөргә тырыша, ә бына утынды бик әҙ алалар. Уныһы бер нисә йылдан шунда ятып серей, уны делянканан сығарталар, сөнки бында яңы ағас үҫентеләре ултыртырға кәрәк, ә ваҡытында сығармаһаң, ҙур штраф һалалар.

Бер нисә йыл үткәс, бөтә документтарҙы барлап сығырға булдым – теүәл барамы икән эшем, йәнәһе. Шутлап ҡараһам, ике йөҙ кубометр төҙөлөш ағасы артыҡ килә лә сыға. Аптырайым. Ҡайҙан артыҡ сыға һуң? Төрлөсә һанап ҡарайым – шул уҡ хәл. Әҙләй торғас, таптым: киҫелгән ағасты иҫәпкә алғанмын, ә ебәргән саҡта ташыусылар үтенесе буйынса артығыраҡ яҙғанмын. Шул артығыраҡ ағас ике йөҙ кубометр булып йыйылған да киткән. Ул ағас хәҙер ҡырҡыусыларҙыҡы ла, совхоздыҡы ла түгел. Әгәр уларҙан бура бураттһаң, дүрт өйлөк буласаҡ. Бына ҡайҙа аҡса... Иң мөһиме: бер кем дә белмәй ҙә, белә лә алмай. Нишләргә? Уйлай торғас, таптым юлын: нәфсене артыҡ аҙҙырмай ғына, Мәүлит ағайға «Ике йөҙ кубометр ағас ҡырҡты» тип наряд яҙырға. Унан доверенность яҙҙырып, аҡсаһын алып ҡайтырға ла, уға бер литрлыҡ биреп, ҡалғанына миңә делянкаға йөрөү өсөн

мотоцикл алырға. Тик атайҙан нарядҡа нисек ҡултамғаһын ҡуйҙырырға?.. Документтар унның ҡултамғаһыҙ үтмәй. Уйлай торғас, быының да юлын таптым: атайымдың төшөргән сағын тура килтереп, ризалатырға кәрәк. Төшөргән сағында ул бик киң күңелле була.

Көтөп йөрөйөм атайҙың эскәнен, ә ул, гонаһ шомлоғона ҡаршы, айыҡ тик йөрөй. Башҡа саҡта бер башлаһа, айҙар буйы эсә торғайны, был юлы, үс иткәндәй, эсмәй ҙә эсмәй.

Бер көндө төшөрөп ҡайтты был. Күрәһең, эсе ҡортлай башлағандыр, үҙе әйтмешләй. Кәйефе шул тиклем шәп, йөҙө балҡып тора. «Әһә, – мин әйтәм, – булды». Яйлап ҡына эргәһенә килдем дә уратып һүҙ башлайым:

– Атай, беҙҙең ағас артыҡ килеп сыға бит әле...

– Нисек артыҡ килеп сыға?

– Шулай. Ике йөҙ кубометр ҡарағай ағасы артыҡ сыға.

– Яңылыш шутламаныңмы?

– Юҡ, бер нисә мәртәбә шутлап сыҡтым, шулай сыға.

– Нишләп артыҡ килеп сыҡҡан һуң ул?..

Мин барыһын да аңлатып бирҙем.

– Хәҙер нишләтәбеҙ инде ул ағасты?

Мин алдан ҡорған планды һөйләнем дә:

– Делянкаға йөрөргә мотоцикл булыр, – тип ҡыласаҡ эште аҡларға тырышып бөтөрөп ҡуйҙым һүҙемде. Атайымдың бәләкәй генә күҙҙәре бер секунд эсендә аҡайҙы, иҫереклеге ҡапыл юҡҡа сыҡты, мин шикләнә төштөм.

– Да-а-а!.. Бындай уйҙар менән йәшәһәң, һинән жулик сығасаҡ, – тип ҡысҡырып ебәрҙе. Мин хата ебәргәнемде аңланым, ләкин һуң ине инде. – Был донъяла мин атайымдан туғыҙ йәштә тороп ҡалдым, бер яҡлаусым да булманы. Берҙән-бер таянысым һәм яҡлаусым – намыҫым һәм тоғролоғом ине. Шулар менән күп ауырлыҡтарҙы еңеп сыҡтым. Ә һин!.. Ошондай уй менән йәшәһәң, башың төрмәнән сыҡмаясаҡ, жулик буласаҡһың! Юғал күҙ алдымдан!..

Мин тиҙ генә тайҙым һәм оҙаҡ ҡына күҙенә салынмаҫҡа тырышып йөрөнөм.

Атайымдың ошо һабағы алдағы тормошомда күп осраҡта ярҙам да итте, ҡайһы саҡта ауырлыҡтар ҙа килтерҙе. Был донъяла намыҫ һәм тоғролоҡ һаҡлап йәшәүе еңелдән түгел шул...

## *Сәхнә мәҙәктәре*

Етмешенсе йылдар... Спектакль барышында төрлө тауыштар сығарыу ҡатмарлы мәсьәлә була торғайны. Музыка радио аша, магнитофон таҫмаһына яҙып бирелә, ә, әйтәйек, мал, ҡош-ҡорт, күк күкрәү кеүек тауыштарҙы артистар сәхнә артында үҙҙәре эшләне. Мәҫәлән, күк күкрәһен өсөн, ҡалайҙы дөмбәҫләнек, мылтыҡ тауышы сыҡһын өсөн, оҙон таҡтаның бер башын күтәреп, иҙәнгә һуҡтырҙыҡ.

Ә бына төрлө ҡош-ҡорт тауыштарын Муллаян ағай Һөйәрғолов башҡарҙы. Бөрйән районында тыуған, бәләкәй сағынан урман-тау гиҙгән, шулай булғас, әйҙә, һайраһын, мөңрәһен, тигәндәрҙер инде.

Шулай бер мәл Мөхәммәт Хәйҙәровтың «Азамат» спектаклендә Ғәзим ағай Туҡаев сәхнәгә кәзә етәкләп сыға ла унның менән һөйләшә башлай. Кәзә, әлбиттә, сәхнәгә сыҡмай, сөнки артта Муллаян ағай арҡан осон йөрөтә һәм кәзә тауышы сығара. Ғәзим ағай кәзәһен маҡтай: «Бөрйән тоҡомонан, һөтлө, тик ҡасып ыҙалата», – тип бер юлы Муллаянға төрттөрә. Тегеһенең быға асыуы килә башлай бер заман. «Нисек үс алырға?» – тип баш вата.

Бер көндө Туҡай ағай (театрҙа уны шулай тип йөрөтәләр ине) «кәзә бәйләнгән» арҡанды тартып сәхнәгә сыға һәм Муллаяндан көлөргә тотона. Муллаян-кәзә асыуланып баҡыра һәм эргәһенә «тәкә» килгәнде уйнай башлай: ике тауыш

сығара. Тәкә кәзәне сәхнә артында баҫтыра – арҡан, тартылып, төрлө яҡҡа күсә. Быларҙың барыһын да Муллаян ағай фәҡәт тауыш менән эшләй. Туҡай ағай, көлөүенән һыны ҡатып, сәхнәнән ҡолай. Туҡтай алмай. Тиҙ генә шаршауҙы ябырға мәжбүр булалар. Спектакль барышында сәхнә ябыу элек-электән ғәҙәттән тыш хәл иҫәпләнгән. Шуға был юлы ла ғауға ҡуба һәм «кәзә хужаһы»на ла, «тәкә»гә лә шелтә эләгә. Туҡай ағай башҡаса Муллаяндан көлмәне...

***

Муллаян Һөйәрғолов спектаклдә ролен уйнай ҙа кейенеп ҡайтып китә, аҙағына тиклем ҡалып тормай. Режиссер ярҙамсыһы, спектакль тамамланғас, артистар баш эйеп тамашасылар менән хушлашҡанда ҡараһа, Муллаян юҡ. Быны ул хужаларға еткерә һәм иртәгәһен Һөйәрғоловты баш режиссерға саҡырталар.

– Нишләп кисә спектаклде уйнап бөтөрмәй ҡайтып киттең, Муллаян Зыяевич? – ти икән режиссер.

– Нисек бөтөрмәйем, ти, ролемде аҙағына тиклем уйнаным. Әйтергә кәрәк, бик яҡшы башҡарҙым, хатта ҡәнәғәт булып ҡайтып киттем.

– Юҡ, мин һинең роль уйнауыңды әйтмәйем, ә нишләп һуңынан бөтә артистар менән бергә баш эйеп, тамашасылар менән хушлашып, уларҙы оҙатып ҡуйманың? Баш эйеү ҙә – шул уҡ спектаклдең аҙағы тигән һүҙ, уны һин яҡшы беләһең...

– Юҡ, уныһын булдыра алмайым...

– Ниңә?

– Башҡорт бер ваҡытта ла баш эймәй, – тигән Муллаян Һөйәрғолов.

***

Әүәле беҙҙең театрҙа Физа Латипова тигән артистка эшләне. Хәҙер Санкт-Петербургта, ҡыҙында, йәшәй. Ул Муллаян менән Мәскәүҙә ГИТИС-та бергә уҡыған. Әлеге шул «Һин кем?» спектаклендә овчарканы уйнаған Муллаян ағай, Физа Латипова күренгәс тә, өрә башлай, ә тегеһе сәхнәнән сыға ла аҡырып иларға тотона.

– Нимә булды? – тип артистар быны эргәһенә йыйыла.

– Муллаян мине мыҫҡыл итә, – ти теге.

Ғауға сыға. Физаны, был хәлде етәкселәргә яҙып бир, тип ҡоторталар. Ниһайәт, местком йыйып, Муллаянды тикшерергә булалар.

– Ролемде йүнләп уйнарға ирек бирмәне, сәхнәлә уйнағанда минән мыҫҡыллап көлдө, – ти икән Физа.

– Ниңә ҡатын-ҡыҙҙы мыҫҡыл итәһең? Был ниндәй эш?! – тиҙәр местком ағзалары.

– Миңә режиссер шул ерҙә эт булып өрөргә ҡушты, мин фәҡәт өрҙөм генә. Әгәр Физа минең эт булып өрөүемде мыҫҡыллау тип ҡабул итә икән, режиссерға әйтегеҙ: мине ул эштән бушатһын, – тигән Муллаян.

– Өрһөн ул, өрһөн, тик подтекст менән өрмәһен!

Шунан бирле театрҙа ошо лаҡап йәшәй.

## *Исемдәме есем?*

Мәҙәниәт министры бөгөн йоҡоһонан күтәренке кәйеф менән уянды: кисәге хөкүмәт үткәргән тантананан һуң күрһәтелгән концерт яҡшы ғына килеп сыҡты шикелле. Дөрөҫ, министр уның һәйбәтлеген тамашасы булараҡ ҡына баһалай, сөнки ул быға махсус уҡымаған. Йылайырҙа курстар бөтөрөп, ауылда мал бестереп йөрөгәйне, унан Өфөләге ауыл хужалығы институтында ситтән тороп уҡып, зоотехника факультетын тамамланы. Уҡымышлы кеше булғас, парторг эшен дә йөкмәттеләр. Бер йыл күндәм генә эшләп йөрөгәндән һуң, райкомға саҡырттылар ҙа партияның юғары мәктәбенә уҡырға ебәрҙеләр. Уны тамамлағас, башта

райкомдың икенсе секретары, унан беренсеһе булып китте. Бына хәҙер ике йыл мәҙәниәтте етәкләй. Нишләһен инде, партия ҡушҡас...

Ошондай тантаналар ваҡытында ул ҙур ҡайғыға ҡала: концертты беренсе нисек ҡабул итер? Бына кисә, ниһайәт, беренсе үҙе уның ҡулын ҡыҫты, тимәк, концерт һәйбәт булған, тимәк, ул етәкләгән сәнғәт йәшәй, алға бара.

Күтәренке кәйеф менән эш кабинетының ишеген асып инде лә, йомшаҡ креслоһына сумып, концертҡа ҙур өлөш индереүселәргә рәхмәт белдереү өсөн ҡатнашыусыларҙы барлай башланы: кемдәрҙең хеҙмәте тос булды һуң әле бында?.. Уйҙарын бүлеп, ҡыҙыл телефон шылтыраны, беренсенең секретаршаһы ине был.

– Һеҙҙе хужа саҡырта, тиҙ генә килеп етегеҙ! – тине лә трубкаһын һалып та ҡуйҙы.

«Кисәге концерт хаҡындалыр», – тип уйланы министр һәм йүгерә-атлай беренсе ултырған йортҡа сапты. Ҡабул итеү бүлмәһенә килеп инеүе булды, машинкала ниҙер баҫып ултырған секретарша уға боролмай ғына:

– Көтә, – тине. Министр ишектең беренсе ҡатын асҡайны, эстән күңелле көлөшкән тауыштар ишетеп ҡалды. «Кәйефе шәп», – тип уйлап ҡуйҙы ул.

Ишектең икенсе ҡатын асыуға, ҙур өҫтәл артында беренсе, уның янында кисәге концертта ҡатнашҡан ике артистка ниҙер һөйләшеп, көлөшөп ултыралар ине. Уң яҡтағыһы, яртылаш асыҡ түштәрен өҫтәлгә һала биреберәк, хихылдап ҡуя.

«Кисәге концерт хаҡында баралыр һүҙ», – тағы шулай уйлап ҡуйҙы министр. Уңайын тура килтереп әңгәмәгә ҡушылып китеү ниәте менән ауыҙын йыра ғына башлағайны, беренсе, уны күреп, етди төҫ алды. Теге икәү ҙә артлы ултырғысҡа арҡаларын терәнеләр.

– Һин эшләргә уйлайһыңмы шул, әллә юҡмы? – тине беренсе, министрға уҫал ҡараш ташлап.

– Аңламаным...

– Аңламайһың шул, аңламайһың. Әгәр аңлаһаң, мин һине бында саҡыртып торор инемме, үҙең белеп, күптән эшләп ҡуйыр инең. Нишләп бына был артисткаларыңа исем юлламайһың, ниңә эш хаҡтарын арттырмайһың? Шуның менән дә мин шөғөлләнергә тейешме ни?

– Уларҙың исемдәре бар бит, – тип министр ыҡ-мыҡ итте.

– Тағы бир, йәлме ни һиңә шул ҡатырға!

Артабан һүҙ ҡыҫтырыуҙың мәғәнәһеҙ икәнен аңлай ине министр, шуға өндәшмәүҙе хәйерле һананы.

– Иртәгә сәғәт унға икеһенә лә исем юлланған документтар минең өҫтәлдә ятһын, әгәр ятмаһа, иртәгәнән һуң һин министр түгел... – Министр ниҙер әйтергә теләп ауыҙын аса ғына башлағайны, беренсе ҡулын һелтәне.

Министр туп-тура театр директорына йүгерҙе, сөнки саҡыртып тороу ваҡытты алаsаҡ – әллә табалар, әллә юҡ. Унан министрлыҡта күҙ-ҡолаҡ күп, төрлө хәбәр сығарыуҙары бар.

Театр директорына мәсьәләне аңлатып биргәйне, уныһы аптырап ҡалды.

– Уларҙың исемдәре бар бит, эш хаҡтары ла башҡаларға ҡарағанда артығыраҡ, коллективта ғауға китәсәк...

Был юлы инде министр ҡыҙып китте:

– Эшлә, юғиһә өс көндән минең министр булмауым ихтимал, ә уға тиклем һинең башыңды ашап өлгөрәм, – тине.

Министр хеҙмәт урынына китте, әммә ҡулына эш барманы. Сәғәт өс тулып үтте, ә директор һаман юҡ, ул борсола башланы. Дүртенсе яртыла ғына, документтар тултырылған папкаһын тотоп, директор уның кабинетына килеп инде. Партком менән месткомдың да ҡултамғалары бар ине ҡағыҙҙарҙа.

– Быларын нисек эшләй алдың? – тип һораны министр.

– Һеҙ һорамағыҙ, мин барыбер әйтмәйем, – тип яупланы тегеһе.

Иртәгәһен, биш минуттан ун тула тигәндә, папкаһын ҡултығына ҡыҫтырып, беренсенең ҡабул итеү бүлмәһенә килеп инде министр.

– Унға саҡыртҡайны, хәбәр итегеҙ үҙенә, – тине ул секретаршаға, мөһим эш башҡарғандай. Уныһы хужаһына инеп сыҡты ла:

– Бөгөн бер кемде лә ҡабул итмәй, доклад менән ултыра, – тине. Министр аптырап ҡалды. Был ни хәл? Эшкә барып тормай, уйлана-уйлана өйөнә ҡайтып китте һәм шундай ҡарарға килде: иртәгә иртә менән, эшкә килгәндә үк, тоторға...

Һигеҙенсе яртыла уҡ ул обкомға барҙы, әммә беренсе лә, секретаршаһы ла юҡ. Сәғәт ун бер тулып килгәндә генә, секретарша инде лә:

– Бөгөн хужа булмай, командировкаға китте, – тип хәбәр һалды.

Бөтөнләй аптыраған министр төндә йоҡлай алманы, иртәгәһен бар эшен тағы беренсене тап итеүгә ҡорҙо, фәҡәт төштән һуң ғына бөтөнләй алйып барып инде уның кабинетына.

– Һинең эшең юҡмы ни ул, өс көн ошонда буталаһың, – тип асыулы ҡаршыланы уны беренсе.

– Һуң, үҙегеҙ ҡушҡайнығыҙ бит документтар алып килергә...

– Ниндәй документтар тағы?

– Теге, ике артисткаға исем юллау өсөн...

– Һинең башың бармы, әллә юҡмы?

– Аңламаным...

– Аңламайһың шул, аңламайһың. Улар артисткамы ни инде хәҙер. Хәҙер уларҙың бына бында ла, бында ла, бында ла юҡ, – тип башта маңлайына, унан түшенә, һуңынан осаһына усы менән һуғып ҡуйҙы.

Министрҙың башы әйләнеп китте, ни әйтергә белмәүҙәндер инде:

– Был документтарҙы нишләтәбеҙ һуң? – тигән булды.

– Шуны ла белмәйһең, килтер бында. – Беренсе уның ҡулынан документтарын тартып алды ла йыртҡыслап сүп кәрзиненә ырғытты. Министрҙың күҙ алдары ҡараңғыланып, йөрәге ҡыҫа башланы, йығылып китеүҙән ҡурҡыптыр инде, ситтәрәк торған ултырғысҡа барып ултырҙы ла күкрәген тотто.

– Йөрәгем, – тигән булды.

– Зарар юҡ, зарар юҡ, – тине беренсе. – Бына бөгөн иртән ЦК-нан бештеләр, минең дә йөрәк ауыртып тора. Уның дауаһы бер генә, – тип шкафынан башланған коньяҡ, рюмкалар алды. Икеһенә лә тултырып һалғас, береһен министрға табан этте, ә икенсеһен үҙе бөтөргәнсә эскәс, йомшаҡ креслоһына ултырып, бер нөктәгә текәлеп уйға батты. Кәкрәйеп кенә ултырған министр, ниҙер иҫенә төшкәндәй, һикереп тороп коньяклы рюмканы алды ла, төп күтәрә эскәндән һуң, кире урынына ултырып, икенсе нөктәгә төбәлеп уйға батты. Был ваҡытта уларҙың ни уйлауҙарын аңлауы ҡыйын ине, бәлки, министр ауылда бер уйһыҙ мал бестереп йөрөгәнен иҫенә төшөргәндер. Беренсе, бәлки, малай саҡта таяҡты ат итеп ауыл урамынан ялан аяҡ йүгереп үткәнен күҙ алдына килтергәндер...

Башта беренсе, уйҙарынан айырылып, министрға бороолдо ла йылмая биреп ҡуйҙы. Тегеһе лә ҡарашты һиҙҙе, ярты ауыҙын ғына йырған булып, беренсегә бороолдо. Уларҙың икеһенә лә еңелерәк булып китте шикелле. Бәлки, коньяктандыр?..

Ә теге ике актриса көн дә киоскынан гәзит һатып алды, әммә указ сыҡманы ла сыҡманы. Ике айҙан һуң, бөтөнләй өмөттәре өҙөлөп: «Был түрәләр алдаҡсы икән», – тип ауыҙ тултырып һөйләп йөрөй башланылар. Улар белмәй ине: исемде хужалар ғына бирмәй...

***

*Республика йәмәғәтселеге Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 80 йыл тулыуҙы күркәм саралар менән билдәләне…*

Салауат районында үткән фәнни-ғәмәли конференцияла, мәсәлән, Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йыйылған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары Арҡауыл, Янғантау, Лағыр, Мөрсәлим мәктәптәрендә, Малаяҙ башҡорт гимназияһында Рәми Ғарипов ижады буйынса дәрес-анализдар ҡараны. Әҙәби-музыкаль сараларҙа Өфөнән барған әҙиптәр: Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе вазифаһын башҡарыусы Ҡәҙим Аралбаев, БДУ профессорҙары Тимерғәле Килмөхәмәтов, Мирас Иҙелбаев, доцент Илшат Янбаев, шағирҙар Әнисә Таһирова, Хисмәт Юлдашев, Тамара Искәндәрова, яҙыусылар Ризван Хажиев менән Сабир Шәрипов сығыш яһаны. Шул уҡ көндө ҡунаҡтар Арҡауыл ауылында Рәми Ғариповтың йорт-музейы менән танышты, халыҡ менән аралашты.

Мәҙәниәт һарайында район хакимиәте башлығы Ғәли Хәйретдинов, байрамға саҡырылған әҙиптәр, Рәми Ғариповтың ҡыҙы Гөлнара ханым, шағирҙың ҡорҙаштары йылы иҫтәлектәре менән уртаҡлашты, ә район таланттары сағыу концерт номерҙары менән байрамды йәмләне, Рәми Ғарипов һүҙҙәренә яҙылған аһәңле йырҙар яңғыраны.

Пленар ултырышта хакимиәт башлығы урынбаҫары Владислав Килдиәров, БР Мәғариф министрлығының милли мәғариф бүлеге етәксеһе Рәйсә Күзбәкова, яҙыусылар һәм журналистар, уҡытыусы-новаторҙар һүҙ алды. Бер төркөм әҙәбиәт уҡытыусылары Рәми Ғарипов ижадын әүҙем пропагандалағаны өсөн Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институтының Маҡтау грамоталары менән бүләкләнде.

…Башҡорт дәүләт академия драма театрында Рәми Ғарипов юбилейына арнап «Февраль. Буран…» тигән үҙенсәлекле спектакль күрһәтелде. Сценарий авторы – Зөһрә Бураҡаева, режиссеры – Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшев, ролдәрҙә – театрҙың төрлө быуын артистары.

…Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында «Ғарипов уҡыуҙары» исемле республика фәнни-ғәмәли конференцияһы уҙҙы. Конференцияға Башҡортостандың төрлө яҡтарынан халыҡ шағиры ижадын өйрәнеүсе һәләтле уҡыусылар йыйылғайны. Уларҙы Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев, БДУ профессоры Мирас Иҙелбаев, Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институтының һәләтлелекте үҫтереү ғилми-методик үҙәге директоры Флорида Фәхретдинова, гимназия-интернат директоры Әлфир Ғайсин, Рәми Ғариповтың ҡыҙы, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатының директор урынбаҫары Гөлнара Ғарипова ҡотланы.

Салауат районы Арҡауыл урта мәктәбенән Альбина Нафиҡова, Ишембайҙағы Ә. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт республика гимназия-интернатынан Илмира Байымова, Сибай гимназия-интернатынан Гөлфинә Ишбулатова, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатынан Гөлшат Әхмәтшина менән Айгөл Истамғәлинаның докладтарын тыңлағандан һуң, секциялар эшләне. Секцияларға күренекле яҙыусылар һәм журналистар: Әмир Әминев, Зөһрә Ҡотлогилдина, Рәмил Йәнбәк, Фәнил Ҡоҙаҡаев, Йомабикә Ильясова, Гөлфиә Янбаева, Мирсәйет Юнысов, Артур Дәүләтбәков һ.б. етәкселек итте.

1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының Рәми Ғарипов исемендәге премиялары быйыл һигеҙ кешегә тапшырылды. Бына ул лауреаттар – Зөһрә Ҡотлогилдина, Гөлфиә Янбаева, гимназия-интернат уҡытыусылары Әлмира Абдуллина менән Фирҙәүес Ҡотлогилдина һәм уҡыусылары Сабина Кучаева, Миңлегөл Хәсәнова, Айназ Низаметдинов, Азамат Ишмырҙин.

***

...Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Зәйнәб Биишева, Рәми Ғарипов исемендәге әҙәби премиялар лауреаты Хәсән Назарға 70 йәш тулыу айҡанлы уның ғүмер һәм ижад байрамы тыуған төйәге Ейәнсура районында һәм баш ҡалабыҙ Өфөлә – Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала үҙе бер тантана төҫөн алды.

Ейәнсурала, үҙәк район китапханаһында шағирҙы йәмәғәт ойошмаларынан – зыялылар, аҡһаҡалдар, башҡорт гимназияһында – уҡытыусылар, уҡыусылар ҡотланы. Кисен район мәҙәниәт һарайы гөрләп торҙо – тәбрикләүҙәр, йыр-бейеүҙәр, теләктәр, бүләктәр... Район хакимиәте исеменән шағирға арғымаҡтың көмөш йүгәне тапшырылды.

Артабан Өфөлә, республика Милли китапханаһының әҙәбиәт һөйөүселәр менән туп-тулы залында Хәсән Назарҙың ҡәләмдәштәре, ғалимдар, сәнғәт оҫталары ижади кисәнең бәҫен, мәртәбәһен күтәрҙе. «Яҙмышты яҙам. Ә үҙем – халҡым яҙмышында мин» рух илсеһе булып танылған шағирҙың әҫәрҙәре кисәлә тап шулай аһәңле яңғыраны.

Хәсән Назар тураһында уны ҙур шәхес һәм ысын ижадсы тип матбуғатта мәҡәләләр, ижади портреттар, бай йөкмәткеле тапшырыуҙар сыҡты.

***

Ҡырмыҫҡалы районының Үтәгән ауылында оло ғалим, күренекле яҙыусы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Роберт Байымовтың тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе уҙҙы. Сараға академик Ғайса Хөсәйенов, халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай, шағир Ирек Кинйәбулатов, Р. Байымов менән БДУ-ла оҙаҡ йылдар бергә эшләгән профессорҙар Ғиниәт Ҡунафин, Зәйтүнә Шәрипова, доценттар Гөлфирә Гәрәева, Зәки Әлибаев, мәрхүм әҙиптең ҡатыны Йөҙөм ханым менән ҡыҙҙары Ләйлә Байымовалар килгәйне. Осрашыуҙа Өфө ҡунаҡтары, район хакимиәте башлығы урынбаҫары Илмира Ғәлиәхмәтова, Үтәгән мәктәбе директоры Сәйҙә Вәлиева сығыш яһаны. Программаны башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Земфира Хөсәйенова алып барҙы, район һәм мәктәп таланттары концерт менән биҙәне.

***

Ишембай ҡалаһы һәм районы хакимиәте саҡырыуы буйынса бер төркөм әҙиптәр, мәғариф, матбуғат хеҙмәткәрҙәре, эшҡыуарҙар – Фәнил Күзбәков, Риф Мифтахов, Таңһылыу Ҡарамышева, Тамара Искәндәриә, Гөлфиә Янбаева, Рәйсә Күзбәкова, Риф Иҫәнов һ.б. районның унлап ауылында халыҡ менән осрашты, көндәлек проблемалар, мәғариф, әҙәбиәт, матбуғат, тел мәсьәләләренә бәйле фекер алышты, һорауҙарға яуап бирҙе.

***

Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының ҙур залында күренекле шағирә Гөлфиә Юнысованың шиғырҙарына өр-яңы йырҙарҙан төҙөлгән «Ихласлыҡ – донъяның яҡтыһы» тип исемләнгән концерт үтте. Роза Сәхәүетдинова, Нур Дауытов, Рим Хәсәнов, Альбина Имаева, Салауат Низаметдинов, Урал Иҙелбаев, Артур Туҡтағолов кеүек билдәле композиторҙарҙың йырҙарын солистар Тәнзилә Үҙәнбаева, Асия Смаҡова, Радик Вәлмөхәмәтов, Сәйҙә Ильясова, Римма Амангилдина, Гүзәл Үлмәсҡолова, Лилиә Ишемйәрова, Искәндәр Ғәзизов, Мәхмүт Нәҙершин яңғыратты. «Далан» һәм «Каруанһарай» төркөмдәре башҡарған йырҙарҙы ла тамашасы ихлас ҡабул итте. Концертта шағирәнең 30-ға яҡын йыры башҡарылды, тамашасы һөйөүе бәйгеһенә йомғаҡ яһалып, иң яҡшы йырҙар билдәләнде.